МИНИСТЕРСТВО КУЛЬТУРЫ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
НАЦИОНАЛЬНЫЙ ЛИТЕРАТУРНЫЙ МУЗЕЙ РБ
МЕМОРИАЛЬНЫЙ ДОМ-МУЗЕЙ МАЖИТА ГАФУРИ

# Мажит Гафури – первый народный поэт Башкортостана. Деятельность музеев в увековечивании имен знаменитых личностей

***Материалы Всероссийской научно-практической конференции (с международным участием), посвященной 70-летию со дня открытия Мемориального дома-музея Мажита Гафури в Уфе***

***21-22 марта 2018 г., Уфа, Россия***

Уфа – 2018

**УДК 821**
**ББК 83**

Ответственный за выпуск И.Д. Шаяхметова,

главный редактор Г.М. Булякова,

редколлегия Ахмадрахимова О.В., Абдрахманов Р.Р.

**Мажит Гафури – первый народный поэт Башкортостана. Деятельность музеев в увековечивании имен знаменитых личностей** (к 70-летию со дня открытия Мемориального дома-музея Мажита Гафури в Уфе): Материалы Всероссийской научно-практической конференции (с международным участием, г. Уфа, 21-22 марта 2018). – Уфа: Самрау-Медиа, 2018. – 248 с.

**ISBN 978-5-9500198-8-3**

Сборник составлен по материалам Всероссийской научно-практической конференции (с международным участием), содержит материалы, посвященные актуальным проблемам музееведения, литературоведения, фольклористики.

© НАЦИОНАЛЬНЫЙ ЛИТЕРАТУРНЫЙ МУЗЕЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН, 2018
© МЕМОРИАЛЬНЫЙ ДОМ-МУЗЕЙ МАЖИТА ГАФУРИ, 2018

# СОДЕРЖАНИЕ

**Приветственное слово директора ГБУКИ Национальный литературный музей Республики Башкортостан, Заслуженного работника культуры Республики Башкортостан Муратовой Гульдар Сабитовны**.........................................................................**6**

*Абдрафиҡова Г.Х.* М. ҒАФУРИҘЫҢ БАЛАЛАР ӘҘӘБИӘТЕНӘ ИНДЕРГӘН ӨЛӨШӨ……**8**

*Абдрахманов Р.Р.* ВКЛАД МАЖИТА ГАФУРИ В ДЕЛО СПАСЕНИЯ ДЕТЕЙ БАШКОРТОСТАНА ОТ ГОЛОДА В НАЧАЛЕ 20-Х ГОДОВ ХХ ВЕКА …………………....**11**

*Абдуллина Д.М.* М. ГАФУРИНЫҢ ИНКЫЙЛАБКА КАДӘР ЧОР ПРОЗАСЫ.......................**16**

*Абдуллина Л.Х.* МӘЖИТ ҒАФУРИ ШИҒРИӘТЕНДӘ МӘҒРИФӘТСЕЛЕК МОТИВТАРЫ..........................................................................................................**20**

*Арыҫланова М.С.* М.ҒАФУРИҘЫҢ "ФӘҠИРЛЕКТӘ ҮТКӘН ТЕРЕКЛЕК" ӘҪӘРЕНДӘ ЛЕКСИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘР..........................................................................................**29**

*Ахмадеева З.Т.* ОТРАЖЕНИЕ ДЕТСКИХ ВОСПОМИНАНИЙ В ТВОРЧЕСТВЕ М.ГАФУРИ..........................................................................................................**33**

*Ахмадрахимова О.В.* ЭЛЕМЕНТЫ НАРОДНОГО ТВОРЧЕСТВА В ПРОИЗВЕДЕНИЯХ М.ГАФУРИ……………………………………………………………………………...**36**

*Ахметова М.А.* СБОРНИК М.ГАФУРИ "АЧЛЫК ТЫРНАГЫНДА" ("В КОГТЯХ ГОЛОДА") В ЛИТЕРАТУРНОМ ПРОЦЕССЕ 1920-30-Х ГГ. ..................................................**40**

*Бакиева Л.И.* М.ҒАФУРИ – БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ МӘҪӘЛ ЖАНРЫНА НИГЕҘ ҺАЛЫУСЫ..........................................................................................................**45**

*Бухмастова Л.В.* ГАФУРИЙСКИЕ ЧТЕНИЯ КАК ФОРМА ПОПУЛЯРИЗАЦИИ ПРОИЗВЕДЕНИЙ МАЖИТА ГАФУРИ ДЛЯ ДЕТЕЙ...............................................................**47**

*Бүләкова Ғ.М.* МӘЖИТ ҒАФУРИҘЫҢ МЕМОРИАЛЬ ЙОРТ-МУЗЕЙЫ: ҮТКӘНЕ ҺӘМ БӨГӨНГӨҺӨ..........................................................................................................**51**

*Вилданова Г.Б.* МӘЖИТ ҒАФУРИҘЫҢ "ЮҠТЫРҺЫҢ ДА, АЛЛА..." ШИҒЫРЫНА ФӘЛСӘФӘҮИ АНАЛИЗ..........................................................................................**58**

*Галина Г.С.* МАЖИТ ГАФУРИ – ЛИБРЕТТИСТ...............................................................**63**

*Гаухман М.В., Туктарова Г.Н.* РОЛЬ МЕМОРИАЛЬНЫХ МУЗЕЕВ В КУЛЬТУРНОЙ ЖИЗНИ СЕЛЬСКИХ ПОСЕЛЕНИЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН (ИЗ ОПЫТА МЕТОДИЧЕСКОЙ РАБОТЫ НАЦИОНАЛЬНОГО МУЗЕЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН)..........................................................................................................**69**

*Ғимашева А.Р.* М.ҒАФУРИҘЫҢ ТӘҮГЕ ХИКӘЙӘЛӘРЕНДӘ ҠАЛА ҺӘМ АУЫЛ ЯРЛЫЛАРЫ ТОРМОШОНОҢ САҒЫЛЫШЫ...........................................................................**73**

*Ғиндуллина Р.А.* М.ҒАФУРИ ИЖАДЫНЫҢ ТЕМАТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ........................**76**

*Ившина М.В.* МУЗЕЙ-КВАРТИРА УДМУРТСКОГО ПИСАТЕЛЯ Г.Д. КРАСИЛЬНИКОВА: ПОИСКИ НОВЫХ ФОРМ РАБОТЫ……**81**

*Идрисова М.А.* МУЗЫКА В ТВОРЧЕСТВЕ МАЖИТА ГАФУРИ……**85**

*Иҙелбаев М.Х.* ҒАБДУЛЛА ТУҠАЙҘЫҢ КҮҢЕЛ ХӘТЕРЕНДӘ – БАШҠОРТОСТАН ҺӘМ МӘЖИТ ҒАФУРИ……**92**

*Иҡсанов М.И., Хисаметдинов Р.Д.* МӘЖИТ ҒАФУРИ ШИҒРИӘТЕНДӘ МӨХӘББӘТ ЛИРИКАҺЫ……**97**

*Илишева Р.Х.* СТӘРЛЕТАМАҠТА З.БИИШЕВА ИСЕМЕН МӘҢГЕЛӘШТЕРЕҮ……**100**

*Йосопова Р.Р.* М.ҒАФУРИҘЫҢ ИЖАДИ МИРАҪЫ……**103**

*Ишмырҙина Р.К.* МУЗЕЙ – ТАРИХЫБЫҘҘЫҢ ХӘТЕР ЙОРТО……**107**

*Киньябулатов А.У., Загидуллин Ш.З., Хазиманова А.А.* БОЛЕЗНЬ И СМЕРТЬ МАЖИТА ГАФУРИ……**110**

*Киньябулатов А.У., Ширяева Е.С., Хазиманова А.А.* ВРАЧИ-ТРУЭНТЫ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН……**113**

*Кирәева Л.Р., Дилмөхәмәтова Г.Ю.* МӘЖИТ ҒАФУРИҘЫҢ «ЯРЛЫЛАР, ЙӘКИ ӨЙҘӘШ ҠАТЫН» ПОВЕСЫНДА ЭКЗИСТЕНЦИАЛИЗМ ҺЫҘАТТАРЫ……**117**

*Коханова Л.А.* ИСПОЛЬЗОВАНИЕ СОВРЕМЕННЫХ ИНФОРМАЦИОННЫХ ТЕХНОЛОГИЙ В ОСВЕЩЕНИИ ДЕЯТЕЛЬНОСТИ МУЗЕЕВ……**120**

*Ҡаҫкынова Г.Н.* ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНАНЫҢ ЯРАТҠАН ОБРАЗЫ……**126**

*Ҡунафин Ғ.С.* М.ҒАФУРИ ПРОЗАҺЫНДА МОДЕРНИЗМ КҮРЕНЕШТӘРЕ……**132**

*Ҡунафин Ғ.С.* М.ҒАФУРИ ТОРМОШОНОҢ ЯҢЫ БИТТӘРЕ ХАҠЫНДА……**140**

*Ласынова Н.А., Сөнәгәтова Ә.В.* ҺЫНЛЫ СӘНҒӘТТӘ МӘЖИТ ҒАФУРИ ОБРАЗЫ……**148**

*Латыпова Р.М., Ҡаҫкынбаев И.И.* МӘЖИТ ҒАФУРИ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ “ҠАРА” ҺҮҘЕНЕҢ ҠУЛЛАНЫЛЫШЫ……**151**

*Мөхәрләмова Г.Н.* МӘЖИТ ГАФУРИ ШИГЪРИЯТЕНДӘ ФӘЛСӘФИ МОТИВЛАР……**155**

*Муратова Г.С.* НАЦИОНАЛЬНЫЙ ЛИТЕРАТУРНЫЙ МУЗЕЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН……**160**

*Надыршина Л.Р.* М.ГАФУРИНЫҢ “АДӘМ ВӘ ИБЛИС” ПОЭМАСЫНДА МИФОЛОГИК ОБРАЗЛАР……**166**

*Нажмутдинова Р.З.* КҮККӘ АШҠАН ҠАЯТАШТАЙ… ……**170**

*Низаметдинова С.С.* МӘЖИТ ҒАФУРИҘЫҢ МЕМОРИАЛЬ ЙОРТ-МУЗЕЙЫ ФОНДЫ: ӘҘӘБИ-ТАРИХИ ҺӘМ МӘҘӘНИ ӘҺӘМИӘТЕ……**174**

*Нәҙерғолов М.Х.* МӘЖИТ ҒАФУРИ ТУРАҺЫНДА УЛЫ ӘНҮӘРҘЕҢ ХӘТИРӘЛӘРЕ……**180**

***Саламатова Г.Д.*** МӘЖИТ ҒАФУРИ ҺӘМ БАШҠОРТ АКАДЕМИЯ ДРАМА ТЕАТРЫ.....**184**
***Сәмерханова Г.Х., Мырҙаҡаева М.А.*** М.ҒАФУРИ ПОЭЗИЯҺЫНДА РЕВОЛЮЦИОН ҮҘГӘРЕШТӘРҘЕ ҺЫНЛАНДЫРЫУ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ.....................................................**189**
***Фазылова Р.Р.*** БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ МИЛЛИ ӘҘӘБИӘТ МУЗЕЙЫ ФОНДЫНДА МӘЖИТ ҒАФУРИҒА ҠАҒЫЛЫШЛЫ ЯҢЫ МАТЕРИАЛДАР.....................**193**
***Файзуллина Г.Ш.*** БЕКЕН НУРМУХАНБЕТОВ – ПРИЗНАНИЕ И ПАМЯТЬ (ОПЫТ МЕМОРИАЛЬНОЙ МУЗЕЕФИКАЦИИ В АРХЕОЛОГИЧЕСКОМ МУЗЕЕ)………………**201**
***Шаяхметова И.Д.*** ИСТОРИЯ МЕМОРИАЛЬНОГО ДОМА-МУЗЕЯ МАЖИТА ГАФУРИ – ИСТОРИЯ ЛИТЕРАТУРНО-КУЛЬТУРНОЙ ЖИЗНИ БАШКОРТОСТАНА........................**211**
***Шаяхметова И.З.*** О МУЗЕЕ СТАВКИ ЧАЙ КАНШИ В НАНКИНЕ………………………**215**
***Шәкүрова М.М., Гиниятуллина Л.М.*** М. ГАФУРИ ӘСӘРЛӘРЕНДӘ ЧАГЫШТЫРУЛЫ ТӨЗЕЛМӘЛӘРНЕҢ КУЛЛАНЫЛЫШЫ.......................................................................**218**
***Ырыҫкужина Р.И.*** ШӘҺИТ ХОҘАЙБИРҘИН ҺӘМ МӘЖИТ ҒАФУРИ..............................**221**
***Әхмәтшина А.Р.*** М. ҒАФУРИҘЫҢ РЕВОЛЮЦИЯҒА ТИКЛЕМ ПОЭЗИЯҺЫНДА МӘҒРИФӘТСЕЛЕК ИДЕЯҺЫ..........................................................................................**225**
***Янышев Ф.Ф.*** ҠАҺАРМАН ЫРҒЫҘ ҠЫҘЫ...........................................................................**229**
***Ярмуллина А.З.*** ИСПОЛЬЗОВАНИЕ СОВРЕМЕННЫХ ТЕХНОЛОГИЙ В ДЕЯТЕЛЬНОСТИ СИБАЙСКОГО ИСТОРИКО-КРАЕВЕДЧЕСКОГО МУЗЕЯ…………………………………**241**

## ПРИВЕТСТВЕННОЕ СЛОВО ДИРЕКТОРА ГБУКИ НАЦИОНАЛЬНЫЙ ЛИТЕРАТУРНЫЙ МУЗЕЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН, ЗАСЛУЖЕННОГО РАБОТНИКА КУЛЬТУРЫ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН МУРАТОВОЙ ГУЛЬДАР САБИТОВНЫ

Уважаемые гости! Дорогие друзья!

От имени коллектива Национального литературного музея Республики Башкортостан сердечно приветствую участников Всероссийской научно-практической конференции (с международным участием) «Мажит Гафури – первый народный поэт Башкортостана. Деятельность музеев в увековечивании имен знаменитых личностей», посвященной 70-летию со дня открытия Мемориального дома-музея Мажита Гафури в Уфе. Организаторами данного мероприятия являются Министерство культуры РБ, Национальный литературный музей РБ, Мемориальный дом-музей Мажита Гафури.

В сегодняшней конференции принимают участие представители не только Башкортостана, Татарстана, Удмуртской Республики и других регионов РФ. Нами подготовлен и издан сборник материалов конференции, в котором опубликованы более 50 научных статей, поступившие из разных уголков мира, в том числе, Казахстана и Китайской Народной Республики.

Дом-музей Мажита Гафури является одним из первых литературных музеев России, организованных после революции 1917 года. Первый народный поэт Башкортостана жил здесь в 1923–1934 гг., в период подъема своей творческой деятельности. В этом доме им было написано много известных произведений. Сегодня Мемориальный дом-музей, как и в предыдущие годы, играет большую роль в литературно-культурной жизни не только г. Уфы, но и всей республики. В музее функционирует отдельный выставочный зал, в котором регулярно организуются различные выставки, проводятся

литературно-музыкальные вечера, встречи с писателями, читательские конференции, круглые столы и т д. Одним словом, Мемориальный дом-музей Мажита Гафури и сегодня остается очагом духовного, эстетического и патриотического воспитания.

Сегодня миссия литературных музеев значительнее, чем выставочная площадка или хранилище. Это особая разновидность музеев, в которых история передается через личности и творчества мастеров пера. Такого рода музеи должны стремиться привлекать, просвещать, информировать и в то же время выполнять свою главную миссию – увековечивание имен знаменитых личностей, применяя современные инновационные технологии.

Уверена, что сегодняшняя конференция будет способствовать более глубокому изучению богатого творческого наследия первого народного поэта Башкортостана Мажита Гафури и рассмотрению деятельности музеев в современных условиях.

Желаю всем участникам конференции плодотворной научной работы и новых творческих успехов!

**Г.Х. Абдрафикова**,

*филол. ф. к., РФА ӨФТҮ ТТӘИ өлкән ғилми хеҙмәткәре, Өфө ҡ.*

## М. ҒАФУРИҘЫҢ БАЛАЛАР ӘҘӘБИӘТЕНӘ ИНДЕРГӘН ӨЛӨШӨ

Башҡорт әҙәбиәте классигы Мәжит Ғафури балалар әҙәбиәте өлкәһендә лә әүҙем эшләй. Әле үҙенең 1917 йылғы революцияға тиклем үк сыҡҡан “Ҡыҙҙарға махсус милли шиғырҙар” (1912) тигән китабында һәм “Яҡшы балалар”, “Тырыш бала”, “Ялҡау бала” кеүек башҡа шиғырҙарында уҡ ул уҡыусы балаларҙы наҙанлыҡ менән көрәшергә, белемле булырға, төрлө һөнәрҙәр үҙләштерергә, тәрбиәле һәм әҙәпле булырға саҡыра. Йәш быуынға дөрөҫ тәрбиә биреү мәсьәләһе борсой шағирҙы. Ул – мосолман мәктәптәре һәм мәҙрәсәләре өсөн тәғәйенләнгән “Тәүге уҡытыусы” исемле әлифба авторҙарының береһе. Шулай уҡ уның етәкселегендә “Азат мәктәп” исемле уҡыу әсбабы ла әҙерләп баҫтырыла.

“Балалар байрамы” (1920) шиғырының лирик геройы байрам көнөндә шатланышып йырлап, бейеп йөрөгән балаларҙы ситтән күҙәтеп, уларҙың бәхетле тормошона ҡыуанып ҡарап тора. Ирекһеҙҙән ул үҙенең артыҡ шатлыҡ-ҡыуаныстары, бындай байрамдары булмаған күңелһеҙ бала сағын иҫенә төшөрөп, бошоноп ҡуя. Ябай халыҡтың революцияға тиклемге ауыр тормошон яңы ысынбарлыҡҡа, үҙгәрештәргә ҡаршы ҡуйыу аша автор илде һәм йәш быуынды яҡты киләсәк көтөүен раҫларға тырыша. Дәүер ҡаршылыҡтарын сағылдырған был осорҙағы күпселек әҫәрҙәргә контраст алымы йәки поэтик антитеза ҡулланыу хас.

М. Ғафуриҙың “Уҡыйыҡ, шәкерттәр”, “Балалар һәм китап”, “Эш һәм белем”, “Балаларға” кеүек ҡайһы бер шиғырҙарында мәғрифәтселек идеяларын күрергә була. Уларҙа мәғрифәтсе шағир М. Аҡмулланың “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк” шиғыры менән ауаздашлыҡ һиҙелә. Әгәр Аҡмулла мәғрифәтле булыуҙа ярлы халыҡтың тормошон еңеләйтеү юлдарын күрһә, Ғафури белемлелектә уртаҡ ижади хеҙмәт нигеҙҙәрен, ә хеҙмәттә йәшәү сығанағын күрә. Уның

уйынса, белемлелек балаларҙа актив граждандлыҡ позицияһының дөрөҫ формалашыуына, тормошҡа ҡарата аңлы мөнәсәбәт тыуҙырыуға булышлыҡ итә.

Реалистик йәки публицистик шиғырҙар менән бер рәттән М. Ғафури ижадында пейзаж лирикаһы ла урын алған. Ҡайһы бер шиғырҙар тасуирлау, танып белеү характерында булһа, икенселәре ҙурыраҡ функция үтәп, тәбиғәт һәм йәмғиәт тормошо араһында параллелдәр үткәрә һәм, үҙ сиратында, ҙур дөйөмләштереүҙәр барлыҡҡа килтерә. Мәҫәлән, “Болон”, “Баҫыу” шиғырҙарында М. Ғафури болондоң йәки баҫыуҙың йәнле картиналарын һүрәтләй: болонда төрлө төҫтәге сәскәләрҙе ҡосоп күбәләктәр оса, ҡоштар күңелле сырҡылдаша, көмөш таҫма булып йылға ағып ята, ә баҫыуҙа төрлө игендәр өлгөрә. Аңлауыбыҙса, бында, бер яҡтан, тыуған яҡтың матурлығы йырланһа, икенсенән, тыныс тормоштағы йәшәү гармонияһы күрһәтелә.

“Ҡоштарға”, “Ҡош менән балалар”, “Ҡоштар ҡайттылар” һәм башҡа шундай шиғырҙарында ҡоштар тормошонан төрлө эпизодтарҙы һүрәтләп, әҙип балаларҙы уларға таш атмаҫҡа, ояларын туҙҙырмаҫҡа саҡыра, ҡоштарҙың йәнле тәбиғәттең, беҙҙе уратҡан мөхиттең бер өлөшө булыуын аңлатып бирергә ынтыла, уларҙы беҙҙең дуҫтарыбыҙ тип атай.

“Бал ҡорто менән күгәүен” мәҫәле менән М. Ғафури кешеләр тормошона, уларҙың мөнәсәбәттәренә аллегория үткәрә. Быңдай алым уға илдә барған ижтимағи-социаль күренештәрҙе кинәйәләп, ситләтеп һүрәтләргә мөмкинлек бирә. Сәскәнән сәскәгә ҡунып, көнө буйы бал йыйыусы егәрле бал ҡорттары эргәһендә эшһеҙ осоп йөрөүсе күгәүен булған кеүек, тормошта ла уңған эшсе эргәһендә эшләмәй генә тик йөрөргә, кәйеф-сафа ҡорорға яратыусы йәнәш йөрөй. Бал ҡорттарының көнө буйы туҡтауһыҙ бал йыйыуын күгәүен бер нисек тә аңлай алмай.

— Ни хәл, һин? Бында нәмә соҡсонаһың?

Сәскәләрҙән бер осаһың, бер ҡунаһың?

Әммә һуң һеҙҙең ҡорттар ғәжәп халыҡ,

Көн буйынса эштән алмай йөрөй башын, — ти ул аптырап.

— Беҙҙең теләк — эшләп ҡалыу яҡшы көндә, — тип яуаплай уға бал ҡорто һәм хеҙмәттең үҙҙәренең йәшәү рәүеше, йәшәү мәғәнәһе булыуын аңлатып бирә. Шулай шағир хеҙмәтте, хеҙмәт кешеһен данлай. Тап бал ҡорттары тормошон һүрәтләүҙең тағы ла бер мәғәнәһе бар. Осоро өсөн актуаль булған коллективлашыу мәсьәләһенә ишара булып тора был. Башҡарған хеҙмәтеңдең йәмғиәткә файҙа килтереүе һыҙыҡ өҫтөнә алына.

1917 йылғы октябрь революцияһынан һуң килеп тыуған “ике донъя” темаһын, уларҙың бәрелешен сағылдырыу, “иҫке” менән “яңы”ны ҡаршы ҡуйыу М. Ғафуриҙың балалар өсөн тәғәйенләнгән проза әҫәрҙәренә лә хас. «Уның “Беҙҙең әйберҙәрҙе һатҡанда”, “Элек ҡыйын ине, хәҙер анһат ул” кеүек хикәйәләрендә үтеп киткән элеке ауыр тормошто яңы заман күҙлегенән, социализмдың идеологик принциптарына ярашлы баһа бирергә ынтылыу һиҙелә» [1, 177]. Ул ваҡытта совет власы юҡ ине, шуға ауыр ине, тигән фекер үткәрә автор.

Шулай итеп, үрҙә телгә алынған аҙ ғына әҫәрҙәренән күренеүенсә, М. Ғафури йәш быуынды аң-белемле итеп, уны илгә кәрәкле, хеҙмәт һөйөүсән граждандар итеп тәрбиәләүгә ҙур әһәмиәт бирә. Уның төрлө йәштәге балалар өсөн яҙылған шиғырҙары, мәҫәлдәре, хикәйәләре ул замандағы ижтимағи мөхитте, социаль күренештәрҙе, тирә-яҡ тәбиғәтте танып белеү өсөн бай сығанаҡ булып тора.

### *Әҙәбиәт*

1. Абдрафикова Г.Х. Художественные искания башкирской детской литературы 20-х годов XX века // Филология и человек. – 2014. – № 1. – С. 171-179.

© **Абдрафикова Г.Х.**, 2018

**Р.Р. Абдрахманов**,
*заведующий выставочным отделом ГБУКИ НЛМ РБ, г. Уфа*

# ВКЛАД МАЖИТА ГАФУРИ В ДЕЛО СПАСЕНИЯ ДЕТЕЙ БАШКОРТОСТАНА ОТ ГОЛОДА В НАЧАЛЕ 20-Х ГОДОВ XX ВЕКА

Первый народный поэта Башкортостана Мажит Гафури (1880 – 1934) является одним из основоположников башкирской советской литературы. Широкой общественности он известен, прежде всего, как литератор, автор многих известных произведений. В то же время мало кто знает, что Гафури внес свой посильный вклад в дело спасения детей республики от голода в начале 20-х годов, а также в борьбу с детской беспризорностью. В этой статье речь идет о благотворительной деятельности классика башкирской литературы в первые годы советской власти.

1920 год для Башкортостана в продовольственном отношении был неудачным – случился недород, а в 1921 году разразилась сильная засуха, вследствие чего начался страшный голод. В результате засушливой погоды Уфимской губернии погибло 58 % посеянных хлебов, урожайность остальных еле достигла 42 % [4, 175]. От голода наиболее пострадало население горно-лесных и горно-степных районов, где преобладали башкиры. Известно, что только в одном Тамьян-Катайском кантоне Автономной Башкирской Советской Республики от последствий голода вымерло около 60 % местного башкирского населения [4, 176].

По словам Мажита Гафури, которому довелось своими глазами увидеть ужасы голода тех лет, население юго-восточного Башкортостана в массовом порядке стало голодать уже с января – февраля 1921 года. В марте 1921 года голод дошел и до Уфы. «…Словами не расскажешь, что творится в Тамьян-Катайском кантоне, – писал он. – Целыми семьями умирают с голода… Голыми сидят взаперти в своих домах – как дикие народы. О муке и хлебе не вспоминают. Что и скота осталось после разверстки, все съедено. Обязательные

госналоги продолжают душить их; разверстку заставляют заплатить. Кому платить нечем, тот продает последнее, что есть – таким образом, расплачивается. Многие всю зиму питались древесной корой. Некоторые, чтобы не слышать голодного плача своих детей, отвозят их в глухие леса и там оставляют умирать. У этих бедных нет никаких надежд… Человеческих качеств у них не осталось, дух исчез. Эти жалкие существа опустились до уровня животных, съедают что попало и ждут своей смерти. Если так будет продолжаться, они умрут все. Никто не слышит их стона, никто им руки помощи не протягивает.… От этого народа, проживающего в дебрях Урала, возможно, останется лишь название, имя в истории…» [3, 158 –159].

Из общего числа населения АБСР в 1 миллион 229 тысяч человек за весь голодный период было зарегистрировано 585,9 тысяч взрослых и 396 тысяч детей, страдавших от последствий бедствия. В их числе были дети от 7 лет – 164 тысяч 203 человек, от 8 до 15 лет – 158 тысяч 421 человек. [10, 179]. По данным исследователя Нарского И.В., в ноябре 1921 года на территории Уфимской губернии голодали 61% жителей (от 34% в Златоустовском уезде до 93,4% в Белебеевском), в августе 1922 года – 73% населения [5, 107]. Если учесть, что в Малой Башкирии положение было хуже, то можно только предположить, какими страшными были последствия такого катастрофического бедствия.

Угроза голодной смерти заставила уехать из родных мест огромный пласт населения и спровоцировала резкий рост детской беспризорности. С начала лета 1921 года из татарских и башкирских деревень двинулись волна беженцев и масса беспризорных детей в Уфу, Стерлитамак и другие города региона. Голодающие шли в города, потому что предполагали найти в них пропитание. Борьба с беспризорностью в Башкирии в это время сводилась к спасению детей от голодной смерти. Кроме партийных и государственных органов в оказании помощи голодающим активное участие приняли женотделы, комсомол, профсоюзы, Российское общество Красного Креста, Американская

администрация помощи, Деткомиссия, пионерские отряды, комитеты крестьянской взаимопомощи. Их мероприятия в последующем способствовали улучшению социально-экономических условий жизни подрастающего поколения, сокращению детской беспризорности.

Местная общественность также участвовала в деле борьбы с голодом, многие известные люди того времени собирали пожертвования в фонды помощи беспризорным, оказывали нуждающимся поддержку. Тема голода стала актуальной в творчестве башкирских писателей. В периодической печати появились стихи Гарифа Гумера, Даута Юлтыя, Тухвата Янаби. В 1921 году в Стерлитамаке была издана первая книга стихов «Уральские мелодии» («Урал мондары») Даута Юлтыя. Гонорар он пожертвовал в фонд помощи голодающим [2,161].

Мажит Гафури также не остается в стороне и принимает активное участие в спасении жителей Башкортостана от голодной смерти. В это трудное время проявляются такие черты его характера, как альтруизм, милосердие, сострадание, неприятие несправедливости. Горе своих сотен тысяч сограждан он воспринимает как личное горе и готов им помочь. Сын М.Гафури Анвар вспоминает, что больной отец делился пищей с сапожником по имени Гани, тем самым спасая его от голодной смерти [2,112]. Несмотря на то, что в голодное время семья самого поэта испытывала трудности с продовольствием, он отказался от дополнительного пайка Уфимского губернского комитета по оказанию помощи голодающим в пользу других людей [2,113]. Также Мажит Гафури добился открытия столовой для питания голодающих детей в своей родной деревне Зилим-Караново и обеспечения её продовольствием [6, 162].

Поэт много выступает в периодической печати с целью привлечения внимания общественности к проблеме помощи голодающим согражданам. В газете «Урал» в 1921 году увидели свет очерк «Ачларга ничек ярдәм итергә» («Как помочь голодающим») [1], а также стихи на тему голода. В 1922 году в газете «Башкортостан хэбэрлэре» («Известия Башкортостана») он напечатал

статью о необходимости возвращения в республику детей, эвакуированных в более благополучные в продовольственном отношении регионы Советской России [11].

Вскоре, в 1923 году, в Уфе вышел сборник стихов Гафури «В когтях у голода», посвященный голоду (41 страница). В своих произведениях, вошедших в эту книгу, поэт и гражданин призывал к помощи голодающим, к спасению от голодной смерти детей. В стихотворении «Плачут» (1921 г.) описываются ужасы постигшего республику бедствия [8, 197]. Средства от этой книги, как и от издания других книг поэта, пошли на помощь голодающим [7, 110].

В том же 1923 году общественность Башкортостана отметила 20-летие творческой деятельности Мажита Гафури. В связи с этим ему было присвоено почетное звание «Народный поэт Башкирской АССР», правительством республики был подарен дом. На юбилейном торжественном вечере Мажиту Гафури было преподнесено много подарков: книг, письменных принадлежностей, альбомов и т.д. Торговцы, владельцы частных магазинов города Уфы подарили ему золотые карманные часы с цепью в знак уважения к поэту. Однако он не стал их носить, а отдал в фонд помощи беспризорникам [2, 161]. Об этом сообщила газета «Власть труда» за 9 июня 1923 года. В ней была опубликована заметка такого содержания: «Благодарность. Комиссия по проведению недели помощи больному и беспризорному ребенку выражает глубокую благодарность народному поэту Башкирской республики товарищу Гафурову за пожертвованные им золотые часы в пользу беспризорного и больного ребенка. Зам. пред. Комиссии Лобачев» [9, 159].

Мажит Гафури был великим поэтом, который жил ради своего народа, радовался и горевал вместе с ним. Это выражалось не только в его произведениях, но и в его делах, поступках. В начале 20-х годов XX века, когда в стране и в Башкортостане свирепствовал голод, поэт не уехал в другие края, а остался на родине и помогал нуждающимся. И словом, и делом показав пример

высокой гражданственности и нравственности. Тем самым он внес свой посильный вклад в дело спасения детей от голода.

### *Литература*


1. Ачларга ничек ярдәм итергә: [очерк] // Урал. – 1921. – 5 октября.

2. Гафури А. О моем отце (на башкирском языке). Уфа: Китап, 2001. – 176 с.

3. Гафури М. Ужасы голода. Страницы дневника // Ватандаш. – 1997. – № 3. – С.156 – 159. – На башк. яз.

4. Надеждина В.А. «…Все к социализму иду и никак не могу дойти»: рабочие и крестьяне Южного Урала и социальная политика Советского государства в годы НЭПа: Монография. Уфа: РИО БашГУ, 2005. – 267 с.

5. Нарский И.В. Жизнь в катастрофе. Будни населения Урала в 1917 – 1922 гг. М.: РОССПЭН, 2001. – 633 с.

6. Рамазанов Г.З. Мажит Гафури. Книга о народном поэте (на башкирском языке). Уфа: Башкирское книжное издательство, 1991. – 224 с.

7. Рамазанов Г.З. Мажит Гафури: Очерк жизни и творчества. М.: Советская Россия, 1980. – 157 с.

8. Рамазанов Г.З. Творчество Мажита Гафури. Пер. с баш. Р.Ахмедова. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1970. – 304 с.

9. Узиков Ю. Краеведческий калейдоскоп // Бельские просторы, 2006. № 3. С. 159.

10. XX лет Башкирской Автономной Советской Социалистической Республики (1919 – 1939 гг.). Уфа, Башгосиздат, 1939. – 215 с.

11. Читкә озатылган балаларны кайтару чараларын күрергә вакыт түгелме? // Башҡортостан хәбәрләре. – 1922. – 11 августа.


© **Абдрахманов Р.Р.**, 2018

**Д.М. Абдуллина**,
*филол. ф. к., ТР ФА Г.Ибраһимов исемендәге Тел, әдәбият һәм сәнгать институты әйдәп баручы фәнни хезмәткәре, Казан ш.*

## М. ГАФУРИНЫҢ ИНКЫЙЛАБКА КАДӘР ЧОР ПРОЗАСЫ

М. Гафуриның инкыйлабка кадәрге чор прозасында ике юнәлешне аерып күрсәтергә мөмкин. «Ачлык яки сатлык кыз» (1907), «Ярлылар яки өйдәш хатын» (1907), «Үги балалар» (1908), «Онытылган җинаять, яки үткәнне искә төшерү» (1909), «Исәпсез байлык» (1912) кебек бер төркем әсәрләре тормышны сәнгатьчә гәүдәләндерүгә мәгърифәтчелек һәм тәнкыйди реализм синтезы аша ирешә. Ул бу әсәрләрендә инкыйлабка кадәрге Рәсәй мөселманнарның яшәешен сурәтләү аркылы, милли дискриминация, иҗтимагый тигезсезлек хөкем сөргән җәмгыятьтә кешенең асылын, шәхес һәм җәмгыять арасындагы мөнәсәбәтләрнең үзенчәлеген ачуга омтыла.

Әсәрләренең чынбарлык белән тәңгәллегенә ирешү, укучыга тәэсирлелекне көчәйтү юлында кырыс, җентекле натуралистик алым белән эшләнгән күренешләр тудырудан да читләшми. Дөрес, тормышны реалистик сурәтләүгә юнәлдерелгән әсәрләрендә дә ул әле нәтиҗәләр ясарга, хөкем итәргә ашыкмый, вакыйгалар агымын эзлекле хикәяләүче, күзәтүче буларак чыгыш ясый. Үзе тәнкыйди күзлектән карап гәүдәләндергән фаҗигаләрнең асылын да мәгърифәтчеләрчә аңлата. Әсәр тукымасында авторның субъектив карашлары, сентиментальлек, риторик мөрәҗәгатьләр урын ала. Әлеге әсәрләрендә дә беренче хикәясе «Фәкыйрьлек белән үткән тереклек»нең герое Нигъмәтулла куйган: «Бу дөньяның бәла һәм казасы бетәрме икән? Һаман каза, һаман кайгы-хәсрәт, инде нишләргә?» – дигән сорауга җавап табарга тырыша.

«Үги балалар» әсәрендә Рәсәй мөселманнарының хәлен үги ана вәхшилегеннән үлемгә дучар ителгән балалар хәле белән тиңли. Бер үк шәһәрдә яшәгән руслар һәм мөселманнарның яшәү рәвешен чагыштырып, русларның төрле уку йортлары булуын, яшьләренең (кызларының да) аларда белем

алуларын, мөселманнарның карты-яшенең кучерлык итеп, урам себереп, әфлисун, иске киемнәр сатып йөрүен, болардан калганнарының «сәүдә иткән булып, уку-фәлән кирәкмәй дип утырулары»н күзәтеп: ««Аһ, бер җәһәттән, җәһаләтемез, икенчедән, бу җәһаләтемезгә һәр тарафымыздан сәбәп булып килгән үгилегебез»,– дип уйлый идем», – ди.

Әсәрдәге үгилек турындагы гомумиләштерүләрне укыганнан соң, авторның фикере Галә мулла гаиләсендәге вакыйгалар белән генә чикләнмәве ачык аңлашыла. Әдип яшь хатын җаһиллыгына бирелеп, балаларын үгилек ачысыннан саклый алмаган Галә мулла образы аша милләт хөрлеген якларга тиешле ир-егетләребезнең әзерлексезлеген, гамәл кыласы урында, тормыш агымына ихтыярсыз бирелгәнлекләрен ача. Моның сәбәпләрен ул иске тәртипле мәдрәсәләрдә укып, тормыш өчен әзерлексез булуларында күрә. Әсәрдәге үги балаларның үлеме дә, Г. Исхакыйның «Ике йөз елдан соң инкыйраз» әсәрендәге Җәгъфәр, Сөембикәләрнең үлеме кебек үк милли инкыйразга ишарәли. Бары сәбәпләрдә генә бераз аерма бар.

Г. Исхакый күрсәткән милләтне инкыйразга китергән сәбәпләргә өстәп, М. Гафури Рәсәй мөселманнарының  дәүләт өчен «үги»леген дә күрсәтә. Нәтиҗәдә шул аңлашыла: дәүләтләрен югалтып, үз җирләрендә хокуксыз калган, гаделлек югала барган патша Россиясендә  яшәгән мөселманнар тормышның кырыс кануннары алдында яклаучысыз калалар. Тормыш кырыслыгы  кешеләрне  кыргыйландыра, кешелек сыйфатларын ярлыладыра.

«Ачлык, яки сатлык кыз» әсәрендә агасының ятим кызын кавказлыларга 130 сумга сатып җибәргән Лотфулла, «Исәпсез байлык» әсәрендәге комсыз Хәбибулла, яки «Ярлылар яки өйдәш хатын» әсәрендәге, сәдака бирер кешесе булмагач, җеназа укуны да көттереп кенә башкарган хәзрәт кебек образлар аша М. Гафури кешелексез җәмгыятьнең  рухи кыйбласын югалткан типларын гәүдәләндерә.

«Ярлылар, яки өйдәш хатын» повесте үзенең салмак агымдагы эзлеклелек саклап,  тормышны сурәтләүдә ышандырырлык итеп, фәкыйрьлек төбенә

төшкән ярлылырның һәм мал белән күңел күзләре томаланган байларның эчке дөньясын искиткеч оста психологик төгәллек аша сурәтләп бирүе белән үзенчәлекле. Әсәрдә өметсезлек, фәкыйрьлек, ачлык, салкын кочагында бер-берсенә якын сыенган, үлем тырнагыннан котылып калырга теләп берләшкән көнлекче хезмәте белән генә җан саклаучы Шәриф, аның хатыны Бәдри белән балалары һәм алардан да бәхетсезрәк Җәмиләнең язмышы турында сөйләнә. Укучы күңелен тетрәндерерлек фаҗигаләрне хикәяләүче бу әсәрне укыганда күңелдә авыр тойгылар белән янәшә өмет, соклану чаткысы яши. Ярлыларның өметсез, нурсыз тормышын аларның кешелеклелеге бизи. Язучы байларның күңел тупаслыгына, фәкыйрьләрнең кешелеклелек сыйфатларын каршы куя. Карасаң, кешенең асылы болайрак корылган икән шул: авырлыкларны күтәрә, сабыр итә, соңгы сулышына кадәр яшәү өчен көрәшә, өметен җуймый, иманын саклый, тик үзенең башкалардан өстенрәк торуын тоюга ул нәфес колына әверелә башлый, югарырак үрмәләү өчен намусын да, иманын да сата. Ә чынлыкта һәммәбез дә яратылышыбыз белән тигез, кайтыр урыныбыз да бер, әмма нәфес колына әверелеп шуны онытабыз. Әсәрләрендәге бер-берсеннән кискен аерылган байлыкта яшәүче кешелексезләр һәм тормыш төбендә җан саклаучы ярлылар образлары аша автор шушы хакыйкатьне дәлилли.

Ике инкыйлаб арасында (1905–1917) хөкүмәт тарафыннан оештырылган кысу, тентү-тикшерүләр, полиция күзәтүләре, татар зыялылары арасында төрле якка тартылу, бүлгәләнеш һәм шуның нәтиҗәсендә туган кешеләргә карата ышаныч, алдагы көнгә өмет югалу, көрәш рухы сүрелү М. Гафури иҗатына да сизелерлек йогынты ясый. Җәмгыятьтәге бу халәткә карата язучы күңелендә туган эчке каршылык нигезендә әдәбиятта азатлык, шәхес иреге, милли үзаң, Ватан төшенчәсен, яшәү мәгънәсен аңлату үзенчәлекле гәүдәләнеш ала. Шигъриятендә дини мифология, ислам фәлсәфәсенә мөрәҗәгать итү, мәхәббәт, табигать культын данлау кебек үзенчәлекләр белән сыйфатланган бу күренеш, прозасында да реалистик сурәтләүдән тайпылып, романтизмга йөз белән борылуына китерә, язучы иҗатын модернизм хас үзенчәлекләр белән баетыла.

Язучының рухи дөньясында барган үзгәрешләр, үзен әйләндереп алган мохит белән каршылыкка керүе, аның белән көрәшүдә яңа көч, реакцион җәмгыять вәхшилегенә каршы торырлык идеал эзләү «Болгар кызы Айсылу» (1910), «Тәэссорат» (1913), «Бу кемнең кабере?» (1913), «Хан кызы Алтынчәч» (1914) кебек хикәя, нәсерләрен тудыруга сәбәп булды. Төрекчәдән тәрҗемә ителгән «Бер чәчәкнең наләсе» (1911), башкорт халык авыз иҗатына нигезләнгән ярым тезмә формада язылган «Зыятүләк берлә Сусылу» (1910) әсәрләре дә шушы исемлекне тулыландыра.

«Тәэссорат» әсәрендә җир һәм күкләрне берләшлергән, һәр нәрсәне үзенә сәҗдә кылдырган газамәт, мәгънәви бер куәт – мәхәббәт турында сөйләнә. Автор хис һәм табигать культына өстенлек биреп, кешеләрнең табигать кануннары буенча яшәргә тиешлеген раслый, җир тормышының шәфкатьсезлегенә мәхәббәтнең илаһилыгын каршы куя, әсәрдә мәхәббәт яшәешнең төп кануны, яшәү гармониясе тудыручы илаһи көч, олы матурлык буларак шәрехләнә.

«Бу кемнең кабере?», «Хан кызы Алтынчәч» кебек әсәрләре идея ягыннан халкыбызның үткәнен данлый, шәхес иреген бар нәрсәдән өстен куя, кеше гомеренең дә, дан-шөһрәтләрнең дә, фани дөньяның да узгынчы булуын кисәтә, үткән белән бүгенгене киләчәккә тоташтыручы буын, хәтер сакчысы булганда гына яшәеш дәвам итә дип раслый.

М. Гафури инкыйлабка кадәр шигъриятендә дә, прозасында да Рәсәй халкының, бигрәк тә тормыш хәлләре үзе өчен бик таныш булган ярлыларның, аянычлы хәлен, хокуксызлыгын тасвирлап, аңа теләктәшлеген генә сөйләп калмый, ул «зарлы, моңлы», әмма «эч кере» булмаган, «тәкәллефсез», «ана сөтедәй хәләл» ризык белән тукланган гади кешене психологик яктан тирәнтен аңлап, аларның инсаниятен, рухи камиллеген халык хисабына яшәүчеләр әхлагына каршы куя.

© **Абдуллина Д.М.**, 2018

**Л.Х. Абдуллина**,
*РФА ӨФТҮ ТТӘИ аспиранты, Өфө ҡ.*

# МӘЖИТ ҒАФУРИ ШИҒРИӘТЕНДӘ МӘҒРИФӘТСЕЛЕК МОТИВТАРЫ

Башҡортостандың беренсе халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың исеме ике туғандаш республика халыҡтарына ғына түгел, дөйөм төрки донъяһында ла билдәле. Бөгөнгө Рәсәй әҙиптәре лә башҡорт әҙибенең яҙғандары аша уҙған быуат башы осорон күҙ алдына баҫтыра һәм уның ижадының төп үҙенсәләге тип әҫәрҙәрендәге мәғрифәтселек мотивтарын атай. Мәҫәлән, яҙыусының 100 йыллыҡ юбилейы уңайынан баҫылып сыҡҡан ғилми-ғәмәли конференция йыйынығында ошондай юлдар бар: “В философском мировоззреченском плане дореволюционное творчество М. Гафури имело два  источника. Один из них – рационалистическая философия просветительства. Это отчетливо проявляется в аппеляции поэта к человеческому разуму при оценке  социальной действительности той поры, понимании им причин социального неравенства и отсталости своей нации. Национальный прогресс представляется М. Гафури, особенно на первых этапах его творчества, обусловленным развитием науки и просвещения.” [1, 33].

Эйе, тап ана шул алдынғы ҡараштың халыҡ массалары аңына ла йоғонто яһап, бары тик белем, ғилем, уҡыу менән генә милләтте күтәреп буласағын тәрән аңлай автор, әммә халҡын артта ҡалғандар иҫәбенә индергәндер ҙә, бәлки. Ләкин тап ошо осорҙа башҡорт мәғрифәтселегә сәскә атып, емеш биреп, ғилем орлоҡтарын ят баҡсаларға ла сәсә башлаған була. Быны беҙ әле тарихи күҙлектән сығып баһалайбыҙ. Ғалим Әхәт Ниғмәтуллин “Мәжит Ғафури” тип аталған йыйынтығында әҙиптең белемһеҙлек менән шиғыр юлдары аша көрәшергә теләүе хаҡында былай тип яҙа: “Шағир, белеменең һәм тәжрибәһенең етешмәүе арҡаһында, тормошто мәғрифәтселек ярҙамында, кешеләргә өгөт-нәсихәт биреү юлы менән төҙәтергә ынтылды” [2, 8].

Йәмғиәттең үҫешенә, илдәге генә түгел, тотош донъяла барған үҙгәрештәр хаҡында халыҡҡа тәүгеләрҙән булып шағир һүҙ әйтмәй, кем әйтһен. Был ҡулына ҡәләм алған шәхестең төп бурысы ла, әҙәби маҡсаты, граждандлыҡ миссияһы ла.

Дәүер башы ысын мәғәнәһендә тарихи ваҡиғаларға бай осор. 1922 йылда инде тарихта ғына тороп ҡалған СССР дәүләте төҙөлә. Был тарихи сара I Бөтә Рәсәй съезында теркәлә. Шунда шағир делегаттарға плакат кеүек шиғыр менән мөрәжәғәт итә. Бер ҡараһаң, был элекке традицияларҙы дауам итеп, сәсән һүҙен әйтеү кеүек булһа, шул уҡ ваҡытта профессиональ әҙәбиәт барлыҡҡа килгән осорҙа һүҙ сәнғәтен цитата өсөн файҙаланыу алымы ла булып тора. Әҙип ижадын өйрәнгән украин яҙыусыһы Павло Тычина был хаҡта үҙ ҡарашын былай тип белдерә: “Шағир бында, шиғыры түбән төшөүҙән ҡурҡмайынса, бөтөнләй плакат стиленә, лозунгылар стиленә күсә, ул культураһыҙлыҡты һәм емереклекте бөтөрөү өсөн көрәш юлында агитация алып бара” [3, 27].

XIX быуат аҙағындағы тормошон үҙенең “Баштан үткәндәр” тигән яҙмаһында әҙип бына нисек тасуирлай: “1898 йылдың көҙөндә Троицкиға яңынан барып, шундағы тәртип буйынса уҡырға керештем. Бында, әлбиттә, уҡыу тигән нәмә күберәк Бохара ысулында иҫке хәрефтәрҙе һәм дини әҫәрҙәр уҡыуҙан, быларҙы ла иң тәртипһеҙ рәүештә тәғлим итеүҙән ғибәрәт ине. Бында бөтә уҡыусы шәкерттәр уҡыуҙан бигерәк ишан тирәһенә йыйылып, шуға мөрит булыуҙы төп маҡсат итеп алғандар, бөтәһе тәсбих тартыуҙан, суфыйҙар мөнәжәте, “Ҡөрьән” уҡыуҙан бушамайҙар ине. Бында яңылыҡ, иң аҙ булғанда, дини үҙгәреш йәки шул ваҡытта Россия мосолмандары араһында тарала башлаған ысул йәҙите хаҡында уйлап ҡараған шәкертте осратыр хәл юҡ ине. Мин беренсе йылды башҡа шәкерттәргә хеҙмәт итеп, шуларҙан ҡалған ашты ашап уҡып сыҡтым”, – ти ул [4, 443]. Иғтибар итһәк, яҙмала был осорҙағы башҡорт илендәге тормошто, диндең халыҡ араһында нисек таралыуын ғына түгел, яҙыусының үҙенең дә мөнәсәбәтен күрәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта ул ҡырғыҙ ауылында мулла булып китеүе тураһында ла бәйән итә.

XX быуат башы, бөтә донъяла оло үҙгәрештәр кисерер алдынан дауыл көткәндәгеләй, ҡаршылыҡлы осор... Былар барыһы ла һиҙгер күңелле шағир йөрәгенә тәьҫир итмәй ҡалмағандыр. Әммә дөйөм халыҡта дин тәрбиәләгән иман менән бергә донъяуи фәндәрҙе лә уҡырға тейешлекте тәрән аңлаған, бәлки, эске аң кимәлендә тойомлаған авторҙың шиғриәтенә ярһыу рәүештә эшсе образы килеп инә.

Мәктәп программаларына ингән киң билдәле “Ҡыҙыл байраҡ” шиғырынан башлайыҡ һүҙҙе:

Ҡара һин алға!

Күрәһең унда

Ҡыҙыл байраҡты:

Буялған ҡанға.

Көслө эшселәр

Күтәргән уны,

Буялған уға

Шәһиттәр ҡаны... [5, 424].

Кем һуң ул ошо эшселәр? Бер ҡараһаң, улар – халыҡ ҡатламы, Беренсе Бөтә донъя һуғышы ваҡытында күпләп ҡырылған ябай халыҡ вәкиле. Икенсе яҡтан, был бит киң мәғәнәле образ да. Эйе, шағир эшселәрҙе, үҙенең хәләл көсө менән икмәк тапҡандарҙы, ярлыларҙы яратҡан, үҙ иткән. Хатта 1912 йылда яҙылған “Мин ҡайҙа?” шиғырында ла уларҙы яҡлап, яҡын күреп сығыш яһай:

Ҡайҙа ярлы, ҡайҙа зарлы, ҡайҙа моңло күп була,

Мин шулар янында булам, улар менән килешеп була.

Юҡ уларҙа төрлө ҡатлау, юҡ уларҙа эс сере,

Тыштары керле, вә ләкин юҡ уларҙа эс кере.

Юҡ тәкәллеф, юҡ эрелек, ултырышаһың һин дә мин,

Юҡ күңел ҡырылыр тигән уй, ул йәһәттән мин имен [ 6, 336].

Шулай ҙа тағы ла ниндәй мәғәнә һалынған һуң илдәге ҙур үҙгәрештәрҙе алып килгән эшсе образына? Ә бит ул – мәғрифәтселек идеялары, яңылыҡ.

Халыҡты туплаған ғына түгел, иң тәү сиратта, алға әйҙәгән яңы фекерҙәр. Ғөмүмән, мәғрифәтселек ул зыялылыҡ билдәһе булһа ла, бер ҡасан да тәүге ауазынан уҡ ҡолас йәйеп ҡаршы алынмаған, киреһенсә, ҡанҡойош, яуҙар аша яуланған яңы фекер. Мәғрифәтселек – ул кешелекте алға әйҙәгән, яңы ижади, фәнни офоҡтарын асҡан зыялы. Ул түр баштарында, йылы урындарҙа табылған, әйтелгән яңы фекер түгел, ул юлдарҙа, сәфәрҙәрҙә, халыҡ, киң масса араһында, тәрән эҙләнеүҙәр синтезында тыуған, күңел төбөнән, тәрән зиһендән аҡтарылып сыҡҡан алдынғы ҡараш. Эшсе образы киң мәғәнәләге көрәшсе образы булып та күҙ алдына баҫа.

“Ҡарт тарихтың һуңғы көндәре” шиғырында ла шундай юлдар бар:

Туҡта!.. Үтте дәүерең, бөттө ғүмерең!..

Һуңғы көнөң етте, ҡарт тәре!

Тигән көслө тауыш сыкты бер көн,

Баш күтәрҙе эшсе ғәскәре [7, 149].

Ябай ғына баш күтәреү ойошторолһа ла, уның идеологы була. Шуға күрә әгәр ғәскәр булып эшсе синыф күтәрелә икән, уның артында тотош халыҡ, ул халыҡ тыуҙырған аңлы фекер эйәләре тора. Ризаһыҙлыҡтан, килеп тыуған хәл-ваҡиғалар менән килешмәүҙән яралған йән ауазының сағылышы – шағирҙың ошондай яҙмалары, эшселәр образының әҙәбиәттә алғы планға килеп сығыуы.

‘‘Һуғыш дауам итте. Эшсе, крәҫтиән ҡаны дарья булып аҡты. Уларҙың балалары, ҡатындары етем ҡалдылар. Фажиғәләрҙең барған һайын көсәйә һәм арта барыуы күңелгә насар тәьҫир ҡалдыра башланы. Бының бер сиген, ҡан дарьяһы ағыуының туҡталыуын күрәһе килә башланы. Казарма яндарында мәхшәр булып, балаларын оҙатҡан ата-әсәләр, аталарын оҙатҡан йәш балалар тулды. Мин бында сәғәттәрсә ҡарап ултырҙым. Шул ваҡытта “Юҡтырһың да, Алла”ны яҙҙым, ‘‘ – тип тә яҙа шағир үҙенең “Баштан үткәндәр” очергында [8, 466].

Юҡтырһың да, Алла!.. Әгәр булһаң,

Сабыр итмәҫ инең был эшкә...

Бөтә ҡөҙрәтеңде бағлап ҡуймаҫ

Инең алтын, көмөшкә... [ 9, 399–400].

Ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерле шиғыр юлдары. Әгәр ул дин дәрестәре алып үҫмәгән быуын вәкиле булһа, беҙ уның Аллаһы Тәғәләнең барлығын һәм берлеген танымауының сағылышы ғына, тиер инек был шиғри набатты. Юҡ, Мәжит Ғафури – динде өйрәнгән яҙыусы. Йөрәк әрнеүҙәрен, эске һыҙланыуҙарын ана шул рәүешле биргән ул. Алланы бөтөнләй юҡ тип иҫәпләһә, ул был хаҡта яҙып та тормаҫ ине. Был шиғырҙа  Ер, Күк хужаһына асыҡтан-асыҡ мөрәжәғәт ярылып ята. Был хатта яҙыусының ярҙам һорауы, ышанысын аҡлауын үтенеүе!

Шул уҡ ваҡытта XIX быуат башында тыуған булһа, М. Ғафури былай тип яҙа алыр инеме? Ул динде асыҡтан-асыҡ тәнҡитләр, Аллаһы Тәғәләнең барлығын шик аҫтына ҡуйыр инеме? Бик икеле. Әҙиптәр дәүерҙе алға әйҙәһә, һәр заман үҙ шағирын күтәрә. Сәсәндәрҙең халыҡсан ғына түгел, халыҡ тауышын еткергән алдынғы ҡарашлы ижады нигеҙендә тыуған киләһе быуат шағирҙары.

Әҙәбиәт тарихына күҙ һалһаҡ, түбәндәгеләрҙе күрәбеҙ: XIX быуат башындағы әҙәбиәттә 1812 Ватан һуғышы ҡаһарманы, һуңынан батшалыҡтың колониаль иҙеүенә ҡаршы сығыштары өсөн Себергә ебәрелгән Буранбай-Йәркәй сәсәндең йырҙары төп урынды алып тора. Уның шиғри традицияларын сәсәндәр Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев (Ишмөхәмәт сәсән, 1781–1878), Ғәбит Арғынбаев (Ғәбит сәсән, 1856–1921) уңышлы дауам иткән. XIX быуаттың беренсе яртыһында суфыйсылыҡ поэзияһы тарала. Башҡорттарҙан сыҡҡан Т. Ялсығол әл-Башҡорди (1767–1838), Ғ. Усман (1752–1834), Мәнди Ҡотош-Ҡыпсаҡи (1761–1849), Ә. Ҡарғалы (17884–1824), Һ. Сәлихов (1794–1867), Ш. Зәки (1825–1865), Ғ. Соҡорой (1826–1889) – был ағымдың иң күренекле вәкилдәре. Бына тап ошо осорҙа уларҙың ижадында донъяуи мотивтар ҙа сағылыш таба башлай. Ғ. Усман, Ш. Зәки, Ғ. Соҡорой ижадтарында әҙәбиәттең урта быуаттарҙан яңы заманға күсеү билдәләре сағыла.

XIX быуаттың икенсе яртыһында башҡорт әҙәбиәтендә мәғрифәтселек йүнәлешенең үҫеше башлана. Уның барлыҡҡа килеүе һәм аяҡҡа баҫыуында Ырымбур кадет корпусының көнсығыш телдәре һәм әҙәбиәте уҡытыусылары М. Биксурин (1819–1903), С. Күкләшев (1811–1867) ҙур роль уйнай. Улар башҡорт теле, фольклоры һәм әҙәбиәте буйынса материалдар, көнсығыш классикаһы текстарының тәржемә өлгөләрен дә индереп, мәктәп хрестоматиялары төҙөй һәм баҫып сығара. Бына нисек килеп керә халыҡ аңына мәғрифәтселек идеялары.

“XX быуат башындағы ваҡыттағы әҙәби процесты Мәжит Ғафури етәкләгән”, – тип яҙа ғалим Әхнәф Харисов [ 10, 7]. Эйе, тап шулай булғандыр ҙа, сөнки М. Ғафури тап эшселәргә ышанып, үҙенең рухи көсө, һүҙҙәге энергетикаһы менән ябай халыҡ өсөн яҡты киләсәк тыуырына ҙур өмөттәр бағлаған. Ғалим М. Нәҙерғоловтың “Ағиҙел” журналында баҫылған “Шағирҙың данлыҡлы улы” мәҡәләһендә лә атаһының юлын дауам итеп, мәғрифәтселек һағына баҫҡан Ғәрифулла Кейеков тураһында һүҙ әйтелә [11, 180–188]. XX быуат башында мәғрифәтселек әҙәбиәте киң йәйелеп киткән башҡорт донъяһында.

М. Ғафуриҙың ижадындағы эшсе образы, бай халыҡ вәкиле һынланышы киң билдәле “Үҙем һәм халҡым” шиғырында ла дауам итә. 1912 йыл яҙылған был әҫәрҙе мәктәптән үк өйрәнеп үҫәбеҙ:

Бер аҙым алға баҫам да,
Әйләнәм мин артыма.
Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,
Күҙ һаламын халҡыма.
Шул ваҡыт мин бик юғары
Ҡош кеүек, осһам әгәр,
Ә улар һаман шулай
Баҫҡан урынында торһалар?.. [12, 335].

Бына был әҫәре менән М. Ғафури үҙен дә ана шул эшсе, халыҡ хеҙмәтсеһе булған мәғрифәтсе образына тиңләй. Революцион-демократик идеялар башҡорт донъяһында ғына түгел, тотош Рәсәйҙә киң тарала барған һайын, М. Ғафури, М. Аҡмулла, Ш. Бабич, С. Яҡшығолов кеүек шағирҙарҙың тауышы ла көрәйә, белемгә, цивилизациялы дәүләттең күренеше булған аң кимәлен күтәреүгә саҡырыуы ла йышая. Юҡҡа ғына әҙиптең ижадын өйрәнгән филология фәндәре докторы Ғ. Ҡунафин: “Үҙенең ҡараштары, эҙләнеүсән йәне менән М. Ғафури тәүге поэмаларынан уҡ бөйөк башҡорт шағирҙары һәм мәғрифәтселәре М. Аҡмулла, М. Өмөтбаевтың идеяларын үҫтереүҙе дауам итә”, – тип яҙмай [13 , 161–175].

Тап ана шул халыҡтың бар аһ-зарҙарын тасуирлағаны, улар менән бергә тын алғаны өсөн дә ул халыҡ шағиры булып танылған. Уның эстетик идеалы – ул аң-белем аша халыҡ өсөн бәхет яулау. Ошо уҡ мотивтар уның “Себер тимер юлы йәки милләттең хәле” әҫәрендә лә асыҡ сағыла:

Һәр бер сирҙең дауаһы булған кеүек,
Милләттең дә дауаһы – ғалимлыҡтыр.
Бер милләттең таяғы ғилем булһа,
Ул таяҡты ҡулға тотоп йөрөр булһа,
Һәр дошмандың ул шикһеҙ ҡулға алыр,
Гәрсә дошман Рөстәм кеүек батыр булһа,
Аурупалы ғилем менән һауа осто,
Бара-бара ҡотоптарға юлдар асты [14, 3].

Тормоштоң ысынбарлығын, реалистик донъяла йәшәү менән бергә мәғрифәтселек аша бәхеткә өлгәшергә теләү ниәте һалынған “Бәхет эҙләү” шиғырына ла:

Бәхетле йәнгә ер, күк, ғәрше әғлә – һәммәһе барыбер;
Шулай булғас, һөйкөмлөләр миңә күктән дә ошбу ер.

Үлеп мең йыл тороуға бер сәғәт ғүмерем алыштырмам,

Бәхет эҙләйем мин ерҙән, шуға бында, ерҙә торам [15, 187].

Ошо ерҙә, ошо мәлдә, ошо халыҡ менән бергә бәхет татыу идеяһы менән яна шағир. Бәхетһеҙлектең төп сәбәбе – ул аңһыҙлыҡ, белемһеҙлек, тип иҫәпләй. Был хаҡта М. Аҡмула ижадын өйрәнгән әҙәбиәт белгесе Ә. Вилданов та әйтеп китә: “Ғафури социаль тигеҙһеҙлектең төп сәбәбен аңламаған, ә йәмғиәт эсендә кешеләр өҫтөнә ишелеп килгән синфи бүленешкә милләттең берҙәмлеген тарҡатҡан ниндәйҙер бер яман күренеш, тип ҡараған. Шуға күрә лә ул йәне-тәне менән мәғрифәтселеккә, милли мәҙәниәттең үҫешенә саҡырған” [16, 14]. М. Ғафуриҙың поэтик әҫәрҙәре – ябай, эшсе халыҡты аң-белемгә әйҙәү, мәғрифәтселеккә саҡырыу өлгөһө. Заманының алдынғы ҡарашлы шағирҙарының береһе булараҡ, М. Ғафури ижады киң йәмәғәтселек фекерен үҫтереүгә лә тәрән йоғонто яһаған шиғриәт була. Борон замандарҙан сәсән һүҙенә ҡолаҡ һалған башҡорт халҡы уның аң-белемгә әйҙәгән шиғри өлгөләрен сәйәси саҡырыу тип тә ҡабул иткән. Шағир ижады хаҡында монография яҙған әҙәбиәт белгесе, әҙип Ғилемдар Рамазанов, мәҫәлән, яҙыусының ижадындағы мәғрифәтселек мотивтары шиғриәтендә генә туҡталып ҡалмай, тип иҫәпләй: “Хәмиттең хаяты”нда М. Ғафуриҙың шиғырҙарында сағылған мәғрифәтселек идеялары дауам итә [17, 167]. Ғөмүмән, ул осор яҙыусыларының күпселегәнә хас сифат – ул халыҡты мәғрифәселеккә өндәү. Шағир, мәғрифәтсе С. Яҡшығоловтың ижады ла халыҡ шағиры М. Ғафуриҙың яҙғандары менән ауаздаш. Ш. Бабич, М. Аҡмулла ижадтары – шулай уҡ быуат башындағы милләт вәкилдәренең үҙаңын уятыуға йүнәлтелгән.

Барыһы ла эшкә керемештәр уҡыуҙан,
Йыһанда яҡшы эшкә кермәй наҙан.
Уҡыу, уҡыу, тиҙәр бит һәммә милләт,
Уҡыу өсөн ҡылығыҙ һеҙ ҙә һиммәт... [18, 38]. Тәү ҡарашҡа кемдең шиғыр юлдары икәнен әйтергә лә ауырһындыра. Был әҫәр Сафуан Яҡшығоловтың мәғрифәтсе ижадынан. Бер-береһенә рухи терәк булып ижад иткән был осор

әҙиптәренең яҙмаларына уртаҡ сифаттар хас: халыҡты аң-белемгә өндәү, уларҙың проблемаһы менән яныу, килеп тыуған хәлдәрҙән сығыу юлын эҙләү.

### *Әҙәбиәт*


1. Вильданов А.Х. Просветительская литература в Башкирии и поэзия Мифтахетдина Акмуллы. Уфа: Башкнигоиздат, 1977.
2. Мажит Гафури. Материалы научной конференции. Казань, 1981.
3. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. 4 том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1979.
4. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. 1 том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978.
5. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. 1 том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978.
6. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. 3 том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1979.
7. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. 4 том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1979.
8. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. 1 том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978.
9. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. 1 том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978.
10. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. 1 том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1954.
11. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. 1 том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1954.
12. Кунафин Г. С. Творчество, прошедшее испытание временем (125 лет со дня рождения народного поэта Башкортостана Мажита Гафури) // Ватандаш. – 2005. – № 8. – С. 161–175.

13. Ниғъмәтуллин Ә. Мәжит Гафури. Казан: Татарстан китап нәшриәте, 1969.

14. Нәҙерғолов М. Х. Шағирҙың данлыҡлы улы //Ағиҙел. –2001, – № 4, – 180 – 188-се бб.

15. Рамазанов Ғ. Мәжит Ғафури ижады. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, – 1965.

16. Тычина Павло. Мәжит Ғафури ижадында патриотизм. Өфө: Башкнигоиздат, 1942.

17. Харисов А. И. Литературное наследие башкирского народа. Уфа: Башкнигоиздат, 1973.

18. Яҡшығолов С. С. Башҡорт хәлдәре / Төҙөүсеһе Л. Абдуллина. Өфө: Самрау, 2017.

© **Абдуллина Л.Х.**, 2018

**М.С. Арыҫланова**,

*филол. ф. к., БашДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы доценты, Стәрлетамаҡ к.*

## М.ҒАФУРИҘЫҢ «ФӘҠИРЛЕКТӘ ҮТКӘН ТЕРЕКЛЕК» ӘҪӘРЕНДӘ ЛЕКСИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘР

Мәжит Ғафури исеме һәр башҡортҡа яҡшы таныш. Яҙыусының прозаһын, поэзияһын, драматургияһын һәм публицистикаһын үҙ эсенә алған бай ижади мираҫы бар. Ким Әхмәтйәнов М.Ғафуриҙы «Тәүге маяғыбыҙ» тип атай: «Киләсәктә ниндәй темалар күтәрелергә тейеш булһа, ниндәй жанрҙар асылырға тейеш булһа, ниндәй стиль ағымдары ташырға тейеш булһа – шуларҙың барыһында ла тип әйтерлек беренсе һүҙҙе әйтеүсе әҙип Мәжит Ғафури булды» [6, 8]. XX быуат башындағы ябай халыҡтың ауыр тормошон үҙ күҙҙәре менән күрә, тетрәнә һәм 1902 йылда ҡаҙаҡ далаларында «Фәҡирлектә үткән тереклек» тигән тәүге проза әҫәрен яҙа М.Ғафури. Китап 1904 йылда

Ҡазанда баҫылып сыға [4. 13]. Беҙ ошо әҫәрҙең теленә хас ҡайһы бер лексик үҙенсәлектәрҙе билдәләп үтәбеҙ.

*«Ҡыш көнө ине. Бурандар башланып китте. Ауыл осондараҡ башы һалам менән ябылған бер өй ултыра...»* тип башланып китә «Фәҡирлектә үткән тереклек». Яҙыусы шул заман өсөн ғәҙәти булған ауыл өйөн һүрәтләүҙән башлай әҫәрҙе. Бында ярлы кешеләр йәшәүен беҙ түбәндәге лексик берәмектәр аша күрәбеҙ:

– *ҡайын утындар арҡыс-торҡос яталар;* утындар матурлап өйөлмәгән;

– *икенсеһе (тәҙрә) мейес янындағы стенаны уйып ҡына яһалған, быялаһы ватылған, ҡарындыҡ ҡына ҡуйғандар*; уйып ҡына, тимәк, бәләкәс кенә итеп эшләнгән;

– *мейес, ул аҙыраҡ алға табан ҡыйшайған, ҡолап емерелмәһен өсөн мейескә терәү һуҡҡандар;* күҙ алдына ҡыйшайып, емерелеп барған, йылылыҡ бирмәгән мейес килеп баҫа;

– *ярыҡтары балсыҡ менән һыланған;* ярыҡлы мейес аша төтөн сыға;

– *ямаған ҡыҙыл аласа тышлы ике мендәр;* мендәрҙең тышын яңыртыу өсөн, әлбиттә, аҡса юҡ;

– *ең төптәре йыртылған иҫке бер тун;* был кейем бер йылылыҡ та бирмәй, башҡа кейер әйбер булмағас, ташламайҙар;

– *сығанаҡтары ватылған иҫке бер һандыҡ;* һандыҡ ватыҡ, әммә нәмә һалыр өсөн, күрәһең, башҡа өй йыһазы юҡ;

– *икәүһе (сынаяҡтар) ҡоршаулы;* сынаяҡтар ҡоршап, нығытылып ҡуйылғандар;

– *ситтәре кителеп бөткән өс-дүрт ҡалаҡ;* был ҡалаҡтар китек, ашау өсөн башҡаһы юҡлыҡтан ташланмайҙар;

– *бер-ике бөртөк шырпы менән ике тин аҡса;* әлбиттә, етеш тормош менән йәшәгән йортта ике бөртөк шырпы менән ике тин аҡса бергә ятмаясаҡ.

Был ҡотһоҙ күренеш әҫәрҙең тәүге юлдарынан уҡ бында ярлы ғына түгел, ә бик ярлы, фәҡир кешеләр йәшәүе тураһында һөйләй. Геройҙарының портретын да яҙыусы алда бирелгән һүҙҙәр кеүек лексемалар аша һүрәтләй:

*– бер ҡатын; башындағы яулығының түбәһе туҙып тишелгән* (Сәрүи);

*– иҫке шарф ураған;бишмәт кейгән, алъяпҡыс бәйләгән;тишек бүрек, сабата кейгән* (Ниғмәтулла).

«Барлыҡ яраштыра, юҡлыҡ талаштыра», ти халыҡ мәҡәле. Яҙыусы геройҙарының телмәре аша ла быны асыҡ күрһәтә: *«Улар һөйләшкәндә, бер-береһе менән асыуланышҡан кеше кеүек, ҡаты-ҡаты, ҡысҡырып-ҡысҡырып һөйләшәләр ине».* Ҡаты, ҡысҡырып ҡына түгел, ә ҡаты-ҡаты, ҡысҡырып-ҡысҡырып. Лексемаларҙы ҡабатлау аша автор көсөргәнешлек картинаһы тыуҙыра, ғаиләлә мөнәсәбәттәрҙең ни сама түбән булыуына ишара яһай. Ир менән ҡатындың бер-береһенә кире мөнәсәбәтен улар ҡулланған лексемалар аша тойорға була: *әрәм тамаҡ бисәкәй; ҡәһәр һуҡҡан ирҙәр; шайтан; эшкинмәгән; күп лығырҙап ултырма; күҙең сыҡҡанмы ни; ас хәйерсе; яуыз; эт аҙғынына барған мин дурак; ҡара йөҙ; ләғнәт һ.б.*

Ваҡыт үтеү менән бер нимә лә үҙгәрмәүен, фәҡирлек дауам ителеүен автор артабан да асыҡ күрһәтә: *туҙып бөткән бер ашъяулыҡ; самауырҙың морон төбөн ҡамыр менән йәбештереп ултыра; тотҡаһы һынған; иҫке ҡалай һауыт.*

Сәйнүкте һүрәтләп, *«Сәйнүктең мороно ватылған, уға ҡалай уралған һәм тимер сыбыҡ менән ҡоршалған; ҡапҡастың тотҡаһы һынған, уға ағас ҡуйғандар; ҡыҫҡаһы, бик күп төрлө биҙәктәр менән биҙәлгәйне»*, – тип яҙа автор.

Фәҡир тормошта йәшәһәләр ҙә, геройҙарҙың «теге донъяла» булһа ла яңы, бәхетле тормошта йәшәргә өмөттәре бар. Мәҫәлән, ире эсеп үлгәс:

*– Иншалла, әхирәттә бирер. Муллалар әйтәләр икән, фәҡир кеше ожмахҡа ҡырҡ йыл алдан керә, ти, бай булып вафат булғандарға ҡарағанда, – тине Биби әбей.*

*– Һис булмаһа, әхирәттә бирһен инде, – тине Сәрүи.*

Һүҙлектәрҙә бирелеүенсә, фәкр. и. ғәр. Ярлылыҡ [3, 117]. Был һүҙ «ярлы» һүҙенә синоним да булып килә: ярлы (бедный, нищий, обездоленный) фәҡир, кеҫәһе йоҡа, аҡсаһыҙ, ярлы-ябаға, тормошо насар, мохтаж; үтә ярлы: ауыҙын асһа, үпкәһе күренә, һыйыр мөгөҙөнә элерлек нәмәһе юҡ; ярлы халыҡ: ярлы-ябаға, ярлы-ялпы, ярлы-япан [1, 259]. Ярлылар хыялланған тормош ысынбарлыҡта түгел, ә әхирәттә көтә. Әхирәт. и. ғәр. Теге донъя [3, 136].

Әҫәрҙәге геройҙарҙың исеме лә үҙенсәлекле. Мәҫәлән, *Сәрүи, Нигмәтулла, Биби әбей, Сәйфетдин ҡарттың улы Хәйбулла, Саҙрый бай, Әхмәди ағай, Фатима, Яҡуп ағай менән Ғәни ағай, Шакир ҡарт, Әхмәтгәле.*

Сәрүи и., ғәр. Артыш япраҡлы мәңге йәшел көньяҡ ағасы [3, 104]. Сәрүи, ошо ағас кеүек «йәшәреп», икенсегә иргә сыға.

XX быуат башында телдә варваризмдар ҡулланыла башлай:

*– Шту смиутся?*

*Нигмәтулла уны күрмәгәйне. Ул бер сирек сәй, ярты ҡаҙаҡ шәкәр, бер ҡаҙаҡ керәндил алып ҡайтты.*

*– Инде, инәй, беҙ икебеҙ бер-беребеҙгә буласаҡ кеше, беҙ бер-беребеҙҙе расходҡа батырырға тырышмабыҙ.*

М.Ғафури «Фәҡирлектә үткән тереклек» әҫәрендә ярлы тормошто ғына һүрәтләп ҡалмай, ә геройҙарының эске донъяһының ярлы булыуын да күрһәтә. Мәҫәлән, Сәрүи ире үлгәс, шундай һүҙҙәр һөйләй:

*– Әй, әбей, онотмаймы һуң инде. Үлгәне яҡшы булды. Әллә икенсерәк, йәшерәк кейәүгә барыр инем. Йәшәреп, рәхәтләнеп калыр инем.*

«Фәҡирлектә үткән тереклек» әҫәре XX быуат башын реалистик планда һүрәтләүе, үҙенсәлекле лексик берәмектәр ҡулланылыуы менән айырылып тора. Хәҙерге заман кешеһе лә уҡып, фәһем алырлыҡ классик әҫәр ул.

***Әҙәбиәт***

1. Башҡортса-русса синонимдар һүҙлеге. Башкирско-русский словарь синонимов / Төҙ. Усманова М.Ғ. – Өфө: Китап, 2011. – 264 бит.

2. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 3 том. Башҡорт совет әҙәбиәте (1917-1941 йылдар). – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. – 544 бит.

3. Бейешев Ә.Ғ. Башҡорт телендә йөрөгән ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре. – Өфө: Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, 2009. – 140 бит.

4. Ғафури Мәжит. Әҫәрҙәр дүрт томда, I том. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978. – 496 бит

5. Ризаитдин Фәхретдин, Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич / Төҙ. И.Ә. Шарапов. – Өфө: Китап, 2007. – 336 бит

6. Әхмәтйәнов К. Әҙәби тәнҡит: Мәҡәләләр. – Өфө: Китап, 2012. – 304 бит.


© **Арыҫланова М.С.**, 2018


**З. Т. Ахмадеева**,

*заведующий музеем М. Уметбаева, Кармаскалинский район, РБ*


## ОТРАЖЕНИЕ ДЕТСКИХ ВОСПОМИНАНИЙ В ТВОРЧЕСТВЕ М. ГАФУРИ

Мажит Гафури – один из ярчайших поэтов, который оставил неизгладимый след в башкирской и татарской литературах. Много поколений выросло на его творчестве. В его деятельности ярко выражены реальные события, где изображается быт людей того времени и описываются их чувства, переживания. Основное место в творчестве М. Гафури занимают его рассказы, стихотворения для детей. Кому, как ни самому писателю, пережившему все тяготы судьбы, описывать свое детство. Пройдя определенный этап жизненного пути, столкнувшись с чёрствостью, бедностью, испытав в детстве голод и

лишения, оставшись круглой сиротой, М. Гафури понимал, что человек не может быть один, что ему необходима моральная поддержка, доброе и чуткое отношение, друзья, родные. Он детально описывает каждое действие, событие, переживания несчастных детей в своих повестях и рассказах для детей «Бедняки», «Дети - сироты», «Голодный год, или Проданная девушка», «Жизнь, проведенная в нищете» и других.

Идеи башкирских просветителей М. Уметбаева, М. Акмуллы, русских – Н. И. Новикова, А. Н. Радищева, не могли не отразиться в творчестве Мажита Гафури с характерными направлениями просветительства. В своей первой книге «Сибирская железная дорога, или Положение нации» он призывает читателей к прогрессу. Писатель хотел приобщить свой народ к русскому образованию и культуре:

Вдоль дороги большие растут города,
А по рекам большие проходят суда,
И народ, на сибирской живущий земле,
Благодарен великой России всегда.

(Перевод А. Ойслендера)

Неоценимый вклад в развитие башкирской литературы внесла Октябрьская революция 1917 года. Меняется политика, устои человека. Угнетение простого человека остается как кошмарный сон. М. Гафури сквозь призму прошлого беспорядка начинает создавать произведения на воспоминаниях повзрослевшего человека. В рассказе «Как продавали наши вещи» имеется подзаголовок «В пору моего детства», который сам по себе говорит о том, что произведение автобиографическое. Подробное описание каждого события, детальное раскрытие поступков героев не оставляет ни одного читателя равнодушным. «Мне хочется сказать матери, что зря она занялась починкой: завтра ветхая ткань опять поползет. Но я молчу. Больше мне надевать нечего, рубашка у меня одна». Угнетение, недопонимание простого народа видно в этом рассказе со слов Хабир-агая:

«Самовар отобрали, казан отобрали, осталась одна коза. Как же мне жить с семьей, с ребятами?  Все лето я на чужих полях спину гнул и не мог заработать столько, чтобы сборы заплатить».

В рассказе «Батрак» описывается тяжелое детство мальчика и его семьи, который живет уже по новым устоям общества. Герой рассказывает о своем прошлом с горестью. Его семья целыми днями трудилась на городского бая Кабирова, не зная отдыха и хорошего слова от них. «Да будь ты чище воды в ручье, белей молока – все равно тебя очернят. Лучше умереть, чем служить, им, проклятым».

В послереволюционных произведениях М. Гафури, хоть и остро чувствуется осадок бедности, прошлых неудач, но в них есть и место позитивному настрою, хорошим устоям. Оптимизм ощущается уже в рассказе « Раньше было трудно – теперь легко». Эти произведения объединяют реальные события, которые изложены доступно и убедительно.

В рассказе «Актырнак» М. Гафури показывает жизнь народа во второй половине 20-х годов. Появление первого трактора в колхозе «Алга» и ощущения маленького мальчика описываются так: «Мальчик с удивлением уставился на большой и крепкий плуг, прицепленный к трактору. И обыкновенный плуг показался ему рядом с этим просто игрушечным. Ахмет был в восторге от трактора и от умелого парня». Описывается, как деревенский мальчик первый раз увидел город, автомашину, паровоз. Для него было забавным то, что несколько тонких лучинок продолговатого стеклянного, чуть больше куриного яйца пузырька разом осветили всю комнату. В рассказах «Старый охотник», «Дикий гусь» Мажит Гафури прививал любовь к природе, к птицам, к животным. В первом произведении рассказывается о том, как старый охотник идет в лес, по просьбе внука-сироты добывать Оленька, но увидев его, отказывается стрелять. Охотник пожалел мать-оленуху. В рассказе «Дикий гусь» мальчик помог раненому дикому гусю, который не смог улететь в теплые края. Он ухаживал, отдавал всю теплоту этой птице и отпустил ее на волю. В

этих произведениях М. Гафури показал гуманность людей к окружающему миру.

М. Гафури любил свой народ, свой родной край. В своем творчестве он показал подрастающему поколению круговорот событий прошлого, дал возможность детям самим дать оценку настоящему и сделать правильный выбор в будущем. Мастер слова, более подробно и детально описывая трудности своего детства, оставляет место для раздумий. Он призывает людей ко всему доброму и светлому.

***Литература***


1. Гафури. М. Избранное/ сост. Л.М. Камаева. – Уфа: Китап, 2008. – 320 с.
2. Ғафури М. Халыҡ шағиры хаҡында китап. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. – 224 бит.
3. Башкортостан: Краткая энциклопедия/гл. ред. Р. З. Шакур. – Уфа, 1996.


© **Ахмадеева З. Т.**, 2018

**О.В. Ахмадрахимова,**

*научный сотрудникМемориального дома-музея М.Гафури, г. Уфа*

## ЭЛЕМЕНТЫ НАРОДНОГО ТВОРЧЕСТВА В ПРОИЗВЕДЕНИЯХ М.ГАФУРИ

В разные исторические периоды литература и устная словестность вступали в разные типы взаимодействий, но их связь никогда не прекращалась. Ведь фольклор – это почва, на которой возникает и развивается письменная культура, источник, из которого она черпает свои первоначальные темы и формы. Образы, сюжеты, отдельные мотивы народного творчества в той или

иной степени отражаются в произведениях разных лет. Примеры этого можно выявить как в национальной литературе, так в книгах зарубежных авторов. В данной статье речь идет о творчестве М.Гафури, его вкладе в изучение и сохранение фольклора; произведениях, где использованы элементы устного народного творчества. Отдельное внимание уделяется варианту башкирского эпоса "Заятуляк и Хыухылу", записанному поэтом.

Первый народный поэт Башкортостана, писатель и баснописец Мажит Гафури относился с большим уважениям к устному народному творчеству. С детства он любил слушать рассказы, мунажаты отца, песни в исполнении сестер и такмаки деревенской молодежи [2, 216-218]. В пору работы в казахских степях, М.Гафури изучает фольклор местного населения. Поэт даже сочиняет уляны, следуя примеру казахских акынов [5, 3].

Интерес и любовь к устному народному творчеству сопровождают Мажита Гафури всю жизнь. Он с трепетом рассказывает о том, как слушал башкирские народные песни и легенды. При этом, поэт сравнивает себя с "кошкой, ждущей появления мыши" и отмечает, что "всей душой слушал дивный голос, подпевающий кураю, забывая обо всем на свете" [1, 162-163]. На неравнодушное отношение народного поэта к башкирским протяжным песням указывают и следующие его слова: "Мои башкиры один за другим исполняли мелодии "Кара юрга", "Уйдуряк", "Таштугай", "Ашкадар", "Тафтиляу", "Хакмар", "Коран юрга", "Кантоны". Их голоса, звучащие над озером, безмерно радовали меня; но вспоминая о том, что вскоре эти дивные песни исчезнут… я сильно переживал" [Там же]. Как видим, поэт показывает не только свое трепетное отношение к народным напевам, но и проявляет заботу о сохранении образцов народного творчества.

В 1909 году, после того как побывал среди башкир, живущих в окрестностях озера Аслыкуль, Мажит Гафури записал и опубликовал народный эпос «Заятуляк и Хыухылу». Данный вариант впервые был издан в 1910 году в Уфе под названием «Заятүләк берлә Сусылу». Имеется информация о том, что

М.Гафури слышал и мелодию «Заятуляк» [Там же]. По некоторым источникам, поэт записал эпос из уст сэсэнов [5, 3]. Однако, в предисловии М.Гафури говорит о том, что переписал текст из рукописной книги [1, 162-163]. Отметим, что в современных условиях в регионе озера Аслыкуль так же зафиксирован рукописный вариант названного эпоса [1, 76-92]. При сравнительном анализе двух текстов выявилось, что данные записи совпадают почти дословно, имеются лишь небольшие отличия в звучании отдельных слов.

Рассказывая о башкирском сказании, М.Гафури называет и причины, по которым решился его издать: напевность мелодии “Заятуляк”, ее древность; вера населения в то, что описываемые в эпосе события происходили в реальности, красота озера Аслыкуль и др. [1, 162-163]. На наш взгляд, поэта привлекла и своеобразность данного варианта сказания. Он имеет несколько значительных моментов, отличных от остальных записей. Остановимся на них вкратце.

В варианте эпоса «Заятуляк и Хыухылу», записанном М.Гафури, герои изображаются в возвышенно-романтическом плане, активно действует помощник главного героя, Заятуляк посещает подводный мир два раза и др. Подробно описывается камень, на котором сидела водяная дева и подчеркивается, видимо самим переписчиком, что этот камень сохранился по сей день. Действительно, информанты и сегодня рассказывают о данном топониме, даже показывают место его расположения [ПМА, 2012 – 2014].

Глубокое знание фольклора, любовь к нему нашли яркое отражение в творчестве М.Гафури. В его баснях легко узнаются герои сказок [5, 3]. Впечатленный народными эпосами М.Гафури пишет рассказы «Ханская дочь Алтынсэс» («У Агидели»), «Девушка-булгарка Айсылу» и др. [3, 133-134]. Примечательно, что в произведении «Ханская дочь Алтынсэс» (У Агидели) имеются значительные параллели с народным эпосом “Заятуляк и Хыухылу”. В частности, при описании главных героинь можно уловить созвучные моменты: и Хыухылу, и Алтынсэс живут вдали от людских глаз, их можно встретить

только возле водоема. Уточняется время их выхода на берег. Обе девушки – длинноволосые красавицы, дочери ханов. Они обладают бессчетными драгоценностями, охраняемыми джинами. В обоих текстах подробно описывается местность, называются конкретные топонимы.

Исходя из всего вышесказанного, можно сделать следующие выводы. М.Гафури был хорошо знаком с устным народным творчеством еще с раннего детства. Он внес определенный вклад в его сохранение и популяризацию, используя в своих произведениях отдельные фольклорные элементы. Вариант эпоса “Заятуляк и Хыухылу”, записанный и изданный поэтом, имеет ряд своеобразных моментов. Значительно, что в предисловии к данному изданию приводятся интересные наблюдения М.Гафури о жизни демских башкир в начале XX века. Данный материал имеет большое значение в башкирской фольклористике и требует отдельного изучения.

***Литература***


1. Гафури М. Сочинения. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1953. Том 2. – 386 с.
2. Гафури М. Сочинения. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1956. Том 5. – 384 с.
3. Кунафин Г.С. Идейно-художественные особенности башкирской литературы начала XX века / Г.С. Кунафин.– Уфа: Гилем, Башк. энцикл., 2016. – 368 с.
4. Полевой материал автора. 2012 – 2016 гг. // Личный архив.
5. Рамазанов Г. Мажит Гафури и башкирское народное творчество (к 100-летию со дня рождения М.Гафури) // Совет Башкортостаны. – 26 июня 1980 г. (на башк. яз.).
6. Султангареева Р.А. Народ рассказывающий свой эпос не исчезнет / Р.А. Султангареева // Агидель. – Уфа, 2012. – № 10. – С. 76 – 92. (на башк. яз.).


© **Ахмадрахимова О.В.**, 2018

**М.А. Ахметова**,
*сотрудник научной библиотеки ФИЦ «Казанский научный центр Российской академии наук»; научный сотрудник Центра письменного и музыкального наследия «Институт языка, литературы и искусства имени Г. Ибрагимова АН РТ» ГНБУ «Академия наук Республики Татарстан», г. Казань*

## СБОРНИК М. ГАФУРИ «АЧЛЫК ТЫРНАГЫНДА» («В КОГТЯХ ГОЛОДА») В ЛИТЕРАТУРНОМ ПРОЦЕССЕ 1920-30-Х ГГ.

Сборник «Ачлык тырнагында» («В когтях голода») впервые был опубликован в 1923 г. в Башкортостане в Уфимском издательстве «Башкнига», об издании его сообщает газета «Эшче» («Рабочий»), орган Центрального и Казанского комитетов РКП (б), от 19 апреля. Затем, в 1929 г., увидел свет в издательстве Татполиграфа г. Казани. В нём собраны все поэтические произведения М. Гафури на голодную тематику: стихотворения «Ач» («Голодный») (1921), «Сулган гөлләр» («Увядшие цветы») (1921), «Соңгы минутта» («В последнюю минуту») (1921), «Җылыйлар» («Плачут») (1922), «Сүнделәр» («Угасли») (1922), «Алтын тәре, бәрхет палас» («Золотой крест, бархатный ковер») (1922) и поэма «Кеше ашаучылар» («Людоеды») (1922). Издание было напечатано по заказу Всесоюзного центрального комитета Нового тюркского алфавита (ВЦК НТА) тиражом 5 тысяч экземпляров. Все собранные денежные средства от продажи были направлены в помощь голодающему населению [8, 110]. Горе миллионов голодных, брошенных на произвол судьбы крестьян-хлеборобов, становится личным горем поэта. Желание помочь населению отразилось в публицистических статьях, остро откликнулся Гафури и в поэтических произведениях. Сборник «В когтях голода» был «написан под влиянием этого трагического бедствия» [2, 28].

Тема голода в литературе в разные времена оценивалась с разных позиций. Вышеназванный сборник также не был обделен вниманием

литературоведов и критиков. В 1920-30-е гг. в стране и республике, в литературе господствовали вульгарно-социологические трактовки художественных произведений, которые привели к схематизму историко-литературного процесса. В результате, критики-литературоведы искали отражение классовой психоидеологии в персонажах, общих политико-экономических категорий в произведениях. Анализировать проблему голода в историко-литературном ключе и сказать всю правду о 20-х годах XX века в эти годы было невозможно, да и чревато для литературоведов последствиями. Примером тому является вводная статья Х. Хисматуллина к избранным произведениям М. Гафури [12]. В ней автор отмечает, что в описании трагедии голода в поэме поэт прибегнул к мотиву жалости, показал силу сокрушительного голода, но не отобразил самоотверженную помощь советской власти, моменты, когда правительство помогало населению семенами, кормило голодающих, спасало детей, открывая детдома и столовые. На наш взгляд, в сборнике «Ачлык тырнагында» М. Гафури дал свою оценку происходящего через художественные образы, вписывая их в историко-психологический контекст событий, показал трагизм и ужас душераздирающего голода и дал понять, к чему привела политика большевиков. Продразверстка ограбила крестьянство республики, «…дававшее 22 миллиона пудов хлеба по разверстке в 1919-20 гг., кормившее целых полтора года всю западную армию Советской Федерации, но, затем, испытавшее на себе тяжелый кошмар голода 1921 года с его людоедством» [11, 33].

В 50-70-е годы XX столетия анализ творчества писателей давался с позиций соцреализма, которые также не давали возможности разностороннего и объективного анализа произведений. В ряде работ советских лет, как и в случае с повестью «Люди» Г. Ибрагимова, делался акцент на натурализме произведения, в чём усматривались негативные проявления в развитии поэзии М. Гафури. Здесь следует упомянуть высказывания Х. Усманова и Р. Башкурова. Оба они обвинили автора в натурализме. Наличие в поэме

натуралистических картин голода 1921 года, по мнению Башкурова, даёт основание думать о некоторых трудностях роста в поэзии М. Гафури послеоктябрьского периода. «Автору недостает здесь необходимого отбора жизненного материала и раскрытия социальных корней общественных явлений. Поэт в тот момент еще не был готов к эпическому, широкому охвату новых, грандиозных событий, происходивших в стране, хотя в лирике он уже дал превосходные образцы революционной поэзии» [1, 181].

Почва для голода 1921 года создавалась последовательно: первая мировая и гражданская войны, неурожайные 1920-е г., суровые погодные условия 1921 г. и, конечно же, ожесточенная продразверстка. Главным фактором страшного голода 1921 года, унесшего в одной только Татреспублике больше полумиллиона жизней, является политика советской власти, а не наследие царизма, как писал Х. Усманов [3, 89]. Даже спустя почти три десятка лет, в 1982 году, позиция Х. Усманова осталась идентичной предыдущей оценке, и, по его мнению, Гафури должен был раскрыть истинные причины голода, указать на империализм, как на виновника бедствия [4, 25].

Вполне понятно и объяснимо, что сборник М. Гафури «В когтях голода», не упоминается в биобиблиографическом справочнике «Писатели Советского Татарстана» (1957). Позднее, в 1970 году, в переработанном издании автор справочника А. К. Гиниятуллина ограничивается лишь указанием его в списке основных изданий писателя.

В 1990-е годы, после распада СССР, в научных трудах и на страницах периодической печати появляются иные оценки творчества писателя, в которых говорится и о вышеупомянутом сборнике. Например, по мнению Ф. Ибрагимовой, все произведения М. Гафури на тему голода 20-х гг. XX столетия, это публицистические статьи и поэтические произведения, «дают возможность полноценно отразить деятельность поэта» [5, 124]. В отличии от стихотворений на «голодную» тематику в поэме «Людоеды» автор «... с глубоким сопереживанием описывает трагедию голодного года, гибели

народа» [6, 52]. В его стихотворениях о голоде 1920-х гг. звучит мотив ребенка и матери, идет речь психологическом состоянии голодающих, особенно детей, определяется авторский взгляд на происходящее. По мнению литературоведа З.З. Рамеева, в них отражена трагедия, пережитая татарским народом в голодные 1921-22 гг. [9]. Продолжение голодной тематики и наиболее яркое художественное воплощение проблемы мы видим в поэме «Людоеды», которая, на наш взгляд, является вершиной творчества поэта.

Поэма является предметом исследования и в научных работах современных учёных. Например, в кандидатской диссертации З. Г. Саляховой [10] основой поэмы также оказывается пресловутый натурализм, только в другом ключе. Наряду с повестью Г. Ибрагимова «Люди», автор-исследователь анализирует поэму М. Гафури «Людоеды», отмечает общность при описании психики людоедов. По мнению диссертанта, в них используется биологический вид натурализма, наполненный глубоким психологизмом. Среди работ о творчестве М. Гафури, необходимо выделить статьи Ф. И. Габидуллиной и Р. А. Мингазовой, Ф. Х. Миннуллиной, И. К. Фазлетдинова. В основе их статей лежит проблемно-тематическое и образное своеобразие поэмы «Людоеды» [7].

Сборник М. Гафури в полной мере не отражен в справочных и энциклопедических изданиях нашего времени. Учитывая сегодняшний бесцензурный хаос в стране и науке, это вызывает удивление. Перечисляя прозаические и поэтические произведения писателя на страницах краткой энциклопедии «Башкортостан» (1996) авторы не сказали ни слово об изданном сборнике. Такая же тенденция сохраняется в шеститомной «Башкирской энциклопедии», изданной в Уфе в 2006 году. В статье Т.А. Кильмухаметова публицистика и поэтические произведения о голоде 20-х гг. XX столетия не были перечислены среди творений Гафури. В единственном на сегодняшний день на татарском языке биобиблиографическом справочнике «Наши писатели» (2009) составители Р.Н. Даутов и Р.Н. Рахмани ограничились лишь упоминанием произведения в списке изданий автора.

***Литература***

1. Башкуров Р. Маджит Гафури // История татарской советской литературы. – М.: Изд-во «Наука», 1965. – С. 171-191.

2. Гафури М. Тәрҗемәи хәлемнән өземтәләр // Гайнуллин М. Х., Вәзиева Җ. Г. Татар әдәбияты. ХХ йөз. II кисәк. – Казан: Таткнигоиздат, 1954. – Б. 21-29.

3. Госман Х. Егерменче еллар татар поэзиясе / Х. Госман. – Казан: Казан университеты нәшрияты, 1964. – 397 б.

4. Госман Х. Олы юлга чыкканда / Х. Госман. – Казан: Татар. кит. нәшр., 1982. – 256 б.

5. Ибрагимова Ф. М. Гафуриның Институт архивындагы кулъязмалары // Мәҗит Гафури. Тууына 100 ел тулуга багышланган фәнни конференция материаллары. – Казан: ИЯЛИ, 1981. – Б. 124-132.

6. Ибраһимова Ф. М. Гафуриның «Кеше ашаучылар» поэмасы // Әдәби мирас: Альманах. – Казан: Татар. кит. нәшр., 1991. – Б. 52.

7. Мәҗит Гафури: әдип һәм халык язмышы. Мәҗит Гафуриның тууына 130 ел тулуга багышланган Бөтенроссия фәнни-гамәли конференциясе материаллары. – Казань: ИЯЛИ, 2010. – 347 б.

8. Рамазанов Г. З. Мажит Гафури: Очерк жизни и творчества / Г.З. Рамазанов. – М.: Сов. Россия, 1980. – 160 с.

9. Рәмиев З.З. Халык күңелен, милләт хәлен аңлап язган әдип / З.З. Рәмиев // Шәһри Казан. – 2000. – 4 авг.

10. Сәлахова З. Г. Г. Ибраһимов иҗатында натурализм // Г.Ибраһимовның иҗат дөньясында. – Казан: ИЯЛИ, 2012. – Б. 103-234.

11. Султан-Галеев М. Татарская автономная республика / М. Султан-Галеев // Жизнь национальностей. – М., 1923. – Кн. 1. – С. 33.

12. Хисмәтуллин Х. Мәҗит Гафуриның иҗаты // Мәҗит Гафуриның сайланма әсәрләре. – Казан: Татиздат, 1932. – Б. 1-28.

© **Ахметова М.А.**, 2018

**Л.И. Бакиева,**
*Икенсе һанлы гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Октябрьский ҡ.*

## МӘЖИТ ҒАФУРИ – БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ МӘҪӘЛ ЖАНРЫНА НИГЕҘ ҺАЛЫУСЫ

Мәжит Ғафури ижадын өйрәнеү тағы бер тапҡыр шул хәҡиҡәтте раҫлай: ысын талант һәр ваҡыт күп яҡлы була. Был фекерҙе шағирҙың мәҫәл мираҫы ҡеүәтләй. Мирсалих Биксурин, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Сафуан Яҡшығолов кеүек әҙиптәрҙең бармаҡ менән генә һанарлыҡ мәҫәлдәрен иҫкә алмағанда, башҡорт әҙәбиәте тарихында Мәжит Ғафуриға тиклем мәҫәл традициялары булманы тиерлек. Шуға ла беҙ Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙы был жанрға нигеҙ һалыусы тип тә иҫәпләй алабыҙ.

М.Ғафуриҙы рус әҙәбиәтенең мәҫәл оҫтаһы И.А. Крылов менән бер рәткә ҡуйырға мөмкин. Күп кенә мәҫәлдәрендә Мәжит Ғафури традицион ситуацияға үҙ ҡарашынса аңлатма, көнкүреш биҙәге бирә. Бына, мәҫәлән, уның «Ҡарт менән әжәл» тигән мәҫәле. Ошондай сюжетҡа яҙылған әҫәрен И.А. Крылов «Крестьянин и смерть» тип атаған. Тәү ҡарашҡа бер үк сюжетҡа яҙылған мәҫәлдәрҙең исеме генә үҙгәргән кеүек. Иғтибарлабыраҡ ҡараһаң, И.А. Крылов мәҫәлендә төп урында социаль мотив – крәҫтиәндең баярҙарға, оброкка зарланыуы тора ( Нуждаются во всем: к тому жена и дети, а там подушное, боярщина, оброк ), Мәжит Ғафури мәҫәлендә был сюжетта йәшәү һәм үлем, хәйерселектә үткән ғүмер хаҡында уйланыу фәлсәфәһе өҫтөнлөк итә. Уның мәҫәлдәренең күпселегенең идея-тематик йүнәлешен дидактикаға нигеҙләнгән мораль-әхлаҡ, асыҡтан-асыҡ өгөт-нәсихәт, кәңәш ауаздары тәшкил итеп, шағир әҙәпһеҙлеккә ҡаршы сыға, әҙәбиәтебеҙҙәге мәғрифәтселек традицияларын дауам итә. «Йүләр һәм ынйы», «Кәзә менән төлкө» мәҫәлдәрендә Мәжит Ғафури томана, аңһыҙ кешеләрҙе шелтәләй. «Тауыҡ һәм өйрәк», «Ике ҡаҙ менән тәлмәрйен» мәҫәлдәрендә иһә үҙҙәренең ахмаҡлығы арҡаһында яфа күргән

бәндәләрҙән әсе көлә. Уларҙың тәүгеһендә һүҙ, өйрәк ыңғайына күлгә сумып, саҡ тере ҡалған тауыҡ, икенсеһендә, кәңәш-нәсихәтте тыңламайынса кәрәкмәгән ерҙә ауыҙ асып үлгән тәлмәрйен хаҡында һүҙ бара. "Кеше артынан эйәрһәң дә, белеп эйәр", йәки: "Шул ваҡытта эйәреүҙән файҙа тейәр", "һүҙҙе лә урынында һөйләү кәрәк".

Мәжит Ғафуриҙың ҡайһы бер мәҫәлдәрендә ярылып ятҡан ғәҙәти өгөт-нәсихәт артына йәмғиәттәге кәмселектәргә ҡарата әсе сатира йәшеренгән. Уларҙа социаль социаль тигеҙһеҙлек, ғәҙелһеҙлек мотивтары асыҡ сағыла. Шағирҙың донъяуи ҡараштары нигеҙендә йәмғиәттең байҙарға һәм хәйерселәргә, иҙеүселәргә һәм иҙелеүселәргә бүленгән булыуын аңлау ята. Ябай халыҡты шағир рухи һәм матди байлыҡ табыусы көс итеп данлай. Әйтәйек, "Ике себен" мәҫәлендә автор маҡтансыҡ себенгә ҡаршы көн буйына һабан һөрөп ауылға ҡайтып килеүсе үгеҙ образын үҙәккә ҡуя.

Мәжит Ғафуриҙың мәҫәл мираҫында сәйәсәткә нигеҙләнгәндәре лә етерлек. Шундай әҫәрҙәрҙең береһе – «Һарыҡты кем ашаған» мәҫәле. Бында ла көсһөҙ, һис бер ғәйепһеҙ ҡуян бүре, төлкө кеүек януарҙарҙың ҡорбаны булып ҡала: "Бүре кеүек йыртҡыстарға киңдер йыһан, һәр ҡайҙа золом күрер меҫкен ҡуян". Шағирҙың сәйәси сатираһының юғары баҫҡысы итеп уның «Ҡоштарҙың батша һайлауы», «Ҡара йылан менән тәлмәрйендәр батшаһы» мәҫәлдәрен алырға мөмкин. Уларҙың йәмғиәтендә кем генә батша булмаһын – Ҡарғамы, Торнамы йәки Ыласынмы – халыҡ өсөн бер ниндәй ҙә яҡшылыҡ булмаясаҡ, сөнки уларҙың һәр береһе үҙенең генә мәнфәғәттәрен ҡайғырта, үҙе өсөн генә йәшәй. Аҙаҡ был кейек-ҡоштар тик батшаһыҙ ғына йәшәргә булалар. Шулай итеп, ҡәләм оҫтаһы үҙенең мәҫәлдәре аша Мәжит Ғафури батшалыҡ иллюзияһын юҡҡа сығара һәм шул рәүешле монархик йәмғиәткә үҙенең ҡарашын белдерә. "Ҡара йылан менән тәлмәрйендәр батшаһы"нда әҙип Марокко әмире миҫалында һатлыҡ батшаларҙың ысын йөҙөн асып һала. «Өйрәк менән Ыласын» мәҫәлендә иһә Ыласын образында Англия империализмының баҫып алыу сәйәсәтенә ҡаршы сыға. Шулай итеп, үҙенең мәҫәлдәрендә Мәжит

Ғафури күп кенә мораль-әхлаҡ, социаль-көнкүреш, сәйәси мәсьәләләр күтәрә. Әйтелгәндәрҙән сығып, Мәжит Ғафуриҙың мәҫәлдәр өлкәһендәге эшмәкәрлеген XX быуат башҡорт әҙәбиәтендә айырым бер әҙәби-эстетик күренеш итеп баһаларға мөмкин. Шуға ла ул беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙә мәҫәл жанрына нигеҙ һалыусы булараҡ баһаланырға хаҡлы.


***Әҙәбиәт***

1. Академический словарь башкирского языка в десяти томах. Под редакцией Ф.Г.Хисамитдиновой. – Уфа: Китап, 2011-2013.
2. Ғафури М. Әҫәрҙәр. Т.3. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1955. – 324 б.
3. Ғафури М. Күңелгә: Шиғырҙар. –Өфө, 2005. – 200 б.


© **Бакиева Л.И.**, 2018

**Л.В. Бухмастова**,

*заведующая модельной детской библиотекой № 44 г. Уфы*

## ГАФУРИЙСКИЕ ЧТЕНИЯ КАК ФОРМА ПОПУЛЯРИЗАЦИИ ПРОИЗВЕДЕНИЙ МАЖИТА ГАФУРИ ДЛЯ ДЕТЕЙ

В литературном наследии Мажита Гафури достаточно большое место занимают и произведения для детей. Одним из первых был сборник детских стихов «Милли шигырлар» («Национальные стихи»). В соавторстве с поэтом Ш. Ахмадеевым в 1941 году М.Гафури пишет и публикует букварь под названием «Беренче мугаллим» («Первый учитель»), предназначенный для мусульманских учебных заведений. Учебный материал разбит на тридцать уроков, что позволяет учащимся постепенно овладевать орфографическими навыками. Также Мажит Гафури издал книгу для чтения «Азат мәктәб» («Свободная школа»), предназначенная для учащихся начальных классов. В

своих произведениях, обращённых юному поколению, Мажит Гафури воссоздал живые, запоминающиеся картины дореволюционной жизни народа.

Обычно в произведениях Мажита Гафури повествование ведётся от первого лица. Манере писателя свойственна детская непосредственность. В своих произведениях автор как бы смотрит на мир детскими глазами. Именно это и привлекает современных детей в его произведениях, они их читают с большим удовольствием.

Это хорошо прослеживается и в работе детских библиотек, которые наряду с музеями также являются центрами пропаганды творчества Мажита Гафури. Уже много лет Централизованная система детских библиотек города Уфы работает по программе «Мира не узнаешь, не зная края своего», которая ориентирована на воспитание у детей и подростков бережного отношения к литературному наследию родного края. В рамках этой программы в модельной детской библиотеке № 44 ежегодно проходят Гафурийские чтения «Читаем Мажита Гафури».

Чтения проводятся совместно с Мемориальным музеем Мажита Гафури, в них принимают участие читатели библиотек, ученики школ городов и районов Республики Башкортостан. В 2017 году прошли II республиканские Гафурийские чтения, организованные Централизованной системой детских библиотек города Уфы и модельной детской библиотекой №44. Чтения проводились совместно с общедоступными библиотеками Республики Башкортостан, творческими объединениями, организациями, работающими с детьми и молодёжью. Цель проведения Гафурийских чтений – приобщение подрастающего поколения к литературному наследию башкирского писателя Мажита Гафури, увеличение читательской аудитории, интересующейся чтением башкирской литературы, объединение усилий организаций работающих с детьми и молодёжью. Участники чтений сами выбирают произведения Мажита Гафури, которые прозвучали на мероприятиях,

организовали книжные выставки, посвящённые жизни и деятельности поэта, выставки творческих работ участников.

За время проведения чтений в них приняло участие 63 библиотеки, 7 общеобразовательных школ из разных городов и районов Республики Башкортостан. Участниками стали 1563 юных читателя в возрасте от 7 до 16 лет. Самые активные участники чтений – Бижбулякский, Ермекеевский, Белебеевский, Уфимский, Миякинский районы, города Стерлитамак, Октябрьский, Уфа. Во II республиканских Гафурийских чтениях приняли участие 11 районов, среди которых Гафурийский, Янаульский, Учалинский, Архангельский, Кушнаренковский, Зиянчуринский. В Уфе участников чтений объединил телемост, который прошёл между модельной детской библиотекой №44, одним из организаторов Гафурийских чтений, и детской библиотекой №42 (Микрорайон Инорс). Благодаря телемосту, ребята лицея «Содружество» №106 и Башкирской гимназии №140 им. Зайнаб Биишевой, смогли увидеть, как проходят чтения в других библиотеках города. Участники встречи совершили виртуальное путешествие по Мемориальному дому-музею Мажита Гафури, которое для них провела заведующая музеем Низаметдинова Светлана Сабирьяновна. Одновременно по всей Республике Башкортостан звучали прекрасные строки Мажита Гафури. Его любовь к родному краю отозвалась в сердцах ребят. Они с особым выражением читали его стихи.

Проведение республиканских Гафурийских чтений показало, что творчество Народного поэта Башкортостана Мажита Гафури интересно и актуально для современного подрастающего поколения.

### *Литература*

1. Гафуров М. Он песню поднял высоко, как знамя: [о творчестве народного поэта Мажита Гафури] / М. Гафуров // Истоки: информ.- публ. еженед. — Уфа., 2010 .— 20 окт. (№ 42) .— С. 14 - 15.

2. Грахов Н. Гафурийские чтения в Уфе / Н.Грахов // Истоки. – 2015. – 24 июня. – С. 3.

3. Камаева Л. Мажит Гафури в памяти народа / Л. Камаева // Уфа : страницы истории / [сост. М. В. Агеева].— Уфа, 2014 .— С. 135-142.

4. Кунафин, Г. Творчество, прошедшее испытание временем : ( 125 лет со дня рождения народного поэта Башкортостана Мажита Гафури) // Ватандаш : ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм нәфис айлыҡ журн. — Өфө., 2005 .— № 8. — С. 161 - 175.

5. Леонидов А. Мажит Гафури в контексте поэтической эпохи: [о творчестве поэта Мажита Гафури] // Ватандаш: ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм нәфис айлыҡ журн. — Өфө, 2005.— № 10. — С.137 - 145 .

6. Лукьянов А. Мажит Гафури как мыслитель // Ватандаш: ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм нәфис айлыҡ журн. — Өфө., 2005. — № 7 .— С. 186-189.

7. Узиков Ю. Хотя в музее давно и неподвижно лежит его перо: произведения народного поэта Башкортостана по сей день активно востребованы читателями: [к 125-летию Мажита Гафури] // Республика Башкортостан: Респ. обществ.- полит. газ. — Уфа., 2005. — 28 июля.

8. Шарова Е. "Далек от чванства, я люблю сидеть у вашего огня..." : жизнь поэта смотрит на нас с фотографий обновленного музея его имени: [к 125-летию Мажита Гафури] // Республика Башкортостан: Респ. обществ.- полит. газ. — Уфа, 2005. — 30 сент.

© **Бухмастова Л.В.**, 2018

**Бүләкова Ғ.М.**,
*филол. ф. к., М. Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы ғилми хеҙмәткәре,
Өфө ҡ.*

# МӘЖИТ ҒАФУРИҘЫҢ МЕМОРИАЛЬ ЙОРТ-МУЗЕЙЫ: ҮТКӘНЕ ҺӘМ БӨГӨНГӨҺӨ

2018 йылдың 10 ғинуарында ойошторолоуына 70 йыл тулған Мәжит Ғафуриҙың мемориаль музейының ярайһы уҡ бай һәм фәһемле тарихы бар. Билдәле булыуынса, ул 1917 йылғы Октябрь революцияһынан һуң Советтар Союзында асылған иң тәүге әҙәби музейҙар иҫәбенә инә. Музейҙың ойошторолоу тарихына килгәндә, түбәндәгеләрҙе билдәләргә кәрәк.

1923 йылда Башҡортостан Хөкүмәте, революцияны "Ҡыҙыл байраҡ" шиғыры менән ҡаршылаған талантлы ҡәләм оҫтаһы Мәжит Ғафуриҙың ижади эшмәкәрлегенең 20 йыллығын киң билдәләп үтеү маҡсатында, төрлө саралар үткәреү тураһында план һәм ҡарар ҡабул итә. Унда "Мәжит Ғафуриға Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының халыҡ шағиры исемен бирергә, персональ пенсия тәғәйенләргә, китаптарын нәшер итергә" тигән пункттар ҙа була. Башҡортостан Хөкүмәте шулай уҡ әҙипкә Гоголь урамында урынлашҡан йортто бүләк итә. (Заманына күрә был, әлбиттә, бик ҙур бүләк була. Беҙҙең заманда халыҡ шағиры йә яҙыусыһы исемен алыусыларҙың төшөнә лә инмәй бындай бүләк!). XIX быуаттың 60-сы йылдарында төҙөлгән был бер этажлы ҙур ғына йорт Петр Филиппович Гиневский тигән дворян ғаиләһенең шәхси мөлкәте иҫәпләнгән була. Революциянан һуң йорт хөкүмәт ҡарамағына күсә, һәм унда 1917–1923 йылдарҙа балалар туберкулез диспансеры урынлаша. Мәжит Ғафури үҙенә бүләк ителгән был йортта 1923 йылдан алып вафатына, йәғни 1934 йылға, тиклем йәшәй. Шағир вафат булғас, уның улы Әнүәр Ғафуриҙың ғаиләһе менән бергә рәттән, Башҡортостандың тағы ла бер буласаҡ халыҡ шағиры – Сәйфи Ҡудаш та ҡатыны һәм ике ҡыҙы – Сөйөмбикә һым Венера менән 1935–1948 йылдарҙа ошонда йәшәй. Мәшһүр йырсыбыҙ –

Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Фәриҙә Ҡудашева ла ҡыҙы Ренара менән бер нисә йыл ошо йортта йәшәп китә.

Шағир вафат булып, ете йыл үткәс, 1940 йылда республика йәмәғәтлеге халыҡ шағирының 60 йыллыҡ юбилейын үткәрергә йыйына. Ошо айҡанлы, Башҡортостан Хөкүмәте һүҙ барған йортта Мәжит Ғафуриҙың музейын ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул итә. Әммә был изге ниәтте тиҙ генә тормошҡа ашырырға насип булмай. Шағирҙың улы – журналист, яҙыусы Әнүәр Ғафури үҙенең төрлө шарттарын, талаптарын ҡуя, башҡа сәбәптәр ҙә килеп тыуа. Ул арала Бөйөк Ватан һуғышы башланып китә. Шулай ҙа 1942 йылда музей ойошторолоп, ул бөтөнләй икенсе урында – БАССР Мәғариф министрлығына ҡараған Өфө революция музейының береһендә урынлаша. Музей штатында 4 кеше тороп, директор итеп Тимский фамилиялы бер урыҫ кешеһе тәғәйенләнә. Һуғыш тамамланғас, бер төркөм зыялылар Гоголь урамындағы йортта шағирҙың мемориаль йорт-музейын асыу мәсьәләһен тағы ла күтәреп сыға. Был юлы ла мәсьәлә тиҙ генә хәл ителмәй әле. Аптырағас, инициатив төркөмгә, ярҙам һорап, хатта “Крокодил” журналына (ә ул ваҡытта бөтә матбуғат баҫмаларының да бер ойошмаға – партияның Үҙәк Комитетына ҡарағаны билдәле бит инде) мөрәжәғәт итергә тура килә. Бары шунан һуң ғына боҙ урынынан ҡуҙғала һәм, ниһайәт, 1948 йылдың 10 ғинуарында шағир йәшәгән йортта уның мемориаль йорт-музейы асыла [4].

Музейҙың тәүге директоры булып Әклимә Әхмәтдин ҡыҙы Мостафина эшләй. Мәжит Ғафури ижадына мөкиббән киткән Әклимә апай 1893 йылда хәҙерге Ҡариҙел районы Подлуб ауылында тыуған була. Һамар педагогия институтының филология факультетын тамамлағас, байтаҡ йылдар Өфө китапхана техникумында рус, татар, башҡорт телдәре һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Халыҡ мәғарифы өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн ул СССР-ҙың иң юғары наградаһы – Ленин ордены менән бүләкләнә.

Артабан йорт-музейҙың директоры булып 1950–1973 йылдарҙа Вафина Ҡорбанбикә Мөхәмәтвафа ҡыҙы, унан һуң Ташбулатов Риф Шәфғәт улы (1973–

1983 йй.), 1983–2004 йылдарҙа Әлмира Вафир ҡыҙы Шәрипова, 2006–2011 йылдарҙа журналист, БР яҙыусылар һәм журналистар союзы ағзаһы Фәнис Фәнис улы Фәтиховтар эшләй. 2011 йылда музейҙың мөдире итеп Светлана Сабирйән ҡыҙы Низаметдинова тәғәйенләнә.

Үҙенең 70 йыллыҡ йәшәү дәүерендә Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы, нәфис әҙәбиәт, йыр-моң һәм шағир ижадын һөйөүселәрҙе, ҡәләм тирбәтеүсе йәштәрҙе һәм билдәле яҙыусыларҙы, әҙәбиәт белгестәрен үҙ янына туплап, Өфө ҡалаһының ғына түгел, тотош республикабыҙҙың билдәле әҙәби-мәҙәни үҙәктәренең береһенә әйләнә. Бында дөйөм күҙәтеү һәм тематик характерҙағы экскурсиялар үткәрелеүҙән тыш, Башҡортостандың тәүге халыҡ шағирының тормошо һәм ижады, шулай уҡ республикалағы әҙәби тормош, милли әҙәбиәтебеҙ тарихы, теге йәки был ҡәләм оҫтаһының ижадына арналған лекциялар, осрашыуҙар, түңәрәк өҫтәлдәр, юбилей кисәләре үткәрелә.

Әлбиттә, музейҙың традицияларына нигеҙ бер бөгөн йә кисә генә һалынмаған, уның да үҙ тарихы – тәжрибә туплау, эҙләнеүҙәр осоро булған. Әйтәйек, үткән быуаттың 50–60-сы йылдарында М. Ғафуриҙың ижадын һәм тормош юлын халыҡҡа еткереү, пропагандалау эшендә музей хеҙмәткәрҙәре, әҙәбиәт белгестәренән тыш, шағирҙың улы – яҙыусы, оҙаҡ йылдар Башҡортостан радиоһында эшләгән журналист, лектор-пропагандист Әнүәр Ғафури ҙа (1910–1977) бик әүҙем ҡатнаша. Ул атаһы тураһында ваҡытлы матбуғат баҫмаларында мәҡәләләр менән сығыш яһай, республика радиоһы аша тапшырыуҙар ойоштороу менән бергә, М. Ғафуриҙың йорт-музейында һәм райондарҙа даими рәүештә лекциялар уҡый, әңгәмәләр үткәрә. Әнүәр Ғафуриҙың “Атайым” тигән китабын тигән китабын баҫмаға әҙерләүсе филология фәндәре докторы М.Х. Нәҙерғолов“Ҡәҙерле хәтирәләр” тигән инеш һүҙендә лә әйтеп китә был хаҡта: “Алтмышынсы – етмешенсе йылдарҙа быңдай эштәрен тағы ла йәнлерәк, киңерәк алып бара ул. Бөтә күңелен, көс-ғәйрәтен һала. Хатта ғүмеренең һуңғы көнөн дә шуларға арнай: иртәнән кискә тиклем шағирҙың йорт-музейында Өфөгә курсҡа килгән уҡытыусылар менән

осрашыуҙар үткәрә, йорт-музей менән таныштыра, атаһының шәхси тормошо, ҡайһы бер әҫәрҙәренең яҙылыу тарихы тураһында һөйләй. Аҙаҡ, арып-талып өйгә ҡайтҡас, ҡапыл йөрәге ауыртып түшәккә йығыла һәм бер нисә сәғәттән донъя ҡуя” [1; 8].

Үрҙә яҙылғандарҙан күренеүенсә, үткән быуаттың 60–80-се йылдарында, йәғни совет власының “сәскә атҡан” осоронда, халыҡ шағирының мемориаль йорт-музейында мәҙәни-ағартыу эштәренә өҫтөнлөк бирелә. Заманға, заман идеологияһына ярашлы үткәрелгән сараларҙың саманан тыш күп булыуы ла тап ошоно раҫлай. Мәҫәлән, музейҙың директоры вазифаһында 1950–1973 йылдарҙа эшләгән Ҡ.М. Вафинаның 1970 йыл йомғаҡтары буйынса яҙған отчетында “бөйөк юлбашсыбыҙ В.И. Лениндың 100 йыллығына һәм М. Ғафуриҙың 90 йыллығына арнап, бик күп мәҙәни-ағартыу эштәре башҡарылыуы, саралар үткәрелеүе һәм, ошоноң менән бәйле рәүештә, БАССР Юғары Советының 1970 йылдың 26 августындағы ҡарары нигеҙендә мемориаль йорт-музейҙың үҙен Верховный Советтың Почет грамотаһы, ә айырым хеҙмәткәрҙәргә маҡтаулы исемдәр, маҡтау ҡағыҙҙары бирелеүе” тураһында ла телгә алына. Был факт үҙе генә лә музей эшмәкәрлегенә хөкүмәт етәкселеге яғынан ҙур иғтибар бирелеүе тураһында һөйләй.

Һүҙ барған 50–80-се йылдарҙа М. Ғафуриҙың Өфөләге йорт-музейында, мәҙәни-ағартыу эштәренән тыш, әҙәбиәт белгестәре, башҡа зыялылар ҡатнашлығында ғилми-тикшеренеү, атап әйткәндә, музей фондында һаҡланған яҙмаларҙы (шағирҙың ҡульяҙма әҫәрҙәре, үҙе һәм замандаштары тарафынан яҙылған иҫтәлектәр, ғәрәп, латин һәм рус графикаһында яҙылған мәҡәләләр, хаттар, көндәлектәр һ.б.) өйрәнеү эштәре киң йәйелдерелә. Ошо тикшеренеү, эҙләнеү эштәренең һөҙөмтәһе булараҡ, Башҡортостан китап нәшриәтендә 1953–1957 йылдарҙа М. Ғафури әҫәрҙәренең 7 томлығы, ә инде 1978–1979 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары тарафынан әҙерләнгән 4 томлығы донъя күрә. Билдәле булыуынса, филология фәндәре докторы Ғилемдар Рамазанов та шағирҙың

тормошо һәм ижады буйынса күп йылдар алып барған ғилми-тикшеренеү эштәрен яҙғанда музей фондына йыш мөрәжәғәт итер булған. Шулай уҡ С. Ҡудаштың “Яҙҙы ҡаршылағанда” (Өфө, 1954), “Хәтерҙә ҡалған минуттар” (Өфө, 1957) Ғ. Рамазановтың “Мәжит Ғафури тураһында замандаштары” (Өфө, 1961), ошо уҡ авторҙың “Мәжит Ғафури (Халыҡ шағиры тураһында китап)” (Өфө, 1991), М. Нәҙерғоловтың “Атайым (Мәжит Ғафури тураһында хәтирәләр)” (Өфө, 2001) китаптарында, музей хеҙмәткәре Әлмира Шәрипова төҙөгән “Күңелгә” шиғырҙар йыйынтығында (Өфө, 2005), филология фәндәре докторы З.Я. Шәрипова төҙөгән “Мәжит Ғафури (Тормошо һәм ижады)” альбом-китапта (Өфө, 2005) музейҙың ҡулъяҙмалар фондында һаҡланған бихисап материалдар файҙаланылған. Шулай ҙа музей фондында тупланған ҡулъяҙмалар тулыһынса өйрәнелгән, тип әйтеп булмай әле. Әйтәйек, халыҡ шағирының ҡатыны Зөһрә ханымдың ғәрәп графикаһында яҙылған хәтирәләре, көндәлектәре, хаттары һәм башҡа яҙмалары үҙ тикшеренеүсеһен көтә.

Йорт-музейҙың бөгөнгө эшмәкәрлегенә килгәндә, әлбиттә, ул, совет осоро менән сағыштырғанда, заманға ярашлы рәүештә, күп кенә үҙгәрештәр кисерҙе һәм кисерә. Билдәле булыуынса, хәҙерге музей эшмәкәрлегенең йүнәлештәре байтаҡҡа киңәйтелеп, уның түбәндәге төрҙәрен айырып йөрөтәләр: мәҙәни-ағартыу, ғилми-тикшеренеү, экспозицион-күргәҙмә, мәҙәни белем биреү, фондты ғилми яҡтан өйрәнеү, реклама-баҫма эштәр һ.б.

Үрҙә әйтелгәнсә, М. Ғафури йорт-музейы хеҙмәткәрҙәре лә, заман менән бергә атлап, был бөтә төр йүнәлештәр буйынса ла эш алып барырға тырыша. Мәҫәлән, беҙҙә музейға килеүселәр өсөн даими рәүештә төрлө темаға лекциялар (рус һәм башҡорт телдәрендә) тәкдим ителә, төрлө байрамдарға һәм даталарға арналған саралар (музей занятиелары, әҙәби квестар, уйындар, оҫталыҡ дәрестәре, семинарҙар, түңәрәк өҫтәлдәр һ.б.ш.) йыш уҙғарыла. Был сараларға күберәк тамашасылар йәлеп итеү маҡсатында, беҙ төрлө мәктәптәр, балалар баҡсалары, урта һөнәри һәм юғары уҡыу йорттары менән килешеүҙәр төҙөйбөҙ. Төрлө сараларҙы үҙебеҙҙә генә үткәреп ҡалмайынса, килешеүҙәр төҙөгән

учреждениеларға ла сығабыҙ, унда йорт-музей буйынса виртуаль тур ҙа (экскурсия) тәкдим итәбеҙ. Музейҙың күргәҙмәләр залында шулай уҡ күренекле ҡәләм оҫталарының юбилейҙары айҡанлы ижад кисәләре үткәреү матур бер йолаға әйләнгән. Мәҫәлән, көҙ көнө билдәле прозаик, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Таңсулпан Ғарипованың 70 йәшенә арнап үткәрелгән “Изге ғәмәлдәрең” тигән әҙәби-музыкаль кисә бик юғары кимәлдә үтеп, был сара республика баҫмаларында киң яҡтыртылды һәм юғары баһа алды. Быдай кисәләрҙе үҙ-ара хеҙмәттәшлек итеү тураһында килешеү төҙөгән учреждениеларға, уҡыу йорттарына барып үткәреүҙе лә практикаға индерәбеҙ. Әйтәйек, ошондай кисәне, атап әйткәндә, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин менән осрашыуҙы, күптән түгел генә Өфө урман-техник техникумында үткәрҙек. Үткәрелгән саранан уҡыу йортоноң етәкселеге лә, студенттар ҙа, иң мөһиме, Ноғман ағай үҙе бик ҡәнәғәт ҡалды.

Беҙҙә ғилми-тикшеренеү эшенә хәҙер ҙә ярайһы уҡ ҙур иғтибар бирелә. Мәҫәлән, музейҙың ғилми хеҙмәткәре, БР Яҙыусылар союзы ағзаһы Олеся Әхмәтрәхимова 2017 йылдың ноябрь айында Башҡорт дәүләт университетеның диссертацион советында М. Ғафуриҙың “Заятүләк менән Һыуһылыу” әҫәре нигеҙендә “Башҡорт халыҡ эпосы “Заятүләк менән Һыуһылыу”: варианттары һәм әҙәби версиялары” тигән кандидатлыҡ диссертацияһын уңышлы яҡланы. Шулай итеп, хәҙерге көндә өс хеҙмәткәрҙең икәүһе фән кандидаты тигән ғилми дәрәжәгә эйә. Уҙған йылдың март айында Бөтә донъя Һыу көнө айҡанлы үткәрелгән “Ҡөрьәндә, башҡорт фольклорында, әҙәбиәтендә һыу мотивы” тигән темаға арналған семинар-конференцияла республикабыҙҙың билдәле ғалимдары – фольклорсылар, әҙәбиәт белгестәре, яҙыусылар, дин әһелдәре бик әүҙем ҡатнашты. Был сара тураһында ваҡытлы матбуғат баҫмаларында, радио-телевидениела мәҡәләләр булды, фекер алышыуҙар ойошторолдо.

М. Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы базаһында йәш ҡәләм тирбәтеүселәр менән осрашыуҙар, улар өсөн семинарҙар үткәреү ҙә традицияға әүерелгән. 2017 йылдың ноябрь айында үткәрелгән сираттағы семинарҙа БДУ-

ның “Шоңҡар” әҙәби-ижад берекмәһе, БДПУ-ның “Тулҡын”, шулай уҡ БДУ-ның Сибай филиалындағы “Инеш”, Стәрлетамаҡ филиалындағы “Ашҡаҙар” әҙәби түңәрәктәре ағзалары, уларҙың етәкселәре, билдәле яҙыусылар, шағирҙар һәм республикабыҙҙың “Ағиҙел”, “Шоңҡар”, “Аманат”, “Аҡбуҙат” журналдары, “Башҡортостан”, “Йәшлек”, “Киске Өфө” гәзиттәре хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында үтте. Был сараның һөҙөмтәһе булараҡ, семинарҙа ҡатнашҡан бер нисә студенттың шиғыр-хикәйәләре үрҙә һанап үтелгән гәзит-журнал биттәрендә донъя күрҙе лә инде.

Эйе, башта әйткәнемсә, заман менән бергә атларға тырыша үҙенең 70 йыллыҡ юбилейын билдәләгән М. Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы. Музей хеҙмәткәрҙәре элекке традицияларҙы һаҡлау менән бергә, яңынан-яңы ойоштороу-тәрбиә сараларына мөрәжәғәт итә. Ләкин заман проблемалары беҙҙең учреждениены ла ситләп үтмәй шул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Шуларҙың иң бәкәлгә һуҡҡаны – йәштәр араһында әҙәбиәткә, китап уҡыуға ихтыяждың кәмеүе, хатта юҡҡа сыға барыуы арҡаһында, әҙәби-мәҙәни, әҙәби-тарихи мираҫыбыҙ менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың, тимәк, музейҙарға йөрөүселәрҙең дә торған һайын кәмей барыуылыр, моғайын. Хатта үрҙә телгә алынған ойоштороу-тәрбиә эштәренән тыш, төрлө күңел асыу, шау-шыуҙар ярҙамында ла музейҙарға йәлеп итеүе ҡыйын хәҙерге йәштәрҙе. Ә аҡса йыйыу буйынса өҫтән төшөрөлгән планды нисек тә үтәргә кәрәк... Эйе, илдә хөкөм һөргән баҙар иҡтисады шарттарында хатта музейҙар ҙа аҡса эшләү учреждениеһына әйләнде хәҙер. Улай ғына ла түгел, киләсәктә музейҙар ҙа, хәҙерге ваҡытта дәүләт бюджеты иҫәбендә булған күп кенә тәрбиә һәм белем биреү учреждениелары менән бер рәттән, үҙ-үҙҙәрен тәьмин итеү (самоокупаемость) өлкәһенә күсергә тейеш, тигән фекерҙе торған һайын йышыраҡ ишетергә тура килә. Ә бит музейҙарҙың төп тәғәйенләнеше, күренекле музеолог, Мәскәү дәүләт мәҙәниәт институтының музей эше һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау кафедраһы профессоры Н.И. Решетников билдәләүенсә, “социаль хәтерҙе, тәжрибәне киләһе быуындарға еткереүгә, тарихи үҙаң тәрбиәләүгә, тәрбиә һәм өҫтәмә белем

биреүгә һәм, әлбиттә, халыҡтың мәҙәни ялын ойоштороуға” [3;8] ҡайтып ҡалырға тейеш.

***Әҙәбиәт***


1. Ғафури Ә. Атайым (Мәжит Ғафури тураһында хәтирәләр). – Өфө: Китап, 2001. – 176 бит.

2. Мәжит Ғафуриҙың Өфөләге йорт-музейы. Дом-музей Мажита Гафури в Уфе / Сост. С. Низаметдинова. – Уфа, 2014.

3. Решетников Н.И. Музей и проектирование музейной деятельности. Учебное пособие. – М.: МГУКИ, 2014. – 159 с.

4. Янышев Ф.Ф. Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы // Ағиҙел. – 2005. – № 8.


© **Бүләкова Ғ.М.**, 2018

**Г.Б. Вилданова**,

*филос. ф. д., БашДУ профессоры, Өфө к.*

## МӘЖИТ ҒАФУРИҘЫҢ “ЮҠТЫРҺЫҢ ДА, АЛЛА...” ШИҒЫРЫНА ФӘЛСӘФӘҮИ АНАЛИЗ

Кеше менән был донъяны яралтҡан Илаһи көс араһындағы бәйләнеш тураһында уйланыуҙар кеше үҙен кеше тип аңлай башлаған мәлдән үк килә. Фәлсәфә фәнендә лә дини фәлсәфә айырым бер урынды алып тора. Был һорауға 27 быуатлыҡ тарихы булған фәлсәфә фәне тарихына күҙ һалғанда ла төрлө дәүерҙәрҙә дингә ҡараш төрлөсә булғанын күрергә була. Мәғрифәтселек эпохаһынан алып дингә ҡараш ҡырҡа үҙгәрә төшә, мәҫәлән, француз фәйләсүфе Вольтерҙың әйтеүенсә, “дин - ул иҫәр менән алдаҡсы осрашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән социаль күренеш” [2]. К.Маркс иһә “Дин - халыҡ опиумы”[5, 225] тигән тәғлимәте менән, дин кешенең аҡылын юя, әллә, киреһенсә, кеше

тормош ауырлыҡтарынан арыныр әмәлде тик диндә генә таба, тип әйтергә теләнеме – был һорауға яуап юҡ. Шулай ҙа марксизм тәғлимәттәренә нигеҙләнеп, ошо донъяға ҡарашты тормошҡа ашырыу менән янған кешеләр XX быуат башында Рәсәй империяһында ҡырҡа үҙгәрештәр яһау һөҙөмтәһендә, дингә ҡараш та ҡырҡа үҙгәреүе тарихтан бөтәбеҙгә лә мәғлүм. Дин – боронғолоҡ, хатта наҙанлыҡ ҡалдығы тигән ҡараш барлыҡҡа килә совет осоронда, һәм ул әле лә, йәйәнән атылған уҡты туҡтатып булмағандай, үҙ траекторияһы буйынса бара. Шулай ҙа совет идеологияһы емерелеү айҡанлы, дингә, дини белемгә һорау артты. Кешеләр матди донъя, тән, интеллект талаптарын ҡәнәғәтләндереп кенә тулы мәғәнәһендә үҙҙәрен бәхетле итеп тоя алмай икәнен һиҙә, аңлай башланылар: “Кеше икмәк менән туҡланмай, уға Илаһи көстән килгән һәр беҙ һүҙ аҙыҡ булып тора,” – тигән бит Ғайса пәйғәмбәр [1, Ев.от Матф 4:4].

Башҡортостанда иң беренсе булып халыҡ шағиры исеменә лайыҡ булған Мәжит Ғафури ижады XIX быуат аҙағы – XX быуат башында төрки телле халыҡтар әҙәбиәтендә, бер яҡтан, үҙенең ябайлығы, икенсе яҡтан, – тәрәнлеге менән иғтибарҙы йәлеп итә. Уның ижады аша илдә үткән быуат башында барған хәл-ваҡиғаларға байҡау яһарға була. Үҙ ваҡыты өсөн мөмкин булған тиклем юғары кимәлдәге белем алған, бер түгел, ике күренекле мәҙрәсәлә уҡыған шағир үҙ ваҡыты өсөн бик ҡыйыу, хатта революцион шиғырҙар яҙа. Уның ижадында социаль ғәҙелһеҙлек менән килешмәү, бушҡа ҡырылған кеше ғүмерҙәре өсөн үкенеү асыҡ сағыла. 1915 йылда Мәжит Ғафури дини төрки телле әҙәбиәттә ҙур ғына ғауға ҡуптарған “Юҡтырһың да,  Алла...” тигән шиғырын яҙа. Был әҫәрҙе заманаһы өсөн бик ҡыйыу аҙым тип билдәләргә мөмкин, сөнки Ғафури иң изге төшөнсә – Аллаһы Тәғәләнең барлығын икеләнеү аҫтына ҡуя һәм уға тормошобоҙҙағы әсе, түҙеп торғоһоҙ ауырлыҡтарҙы ебәреүенә асыуын белдерә.

Фәлсәфәлә онтология һәм гносеология тигән ике төп өлкә бар. Онтология кешенең булмышын, йәшәйешен, уның ҡанундарын өйрәнеү менән

шөғөлләнһә, гносеология иһә “Кеше аңы, аҡылы был донъяны, ғөмүмән, аңлай аламы?” тигән һорауҙарға яуап эҙләй. Бына ошонда был фәндең үҙенсәлектәре, башҡа ғади фәндәрҙән айырмаһы килеп ҡалҡа ла инде. Нимдәйҙер кимәлгә тиклем донъяны танып белеп, аңлап, аңлатып була. Ләкин мөхәббәт, тәүфиҡ, хаҡиҡәт, бәхет, Аллаға ышаныу төшөнсәләрен һәр бер кеше үҙенең субъектив күҙлегенән, индивидуаль эҙләнеүҙәре аша ғына таба ала. Был һорауҙарға асыҡлыҡ индерер әҙер юлдар юҡ, һәм булыуы ла мөмкин түгел. Һәр бер кеше нимәнелер табыр өсөн тәүҙә уны юғалтырға тейеш, шунан ғына, йәғни яңынан табылғас, ул әйберҙең ҡиммәте күпкә арта. Мәҫәлән, Инжил китабында ошондай риүәйәт бәйән ителә. Бер атайҙың ике улы була, береһе атаһын һәр ваҡыт тыңлап, уның ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып, атаһы янында ғына йәшәй. Икенсе улы иһә, үҙен эҙләп, атаһынан үҙ өлөшөнә төшкән мираҫын алып, донъя гиҙергә сығып китә. Күп йөрөй, бөтә малын туҙҙыра, ашарына ҡалмағас, берәүгә сусҡа ҡараусы булып эшкә яллана. Ныҡ асыҡҡан саҡтарында сусҡалар ашаған ризыҡ менән дә туҡланырға риза була, ләкин уны берәү ҙә ашатмай. Шунан уның башына, минең атайымдың баҡсаһы тулы ниғмәттәр булып, мин ни эшләп бындай көнгә төштөм һуң, тигән уй килә. Ҡайтайым, ҡайтып, атайымдан ғәфү үтенәйем, тип уйлай был. Атаһы күп йылдар аҙашып йөрөгән улына илап ҡаршы сыға, иң һимеҙ үгеҙен һуйып, ҙур табын йыя. “Атай, мин ғүмер буйы һинең янында булдым, ҡушҡаныңды үтәнем, тыйғаныңдан тыйылдым, һин биргән малды ла туҙҙырманым, ләкин һин минең өсөн бер һарығыңды ла һуйып, ҡунаҡ күрһәткәнең булманы. Ни өсөн һин күрһәткән юлдан тайпылып, бөтә байлығын туҙҙырып, хәйерсе хәленә төшкән улыңды шулай ҡәҙерләп ҡаршы алаһың?” – тип һорай егет. “Эй, улым, һин һәр ваҡытта ла минең менән. Минең бөтә булған байлығым һинеке, шулай ҙа ҡустың үле ине – терелде, юҡҡа сығып бара ине – табылды, шуға шатланам, балам,” – тип яуап бирә атаһы. [1, Ев.от Луки 15: 11-32]. Сөнки дини күҙлектән, тәүҙә хаҡ юлынан тайпылып, шунан аңлы рәүештә кире тура юлды табыусылар

күпкә ҡимматерәк. Улар инде бер ҡасан да тайпылмаясаҡтар, сөнки улар үҙ-үҙҙәрен тапҡан кешеләр.

Ошо риүәйәттән бәйән ителмеш Мәжит Ғафури ҙа, заманына күрә төплө дини белеме булыуға ҡарамаҫтан, динден ғәҙҙеллегендә шикләнә башлай. Ул, әйтерһең дә, Атаһынан (Алланан тип аңларға кәрәк) айырылып киткән аңһыҙ балалай, тәүҙә революцион, кеше күңеленә шик һалырҙай шиғырҙар яҙа (шулар арҡаһында мосолман донъяһы әҙәбиәте тәнҡитселәренән генә түгел, дин әһелдәренең үҙҙәренән дә күп тәнҡит һүҙҙәре ишетергә тура килә уға).

“Шағирҙың 1915 йылда яҙылған шиғырҙарында донъяла йәшәүҙең мәғәнәһеҙлеге, күңелһеҙлеге, яҙмыштың уҫаллығы һәм рәхимһеҙлеге тураһында мотивтар ҡыҙыл еп булып һуҙылып бара. Был мотивтар бер ауаз, бер тотош нәфрәт йыры, донъяға, заманға протест тауышы булып яңғырай. А. Барбюс, Р.Ролан, М Горький кеүек бөйөк гманистар донъя һуғышына ҡаршы сыҡтылар. М.Ғафуриҙың ошо протесҡа үҙенсә ҡушылыуы батша Россияһындағы иҙелгән халыҡтарҙың йырсылары ла дөйөм хорҙан ситтә ҡалмауҙары хаҡында һөйләй” [ 6, 187].

Икенсе яҡтан ҡарағанда, ниндәй ҙә булһа әҫәргә фәлсәфәүи анализ яһағанда, ул әҙәрҙең ниндәй тарихи шарттарҙа яҙылыуын, уның авторының тормош-көнкүрешен белмәй тороп, тулы мәғәнәһендә әҫәрҙең тәрәнлеген аңлап булмай, тигән фекер бар фәлсәфә фәнендә. Герменевтика тип атала ул (боронғо грек аллаһы Гермес кешеләр менән аллалар араһында хәбәр ташыусы булған. Олимп түбәһендә йәшәүселәр аңлатырға теләгәнде ябай кешеләргә аңлатыусы, еткереүсе тигәндән килеп сыҡҡан был атама). Герменевтика күҙлегенән “Юҡтырһың да, Алла...” шиғырын тулы мәғәнәһендә аңлар өсөн, уның ниндәй шарттарҙа, ниндәй кисерештәр айҡанлы яҙылғанын белеү мөһим. Мәжит Ғафури үҙе “Тәржемәи хәлем” иҫтәлегендә был турала түбәндәгеләрҙе яҙа: “Һуғыш дауам итте. Эшсе-крәҫтиән ҡаны дарья булып аҡты...Фажиғәләрҙәең барған һайын көсәйә һәм арта барыуы күңелгә насар тәьҫир ҡалдыра башланы. Бының бер сиген, ҡан дарьяһы ағыуҙың аҙағын күрге килә башланы.

Казарма яндарында мәхшәр булып, балаларын оҙатҡан ата-әсәләр, аталарын оҙатҡан йәш балалар тулды. Мин бында сәғәттәрсә ҡарап ултырҙым. Шул ваҡытта “Юҡтырһың да, Алла...”ны яҙҙым” [3, 346].

Мәжит Ғафури ижадының дини шиғриәт донъяһында ҙур бәхәс тыуҙырған шиғыры бына ошондай шарттарҙа яҙылған.

Өсөнсөнән, был шиғырҙы фәлсәфәүи генә түгел, филологик күҙлектән өйрәнгәндә лә, байтаҡ ҡына тел күренештәре иғтибарға лайыҡ:

Юҡтырһың да, Алла!.. Әгәр булһаң,

Сабыр итмәҫ инең был эшкә,

Бөтә ҡөҙрәтеңде бағлап ҡуймаҫ

Инең алтын-көмөшкә.

Билдәле булыуынса, башҡорт теленең грамматикаһында “-тыр-тер, -дыр-дер” ялғауҙары һәм “да, дә” ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре икеләнеүҙе, шикләнеүҙе аңлатҡанда ҡулланыла. Мәҫәлән, барғандыр, килгәндер. Шулай уҡ был юлдарҙа фекерҙәр ҡапма-ҡаршылығын да күҙәтергә мөмкин. Сөнки шикләнеү, икеләнеү, бөтөнләй инҡар итеү тигәнде аңлатмай бит әле. Ә тормош ауырлыҡтарынан сығып, шағир “Ә, бәлки, ул юҡтыр?..” тигән һорау ҡуя. Йәғни Алланың юҡлығын, йә барлығын иҫбатлауҙы Ғафури тәүге планға ҡуймай. Хатта махсус филологик белеме булмаған ябай кешегә лә был көн кеүек асыҡ.

Шулай итеп, Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафури үҙ заманында кеше күңелдәрен тетрәндерерлек итеп яҙылған әҫәрҙәр генә түгел, ә бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда ла бик актуаль әҫәрҙәр ижад иткән. Уның “Ҡара йөҙҙәр” пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклдәр бөгөнгө көндә лә республика сәхнәләрендә ҙур аншлаг менән бара. Заманалар үтеү менән, авторҙың әҫәрҙәре һаман да уҡыла икән, тимәк, ул кешелектең мәңгелек һорауҙарына яуап эҙләгән, тип аңларға кәрәк. Яҙыусы классик, йәки бер ваҡытта ла актуаллеген юғалтмаған әҫәрҙәр яҙған тигәнде раҫлай был күренештәр. Ошо ҙур булмаған мәҡәләлә беҙ, Мәжит Ғафуриҙың бер генә шиғырына фәлсәфәүи анализ яһап, уны тағы ла тәрәнерәк аңларға һәм

аңлатырға тырыштыҡ. Башҡорт әҙәбиәтендә фәлсәфәүи күҙлектән анализланмаған, рухи ҡиммәттәре асылып бөтмәгән әҫәрҙәр әле бихисап. Был өлкәлә эштәр алып барылыр, Ғафури ижадына фәлсәфәүи байҡау һуңғыһы булмаҫ, тип ышанғы килә.

***Әҙәбиәт***


1. Библия. Новый завет.
2. Вольтер М.-Ф. [Электрон ресурс] / Инеү режимы: http://filosof.historic.ru/books/item/f00/s00/z0000196/st078.shtml
3. Ғафури М. Н. Әҫәрҙәр. 5 том. – Өфө: Башҡортостан китап издательствоһы, 1956.
4. Маркс К. К критике гегелевской философии права, 1844. // Маркс К., Энгельс Ф. Сочинения. Т. I. Изд. 2. 1955. – С. 219 - 368.
5. Рамазанов Ғ. З. Мәжит Ғафури. – Өфө, 1965.


© **Вилданова Г.Б.**, 2018

**Г.С. Галина**

*к. филол. н., доцент УГИИ им. З.Исмагилова, г. Уфа*

## МАЖИТ ГАФУРИ – ЛИБРЕТТИСТ

В становлении башкирской оперной либреттистики, как области драматургии, задачей которой является написание поэтических текстов для оперных сочинений, основную роль сыграла национальная литература и драматургия, ставшие для оперы базовыми жанрами. Как и в других национальных культурах, опера в Башкортостане на всех этапах своего существования создавалась преимущественно на основе литературных первоисточников, особенно успешно черпая сюжеты и образы из национальных драм и литературных поэм. Здесь башкирские авторы следовали

богатейшему опыту русских композиторов-классиков, талантливо претворивших образы русской классической литературы.

В создании оперного жанра в Башкортостане приняли участие все ведущие башкирские литераторы: М.Бурангулов, С.Мифтахов, Г.Амири, С.Кудаш, Б.Бикбай, М.Карим и др., среди которых необходимо выделить творчество Б.Бикбая – автора шести оперных либретто. Во главе этого списка по праву стоит имя Мажита Гафури, написавшего либретто для казанской постановки оперы «Эшче» с музыкой Г.Альмухаметова, С.Габяши и В.Виноградова (1930) и ставшего, таким образом, основоположником не только татарской, но пусть косвенно, и башкирской оперной либреттистики. Последнее стало возможным благодаря публикации этого либретто в Уфе на башкирском языке [5] и проявилось во влиянии, оказанном им на творчество последующих башкирских либреттистов[1]. Оно было создано на основе одноименной драматической поэмы (драмы в стихах), чрезвычайно удобной для «перевода» в собственно оперное либретто, ибо в нем соблюдены все структурные свойства последнего: деление на картины, прямая речь персонажей, их монологи и диалоги, аннотации автора.

Итак, литературная поэма «Эшсе»[2] (1921) и либретто, созданное на ее основе (1928), достаточно подробно проанализированы исследователями – музыковедами З.Хайруллиной и Я. Гиршманом [6, с. 19][3], М.Файзулаевой [10,

---

[1] Хотя формулировка «Гафури и музыкальный театр» и установилась в башкирском и татарском музыковедении и литературоведении [1; 7; 9], вклад поэта в становление национальной оперы в Татарстане и Башкортостане изучен в общих чертах. Однако основополагающее значение Гафури для татарской оперной либреттистики признано. Так, Н.Юзеев – автор книги «Современная татарская поэтика» пишет: «Тяга Гафури к оперному искусству положила начало новым традициям, как в поэзии, так и в творческой манере поэта. Первое: в поэзии это привело к созданию либретто – литературно-драматических произведений, предназначенных для оперы. Второе: осуществление творческого замысла в содружестве с деятелями театра и музыки, взаимосвязь с разными видами искусства оказали очень сильное влияние и на творческий процесс поэта, поставили на повестку дня вопрос изучения специфики и завоеваний других видов искусства, расширили круг наставников» [12, с. 293-294]. Как известно, премьера оперы «Эшче» состоялась 27 февраля 1930 года силами учащихся Казанского музыкального техникума и певцов, которых удалось собрать. Применительно к башкирской национальной опере об этом написали мы в монографии «Башкирское оперное либретто» [4], хотя до того обсуждение поэтических особенностей различных оперных произведений происходило в рамках публиковавшихся рецензий.

[2] Мы разграничиваем татарскую («Эшче») и башкирскую («Эшсе») транскрипции в названии поэмы (оперы), имея в виду казанскую постановку или уфимское издание.

[3] Одна из первых критических оценок принадлежит Я.Гиршману: «Либретто крайне перегружено текстом и действующими лицами (их в опере, кроме Нигмата и участников массовых сцен – крестьян, рабочих,

с. 29-37], Ю.Исанбет [2, с. 42-54]. Действительно, «поэма и либретто «Эшче» – это два самостоятельных произведения» [2, с. 46]. Добавим, что Гафури основательно сократил текст своей одноименной поэмы, оставив 72 строфы из 473, продемонстрировав этим принцип отбора, а также дополнения и перекомпоновки действующих лиц, сюжетных линий и ситуаций. Он не только перестроил изложение от 1-го лица, но и изменил основную идею: в опере герой из абстрактного Труженика, работающего не покладая рук, но так и не выбившегося из тисков нищеты, превращается «в сознательного рабочего (Нигмата – Г.Г.), отдающего жизнь за свободу и счастье народа во время революционных выступлений 1905 года» [2, с. 47]. Таким образом, тип интерпретации поэмы, предложенный Гафури, можно обозначить как свободную транскрипцию текста «по мотивам первоисточника».

Напрашивается вывод, что издание в Уфе либретто оперы «Эшсе» на башкирском языке, хотя и после смерти Гафури, способствовало формированию у башкирских поэтов представлений о специфике оперного жанра, так как с середины 30-х годов создание оперы, основанной на родной литературной традиции и, таким образом, безотказно обеспечивающей европейскому жанру национальную специфику, становится одной из главных задач в области молодых национальных композиторских школ. В конце 30-х годов начинающим башкирским либреттистам учиться было не у кого (Гафури умер, Альмухаметов расстрелян, Габяши и Бурангулов – сосланы), и текст «Эшсе» был на тот момент единственным образцом этого жанра, достойным изучения. Немаловажно и то, что отдельная публикация либретто «Эшсе» (в третьем варианте) показала, что оно должно считаться самостоятельным литературным жанром.

---

солдат, гостей в доме заводчика – 25); драматургически бездейственное, оно перенасыщено многочисленными разговорами и рассказами о событиях и поступках. В музыке оперы, как в зеркале, отразились калейдоскопичность сюжетного развития, схематизм в обрисовке большого числа эпизодических персонажей, непомерная тяжесть текста» [6, с. 19]. Как известно, в поэме речь идет о некоем Труженике, вся жизнь которого прошла в тяжелой работе, не принесшей ему никаких благ. Он работал в поле, золотоносной шахте, на ткацкой фабрике, плавил руду и все равно оставался нищим. Только когда его – старого и немощного выкинули на улицу, он, наконец, прозрел, что результаты его труда всю жизнь присваивали богачи. Кончается поэма тем, что Труженик, мысленно вернувшийся в родную деревню, находит удовлетворение и покой в крестьянском труде и сельской жизни.

Ю.Исанбет пишет о трех вариантах либретто «Эшче» [2, с. 49-50]. Третий вариант, по ее словам, закончен в 1932 году уже после постановки оперы и лишь добросовестностью поэта, стремившегося к совершенству и учету всех высказанных критических замечаний в процессе работы, объясняется как его доработка, так и публикация. Относительно первых четырех актов в нем сделана незначительная правка текста, V акт написан заново. «В новом варианте либретто Гафури убирает сцену на Соборной площади, вместо нее в 1-й картине V действия воспроизводится рабочая сходка. Показ крестьян, горнорабочих, заводских рабочих и буржуазии завершается в этом варианте кульминационной в последовательности картин жизни и труда различных социальных групп картиной из жизни наиболее сознательной части пролетариата и гибель Нигмата воспринимается как гибель одного из членов коллектива. Гафури пытается акцентировать единение Нигмата с рабочими и роль революционного пролетариата» [2, с. 49].

Хотя в таком виде опера и не была поставлена на сцене, ее опубликованный текст явил собой первый пример воплощения героя-борца за социальную справедливость. Трудно представить, чтобы М.Бурангулов, Б.Бикбай или С.Мифтахов не были знакомы с этой публикацией. Так как социальная тема, интерпретированная с точки зрения идеологии классовой борьбы, является ведущей во всех ранних башкирских операх 30-40-х годов, то во-многих из них можно усмотреть прямое влияние финального V акта «Эшсе». Таковы финальная сцена в опере «Мэргэн» А.Эйхенвальда на либретто М.Бурангулова, когда врывающийся во главе войска главный герой освобождает свою любимую Маян; аналогична финальная сцена в опере «Карлугас» Н.Чемберджи на либретто Б.Бикбая, когда главную героиню Карлугас освобождают повстанцы во главе с Шатмуратом; то же происходит в финале оперы «Акбузат» А.Спадавеккиа и Х.Заимова на либретто С.Мифтахова: главный герой Хаубан-батыр побеждает злого Масем-хана и завоевывает свободу для своего народа. Так с самого начала становления

оперного жанра в республике была задана актуальная для идеологии того времени оперная идея.

Решение некоторых картин из либретто «Эшсе» особенно повлияло и на башкирские оперы с революционной тематикой. Так, неожиданные ружейные выстрелы в 4-й картине и сцена рабочей сходки из 5-й картины «Эшсе», как и другие русские номера, предвосхищают соответствующие сцены в операх Р.Муртазина «Азат» и «Дауыл» (сцены сходок, хоры русского народа, куплеты русских персонажей Максима, Волгина и Василия). В «Эшче» трактовка исторических событий страдала предвзятостью, ибо «капитализация татарского общества в том плане, как это раскрывается в поэме Гафури, не могла окончиться баррикадными боями», а «требовали сделать «как надо» [2, с. 49]. В опере «Дауыл» либреттист Р.Янбулатова вполне могла включить в оперу эти сцены, учитывая опыт других национальных опер (в том числе «Эшсе»). При этом логика конкретных художественных явлений выстраивалась с точки зрения «идеологии развитого социализма» (опера «Дауыл» писалась к 100-летию со дня рождения В.И.Ленина). При сравнении либретто опер «Эшсе» и «Дауыл» можно увидеть, насколько различно воплощение героев. Гибель Нигмата, хотя и без внутренней мотивировки изменившегося характера, все же подготовила сюжетное развитие – гибель пламенных революционеров Азата в одноименной опере и Айбулата в «Дауыле».

Итак, либретто «Эшсе» зародило в башкирской оперной либреттистике традицию преемственности, непосредственной связи различных писательских поколений, и хотя сам М.Гафури не увидел этих результатов, его труд во имя становления и развития национальной оперы имел важное значение. Были опробованы различные приемы трактовки литературного первоисточника (отбор, перекомпоновка и дополнение), а сам поэт выступил в качестве «либреттиста-драматурга, активного субъекта интерпретации» (И.Пивоварова), став полноценным соавтором композиторов[4].

[4] После возвращения Г.Альмухаметова в Уфу в конце 1931 года композитор и поэт часто встречались и обсуждали возможность создания башкирской оперы, о чем свидетельствуют воспоминания жены композитора

### *Литература*

1. Атанова Л.П. Гафури и музыкальный театр //Вечерняя Уфа, 1970, 1 августа.

2. Газиз Альмухаметов и Султан Габяши в Казани: Материалы и документы. /сост. Н.Ю.Исанбет. – Уфа: Каданс, 1995. – 175с.

3. Газиз Альмухаметов: Статьи. Воспоминания. Документы. /Авт.-сост. М.А.Идрисова. – Уфа: Китап, 2008. – 208 с.

4. Галина Г.С. Башкирское оперное либретто. Монография. Уфа: ИРО РБ, 2014. – 104 с.

5. Гафури М. Эшсе: либретто оперы (на баш. яз.). – Уфа: Башгиз, 1935. – 73 с.

6. Композиторы советского Татарстана (под ред. Я.М.Гиршмана). – Казань: Таткнигоиздат, 1957. – 147 с.

7. Махмутов Х.Ш. Мажит Гафури и театр //Материалы конференции, посвящённой 100-летию со дня рождения М.Гафури. Казань: ИЯЛИ им. Г.Ибрагимова КФАН СССР, 1981. – С. 101-112. На тат. яз.

8. Пивоварова И.Л. Либретто отечественной оперы: аспекты интерпретации литературного первоисточника. Дисс. канд. иск. Магнитогорск, 2002. – 22 с.

9. Файзулаева М.П. Новая татарская опера («Кара за любовь» Б.Мулюкова) //Музыка России, вып. 5. М.: Сов. композитор, 1984. – С. 224-235.

10. Файзулаева М.П. Первые татарские оперы «Сания» и «Эшче» //Музыкальная культура народов Поволжья. М., 1978. – С. 29-37.

11. Файзуллина М. Незабываемый человек. //Современники о Гафури. Воспоминания. Уфа, 1961. – С. 163-171.

– Мастуры Файзуллиной [3, с. 92], но смерть Гафури в 1934 году помешала осуществлению этих планов. Приводит М.Файзуллина и оценку Гафури своего либретто, сказанное им после премьеры оперы: «Насколько бы плуг не был острым, а кони – выносливыми, при поднятии пашни первая борозда никогда не бывает достаточно глубока. Ведь проделанная нами работа тоже напоминает эту первую борозду. Пусть она не прочерчена как следует, зато все последующие будут одна другой красивее и необходимой глубины» [11, с. 169],

12. Юзеев Н.Г. Современная татарская поэтика. Казань, 1973. – 351 с. На тат. яз.

© **Галина Г.С.**, 2018

**М.В. Гаухман**,
*к. и. н., научный сотрудник ГБУКИ РБ Национальный музей РБ, г. Уфа*
**Г.Н. Туктарова**,
*зав. организационно-методическим отделом ГБУКИ РБ*
*Национальный музей РБ, г. Уфа*

## РОЛЬ МЕМОРИАЛЬНЫХ МУЗЕЕВ В КУЛЬТУРНОЙ ЖИЗНИ СЕЛЬСКИХ ПОСЕЛЕНИЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН (ИЗ ОПЫТА МЕТОДИЧЕСКОЙ РАБОТЫ НАЦИОНАЛЬНОГО МУЗЕЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН)

Музеи, расположенные в сельских поселениях Республики Башкортостан, выполняют особую роль для местных территорий. В сельской местности, за пределами районных центров, ощущается недостаточное количество разнообразных учреждений культуры. Поэтому музеи в сельских поселениях зачастую приобретают функции не только музея, но и дома культуры, концертного зала, образовательного центра. Большинство из сельских музеев вне районных центров составляют мемориальные музеи.

Национальный музей Республики Башкортостан, как научно-методический центр музейного дела республики, осуществляет методическое руководство государственными и муниципальными музеями системы Министерства культуры Республики Башкортостан, а также другими типами музеев, находящимися в муниципальной и ведомственной собственности. Опыт методической работы с сельскими мемориальными музеями позволяет определить функции данных музеев, как научно-просветительских и

культурно-образовательных центров местных территорий. В представленной работе мы исходим из того, что образцовый опыт отдельных музеев является не только показательным, но и желательным для заимствования другими музеями.

В Башкортостане действуют 34 мемориальных музея (литературного, исторического и художественного профиля), входящих в систему Министерства культуры Республики Башкортостан. Из них – 28 музеев расположены в сельской местности. Кроме этого, музейные услуги оказывают 6 мемориальных музеев, входящих в состав муниципальных культурно-досуговых учреждений, и 3 мемориальных музея в сельских многофункциональных культурных центрах. Как правило, мемориальные музеи в своей работе не ограничиваются тематикой жизни и деятельности определённой личности, а создают экспозиции, посвящённые истории и этнографии села. Таким образом, музеи решают две задачи: во-первых, воссоздают культурно-историческую среду, в которой выросли и действовали известные уроженцы этих сёл, а во-вторых – восполняют отсутствующие в сёлах и деревнях краеведческие музеи.

Среди мемориальных музеев отметим передовой опыт Музея семьи Аксаковых (с. Надеждино Белебеевского района). При музее действует дом ремёсел, в котором народные мастера занимаются со школьниками [2]. Произведения декоративно-прикладного искусства, созданные мастерами и их юными учениками, экспонируются на выставках музея. Музей семьи Аксаковых, являющийся реконструкцией родовой усадьбы Аксаковых, ежегодно становится одним из центров проведения Международного Аксаковского праздника – культурного события всероссийского уровня [3].

Дом-музей 25-й Чапаевской дивизии (с. Красный Яр Уфимского района) ежегодно выступает партнёром при проведении реконструкций боевых действий Уфимской операции 1919 г., результатом которой стал переход территории Башкортостана под контроль Красной армии и отступление Белой армии за Урал. В 2017 году дом-музей участвовал в праздновании 130-летия со

дня рождения легендарного командира Василия Ивановича Чапаева (1887–1919). Дом-музей выступил соорганизатором юбилейного мероприятия в с. Красный Яр, а в самом музее была проведена онлайн конференция с участием сотрудников Музея В. И. Чапаева в г. Чебоксары (Чувашская Республика) и Дома-музея В. И. Чапаева в г. Балаково (Саратовская область), а также потомков комдива, проживающих в Москве.

В Доме-музее Джалиля Киекбаева (д. Каран-Елга Гафурийского района) проводятся массовые мероприятия, в которых участвуют многие жители деревни разного возраста. Во время праздников и каникул дом-музей становится центром культурной жизни сельской округи, музейные мероприятия посещаются целыми семьями [4].

Главной проблемой сельских муниципальных, в том числе – мемориальных, музеев является «кадровый голод». Основной персонал большинства таких музеев состоит из одного, реже – двух человек, на которых ложится бремя исполнения разнообразных обязанностей. Поэтому на практике высокий уровень работы демонстрируют именно те сельские музеи, которыми руководят настоящие профессионалы и энтузиасты своего дела.

Важным фактором успешной работы музеев является поддержка со стороны Администраций муниципальных образований. Недостаточное внимание местных властей привело к тому, что ряд музеев вышли из музейной сети Министерства культуры Республики Башкортостан. Так, в 2015 году потерял юридическую самостоятельность и перешёл в состав районного культурно-досугового центра Музей Тагира Кусимова (д. Кусимово Абзелиловского района). Некоторые из музеев при культурно-досуговых учреждениях не могут наладить профессиональную работу. Например, Дом-музей Назара Наджми (с. Миништы Дюртюлинского района), недавно принявший участие в праздновании 100-летия со дня рождения Народного поэта Башкортостана Назара Наджми [1].

К 100-летию со дня рождения Народного поэта Башкортостана Мустая Карима (1919–2005) на его малой родине – в с. Кляшево Чишминского района – будет открыт Музей Мустая Карима. Работа по подготовке музейной документации поручена коллективу Национального музея Республики Башкортостан. Концепция музея уже создана и находится на рассмотрении Министерства культуры Республики Башкортостан.

Подводя итоги, укажем, что мемориальные музеи республики способны выполнять следующие функции: 1. становиться культурно-образовательными центрами для всего села, привлекая к участию в музейных мероприятиях представителей разных поколений; 2. выступать соорганизаторами сельских мероприятий, посвящённых известным уроженцам села или людям, связанным с родным краем; 3. представлять историю и этнографию села, дополняя мемориальную экспозицию.

Предпосылками реализации перечисленных направлений работы является поддержка музеев со стороны муниципальных Администраций, предоставление музеям юридической самостоятельности для включения в систему Министерства культуры Республики Башкортостан и налаживания стабильной, полноценной работы музеев, в соответствии с основными требованиями и стандартами музейного дела.

### *Литература*

1. 100-летие со дня рождения народного поэта республики Назара Наджми отметили на его малой родине в Дюртюлинском районе // [Электронный ресурс] / Режим доступа: www.kulturarb.ru

2. В Доме ремесел при Аксаковском центре «Надеждино» появились новые кружки // [Электронный ресурс] / Режим доступа: www.bashinform.ru

3. В рамках XXVII Международного Аксаковского праздника прошли мероприятия в Белебеевском и Уфимском районах // [Электронный ресурс] / Режим доступа: www.kulturarb.ru

4. Шәрипов И. Ишектәре һәр саҡ асыҡ (Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев музейы) / И. Шәрипов // Тамаша. – 2017. – № 4. – С. 51–54.

© **Гаухман М.В.**, **Туктарова Г.Н.**, 2018

**Ә.Р. Ғимашева**,
*1-се һанлы Оло Ыҡтамаҡ лицейының башҡорт теле уҡытыусыһы,*
*Рәсәй Федерацияһы, Башҡортостан Республикаһы, Мәсетле районы*

## М.ҒАФУРИҘЫҢ ТӘҮГЕ ХИКӘЙӘЛӘРЕНДӘ ҠАЛА ҺӘМ АУЫЛ ЯРЛЫЛАРЫ ТОРМОШОНОҢ САҒЫЛЫШЫ

Башҡорт әҙәбиәтенә тәү башлап хеҙмәтсән халыҡ вәкилдәре образын, ярлылар һәм фәҡирҙәр темаһын Мәжит Ғафури алып инә. “Фәҡирлек менән үткән тереклек” (1902) исемле тәүге хикәйәһендә үк ул ярлы халыҡ тормошон тасуирлай. М.Ғафуриҙың мәғрифәтселегә демократик йүнәлештә булыуына ҡарамаҫтан, төп геройҙары байҙар, муллалар булған мәғрифәтселек әҙәбиәте традицияларын инҡар итеп, әҙәбиәт донъяһына ябай халыҡ тормошон, “бәләкәй кеше” образын алып инеү еңелдән булмай. Ошо айҡанлы барлыҡҡа килгән ҡаршылыҡтар, ҡытыршылыҡтар яҙыусының тәүге хикәйәһендә үк күренә. Әҫәрҙә Ғафури ярлылар тормошона теләктәшлек күрһәтергә тырышһа ла, Ниғмәтулла менән Сәрүиҙең ыҙғыш-талаш менән үткән фәҡир тормошон көлкөлө хәл-ваҡиғалар аша һүрәтләй. Автор геройҙарҙың әхлаҡ яғынан түбән кимәлдә тороуҙарына баҫым яһай. Сәрүи, ире Ниғмәтулла үлгәс, ауыл ярлыһы Әхмәтғәлигә кейәүгә сығып, холоҡһоҙлоҡтары арҡаһында, уның менән дә йәшәй алмайынса, талашып айырылышыу эпизодында был бик асыҡ күренә. Ошо сәбәпле хикәйәнең социаль яңғырашы йомшара төшһә лә, М.Ғафури ХХ быуат башында ауыл ярлыларының ҡот осҡос хәлен реалистик һүрәтләргә тырыша.

Ғафуриҙың артабанғы хикәйәләрендә хикәйәләү оҫталығы ла, реалистик йүнәлеш тә арта бара. Әлбиттә, ул бында ла хәйерсе тормоштоң, тигеҙһеҙлектәрҙең социаль сәбәптәрен тулыһынса аңлап етә алмай әле. Әммә был, белеүебеҙсә, бер Ғафуриҙың ғына түгел, ә, ғөмүмән, мәғрифәтселек әҙәбиәте вәкилдәренең йомшаҡ яҡтарының береһе ине.

“Аслыҡ йыл йәки һатлыҡ ҡыҙ” (1905) һәм “Үгәй балалар” (1907) исемле хикәйәләрендә етем балаларҙың ауыр яҙмышы, уларҙың һәләк булыуҙары тасуирлана. Яҡшы менән яман, гонаһ менән һауап, выждан менән намыҫһыҙлыҡ көрәше хикәйәлә ғибрәтле һәм ышандырғыс картиналарҙа күрһәтелә. “Аслыҡ йыл йәки һатлыҡ ҡыҙ”ҙа тол ҡатын Ғәйшә һәм уның балалары Мәрйәм менән Әсғәттең әсе яҙмышы Хөснөтдин, Лотфулла байҙар ғаиләһенең рәхәт тормошона ҡаршы ҡуйып һүрәтләнә. Меңәрләгән Мәрйәм, Әсғәт, Ғәйшә кеүектәрҙең ауыр яҙмышын, замандың бөтә ғәҙелһеҙлеген автор наҙанлыҡта, шәфҡәтһеҙлектә күрә. Шул уҡ ваҡытта хикәйәлә буржуазияның ауылдағы вәкилдәре Лотфулла, Хөснөтдин кеүек байҙарҙың әхлаҡи аҙғынлығы, әшәкелеге оҫта фаш ителә.

“Үгәй балалар” (1907) әҫәрендә лә Ғафури үткән ҡараңғы тормош ысынбарлығын тасуирлай. Унда ла наҙанлыҡ, тупаҫлыҡ, кешелекһеҙлек бөтә булған ғәҙелһеҙлектәрҙең, күңелһеҙлектәрҙең сығанағы итеп алына.

Хикәйә Ғәлә мулла һәм уның ғаиләһенең аяныс яҙмышҡа дусар булыуын социаль тигеҙһеҙлек хөкөм һөргән йәмғиәттең типик бер күренеше тиеүгә ишара яһай. Шуға ла әсәһеҙ ҡалған Зәйнәп, Ғәлиәхмәт, Фатима ғына үгәй балалар түгел, Ғәлә мулла ғаиләһе кеүек бик күп ғаиләләр ҙә тормоштоң, ғәҙел булмаған ҡоролоштоң үгәй балалары булып күҙ алдына баҫалар. “Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын” (1907) исемле киң танылған хикәйәһе М.Ғафуриҙың XX быуат башы проза әҫәрҙәре араһында әҙәби оҫталығының юғарыраҡ булыуы менән әһәмиәтле.

Әҫәрҙә бөлгөнлөккә төшкән ауыл ярлыларының, ғаиләһен аҫрау өсөн бер һыныҡ икмәк артынан ҡалаға күсеп килеүе һәм көнләксә булып яфа сигеүҙәре

тетрәндергес тасуир итеlә. Шәрифә менән Шәйех ғаиләләре миҫалында яҙыусы шундай көнләксөләрҙең трагик яҙмышын һынландыра. Был ярлылар фажиғәһенең төп сәбәбе итеп М.Ғафури капиталистик мөнәсәбәттәрҙе һәм буржуаз ҡала миһырбанһыҙлығын күрә. Ошо боҙоҡ мөхит Шәриф кеүек саф намыҫлы, эш һөйөүсән, ярҙамсы кешене, хәстәрлекле атаны рәхимһеҙ тормош төпкөлөнә ташлай. Шәйех кеүектәрҙе тормош һуҡмағынан алып ырғыта, ярлыларҙы ҡәһәрле тормош ауырлығына батыра, ас-яланғасҡа әйләндерә.

Быға тиклем яҙған хикәйәләрендәге кеүек үк, Ғафури “Ярлылар, йәки өйҙәш ҡатын” әҫәрендә элекке ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр яҙмышын һүрәтләүен дауам итә, был теманы тағы ла тәрәнәйтә төшә һәм Бәҙри менән Йәмилә образдары аша уңышлы хәл итә. Ғөмүмән, ул революцияға тиклемге башҡорт һәм татар ҡатын-ҡыҙҙарының капиталистик йәмғиәт шарттарында иҙелеп көн итеүҙәрен, ауыр фажиғә күреүҙәрен реалистик һүрәтләүсе яҙыусыларҙың береһе. Иң әһәмиәтлеһе шул – М.Ғафуриҙың XX быуат башындағы прозаһында әҫәрҙән әҫәргә реалистик һүрәтләү традициялары артабан үҫә һәм нығый бара [1, 225-227].

Поэтик, прозаик, драматургик жанрҙарҙағы күп төрлө һәм әҙәби мираҫы менән Мәжит Ғафури башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте үҫешендә ифрат әһәмиәтле урын тота. Халыҡсанлыҡ, кешелеклелек һәм илһөйәрлек рухы менән һуғарылған уның тәрән йөкмәткеле, юғары художестволы әҫәрҙәре уҡыусыларҙы эстетик яҡтан тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнайҙар. М.Ғафури ижадының иң һәйбәт традициялары башҡорт әҙәбиәтенең артабан үҫешенә һиҙелерлек йоғонто яһай.

### *Әҙәбиәт*

1. Салауатова Ф. XX быуат башында М. Ғафури хикәйәләренең идея-йөкмәткеһе // Башҡорт халҡының матди һәм рухи мәҙәниәтендә, этнологияһында һәм антропологияһында Евразиялыҡ феномены. – Өфө, –2009. – 225-227-се бб.

2. Хәлилов М. Мәжит Ғафури ижадында әҙәби бәйләнеш йоғонтоһон өйрәнеү тәжрибәһенән // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 2000. – № 8. 38-39-сы бб.

3. Хусаинов Г.Б. Мажит Гафури // Литература и наука. – Уфа, 1998. – С. 508-516.

© **Гимашева А.Р.**, 2018

**Р.А. Ғиндуллина**,
*I курс магистранты, БашДУ, Өфө к.*

## М. ҒАФУРИ ИЖАДЫНЫҢ ТЕМАТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Мәжит Ғафуриҙың әҙәби ижадҡа тартылыуы “Рәсүлиә” мәҙрәсәһендә уҡыған йылдарынан башлана. Башта улар ҡулъяҙма шиғырҙар булып шәкерттәр мөхитендә генә тарала. Мәҙрәсәнең иҫке тәртиптәрен тәнҡитләгән, имамға һүҙ тейҙергән “Ишан шәкерттәренә” тигән шиғыры өсөн уға “туҡмаҡ ашарға ла” тура килә. Ләкин тәүге өйрәнсек шиғырҙары ҡулъяҙмала мәҙрәсә даирәһендә генә таралып, юғалып бөтә. Шағирҙың һаҡланып ҡалған тәүге шиғыр үрнәктәре 1902 йылға ҡарай. Бер аҙ һуңыраҡ яҙылған “Беҙҙең иҫке мәҙрәсәләрҙә ятҡан саҡтар” шиғырының исеменән үк тойомланыуынса, йәш шағир иҫке мәҙрәсәләрҙең тормоштан артта ҡалыуын, буш, схоластик уҡытыу тәртиптәрен тәнҡитләй, донъяуи ғилемдәрҙең тейешенсә уҡытылмауына бошона. Автор үҙе лә “Бәғзе ваҡыт шиғыр ижад ҡылған булам, эскә тулған хәсрәттән түҙмәгәндән”, – ти [4, 205-207].

Шуныһы характерлы, йәш шағирҙың тәүге шиғырҙарынан уҡ унын ижадына туған халҡының, милләтенең киләсәген ҡайғыртыуға, белемгә, прогресҡа өндәүгә бәйле мотивтар килеп инә.

Ғафури, асылда, шиғри һүҙен Аҡмулла менән Өмөтбаев туҡталып ҡалған эҙҙән, өгөт-нәсихәт рухлы, мәғрифәтсел йөкмәткеле поэзиянан башлай. Ул

үҙенең "Ғилем" исемле беренсе оҙон шиғырын үҙенә күрә программа рәүешендәге белем, ғилем, тәрбиә, мәғрифәт хаҡындағы өгөт ҡараштары менән аса: "Һәр төрлө әҙәп фәнен беҙ ҡарайыҡ, һәр ғилемдән дәресте беҙ аңлайыҡ", "Мәктәптәрҙе тәртипкә беҙ һалайыҡ, төрлө-төрлө файҙалар беҙ алайыҡ", – ти ул. Йәки:

*Ғилемдең ҡәҙерен бел, хасил булһа,*
*Һәр нәмә ҡиммәт була, аҫыл булһа.*
*Ғилемдең өҫтөнә һөнәр кәрәк,*
*Емештең файҙаһы аҙ, йәшел булһа, -*

тип көйләй [2]. Үҙе аңлағанса, белем менән ғилемде прогрестың төп нигеҙе итеп билдәләй.

Заман башҡа – заң башҡа, тиҙәр. Рәсәйҙә революцион ел-дауылдар иҫә башлау менән, Мәжит Ғафуриҙың донъяға ҡарашы киҫкен үҙгәреп, азатлыҡ рухы менән һуғарыла башлай. 1905 йылдың 17 октябрь манифесы айҡанлы яҙылған "Шатлыҡ" шиғырында ул илгә демократик ирек, хөрриәт көндәре килеренә шатлығы көслө икәнен еткерергә, бындай тарихи ваҡиғаның ҡәҙерен белергә ашыға:

*Был көн кеүек шатлыҡ көндәр булыр һирәк,*
*Был көндөң ҡәҙерҙәрен белмәк кәрәк.*
*Ҡулыбыҙҙан бығау, сынйыр алынғанда*
*Ҡуҙғалайыҡ, әфәнделәр, беҙ тиҙерәк, –*

тип, шатлыҡ, саҡырыу һүҙҙәрен яңғырата [2]. Был инде яңы заман, революцион поэзия ауазы ине.

XX быуат башындағы революция йылдары Мәжит Ғафуриҙың, шағир һәм граждан булараҡ, идея-сәйәси һәм әҙәби йәһәттән заманаһы юғарылығына күтәрелер сынығыу осоро булды. Унын ижады инде мәғрифәтселек ҡараштарын күпкә артта ҡалдырып, был осорҙа революцион рух, үткер социаль мотивтар менән һуғарыла. Поэзияһында публицистик пафос, реалистик үткерлек көсәйә.

“Ваҡыт етте” шиғырында ул, форсаттан файҙаланып, дәррәүерәк эшмәкәрлеккә саҡыра:

*Ваҡыт етте һәр бер эште тикшерергә,*
*Ярамаҫ күҙҙе йомоп тик йөрөргә,*
*Һиммәт итһен һәр бер кеше хәл ҡәҙәре,*
*Етешмәгән урындарҙы еткерергә* [2].

Шағирҙың йәмғиәттәге үҙгәрештәрҙе, яңы тенденцияларҙы аңлауҙа заманса идея-эстетик ҡараштары асыҡлана бара. “Милләтемә шатлыҡ шиғыры”, “1906 йылдан 1907 йылға васыят”, “1907 йылдың яуабы” кеүек шиғырҙарында тура риторик һорау һәм поэтик риторика ярҙамында йәки “донъяға кейҙерербеҙ яңы күлдәк”, “килер заман – алырбыҙ залимдарҙың яғаһынан”, “үҙегеҙгә бик мәғлүм “ҙур кешегә” хәл ҡәҙәре батырырбыҙ үткер еште”, “еңел түгел тиҙ ауҙармаҡ ҙур ағасты” ише тура йә кинәйәле һүҙҙәре аша донъяға ҡыйыу тауыштарын еткерҙе.

Үткән быуаттың унынсы йылдарында Мәжит Ғафури проза жанрында ла әүҙем шөғөлләнде, хикәйәләр, повестар, нәҫерҙәр яҙҙы. Шулар араһында айырыуса “Үгәй балалар” тигән хикәйәһендә, “Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын” повесында капиталистик тормош шарттарында йәмғиәт донъяһының йәнә киҫкенләшеүен, бер яҡта серегән байҙарҙың, залим йәндәрҙең шашыуын, икенсе яҡтан үтә ярлыларҙың, йәтим-еҫерҙәрҙең күбәйеүен әсенеп һүрәтләүе менән айырылып тора. Ғафури кешеләрҙән ниндәйҙер шәфҡәтлелек, миһырбанлыҡ көтөү менән бергә, ғәҙелһеҙ йәмғиәткә үҙенсә протест ауаздарын да ишеттерә. Ул Максим Горький әҙәби традицияларына тартым рәүешлерәк, тормош упҡынына ташланған, кәмһетелгән һәм ҡыйырһытылған фәҡирҙәр көнкүрешен, ыҙа-яфаларын һүрәтләүгә күберәк иғтибар итә, шулар ауыҙынан киҫкен йә кинәйәле һүҙҙәр ҙә әйттерә [1].

Бына “Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын” повесында, мәҫәлән, тел төбө мәғәнәһе менән өйҙәш ҡатын мәйете исеменән йорт хужаһы байбикәгә шундай һүҙҙәр еткерә: “Йәнем! Һин мине өйөң алдынан эт кеүек итеп ҡыуып ебәргән

инең. Инде мин шул дәрәжәлә бәхетле хәлдәмен, һинең мал-милкең минең күҙемә сүп хәтле лә күренмәй. Әгәр ҙә һин инде үҙеңдең был хәлгә төшөрөңдө белһәң ине, был малдарың бер нәмәгә лә яраҡһыҙ икәнен белер инең! Инде минең күҙемә һинең ебәк күлдәктәрең өҫтөмдәге кәфен ҡәҙәре лә күренмәйҙәр. Мин инде тигеҙлек донъяһына сыҡтым, бында икебеҙҙең арала туҙан тиклем айырма юҡтыр”.

Мәжит Ғафуриҙың проза әҫәрҙәренә лә шулай ысынбарлыҡты тәнҡитләгән, замандың киҫкен яҡтарын асып бирешкән тәнҡитле реализм һыҙаттары нығына.

Тағы шуныһы, Мәжит Ғафури ниндәй генә реалист булмаһын, иҫке тормоштоң ҡаршылыҡтарын нисек кенә үткәрер күҙ менән асып бирмәһен, уға романтизм йүнәлеше лә ят түгел ине. Ул байтаҡ ҡына романтик рухлы әҫәрҙәр ҙә ижад итте. Мәҫәлән, нәҫерҙәрендә символик, аллегорик образдар, ҡуйы романтик тасуири буяуҙар менән эш итһә, “Болғар ҡыҙы Айһылыу”, “Ағиҙел буйында” кеүек хикәйәләрендә романтик образдар аша үткән хан замандарын күпертеберәк һүрәтләү күренә . “Юғалған хазина” дастанында, “Әҙәм һәм Иблис” шиғри ҡиссаһында дини легенда мотивтары шау романтизм поэтикаһы аша һынландырыла.

Уның унынсы йылдарҙағы теҙмә һәм сәсмә әҫәрҙәрендә тәбиғәт һәм гүзәллек, мөхәббәт һәм идеал, дин һәм әхлаҡ проблемаларына бәйләнешлеләрендә неореализм һәм модернизм тенденциялары ла беленде. Нәк ошо ваҡыттырҙа Ғафуриҙың “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосының бер вариантын яҙып алыуы һәм баҫтырып сығарыуы осраҡлы түгел ине.

XX быуаттың 20-30-сы йылдарында  Мәжит Ғафури совет илендәге яңылыҡтар, ауыл тормошо, завод-фабрикалар, колхоз төҙөлөшө хаҡында бик күп шиғырҙар яҙҙы. Поэзияһы агитацион шиғыр, лирик шиғырҙар, ода һәм марштар, айырым кәмселектәрҙе тәнҡитләгән юмористик һәм сатирик шиғырҙар менән тулылана барҙы. Ләкин шул заман ваҡиғаларына ашығыс

өндәү рәүешендә яҙылған шиғырҙары, одалары ара-тирә риторикаға йәки ярым натурализмға ла ҡайырылғылап китте.

Ләкин нисек кенә булмаһын, халыҡ шағирының 20-30-сы йылдарҙағы шиғырҙары буйынса шул замандың теге йәки был ваҡиғалары, илдең, халыҡтың ниндәй хәстәрҙәр һәм маҡсаттар менән йәшәүе хаҡында уйландырыр мәғлүмәттәр, ыңғай һәм кире фәһемдәр алырға мөмкин. Заманаһы башҡа булғас, шиғыр-йырҙары ла башҡаса ине шағирҙың. Мәжит Ғафуриҙың совет осоро поэзияһын шул замандың үҙенсә бер поэтик сағылышы тип ҡарарға кәрәк.

Мәжит Ғафури ижады XX быуаттың тәүге сирегендә илебеҙ һәм халҡыбыҙ тарихының төрлө осорҙарын тулы сағылдырыуы, әҙәбиәтебеҙҙә реалистик методтың нығыныуын, әҙәби төрҙәрҙең һәм жанрҙарҙың байлығын күрһәтеүе менән әһәмиәтле. Беҙ уның әҫәрҙәре аша ошо дәүерҙең ҡатмарлы һәм социаль үҙгәрешле йылдарҙың реаль һүрәтләнешен күрәбеҙ. Ул айырыуса поэзия өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәште һәм республикабыҙҙың халыҡ шағиры булып танылды.

Ғафури ижады – Көнсығыштың алдынғы әҙәби традицияларын, Көнбайыштың, туған халҡының фольклор, яҙма әҙәби ҡаҙаныштарын ижади үҙләштергән һәм берләштергән феноменаль күренеш. Уның әҙәби мираҫы шиғыр, поэма, мәҫәл, ода кеүек жанрҙарҙан алып, прозала хикәйә, повесть, иҫтәлек, публицистика жанрҙарынаса төрлөлөк менән характерлы.

Башҡорт әҙәбиәтендә тәүгеләрҙән булып Мәжит Ғафури әҫәрҙәре төрлө телдәргә, бигерәк тә рус теленә тәржемәләр аша, элекке СССР киңлектәренә, Европа, Азия, бүтән ҡитғаларға таралып, әҙәбиәтебеҙҙең данын миллиондар йөрәгенә еткерҙе. Әҙәбиәт белгестәре Мәжит Ғафуриҙы әҙәби классиктар Тарас Шевченко, Янка Купала, Коста Хетагуров, Сабир, Хәмзә Хәкимзадә, Ғабдулла Туҡай һәм Константин Иванов исемдәренә ҡатар ҡуйып йөрөтәләр.

*Әҙәбиәт*

1. Ғафури М. Сочинения в четырех томах. Т. 4. – Казань, 1981. – 495 с.
2. Дүрт моң. – Өфө. – 1976. – 431 бит.
3. Рамазанов Ғ. Мәжит Ғафури. – Өфө, 1991. – 223 бит.
4. Хөсәйенов Ғ. Башҡорт әҙәбиәте. – Өфө, 2010. – 230 бит.

© **Ғиндуллина Р.А.**, 2018

**М.В. Ившина**,

*к. филол. н., зав. музеем-квартирой Г.Д. Красильникова, г. Ижевск*

## МУЗЕЙ-КВАРТИРА УДМУРТСКОГО ПИСАТЕЛЯ Г.Д. КРАСИЛЬНИКОВА: ПОИСКИ НОВЫХ ФОРМ РАБОТЫ

Музей-квартира известного удмуртского прозаика Г. Д. Красильникова по существу является первым литературным музеем Удмуртии и ее столицы города Ижевска. В республике также есть муниципальные музеи. Это – дом-музей первой удмуртской поэтессы Ашальчи Оки и дом-музей Г. Красильникова (с. Алнаши УР). Следует еще назвать филиалы муниципальных краеведческих музеев районов республики – музей В. Г. Короленко, Кузебая Герда, С. Самсонова, О. Поскребышева. В статусе государственного на сегодняшний день представлена только музей-квартира Г. Д. Красильникова.

Г. Д. Красильников – один из виднейших представителей удмуртской литературы второй половины XX века. Широкую известность в республике и за ее пределами получили его повести, романы, рассказы, был талантливым журналистом, работал в разных жанрах публицистики. Удмуртские исследователи выделяют особый красильниковский этап в истории национальной литературы [См.: 1, 2, 3].

Музей-квартира Г. Д. Красильникова открыта в октябре 1989 года в связи с празднованием 100-летия удмуртской литературы. Музей расположен по

адресу: г. Ижевск, ул. М. Горького, 45–18. Для комплектования музея вдова писателя З. С. Красильникова и сестра писателя М. Д. Ишматова передали коллекцию писем, фотографий, документов, рукописей и книг, сюда же отдали мебель, личные вещи писателя. За очень короткий период времени все это было оформлено соответствующим образом научными сотрудниками Республиканского краеведческого музея во главе с зам. директора по научной работе Р. Ф. Мартыновой. Она же стала автором первой экспозиции музея-квартиры Г. Красильникова. На начальном этапе становления музея его главными задачами стали: увековечение памяти прозаика, пропаганда его произведений среди населения, сбор материалов о жизни и творчестве Г. Красильникова и его окружении.

Следующий этап работы музея связан с расширением тематики. Внимание музея переместилось на историю всей удмуртской литературы и, таким образом, постепенно мемориальный музей писателя начал брать на себя функции музея литературы Удмуртии. К сожалению, отдельного литературного музея в республике сегодня нет.

Экспозиция музея-квартиры Г. Д. Красильникова менялась несколько раз. Последняя экспозиция выполнена к. филол. н. Девятовой Н. Г. в 2013 году. Следует отметить, что этот замечательный сотрудник посвятил работе в музее более двадцати лет и именно с ее именем связаны поиски новых форм деятельности.

Сегодня музей может предложить лекции на различные темы. К примеру, «Дорожные фантазии или Сказ про то, как Александр Сергеевич по Вятскому краю путешествовал», посвященная некоторым страницам жизни и творчества А. С. Пушкина, «Сквозь любовь, сквозь легенду, сквозь грусть…» о коллекции писем Г. Д. Красильникова. Сотрудниками постоянно проводятся музейные занятия, приуроченные к знаменательным датам и праздникам: «Защищать Родину – долг каждого» (посв. Дню защитника Отечества), «А был он лишь солдат…» (посв. Дню Победы), «Ӟечбуресь! Лопшо Педунь!» (посв. Дню

смеха), «Лебедь на Гербе Республики» (посв. дню государственности и дню родного языка), «Как появилась письменность» (посв. дню русского языка).

В музее проводится экскурсия по экспозиции на удмуртском языке, она называется «Красильников. Улонэ сюрес», на русском языке – «Красильников. Выбор пути». Для детей младшего школьного и дошкольного возрастов экскурсия проводится в форме сказочного путешествия. Для одиночного посетителя предусмотрена аудиоэкскурсия, посредством которой можно самостоятельно пройти по экспозиции и окунуться в творческую атмосферу отечественной литературы второй половины XX века.

Уже вошло в традицию проведение республиканского литературного конкурса «Будӥсь писательлэн ӝӧк сьӧраз» («Кабинет начинающего писателя»), цель которого является поддержка юных авторов. В конкурсе принимают участие школьники, студенты и работающая молодежь Работы оценивает профессиональное жюри, состоящее из писателей и критиков. Лучшие работы публикуются в республиканских газетах и журналах. В музее также проводятся мероприятия, посвященные юбилейным датам известных писателей, деятелей культуры, искусства. Так, недавно музей провел мероприятия: «Разносторонняя личность Кузебая Герда» (посв. 120-летию Кузебая Герда), «Не уводите меня из весны» (посв. 80-летию В. Высоцкого), которые имели большой общественный резонанс.

С целью привлечения посетителей в музей один раз в месяц проводились бесплатные экскурсии «Счастливые часы». В настоящее время нами разрабатываются новые музейные занятия, литературные квесты и краеведческие маршруты, игры, мастер-классы. Планируется заключение договоров со школьными и дошкольными учреждениями, средними специальными и высшими учебными заведениями. Также нами намечается разработка абонементов: семейные походы в музей, корпоративные предложения для досуга и др.; предполагается разработка виртуального тура по

музею-квартире, представляющего собой панорамный обзор нового информационного образца.

В ряду существующих трудностей в работе музея, следует, видимо, особо выделить отсутствие глубоких традиций культуры восприятия литературного музея. Это характерно для города и республики в целом. Трудности связаны и с расположением музея. Хотя в последнее время начато благоустройство двора, общий вид дома остается достаточно убогий, чему в немалой степени способствуют хозяйственные застройки и находящийся внизу здания магазин. Падающий интерес к чтению, литературе, личности писателя также создает известные трудности в работе музея. И еще. Пока у нас отсутствуют специальные указатели, знаки, ведущие к музею. Перед музеем стоит немалый план посещаемости, который необходимо выполнить.

Музей-квартира Г. Д. Красильникова, сталкиваясь со многими трудностями, обусловленными условиями рыночной экономики, стремится сохранить традиционную культуру, пропагандировать творчество Г. Д. Красильникова в контексте удмуртской, русской и других национальных литератур, на примере его жизни и творчества, говорить о дружбе народов, о вечных гуманистических ценностях.

### *Литература*

1. Богомолова, З.А. О творчестве Геннадия Красильникова: критико-биограф. очерк / З.А. Богомолова, УдНИИ экономики, истории, лит. и яз., Сектор лит. и фольклора. – Ижевск: Удмурт. кн. Изд-во, 1962. – 79 с.

2. Зайцева, Т.И. Удмуртская проза второй половины XX – начала XXI века: национальный мир и человек / Т.И. Зайцева, ГОУВПО «УдГУ». – Ижевск: Удмурт. ун-т, 2009. – 374 с.

3. Художественная индивидуальность писателя и литературный процесс Урало-Поволжья: сб. ст. / ГОУВПО «Удмуртский государственный университет», Каф. удмурт. лит. и лит. нар. России; отв. ред.: Т.И. Зайцева, С.Т. Арекеева; редкол.: Н.В. Лекомцева, Г.А. Глухова, В.М. Ванюшев [и др.]. – Ижевск: Изд-во УдГУ, 2009. – 202 с.

© **Ившина М.В.**, 2018

**М.А. Идрисова**,

*кандидат искусствоведения, г.Уфа,*

*редактор службы радио филиала*

*ВГТРК ГТРК “Башкортостан”*

## МУЗЫКА В ТВОРЧЕСТВЕ МАЖИТА ГАФУРИ

В творчестве народного поэта БАССР Мажита Гафури музыка занимает видное место. Знаток башкирского фольклора, уделявший большое внимание вопросам его собирания и пропаганды[1], Гафури впитал в себя все богатство башкирского народного устно-поэтического творчества, насквозь пронизанного музыкальностью[2]. Кроме того, поэт был ценителем башкирских протяжных песен – озон-кюев. Крепкая дружба связывала его с первым профессиональным певцом из башкир Газизом Альмухаметовым[3], вокальное искусство которого Гафури оценивал очень высоко. Так, по воспоминаниям современников, их встречи неизменно сводились к долгим беседам о башкирской песне и импровизированным “концертам”, в которых, по просьбе Гафури, Альмухаметов одну за другой пел его любимые озон-кюи. По свидетельству М.Ахметовой-Ишемгуловой, особенно часто он просил спеть протяжные –

[1] Результатом одной из фольклорных экспедиций, осуществленных поэтом, стала публикация в 1910 году башкирского эпоса «Заятуляк и Хыухылу».

[2] Как известно, неотъемлемой составляющей башкирского народного эпоса является наличие напевов – “хамак” (һамаҡ). Исполнитель эпического произведения – сказитель (сэсэн) вел повествование нараспев (һамаҡлап), под сопровождение музыкального инструмента - думбыры или кыл-кубыза.

[3] Газиз Салихович Альмухаметов (1895-1938), певец, композитор, фольклорист, народный артист БАССР.

“Буранбай”, “Зульхизу” и другие песни [2, 100], являющиеся образцами классического “высокого” стиля, что говорит о безупречном музыкальном вкусе поэта.

В становлении профессионального музыкального театра башкир и татар роль М.Гафури трудно переоценить. Создав либретто – литературную основу оперы “Эшче”, музыку которой написал Г.Альмухаметов в соавторстве в композиторами С.Габяши[4] и В.Виноградовым[5], он явился одним из родоначальников нового в башкирско-татарской литературе жанра – оперной либреттистики.

Как известно, опера “Эшче” стала вторым фундаментальным сценическим произведением названной творческой команды во главе с Г.Альмухаметовым. Первой была “Сания”, автором либретто которой в первой редакции (1922) был сам Г.Альмухаметов, вторую редакцию (1925) осуществил татарский писатель Ф.Амирхан. И, если “Сания” стала первым опытом на пути к национальной опере, то “Эшче” закрепила и усовершенствовала этот опыт, открыв новую страницу в истории музыкальной культуры Волго-Уральского региона.

Обращение Г.Альмухаметова и С.Габяши к поэме М.Гафури в качестве литературного первоисточника оперы было продиктовано новаторским характером произведения: впервые опубликованная в Казани в 1921 году, она рассказывала о нелегком пути рабочего уральского горного завода к осознанию революционных процессов, происходящих в стране. В центре произведения – восстание рабочих против угнетения заводчиков, вошедшее в историю как “революция 1905 года”.

Над процессом работы творческой команды заинтересованно следили в Татарстане и Башкортостане, так как с самого начала создание оперы становится общим делом для обеих республик. По свидетельству Сайфи

[4] Султан Хасанович Габяши (1891-1942) - композитор, педагог и музыкально-общественный деятель.
[5] Василий Иванович Виноградов (1874-1948) - композитор и скрипач, заслуженный деятель искусств ТАССР.

Кудаша[6], Г.Альмухаметов и С.Габяши впервые посвятили поэта в свои планы летом 1926 года, во время своих гастролей в Уфе. Кудаш описывает, как композиторы увлеченно, горячо убеждали Гафури в необходимости этой работы. Очевидно, что перед Мажитом Гафури, как и перед всей творческой командой, она поставила ряд сложнейших задач. По сути, драматургу пришлось написать новое, отличное от поэмы, произведение, так как в оперном либретто, согласно законам театра, герой должен быть показан в действии. Известно, что, искренне увлеченный, Гафури неоднократно переделывал его. Как либретто, так и фрагменты музыки выносились на всеобщее обсуждение, в котором принимали участие видные деятели искусства и литературы обеих республик. “Так, между двух народов завязалась переписка и обсуждение” [4, 243]. Одна из статей популярного в те годы журнала “Яналиф” также была посвящена зарождающемуся новому произведению и была озаглавлена: “В каком состоянии опера “Эшче”? Татарстан начал, Башкортостан продолжает” [6,7]. Опера создавалась в атмосфере всемерной поддержки со стороны руководства обеих республик: на время её написания творческому коллективу предоставлялись путёвки в санатории Татарстана и Башкортостана, ход работы активно освещался в периодической печати. Г.Альмухаметов, словно в ответ на заданный вопрос, неоднократно выступал в печати со своими суждениями, касающимися тех или иных аспектов “строительства” национальной профессиональной музыки, и, в частности, работы над жанром оперы [5].

Действие произведения разворачивается на протяжении 5 актов, каждый из которых представляет главного героя – Нигмата в разных жизненных ситуациях: в первом действии он – нищий батрак, вынуждаемый уйти из родной деревни в поисках заработка; во втором акте оказывается на золотопромышленных приисках, трудится в шахте; в третьем попадает в среду пролетариата на механическом заводе; в четвертом показана контрастная картина вечеринки в одном из богатых татарских домов, где живут праздные

[6] Сайфи Кудаш (1894-1993) — башкирский и татарский поэт и писатель, народный поэт Башкирской АССР.

“прожигатели жизни”; и в финале Нигмат гибнет в рядах рабочих, поднявшихся на вооруженное восстание. От акта к акту зритель наблюдает за тем, как меняется мировоззрение главного героя.

Обращение к этой остро-актуальной для своего времени теме стало новшеством, прогрессивным шагом не только в рамках национального театра, но и для всего советского музыкально-театрального пространства.

Премьера оперы была приурочена к 10-летней годовщине татарской республики и состоялась 27 и 28 февраля 1930 года. Она стала огромным событием как для музыкально-литературных кругов, так и для широкой общественности и была принята как явление политического значения, как знак победы социалистической культуры. Летом того же года спектакль был показан в ряду выдающихся достижений “культурного фронта” на Всесоюзной Олимпиаде театров и искусства народов СССР в Москве. Примечательно, что это была единственная опера в череде многочисленных драматических спектаклей и концертов, представленных коллективами, съехавшимися со всего Советского Союза.

В литературе принято называть “Санию” и “Эшче” “татарскими операми”, но как современники, так и исследователи более позднего времени признают, что музыка этих произведений основана на творчестве двух народов – башкирского и татарского. Причем, наиболее удачные разделы опер в значительной степени насыщены башкирским фольклором. Так, в опере “Эшче” можно услышать как прямые цитаты, где народные песни включены в действие полностью (башкирские “Ашкадар”, “Порт-Артур”, «Тафтиляу»; татарская «Казанское полотенце»; сибирских татар «Капель»), так и микроцитаты – отдельные узнаваемые интонации песен (“Таштугай”, “Куныр буга”, “Гайса ахун”); а также множество “перекличек” с башкирскими и татарскими плясовыми песнями и такмаками. Партитура оперы пронизана интонациями и ритмами революционных маршей-гимнов и советских массовых песен. К примеру, в музыкальную ткань произведения вплетены популярные во

всём мире гимны “Интернационал” и “Марсельеза”, которые воспринимались в то время как образец совершенного воплощения высоких идеалов братства и равенства людей. Музыкальные характеристики противостоящего пролетариату “лагеря” – “класса эксплуататоров” – также решены через семантику жанра: гимн “Боже, царя храни” звучит символом царского самодержавия, колокольный звон с церковным многоголосным пением “Многая лета” и мусульманский коранический напев – знаками старого мира религиозного фанатизма.

Ария Нигмата из III действия оперы представляет собой одну из самых талантливых находок авторского коллектива. Казанский музыковед М.Файзуллаева [3,116] высказывает мысль о том, что за основу арии взята песня сибирских татар “Капель”. Но в указанном труде нет ссылок на источник, а автору этих строк не удалось найти эту песню ни в одном из опубликованных сборников татарских народных песен. В то же время в архиве Союза композиторов Башкортостана обнаружена запись мелодии, сделанная С.Габяши и озаглавленная “Задаба кантон”. Материал нотации полностью совпадает с темой указанной арии Нигмата, но мелодия не подтекстована. Паспортные данные не сохранились и остается неизвестным, от кого и где произведена запись мелодии.

Её копия хранится и в фольклорном кабинете УГИИ им. З.Исмагилова в сборнике “Башкирские мотивы”, составленном М.Р. Калиновским[7]. Паспортные данные отсутствуют, однако название мелодии и то, что она включена в сборник башкирских народных песен, дают основание полагать, что напев может принадлежать к разряду песен о кантонных начальниках.

Ария Нигмата из III действия оперы “Эшче” (фрагмент):

[7] Мустафа Калиновский (годы жизни неизвестны) – польский музыкант, сосланный в Уфу. Известно, что после принятия ислама сменил имя. Флейтист, дирижёр, собиратель башкирского фольклора, преподаватель Уфимского музыкального техникума в 1920-40-е годы.




Мы допускаем также, что эта страница оперы, являющаяся кульминационной вершиной всего произведения, является продуктом оригинального творчества композиторов, решённым в русле стилистики башкирских народных песен. Этому в большой степени мог способствовать превосходный текст Мажита Гафури, проникнутый духом народной поэзии.

Историческое значение оперы “Эшче” заключается в том, что, явившись одним из первых опытов советских опер на героико-революционную тему, она наметила многие черты, определившие пути дальнейшего развития жанра оперы в татарской и башкирской музыке. И, будучи “чутким барометром интонационного строя эпохи” [1, 55], опера отразила общие тенденции развития советской музыки 1920-30-х годов с её стремлением к простоте и доступности для широкой аудитории, интересом к бытовым песенным и маршевым интонациям и ритмам. А главное – с её непременным требованием “соответствия” суровым идеологическим установкам времени. Ответы на эти требования во многом были заложены в самом литературном первоисточнике – в поэме народного поэта БАССР Мажита Гафури “Эшче”.

Распалась страна Советов, сменилась общественная формация. Большая часть из огромного художественного наследия советской эпохи, в том числе и опера “Эшче”, безвозвратно утратила свою актуальность. Однако, несмотря ни на что, лучшие страницы произведения, и в особенности, знаменитая ария Нигмата, продолжают свою жизнь и в XXI веке. Это говорит о том, что подлинное искусство неподвластно времени.

*Литература*

1. Асафьев Б. Об опере: Избранные статьи / Сост. Л. Павлова-Арбенина. 2-е изд. М., 1985. С. 55.

2. Газиз Альмухаметов. Статьи. Воспоминания. Документы / Авт.-сост. Идрисова М.А. – Уфа, Китап, 2008. С.100.

3. Файзуллаева М. Фольклорная основа первых татарских опер «Сания» и «Эшче» // Материалы IV конференции молодых научных работников. Казань, 1976. С.116–118.

4. Ҡудаш С. Һайланма әҫәрҙәр. 3 томда. 3т. – Өфө, 1967. – 243 бит.

5. Әлмөхәммәтов Газиз. Бездә музыка мәсъәләсе / Кызыл Татарстан, 1929 ел, 24 март; Әлмөхәммәтов Газиз. “Эшче” операсы язылып бетте / Тамашачи, 1930 ел, № 2/3, 10-11 бит; Әлмөхәммәтов Газиз. “Эшче” операсының социаль һәм музыкаль мәгънәсе (“Эшче” сәхнәгә куйылыр алдыннан) / “Кызыл Татарстан”, 1930, 21 февраль; Әлмөхәмәтов Ғәзиз. Башҡорт совет музыкаһын тыуҙырыу өсөн көрәш юлында / Башҡортостан китап нәшриәте, 1933 йыл.

6. Яңалиф. – 1928. – №17. – 7 бит.

© **Идрисова М.А.**, 2018

**М.Х. Иҙелбаев**,

*филол. ф. д., профессор, БашДУ, Өфө ҡ.*

## ҒАБДУЛЛА ТУҠАЙҘЫҢ КҮҢЕЛ ХӘТЕРЕНДӘ – БАШҠОРТОСТАН ҺӘМ МӘЖИТ ҒАФУРИ

Татар халҡының мәшһүр шағиры Ғабдулла Туҡайҙың исеме илебеҙҙә киң билдәле. Уның ижады төрки телле халыҡтарға айырыуса ҡәҙерле һәм яҡын. Туҡай шиғриәтенең сығанактары дөйөм төрки әҙәбиәтенең боронғо дәүеренә – Низами, Руми, Ҡол Ғәли, Науаи, традицияларына барып тоташа. Шағир әҫәрҙәрендә XIV быуатта Ҡыпсаҡ дәүләте ерлегендә Ҡотб, Харәзми, Сәиф

Сараи, Хөсам Кәтибтәр яҙып ҡалдырған “Хөсрәү вә Ширин”, “Мөхәббәтнамә”, “Гөлстан бит-төрки”, “Жөмжөмә Солтан” кеүек күренекле дастандарҙың, шулай ук һуңғырак осорҙа Урал һәм Волга буйы төрки әҙәбиәте донъяһында киң таралған “Буҙйегет”, “Таһир-Зөһрә” кеүек поэмаларҙың эҙҙәре бар. Ошо уҡ традициялар рухында тәрбиәләнгән төрки телле башҡа халыҡтарҙың Туҡай ижадын үҙ итеүе, әлбиттә, тәбиғи.

Ғабдулла Туҡайҙы Башҡортостан һәм башҡорт халҡы менән дә ныҡлы ептәр бәйләй. Уның ижадында башҡорт фольклорының, сәсәндәр ижадының һәм дөйөм төрки әҙәбиәтенән айырылып сыҡҡан XVI – XIX быуаттар башҡорт һүҙ сәнғәтенең йоғонтоһо ла сағылыш тапҡан. Атап әйткәндә, шағир “Ашҡаҙар”, “Тәфтиләү” кеүек башҡорт халыҡ йырҙары менән ҡыҙыҡһынған, уның көйҙәрен тыңларға яратҡан, тарихын яҙып алған. “Иҫемдә ҡалғандар” тип исемләнгән хәтирәһендә ул XVIII быуат башҡорт яҙыусыһы Тажетдин Ялсығоловтың “Рисалә-и Ғәзизә”һен мауығып уҡыуы тураһында яҙа. Күренекле әҙип булып өлгөргәс тә, суфый шағирҙар ижады менән яҡындан ҡыҙыҡһына. Хатта үҙенең “Мөриттәр ҡәберстанынан бер ауаз” исемле әҫәрен Һибәтулла Салиховтың шиғыр үлсәменә эйәреп яҙа. Туҡай XIX быуат башҡорт әҙәбиәтенең мәшһүр вәкиле Мифтахетдин Аҡмулланың ижадын да, әлбиттә, яҡшы белгән. Аҡмулла шиғриәтенең йор һүҙле сәсәндәр ижадына тартымлығын, дала халыҡтарына яҡынлығын ул оҫта шәйләп алған: “Уның шиғырҙарынан тик ҡаҙаҡ еҫе, күсмә халыҡ еҫе сығып торалыр”, – тип яҙа әҙип [3, 225]. Шағир шулай уҡ Риза Фәхретдиновтың яңы әҫәрҙәре менән ентекле танышып барған.

Ә инде 1912 йылдың яҙында Туҡайҙың Өфөгә килеп, Мәжит Ғафури менән осрашыуы ике туғандаш әҙәбиәт бәйләнеше тарихынды нурлы бер бит булараҡ урын алды. Өфөнөң ҡояшлы көндәрен, хуш-еҫле һауаһын ул көндәлектәрендә, хаттарында, бүтән төр яҙмаларында үҙенә күрә бер һоҡланыу менән ҡабат-ҡабат иҫкә төшөрә. “Өфөнөң... тәбиғәт яғы күп ҡалаларҙан өҫтөн, – тип яҙа ул. – Әүәл үк ул тау башында. Тимәк, йәй көнө лә, ҡыш көнө лә һауа

яҡшы. Йырҙарыбыҙҙа шул ҡәҙәр күп йырланған Ағиҙел буйында. Ҡала эсендәге йорттарға ҡарағанда ағастар күп тиерлек. Бының йәй көнгө әһәмиәте! Өҫтән ҡарағанда, ҡаланың халҡы ла айныҡ вә саф күренә" [4,198]. Олаталары еренә килеү шағирҙың күңеленә, бәлки, айырыуса юғары күтәренкелек өҫтәп ебәргәндер. Эйе, олаталары еренә".

Туҡай менән башҡорт халҡын, билдәле булыуынса, әсәһе һәм бабаһы (әсәһенең атаһы) яғынан ҡан-ҡәрҙәшлек ептәре лә бәйләй. Әлеге "Иҫемдә ҡалғандар" әҫәрендә шағир уларҙың исемдәрен телгә алып үтә: "...Бынан һуң атам Өсөйлө ҡарьяһы Зиннәтулла хәҙрәттең Мәмдүдә исемле ҡыҙын алмыштыр". Зиннәтулланын сығышы хаҡында Туҡайҙың замандашы, күренекле ғалимыбыҙ З.Ш.Шакиров ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, иҫтәлектәр яҙып ҡалдырған. Шуларҙың береһен тулыһынса килтерәйек.

"...1929 йылда Арғаяш кантоны Ғәшир ауылында мөдәрис Фәйезхан Ғабдулла Туҡайҙың әсәһе Мәмдүдәнең атаһы Зиннәтулла мулла тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне:

Татар шағиры Туҡайҙың әсәһе яғынан булған бабаһы үҙенең йәш сағында беҙҙең ошо Ғәшир ауылында хәлфә булып, балалар уҡытып торған. Бәйеттәр, йырҙар сығарған, уларҙы мәжлестәрҙә уҡыған, йырлаған. Хәлит ауылынан Хәким исемле берәү менән ҡара-ҡаршы бәйеттәр, шиғырҙар әйтешкән, хаттарҙы үҙ-ара шиғырҙар менән яҙышыр булғандар. Түбәндә Зиннәтулла хәлфә уҡый торған бәйеттәрҙән (бер егет менән бер ҡыҙҙың ҡара-ҡаршы һөйләшеүҙәренән) бер-ике юл күсерәбеҙ:

*Егет:*

Ач ишенең, бән күрәйен, сәнең буйың зифа дирләр!

*Ҡыҙ:*

Бәнем буйым зифа дирсең, су буйында ҡуғаларҙы күрмәнеңме?

*Егет:*

Ач тәҙәрәң, бән күрәйен, сәнең йөҙөң гүзәл дирләр.

*Ҡыҙ:*

Бәнем йөҙөм гүзәл дирсең, тау битендә ҡыҙарып

бешкән еләктәрҙе күрмәнеңме?

Ғәшир ауылында бер нисә йылдар балалар уҡытып торғас, Зиннәтулла хәлфә үҙе менән бер-ике малайҙы эйәртеп, ҙурыраҡ белем алыу ниәте менән Ҡазан яғына уҡырға китә. Ҡышҡарҙамы, Курсыламы уҡып, шул яҡта урынлашып ҡала. Мин үҙемдең шәкерт сағымда Зиннәтулла хәлфәне күрҙем. Ул минән: Ғәшир ауылы эргәһендәге ҡайындар иҫәндәрме әле? Йәй көндәрендә дуҫ-иштәр менән уларҙың төптәрендә ултырғылай торғайныҡ, йәш саҡтар ине! – тип ҡуя һәм ул ҡайындарға Зиннәтулла ҡарттан сәләм әйтергә ҡуша.

Ул ҡайындар 1929 йылда ла күкрәп ултыралар ине әле.

Зиннәтулла үҙе төп ҡайҙан һуң? тигән һорауға Фәйезхан мөдәрис түбәндәге мәғлүмәтте бирә:

“Зиннәтулла хәҙрәт – Пермь губернаһы Оса өйәҙе Ҡажмаҡты ауылынан. Аҫаба башҡорт булып, Ғәйнә ырыуының Тол-Ғәйнә тармағынан. Зиннәтулла башта Оса өйәҙе, Ғәйнә иле, Солтанҡай ауылында Шируан исемле Бохаранан уҡып ҡайтҡан бер хәҙрәттән уҡыған.

Быны һөйләгән Фәйезхан мулла үҙе Ҡазанда “Мөхәммәдиә” мәҙрәсәһендә байтаҡ ваҡыттар уҡып белем алғандан һуң, үҙенең тыуған ауылы булған Ғәшир ауылына ҡайтып, имам һәм мөдәрис булған, мәҙрәсә асып, дәрес әйткән. Дин дәрестәренән башҡа тарих, география, хисап фәндәре лә уҡытҡан. Башҡорт тарихы, халыҡ әҙәбиәте тураһында ла бер ни тиклем мәғлүмәте бар ине. Русса китаптар ҙа уҡый ине. Яҙып алдым: З. Шакиров. 1929 йыл, 25 июль”. (Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге архивы, ф. 3, оп. 25, 2-се эш).

Күрәһегеҙ, З. Шакиров иҫтәлегендә әйтелгәнсә, шағирҙың әсәһе Мәмдүдә (Бибимәмдүдә) – Ғәйнә ырыуының Тол-Ғәйнә тармағы башҡорто Зиннәтулла хәҙрәттең ҡыҙы. Заманында З.Шакиров Ҡазанда Туҡай менән осрашып, был хаҡта уның үҙ ауыҙынан ишетә [1, 113—114.] Шағирҙың яҙмаларына ҡарағанда, Өфөнөң тәбиғәт һауаһы ғына түгел, ҡала халҡы һулаған рухи һауа ла уның

күңеленә бик ятышлы булып ҡала. Туҡай башҡорт еренең халҡын да, уның шағирын да үҙ итә. Мәжит Ғафуриҙең күңел торошон үҙ хәле менән сағыштыра: "Мәжит әфәнде Ғафури менән күрештек. Ул миңә ҡарағанда ла йыуашланған һәм донья тарафынан баҫылған һымаҡ күренде. Уның менән беҙҙең мосахәбәбеҙ (әңгәмәбеҙ – М.И.) күп ваҡыт күҙҙәр арҡыры ғына йылына ине. Ситтән беҙҙе ҡараған кеше, икебеҙҙе әле генә хисапһыҙ ҡаты шаярып, һуңынан әсәләре ҡыйнап, бер минут элек кенә илауҙан туҡтаған балаларға оҡшатыр ине. Нишләйек һуң? Шаярыр инек – әле генә яҙмыш ханым ҡыйнаған; илар инек – әле күҙҙән йәшебеҙ ҙә кипмәгән" [4, 199]. М. Ғафури менән ул ҡала урамдары буйлап йөрөргә сыға. "Был ҡаланың һауаһы латиф, һаулыҡ бағышлар булғанға, хәүефһеҙерәк күрәм. Ағиҙел буйындағы баҡсаға барып, бер нисә сәғәт ағас төптәремдә ятам. Шунда уҡ ҡымыҙ ҙа бар", –тип яҙа Ғ. Туҡай [4, 323].

Оло хисле бөйөк шағир Өфөлә саҡта, моғайын, ҡасандыр ошо Башҡортостан ерендә тыуып-үҫкән әсәһен һәм бабаһын хәтерләмәй ҡалмағандыр; сөнки урындағы халыҡҡа, уның йәшәү рәүешенә, рухи мәҙәниәтенә иғтибары ғәйәт ҙур була. Ҡала баҡсаһында ял иткән мәлдә ул бер шәкертте осратып: "Һин ҡурайҙа уйнай беләһеңме?" – тип һорауҙан саҡ-саҡ тыйылып ҡала [4, 200]. Өфөлә шағир күренкле йырсылар менән осрашып, башҡорт йырҙарын бирелеп тыңлай. "Петербург профессорҙары башҡорт халҡының бик тиҙҙән монкариз буласағына (бөтөүенә – М.И.) иман иткәндәр. Башҡорттарҙың ғәҙәт вә әхлаҡтарын яҙып һәм кейен вә зиннәттәрен музей өсөн тикшереп ятмаҡтар икән... Ысын башҡорт рухы вә башҡорт моңо менән йырҙар ҙа граммофонға алынып ҡалһа, бының... аҙмы әһәмиәте булыр ине? – тип әсенә Туҡай. – Ләкин милләтебеҙ диңгеҙенең ынйылары төптә ятып, "ул-был"дары ғына өҫкә ҡалҡа шул [4, 197]. Башҡорт халҡының яҙмышы, рухи донъяһы тураһындр уйланғанда, кем белә, әсәһенә арнап Өфөгә килерҙән ике йыл самаһы элек яҙылған бер шиғырының айырым юлдары ла, бәлки, уның хәтере аша үткәндер:

Үпкәнеңдән бирле, әсәй, иң ахыры кәррә һин,
Һәр ишектән һөрҙө улыңды мөхәббәт һаҡсыһы.
Бар күңелдәрҙән йылы, йомшаҡ һинең ҡәбер ташы,
Шунда тамһын күҙ йәшемдең иң асы һәм
татлыһы! [2, 128].

Бөйөк Туҡайҙың бер быуаттан ашыу ваҡыт элек Өфөгә килеп, ҡан-ҡәрҙәшлек тамырҙары менән бәйләнгән ысын мәғәнәһендәге туғандаш халҡы менән осрашыуы, Мәжит Ғафуриҙы күреүе әҙәбиәт һөйөүселәр күңелендә яҙғы бер сыуаҡ көн һымаҡ булып ҡала. Яҙмаларына ҡарағанда, Туҡайҙың үҙ күңелендә лә шундай тәьҫорат тыуған булырға тейеш: “13 көн Петербург “ризығын” ашағас, тағы Өфөгә табан сәфәр иттем... Өфөгә ҡайтһам, Өфө мине кейәү көткән ҡыҙ кеүек көтөп торған. Әтраф кейенгән. Йәм-йәшел. Ҡояш көлә. Яҙ еткән, яҙ!..”

1912 йылдың яҙында Ғабдулла Туҡайҙың Өфөгә килеп, шағир Мәжит Ғафури менән осрашыуы Сәйфи Ҡудаштың “Яҙҙы ҡаршылағанда” повесында ентекле сағылдырылған.

***Әҙәбиәт***

1. Ғәлләмов А., Яйыҡбаев К. Халыҡ уҡытыусыһы. – Ағиҙел, 1981, № 4.
2. Туҡай Ғ. Әҫәрҙәр: дүрт томда, 2-се том. – Ҡазан, 1976.
3. Туҡай Ғ. Әҫәрҙәр: дүрт томда, 3-се том. – Ҡазан, 1976.
4. Туҡай Ғ. Әҫәрҙәр: дүрт томда, 4-се том. – Ҡазан, 1976.

© **Иҙелбаев М.Х.**, 2018

**М.И. Иксанов**,
*Миндәк ауылы 7- се һанлы мәктәбенең*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*
**Р.Д. Хисаметдинов**,
*Учалы районы,*
*Миндәк ауылы 7- се һанлы мәктәбенең 9- сы синыф уҡыусыһы*

## МӘЖИТ ҒАФУРИ ШИҒРИӘТЕНДӘ МӨХӘББӘТ ЛИРИКАҺЫ

М. Ғафури шиғриәтенең мөхәббәт лирикаһы киң ҡатлам уҡыусыларға билдәле түгел, тип әйтһәк, яңылыш булмаҫтыр. Мәктәптәрҙең уҡытыу программаларына ул шиғырҙар индерелмәгән. XX быуат башында ижад иткән башҡорт авторҙарының әҫәрҙәре туплап баҫтырылған йыйынтыҡтарҙа ла М. Ғафуриҙың граждәнлыҡ лирикаһын ғына осратырға була. Шағирҙың граждәнлыҡ пафосы менән һуғарылған шиғри әҫәрҙәре ғилми яҡтан ярайһы уҡ яҡшы, эҙмә-эҙлекле, төрлө контекста тикшерелгән булһа [1, 399-434], мөхәббәт темаһына яҙылған шиғырҙары ентекле өйрәнеүҙе көтә. Был тәңгәлдә әҫәрҙәрҙең жанр, стиль үҙенсәлектәрен, поэтик образдар байлығын, һүрәтләү сараларының төрлөлөгөн, лирик герой менән авторҙың үҙ-ара бәйләнешен, ул әҫәрҙәрҙең яҙылыу шарттарын, тарихын тикшереү, әһәмиәтен, башҡорт шиғриәтенә булған йоғонтоһон билдәләү зарурҙыр. М. Ғафуриҙың мөхәббәт лирикаһын өйрәнеү шағир шәхесен киңерәк асырға, тәрәнерәк аңларға ла ярҙам итәсәк.

М. Ғафури шиғриәтенең сығанаҡтары Көнсығыш поэзияһына барып тоташыуын беләбеҙ [1, 399-434; 3, 16-26]. Авторҙың мөхәббәт лирикаһы ла был йәһәттән айырылып тормай. Шағир үҙ әҫәрҙәренең поэтик формаһын төҙөгәндә лә, образдар һайлағанда ла, нигеҙҙә, шәреҡ шиғриәте өлгөләренә таяна. “Миңә был көн мөхәббәт булды михнәт…” тигән шиғыры – шуға асыҡ миҫал. Ул ғәзәл формаһында ижад ителгән. Ғәзәл – Көнсығыш халыҡтары лирик поэзияһында (Әзербайжан, Үзбәкстан, Төркмәнстан һ.б) боронғо ваҡыттарҙа уҡ барлыҡҡа килгән шиғри формаларҙың береһе. Ике юллыҡ строфаларҙан – бәйеттәрҙән

тора. Ундағы бәйеттәрҙең һаны ун икенән артмаҫҡа тейеш, һәм ундағы юлдар, ҡасидәләге кеүек үк, аа ба, ва, га… схемаһы буйынса рифмалашып киләләр [4, 40]. Ғәзәлде үҙ аллы поэтик жанр тип тә ҡарарға була. Сөнки формаһы ғына түгел, йөкмәткеһе лә тотороҡло ҡанундарға нигеҙләнә. Ғәҙәттә, лирик герой һағышлы, яуапһыҙ мөхәббәт тойғолары кисерә, һөйгән ҡыҙының матурлығы менән һоҡланып, уның менән була алмағанға ғазап сигә. Үрҙә аталған шиғырҙың йөкмәткеһе ошо поэтик ҡанундарға тулыһынса тап килә:

*Миңә был көн мөхәббәт булды михнәт,*
*Күңелдән һис вакыт китмәй, ни хикмәт?*

*Бүтәндәргә бының һис ҡиммәте юҡ,*
*Вә ләкин был күренде миңә ҡиммәт.*

*Харап итте заһирҙы был фекерҙәр,*
*Быны уйлау ҡәлепкә бирҙе зиннәт…*[2, 29]

Шулай уҡ авторҙың оптимистик рухта яҙылған ғәзәлдәре лә осрай:

*Кисә күҙ йәштәре тамған урында*
*Бөгөн гөл сәскәһе үҫһә, ғәжәпме?*

*Ауырлыҡ менән үткән был минуттар*
*Еңеллек менән тиҙ үтһә, ғәжәпме?..*

*Ғишыҡ менән иҫергән был башымды*
*Гүзәл йөҙлө матур көтһә, ғәжәпме?*

(“Ғәжәпме?”) [2, 85]

М.Ғафури шиғриәтендә робағи формаһын да осратырға мөмкин (“…гә”, “Мәжлес”, “Баҡсала”). Шулай ҙа шағирҙың мөхәббәт лирикаһында мәснәүи (ике юллыҡ) строфаһы йышыраҡ ҡулланыла (“Мөхәббәт”, “Алданған ғашиҡ”, “Харап баҡса”, “Беренсе мөхәббәт”, “Һөйөүҙән ҡасыу”, “Ул”, “Яныу”,

“Көтмәгәндә”, “Миң” һ.б.). Халыҡ ижадынан автор 10-9 ижекле үлсәмгә нигеҙләнгән йыр строфаһын үҙ итә (“Оҡшатыу”, “Яңы таныш”, “Уны күреү менән моңло былбыл”, “Һулыған сәскә”).

Лирик герой мөхәббәтте иң мөҡәддәс тойғо, йәшәү сығанағы һәм мәғәнәһе тип ҡабул итә. Шул уҡ ваҡытта һөйөү уның өсөн һәр саҡ сафлыҡ, серлелек төшөнсәләренә ауаздаш булып тора:

*Һәр ваҡыт иҫһә күңелдән сын мөхәббәттең еле,*
*Мин буламын шул ваҡыт был бапта Мәжнүндән тиле.*

*Хәйләһеҙ, саф мөхәббәтте күңел эҙләп оса,*
*Әйләнеп, мәьюс булып ҡайта, ҡуныр ер тапмайса...*

“Халәте тәьҫирҙә” [2, 55]

Ҙур поэтик образдар урынына үҙенсәлекле художестволы деталдәр файҙаланылыуы лирик геройҙың нескә тойғоларын тәрәнерәк асырға булышлыҡ итә (“Ул”, “Сәс”, “Аяҡтары”, “Миң” һ.б.):

*...Һинең ап-аҡ йөҙөң өҫтөндәге шул кескенә миңде*
*Күрәм дә, тулған айҙың бер эшен уйлап, көләм инде...*

“Миң” [2, 83]

Күренеүенсә, Мәжит Ғафури шиғриәтенең мөхәббәт лирикаһы ла юғары художестволы камиллыҡҡа эйә. Ул шиғырҙар, боронғо шәреҡ әҙәбиәтенә тамырланып, поэтик оҫталыҡтың сағыу өлгөләре булып торалар.

### *Әҙәбиәт*


1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. 2-се т. XIX – XX быуат башы әҙәбиәте. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1996. – 582 б.
2. Ғафури.М. Был донъяны тотоп торған мөхәббәт. – Анкара, 2011. – 295 б.
3. Рамазанов Ғ. Башҡорт поэзияһында совет кешеһе образы. – Өфө: Башҡортостан китап издательствоһы, 1956. – 134 б.

4. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. /Төҙ. Ким Әхмәтйәнов. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1965. – 260 б.

© **Иҡсанов М. И., Хисаметдинов Р.Д.**, 2018

**Р.Х. Илишева**,

*филол. ф. к., доцент, Стерлитамаҡ ҡ.*

## СТӘРЛЕТАМАҠТА З.БИИШЕВА ИСЕМЕН МӘҢГЕЛӘШТЕРЕҮ

Башҡортостандың тәүге халыҡ яҙыусыһы З.Биишева исемен мәңгеләштереү буйынса республикала байтаҡ эш башҡарыла. 1997 йылдың 26 августа БР Министрҙар кабинеты ҡабул иткән 167-се һанлы «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы З.Биишева исемен мәңгеләштереү тураһында» ҡарарына ярашлы, эш бер нисә йүнәлештә бара. Берҙән, яҙыусы биографияһы менән бәйле иҫтәлекле урындарҙы билдәләү. Шуға бәйле, башҡалабыҙ Өфөлә яҙыусы йәшәгән йортҡа (Коммунистик урам, 71) буйынса мемориаль таҡтаташ ҡуйылған. Өфөлә һәм Күгәрсен районы Мораҡ ауылында төҙөк һәм матур урамдарға З.Биишева исеме бирелеүе, 3-сө һанлы Мораҡ гимназияһының З.Биишева исемен алыуы – ошо ҡарар нигеҙендә башҡарылған иҫтәлекле ваҡиғалар. Башҡортостандың Яҙыусылар берлеге һәм Күгәрсен районы хакимиәте йыл да тапшырыла килгән З.Биишева премияһын ойоштороусы булып сығыш яһай.

Үрҙә телгә алынған ҡарарҙа яҙыусының тыуған ауылы Күгәрсен районы Төйөмбәт ауылында З.Биишева исемендәге мәктәп-музей асыу, шулай уҡ Күгәрсен районы Мораҡ ауылында яҙыусыға бюст ҡуйыу, Өфөлә уның фатирында музей асыу кеүек эш йүнәлештәре лә билдәләнгән, уның байтағы тормошҡа ашырылды ла инде.

Төйөмбәт ауылындағы мәктәп-музей, билдәле булыуынса, 1998 йылда, киң йәмәғәтселек ҡатнашлығында, тантаналы шарттарҙа асылды. Ул үҙенең үҙенсәлекле архитектураһы, эске биҙәлеше менән яҙыусының тыуған ауылын йәмләп тора.

«Китап» нәшриәтенә маһир ҡәләм оҫтаһы З.Биишева исеменең бирелеүе шулай уҡ яҙыусы ижадына оло хөрмәт билгеһе булды.

Республика тарихында З.Биишева исемен мәңгеләштереүгә бәйле йәнә бер яҡты бит булғаны мәғлүм: 2008 йылда Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһына Зәйнәб Биишева исеме бирелгәйне. Стәрлетамаҡта 80 йылға яҡын юғары белемле кадрҙар әҙерләнә, коллектив йәш быуынға рухи тәрбиә биреү өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәште. Яҙыусы исеменең педагогик уҡыу йортона бирелеүе уның ижадының рухи бейеклеген дә, уҡыу-уҡытыу һәм башҡа гуманитар өлкәләргә тиҫтәләрсә фиҙаҡәр улдарын һәм ҡыҙҙарын биргән Биишевтар династияһының Ватан алдындағы хеҙмәттәрен дә таныу ине.

СДПА-ға 2008 йылда З.Биишева исемен бирелгәндән һуң бер йыл уҙғас, бында халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева музейы ойошторолдо. Ул заманса биҙәлеше, фотоларҙың, экспонаттарҙың яҙыусы ижадын тәрән аңлап, яратып урынлаштырылыуы яғынан өлгө булырлыҡ. Музей материалдарға ярайһы бай булыуы менән айырылып тора. Яуаплы бурыс – үтә лә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә музей фондын булдырыу, материалдарҙы системалаштырыу, бихисап ойоштороу эштәрен башҡорт әҙәбиәте кафедраһы ҡытыусылары башҡарып сыҡты. Яҙыусының тыуған ауылында гөрләп эшләп торған төп музей барында, яңы музейҙың үҙенсәлекле йөҙөн табыуы ҡатмарлы ғына мәсьәлә ине. Уҡыу йортонда урынлашҡан музей булараҡ, уның З.Биишеваға бәйле ғилми, методик йүнәлештәге материалдарҙы туплаусы үҙенсәлекле үҙәк рәүешендә формалашырға тейешлеге тәбиғи тойолдо. Стендтарҙың береһе «Уҡытыусы. Остаз. Мәғрифәтсе» тип аталыуы юҡҡа түгел. Экскурсиялар үткәргәндә ошо стенд эргәһендә һәр саҡ оҙағыраҡ туҡталырға тура килә. Төп фекеребеҙҙе аңлатҡанда З.Биишева ижады беҙгә ышаныслы терәк булып тора.

Музейҙа экспозициялар төрлө: Биишевтар шәжәрәһе, Каруанһарай, яҙыусының ғаиләһе һәм, әлбиттә, яҙыусы ижадына арналған стендтар. Яҙыусының тәүге әҫәрҙәре, геройҙары, яҙыусы ижадын өйрәнеү хаҡында мәғлүмәт, З. Биишева әҫәрҙәренең театрҙа ҡуйылыу, романдарының баҫылып сығыу тарихына бәйле материалдар менән студенттар һәм музейға килеүселәр бик теләп таныша. Музей яҙыусы ижадын мәктәптә һәм вузда өйрәнеүгә булышлыҡ итеү маҡсатын алға ҡуя, шуға материалдарҙы биреүҙә эҙмә-эҙлеклелек, уларҙың төрлө йәштәге уҡыусылар өсөн аңлайышлы булыуы төп талап булды. Музей фондында студенттар һәм факультет уҡытыусылары тарафынан бөртөкләп йыйылған хаттар, аудио-һәм видеояҙмалар, ҡулъяҙмалар һаҡлана. Яҙыусының шәхси әйберҙәре араһында алъяпҡыс, дебет шәл, радио кеүек иҫтәлекле ҡомарҡылар ҙа бар. Музей студенттарҙың ғалимдарҙың ғилми эштәре иҫәбенә үҙ фондын хәҙер ҙә тулыландыра. Ул йәмәғәтселек башланғысында эшләп килә.

2008 йылда сыҡҡан бер мәҡәләһендә күренекле яҙыусы һәм ғалим Р.Н.Байымов Башҡортостандың әҙәби музейҙары хаҡында: «Ҡыҙғаныска ҡаршы, урындарҙағы яҙыусыларға арналған музейҙар яҙма материалдар менән түгел, йыш ҡына стеналарҙағы фотоиллюстрациялары менән мауыға. Яҙыусы архивы, уның ижад лабораторияһы, шәхес үҙенсәлектәренә арналған, ижадын баһалаған материалдар музей хеҙмәткәрҙәре иғтибарынан ситтә ҡала килә» тип яҙғайны. Эш барышында уның кәңәштәрен тоторға тырыштыҡ.

Белем биреү өлкәһендә барған реформалар нигеҙендә, 2012 йылда Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы Стәрлетамаҡтың Башҡорт дәүләт университеты филиалына ҡушылды. Яңы структураға 7 факультетында уҡып йөрөгән 7 мең студенты менән күскән СДПА тарихында, әлбиттә, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы исемен йөрөтөү йылдары – ғорурлыҡ менән иҫкә алырлыҡ яҡты биттәр. Уҡыу-уҡытыу өлкәһе бөгөн дә һәр яҡтан килгән шәхес тәрбиәләүсе иң ҡеүәтле, үтемле өлкә булып ҡала. Зәйнәб Биишеваның ижади ҡаһарманлығы, уның идеалдарының сафлығы

һәм юғары әйҙәүсәнлеге йәш быуындың рухи мәҙәниәтен формалаштырыу юлында үҙенең мөҡәддәс, изге бурысын үтәүҙе дауам итә. «Мин ғүмер буйы уҡыным. Мин ни ҙә булһа өйрәнмәй, уҡымай торған көндәремде белмәйем. Мин һәр китабымды, һәр образды халыҡ йөрәгенән сығып яҙҙым» – тип яҙа Зәйнәб апай Биишева. Уҡыу донъяһы булған, уҡытыусылар әҙерләүсе вузда, факультетта ошо һүҙҙәр һәр саҡ иҫтә тора, рәсми исеме булмаһа ла, яҙыусы рухы беҙҙең менән ҡала.

© **Илишева Р.Х.**, 2018

**Р.Р. Йосопова**,
*башҡорт һәм төрки филологияһы факультетының I курс студенты.*
*Ғилми етәксеһе – филол. ф. к., доцент М.С. Арыҫланова,*
*БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы, Стәрлетамаҡ ҡ.*

## М.ҒАФУРИҘЫҢ ИЖАДИ МИРАҪЫ

Башҡортостандың беренсе халыҡ шағиры, башҡорт һәм татар әҙәбиәттәренең классигы, башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы Мәжит Ғафуриҙың исеме уҡыусылар араһында киң билдәле. Әҙиптең яҡташы булараҡ, мин унын ижади мираҫын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнәм.

Мәжит Ғафури 1880 йылдың 20 июлендә (яңыса 8 август) Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе (Башҡортостандың хәҙерге Ғафури районы) Еҙем-Ҡаран ауылында хәлфә ғаиләһендә тыуған. Атаһы Нурғәли умартасылыҡ эше менән дә шөғөлләнгән, төрлө эштәргә оҫта булған. Мәжит Ғафури зирәк бала була, бәләкәй саҡтан әкиәт, китаптар тыңларға ярата һәм бик иртә уҡырға өйрәнә. 1988 йылда Мәжит Ғафури, Урал тауҙары аша 450 саҡрым йәйәүләп тиерлек үтеп, Троицк ҡалаһындағы Зәйнулла ишан Рәсүлев мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Мәҙрәсәлә Мәжит Ғафуриҙың тәүге ижади аҙымдары башлана. 1902 йылда “Фәҡирлектә үткән тереклек” тигән тәүге проза әҫәрен яҙа. Буласаҡ шағир

Силәбеләә тәүге тапҡыр тимер юлын күрә, һәм ул егет күңелендә онотолмаҫ тәьҫир ҡалдыра. Һөҙөмтәлә “Себер тимер юлы” тигән шиғыр тыуа.

1906 йылда Мәжит Ғафури Өфөгә ҡайта һәм ҡалған ғүмерен шунда үткәрә. Бөйөк революция дауылдарының шаһиты һәм ҡатнашыусыһы булған Ғафури ысын-ысындан халыҡ шағиры була һәм үҙ әҫәрҙәрендә хеҙмәтсән халыҡтың яҙмышын, шатлыҡ һәм ҡайғыларын үҙе йәшәгән ҡатмарлы дәүер – XX быуаттың тәүге утыҙ йыллығы шарттарында һүрәтләй.

Әҙәбиәттә 1905-1907 йылдарҙағы революция алдынан сығыш яһаған Мәжит Ғафури Октябрь революцияһына тиклем ҙур ижади эҙләнеүҙәр юлын үтә. Яҙыусының ижад юлы революцияға тиклем дә, унан һуң да шыма һәм ҡапма-ҡаршылыҡһыҙ ғына бармай.

Мәжит Ғафури ижады яҙыусының тәүге аҙымдарынан уҡ әҙәби һәм ғилми йәмәғәтселектен иғтибар үҙәгендә була. Мәжит Ғафуриҙың башланғыс осоро ижадына тәү башлап иғтибар итеүселәрҙең береһе татар шағиры Ғабдулла Туҡай булыуы билдәле, замандаштары Ғ.Камал, Ф.Әмирхан һәм Ғ.Ибраһимовтар ҙа уның ижади эшмәкәрлегенә иғтибар итә. "Бир ҡулыңды"лағы хеҙмәт кешеһенә иғтибар артабан "Эшсе" поэмаһында дауам иттерелә. Был әҫәрҙең тәүге баҫмаһына (1921) яҙған баш һүҙендә Ғ.Ибраһимов: "Ҡулығыҙҙағы "Эшсе" поэмаһы һис бер төрлө шәрехкә (аңлатмаға) мохтаж түгел", – тип яҙҙы" [1, 148].

Мәжит Ғафури Октябрь революцияһын “Ҡыҙыл байраҡ” исемле шиғырҙар йыйынтығы менән ҡаршылай. Был шағир ижадының хеҙмәтсән халыҡ тормошо, уның уй-тойғолары, көрәше менән айырылғыһыҙ бәйләнгәнен раҫлай. Октябрь революцияһы еңгәндән һуң, Мәжит Ғафури йәш башҡорт әҙәбиәтен һәм мәҙәниәтен үҫтереүгә күп көс һала. Шағир рус әҙәбиәте өлгөләрен, шул иҫәптән Максим Горький әҫәрҙәрен тәржемә итеүҙең инициаторы була, “Азат мәктәп” исемле дәреслек-хрестоматияларҙы төҙөүҙә актив ҡатнаша. Революция, граждандар һуғышы ялҡынып үтеп, әҙәбиәткә

килгән Ғ. Ғүмәр, Ш.Хоҙайбирҙин, Д.Юлтый кеүек йәш яҙыусыларға өлкән шағир яҡындан ижади ярҙам күрһәтеүе билдәле [1, 147].

Мәжит Ғафуриҙын революциянан һуңғы ижадының үҙәгендә заман геройы хаҡында уйланыуҙар тора. Уның фекеренсә, ысын герой – революция ҡаҙаныштарын яҡлау өсөн йәнен дә, көсөн дә ҡыҙғанмай торған кеше.

Мәжит Ғафури һәм уның ҡәләмдәштәре ижадында яңы заман геройын һүрәтләгәндә үлемһеҙлек, юғары романтика хаҡында уйланыуҙар, образдарҙың күтәренке рухы – характерлы күренеш. Ул үткәнгә, хыялға, экиәттәргә ҡайтып ҡалмай, ә тормоштоң, реаль ысынбарлыҡтың үҙенә таяна.

Мәжит Ғафуриҙың 1920 йылда яҙылған “Ант”, ”Татар егетенә” һәм ”Бир ҡулыңды” кеүек шиғырҙарында тап бына шундай ыңғай герой сифаттарын күреү ҡыйын түгел. Революцияның башланғыс осорондағы традицион образдарҙан шағир яңы йөкмәткене сағылдырыу өсөн яңы романтика менән һуғарылған реалистик образдарға күсә килә.

“Ант” (”Ғәһет”) шиғырында – Мәжит Ғафуриҙың һуғышсан лирикаһының типик өлгөһө булған әҫәрҙә – азатлыҡ, яңы донъя өсөн яуға күтәрелгән яңы кешенең иң яҡшы сифаттары тупланып бирелгән.

1923 йылда Мәжит Ғафуриға беренсе булып "Башҡортостандың халыҡ шағиры" исеме бирелә.

20-се йылдар аҙағы 30-сы йылдар башына Мәжит Ғафури үҙенең үткән тормоштан яңы заманға күсеүгә арналған “Ҡара йөҙҙәр” (1921 й.), ”Тормош баҫҡыстары” (1928 й.) һәм “Шағирҙың алтын приискаһында” (1930 й.) кеүек яҙыусы ижадында социалистик реализм методының күренекле ҡаҙаныштары булған киң билдәле классик повестарын яҙа.

Ғ.Рамазанов билдәләүенсә, “Шағир алтын приискаһында” повесында бөтә ваҡиғаларҙы үҙ тирәһенә туплап, үҙ йөрәге аша үткәргән бер герой бар. Ул – хикәйәләүсе, әҫәрҙең лирик геройы, авторҙың үҙ образы. М.Ғафури повесының әһәмиәте, капиталистик иҙеүҙе фашлау менән генә сикләнмәй. Яҙыусы был әҫәрендә саф күңелле, хеҙмәт һөйөүсе кешеләргә дан йырлай.

Яңы заман менән бергә үҫеп барған совет театры өсөн репертуар тыуҙырыу эшенә Мәжит Ғәфури ҙа үҙенең өлөшөн индерә. Ул ғүмеренең аҙағынса публицистика һәм журналистика өлкәһендә лә эшләүҙән туҡтамай.

Оҙаҡ йылдарға һуҙылған ҡаты ауырыу 1934 йылдың 28 октябрендә Ғафуриҙың ғүмерен өҙә. Ләкин ул ҡалдырған ижади мираҫ бөгөн дә өйрәнелә, ентекле тикшерелә.

Ғүмерен халыҡҡа бағышлаған шағирҙың ижады ваҡыт һынауын үтте. Мәжит Ғафуриҙың исемен мәңгеләштереү буйынса бихисап эштәр эшләнде һәм эшләнә. Тыуған ерендә 1930 йылда Красноусол районы ойошторола һәм яҙыусының тыуыуына 60 йыл тулыуын билдәләп, 1940 йылда Ғафури районы тип үҙгәртелә. Өфөлә һәм Ғафури районы Еҙем-Ҡаран ауылында яҙыусының музейҙары бар, башҡорт дәүләт академия драма театры Мәжит Ғафури исемен йөрөтә, уның алдында мәшһүр әҙиптең һәйкәле тора. Байтаҡ ҡына ҡала-ауылдарҙа урамдар, скверҙар яҙыусы исемен оло хөрмәт менән йөрөтә.

### *Әҙәбиәт*


1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 3 том. Башҡорт совет әҙәбиәте (1917-1941 йылдар). – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. – 544 бит.

2. Рамазанов Ғ. Мәжит Ғафури ижады. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1965. – 418 бит.


© **Йосопова Р.Р.**, 2018

**Р.К. Ишмырҙина**,
*филол. ф. к.,*
*Жәлил Кейекбаевтың йорт-музейы директоры,*
*Ғафури районы, Ҡаранйылға а.*

## МУЗЕЙ – ТАРИХЫБЫҘҘЫҢ ХӘТЕР ЙОРТО

Атаҡлы башҡорт ғалимы, донъя тюркологияһында киң билдәле фән әһеле һәм талантлы әҙип, педагог, филология фәндәре докторы, профессор Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың ғилми-теоретик һәм әҙәби мираҫы башҡорт филологияһы һәм төрки тел ғилеме тарихында айырым урын тота. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, ил уҙаманы Ж.Ғ. Кейекбаевтың яҡты иҫтәлеге халҡыбыҙ хәтерендә мәңге һаҡлана.

Ғалимдың тыуған ерендә – Ғафури районы Ҡаранйылға ауылында урынлашҡан Жәлил Кейекбаевтың йорт-музейы быуатты быуатҡа бәйләүсе рухиәт усағы булып тора. Мәшһүр ғалим, талантлы яҙыусы, яҡташыбыҙ Жәлил Кейекбаев мәрхүм булғас, уның эшенә тоғролоҡ һаҡлаған шәкерте остазының исемен мәңгеләштереү эшенә ылыға.

Ғиндулла Шириәздан улы Шәйәхмәтовтың тырышлығы менән Сәйетбаба урта мәктәбендә тыуған яҡты өйрәнеү түңәрәге нигеҙендә Жәлил Кейекбаевтың музейы булдырыла, һәм 1969 йылдың мартында мәктәпкә уның исеме бирелә. 1974 йылда музей «Мәктәп музейы» тип йөрөтөлә башлай. Шул уҡ йылдың 17 февралендә уға 2767-се һанлы танытма тапшырыла, 25 октябрендә иҫтәлекле мәрмәр таҡташ ҡуйыла. 1977 йылдың 17 мартында музей паспортлы була.

1991 йылда Башҡортостан Республикаһының Министрҙар Советы ҡарары менән күренекле ғалим һәм яҙыусының тыуған ауылында музей төҙөлә башлай. 1992 йылдың 25 октябрендә, Ж.Ғ. Кейекбаевтың тыуған көнөндә, күренекле ғалим-тюркологтың мемориаль-биографик музейы тантаналы рәүештә асыла.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың ғилми хеҙмәттәре менән бергә әҙәби ижадына ҡараған материалдар һаҡлана. Жәлил Ғиниәт улының шәхси әйберҙәре, хаттары һәм

ҡулъяҙмалары, рус, немец, татар, яҡут, ҡаҙаҡ, үзбәк, әзербайжан, эстон һәм башҡа ғалимдарҙың иҫтәлектәре музейҙың төп экспонаттары булып тора. Музей предметтарының ҡайһы берҙәре Ж.Ғ. Кейекбаевтың тормош иптәше Нәфисә ханым, уның дуҫтары, ҡәләмдәштәренән бүләк итеп тапшырыла. Фәндәр академияһы, Башҡорт дәүләт университеты ғалимдары ла музейға оло ярҙам күрһәтә, улар иҫәбендә Н.Х. Мәҡсүтова, Ғ.Ғ. Сәйетбатталов, М.В. Зәйнуллин, З.Ғ. Ураҡсин, Ғ.Б. Хөсәйенов, Ә.Х. Вахитов, Ғ.С. Ҡунафин һ.б.

Жәлил Кейекбаевтың йорт-музейы – ысын мәғәнәһендә ғилми, мәҙәни, әхлаҡи-этик һәм эстетик белем һәм тәрбиә биреү усағы. Биш тиҫтәгә яҡын йыл эсендә музей ғалимдың тормошон, ғилми һәм ижади эшмәкәрлеген сағылдырған яңынан-яңы экспонаттар, материалдар менән тулылана бара. Музей бөгөн 1000-дән ашыу дана экспонатты үҙ эсенә ала. Әлеге көндә экспонаттар һаман да күбәйеү өҫтөндә, уларға урын да әҙәйә…

Бөгөн Жәлил Кейекбаевтың йорт-музейы – районда ғына түгел, бөтә республика кимәлендә билдәлелек яулаған музей. Ж.Ғ. Кейекбаевтың ғилми мираҫын һаҡлау өсөн музей диплом менән бүләкләнә, «Иң яҡшы әҙәби музей» номинацияһы менән наградлана.

Рухи ҡомартҡыларҙы йыйыу һәм һаҡлау менән бергә, музейҙар ҙур ғилми-ағартыу һәм уҡытыу-тәрбиәүи эштәр башҡара. Был йәһәттән Жәлил Кейекбаевтың йорт-музейының эшмәкәрлеге күп йүнәлешле, тип әйтһәк, хата булмаҫ. Ул фонд эшен башҡарыуҙы ла, ғилми-методик эште алып барыуҙы ла, йәмәғәт эштәрендә ҡатнашыуҙы ла үҙ эсенә ала.

Музейыбыҙҙа тыуған яҡты өйрәнеү түңәрәге уңышлы эшләп килә. Балалар бында тыуған яҡтың тарихы, ерле халҡы, уның тормошо, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, билдәле шәхестәре менән яҡындан таныша. Иң мөһиме – музей йәш быуында үткәнгә ихтирам тәрбиәләргә ярҙам итә.

Жәлил Кейекбаев йорт-музейының педагогик эшмәкәрлеге тураһында һүҙ алып барғанда, әлбиттә, туған телде һәм сит ил телдәрен өйрәнеүҙе күҙ уңында тотаһың – ғалим үҙе бик күп телдәрҙе яҡшы белгән. Музейҙа ғәрәп теле

түңәрәге уңышлы эшләп килә. Уҡыу йылы дауамында уҡыусылар ғәрәп телен өйрәнә. Күп телдәрҙе белгән баланың донъяға ҡарашы ла киңерәк була.

Һәр йылдың 25 октябрендә Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың яҡты иҫтәлеген ихтирам итеүгә арналған Хәтер һәм ҡәҙер кисәһе үткәрелә. Халыҡ-ара музейҙар көнө айҡанлы музейҙа «Музейҙар төнө» акцияһы уҙғарыла. Ҡаранйылға ауылында Жәлил Кейекбаевтың йорт-музейы менән берлектә ауылдаштар осрашыуҙары, шәжәрә байрамдары ойоштороla, музей – халыҡтың үткәнен бөгөнгө тормошо менән тоташтырыу үҙәге бит.

Музей ғилми-тикшеренеү эштәре лә алып бара: төрлө кимәлдәге фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, туризм-крайҙы өйрәнеү буйынса семинарҙарҙа ҡатнашыу музейҙың ғилми эшмәкәрлеген тулыландыра. Йәш быуынды фәнгә ылыҡтырыу маҡсатында Ж.Ғ. Кейекбаев исемендәге мәктәп менән берлектә йыл да «Кейекбаев уҡыуҙары» район ғилми-ғәмәли конференцияһы уҙғарыла.

Күп кенә уҡыусылар, студенттар, аспиранттар өсөн музейҙа һаҡланған материалдар ғилми эштәрен башҡарыуҙа төп сығанаҡ булып тора. Ж.Ғ. Кейекбаев ижадына арнап юғары уҡыу йорттары студенттары байтаҡ диплом проекттары, йәш ғалимдар филология фәндәре кандидатлығына диссертация эштәре яҙҙы.

Ғөмүмән, башҡорт халҡының мәшһүр улының тормошо, эшмәкәрлеге өлгөһөндә эш һөйөүсәнлек, актив тормош, граждандыҡ позициялары, тыуған ергә, тыуған илгә, төйәккә, туған телгә ҡарата һөйөү хисе тәрбиәләү музейҙың төп маҡсаты булып тора.

Арҙаҡлы ил улы, оло шәхес Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевҡа арналған йорт-музей – уның яҡты рухына һәйкәл ул. Музейға килергә теләүселәр өсөн музей ишектәре һәр саҡ асыҡ. Музей бөгөн дә тулы тормош һәм киләсәккә ҙур маҡсаттар менән йәшәй.

© **Ишмырҙина Р.К.**, 2018

**А.У. Киньябулатов**,
*к. м. н., доцент БГМУ, г. Уфа*
**Ш.З. Загидуллин**,
*д. м. н., профессор БГМУ, г. Уфа*
**А.А. Хазиманова**,
*аспирант БГМУ, г. Уфа*

## БОЛЕЗНЬ И СМЕРТЬ МАЖИТА ГАФУРИ

В Казани около речного порта есть улица имени М.Гафури, там есть одна особенность, которая нас заинтересовала, его имя написано следующим образом: «Маджит Гафури», через букву «д». На самом же деле его звали Габдельмажит Нургалеевич Гафуров, а псевдоним он взял Мажит Гафури. «Габдельмажит» переводится с арабского языка, как «Габдель» плюс «Мажит» — «раб божий» и «прославленный, славный», т.е. дословно «прославленный раб божий». В 2020 году будет отмечатся 140-летие со дня его рождения классика башкирской литературы М.Гафури. В начале улицы Чернышевского дом 5 раньше располагалось медресе «Галия», куда Мажит Гафури, приехал в 1906 году учиться из Казани, впоследствии в этом здании располагалась школа имени Мажита Гафури, а сейчас здесь находится мусульманский университет. В 1923 году, в связи с 20-летием творческой деятельности, Мажиту Гафури было присвоено почётное звание «Народный поэт Башкирской АССР» — он стал первым официально признанным поэтом в первой автономной советской социалистической республике в составе РСФСР. В дни юбилея правительство республики подарило ему дом на улице Гоголя 28, в котором ныне размещается дом-музей М.Гафури, где он написал свои лучшие произведения: «Черноликие», «Ступени жизни, «Красная звезда» и другие. В Уфе нет больше улицы в нашем городе, которую бы назвали именем поэта при его жизни. Это событие тоже произошло в 1923 году, в дни празднования 20-летия творческой деятельности. Первый дом М.Гафури стоял напротив того места, где сегодня

стоит Телецентр, а рядом жили поэт С.Сунчелей. Они дружили, но дом сгорел, поэтому первоначально М.Гафури жил на «своей» улице, лишь потом переехал на улице Гоголя. М.Гафури любил гулять по «своей» улице, она тянулась до того места, где сейчас стоит памятник Салавату Юлаеву, он любил большой камень, который сейчас находится в основании памятника, где находится смотровая площадка.

Состояние здравоохранения в начале XX века в Уфимской губернии характеризовалась развитием земской медицины, в Уфе работали 4 доктора медицины. Среди коренного населения было распространены социально-значимые заболевания того периода — трахома, туберкулез, сифилис и др. Туберкулёз был распространен среди жителей г. Уфы и Уфимской губернии, население города Уфы было в 1913 г. составляло 100700 человек, а в 1931 г. соответственно 125000 человек. Чахотка старое название туберкулёза, по данным академика РАН Александра Григорьевича Чучалина (директор НИИ пульмонологии) сегодня в мире более 200 туберкулезо-подобных заболеваний, которые протекают как туберкулёз, но палочки Коха не высеивается. Палочка Коха может длительно сохранять свою жизнеспособность и стремительно вырабатывает стабильную устойчивость к различным лекарственным препаратам, поэтому до сих пор данное заболевание относится к социально-значимым и его распространенность является одним из показателей здоровья населения страны. Народный комиссариат здравоохранения в начале 1930-х гг. особым постановлением закрепил за первым народным поэтом республики личного врача, которым стал опытный терапевт В.К.Огородников. Практически ежегодно поэт М.Гафури вместе со своей женой находились на лечении в кумысолечебницах республики, но состояние его здоровье ухудшалось — основными симптомами были кашель и кахексия, и как следствие этого пониженный вес, отсутствие аппетита, склонность к простудным заболеваниям. Несмотря, что творческой энергии у М. Гафури было достаточно, но можно предположить, что трудоспособность была резко снижена и по всей видимости

наблюдалась быстрая истощаемость, которая сказывалась в его творчестве. Известный патопсихолог Блюма Вульфовна Зейгарник описывает, что у больных туберкулезом снижается память. Многие известные деятели литературы болели и умерли от туберкулеза: А.П.Чехов, В.Г. Белинский, Н.А. Добролюбов и др. Основными клиническими проявлениями заболевания является кашель, мокрота, кровохаркание, истощение, данные симптомы были описаны «классиками медицины» Галеном, Гиппократом, Абу Али ибн Синой и др. Не наступил еще век антибиотиков, лечение проводилось сульфаниламидами, в СССР открывались новые противотуберкулезные санатории, благодаря которым снизилась заболеваемость туберкулезом. Помимо личного врача, который следил за состоянием здоровья поэта, также были прикреплены бричка с извозчиком, которая закреплялась за Народным комиссариатом здравоохранения. Палочку Коха у Мажита Гафури не выявили, причиной смерти стал паралич сердца (остановка сердца), что могло стать следствием ряда заболеваний. В газете «Красная Башкирия» ни слово не говорится о туберкулезе, что видимо объясняется, возможно, пропагандой достижений советского здравоохранения, который успешно боролся с туберкулезом. Главный пульмонолог Республики Башкортостан Шамиль Зарифович Загидуллин считает, что изучение истории болезни откроет много тайн творческого наследия народного поэта М.Гафури. К тому же главный пульмонолог Российской Федерации А.Г. Чучалин во время проведения Конгресса пульмонологов в 2012 году в здании Конгресс-холла (г.Уфа) сказал, что «…история пульмонологии в России начинается с приезда А.П. Чехова в Андреевский санаторий». В настоящее время создана временная рабочая группа по изучению кумысолечения, историй болезни А.П.Чехова, М.Гафури под руководством профессора Ш.З.Загидуллина и доцента А.У.Киньябулатова (БГМУ).

Выводы: 1. Народный поэт Башкирской АССР М.Гафури болел туберкулезоподобным заболеванием.

2. Смерть поэта наступила от сердечной недостаточности.

3. Создана временная рабочая группа из числа студентов-активистов БГМУ, которые изучают кумысолечение, истории болезни А.П.Чехова и М.Гафури.

***Литература***


1. Еникеев Д.А., Киньябулатов А.У., Камаева Л.М. Патофизиологические особенности болезни народного поэта БАССР Мажита Гафури // Рос. Научно-практич. конф. (14-15 декабря 2005 г.) «Взаимопонимание культур и проблемы национальной идентичности (к 125-летию М.Гафури)», г. Уфа, ВЭГУ, 2006. — С. 271.



© **Киньябулатов А.У.**, 2018

© **Загидуллин Ш.З.**, 2018

© **Хазиманова А.А.**, 2018



**А.У. Киньябулатов**,

*к. м. н., доцент БГМУ, г. Уфа*

**Е.С. Ширяева**,

*студент БГМУ, г. Уфа*

**А.А. Хазиманова**,

*аспирант БГМУ, г. Уфа*


## ВРАЧИ-ТРУЭНТЫ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

В настоящее время широко распространено понятие «врачи-труэнты» (от английского truant – прогульщик). К ним относятся, например, актеры Татьяна Друбич, Александр Прохорщиков, певец Александр Розенбаум, кинорежиссер Юлий Гусман, писатели Антон Чехов, Михаил Булгаков, Викентий Вересаев, Василий Аксенов, Григорий Горин, продюсеры Яна Рудковская, Гарик

Мартиросян, политик Валентина Матвиенко и др. Врачам свойственно много писать; к тому же хорошее написание истории болезни можно рассмотреть, как хорошее сочинение на заданную тему о постановке диагноза. Много шуток вызывает почерк врачей, но надо сказать, что у врачей-труэнтов почерк был прекрасный. Следующие врачи Республики Башкортостан являются членами творческих союзов: член Союз писателей Республики Башкортостан В.Г.Сахаутдинов, члены Союза журналистов Республики Башкортостан А.С.Мифтахова, А.А.Кулагина, Б.В.Гумаров, А.С.Рахимкулов, А.У.Киньябулатов [1], то есть, по сути, их тоже можно внести в список врачей-труэнтов.

В Республике Башкортостан среди врачей было всего 5 членов Союза журналистов, которые освещали вопросы истории медицины. Первая среди них – Амина Садыковна Мифтахова (1923-2005), детский невролог, доктор медицинских наук (1973), профессор (1974). После окончания БГМИ (1947) работала в дошкольных и школьных учреждениях г.Уфы. В 1953-1986 гг. в БГМИ (в 1972-83 гг. – заведующая кафедрой нервных болезней педиатрического, санитарно-гигиенического и стоматологического факультетов). Основные публикации в газетах «Советская Башкирия», «Вечерняя Уфа», «Медик» были посвящены вопросам лечения полиомиелита, туберкулезного менингита, детского церебрального паралича с применением бальнеологических факторов Красноусольского детского санатория. Автор свыше 20 печатных работ в средствах массовой информации [2, 229; 4, 203].

Антонина Алексеевна Кулагина (1926-2010) кандидат медицинских наук, терапевт. Окончила лечебный факультет Алма-Атинского медицинского института. В 1965 году начала работать ассистентом на кафедре организации здравоохранения в Башкирском государственном медицинском институте, в 1971 году была назначена деканом вновь образованного санитарно-гигиенического факультета. В последующем работала в Уфимском НИИ гигиены труда и профзаболеваний, в Республиканском центре медицинской

профилактики. Автор 36 печатных статей, 7 монографий, 4 брошюр, одного историко-публицистического очерка. Печаталась в газетах «Советская Башкирия», «Вечерняя Уфа», «Ленинец», «Медик» и др. Награждена знаком «Отличник здравоохранения СССР», медалью «Ветеран труда» [3, с.42].

Доцент Борис Зыякайнович (Варис Зыякаевич) Гумаров (1928-2007), кандидат медицинских наук. дерматовенеролог. Окончил Челябинский медицинский институт (1951). С 1970 года ассистент кафедры социальной гигиены и организации здравоохранения с историей медицины, с 1992 до 1999 года – доцент. В 1995-2002 годы, будучи ведущим научным редактором в Научном издательстве «Башкирская энциклопедия», принял самое активное участие в выпуске двух энциклопедических изданий «Краткая энциклопедия Башкортостана» (на русском и башкирском языках). Издал 2 словаря («Русско-башкирский словарь медико-гигиенических терминов» и «Русско-башкирская терминология по анатомии и физиологии»), монографию «Башкирская народная медицина», которая получила положительную оценку не только среди учѐных республики, но и крупных историков медицины всей России – П.Е. Заблудовского, Б.Д. Петрова, Э.Д. Грибанова, М.К. Кузьмина. Ему присвоено звание «Заслуженный врач Республики Башкортостан» (1996), награждѐн медалью «Ветеран труда» [3, 49; 4, 96].

Доцент Азамат Салаватович Рахимкулов (1973 г.р.) окончил лечебный факультет Башкирского медицинского университета (1998). Невролог, кандидат медицинских наук. В 1999-2000 гг. работал неврологом в неврологическом отделении клиники УфНИИМТЭЧ. С апреля 2001 года работал заместителем главного редактора газеты «Медик» БГМУ. Член редколлегии литературного альманаха «Немало Вероятно». Автор свыше 20 печатных статей в средствах массовой информации, 1 методического пособия по истории медицины. Печатался в газетах «Республика Башкортостан», «Вечерняя Уфа», «Ленинец», «Медик» и др. [3; 70-71].

Доцент Азат Уранович Киньябулатов (1963 г.р.) окончил лечебный факультет Башкирского медицинского института. Кандидат медицинских наук, нейрохирург. С 1999 года – научный редактор Научного издательства «Башкирская энциклопедия», с 2006 – года заместитель директора по научно-издательской работе. Его публикации посвящены истории медицины и социологии медицины, физической культуре и спорту в Республике Башкортостан. Президент Ассоциации историков медицины Республики Башкортостан (2011). Автор 34 статей в средствах массовой информации, 9 книг (биографических очерков, разговорников, энциклопедических справочников). Награжден знаком «Отличник здравоохранения Республики Башкортостан» (2013), Почетными грамотами Союза журналистов России (2013) и Республики Башкортостан (2012) за участие в подготовке и выпуске 7-томной "Башкирской энциклопедии" (2005-2011) и биографического энциклопедического словаря «Медики Республики Башкортостан» (2009) [4, 5].

Выводы: 1) Врачи-члены Союза журналистов СССР и России: Б.З.Гумаров, А.У.Киньябулатов, А.А.Кулагина, А.С.Мифтахова, А.С.Рахимкулов внесли значительный вклад в развитие республиканской журналистики.

2) Необходимо расширить членство в творческих союзах республики молодых врачей активистов Ассоциации историков медицины Республики Башкортостан.

### *Литература*

1. Киньябулатов А.У., Зиятдинов Р.З., Шарафутдинова Н.Х., Фаюршин А.З., Ахмадиева Г.Р., Салемгареев И.И. / Вклад врачей-членов Союза журналистов СССР, России и Республики Башкортостан в историю медицины // Казанская Наука», 2014, № 7. – С.22-24.

2. Башкирская энциклопедия. В 7 т. Т. 4. Л-О / Гл. ред. М.А. Ильгамов. – Уфа: Башкир. энцикл., 2008. – С.229.

3. Становление и развитие. – Уфа: Изд-во Башгосмедуниверситета, 2006. – 124 с.

4. Киньябулатов А.У. Медики Республики Башкортостан (биографический энциклопедический справочник). Уфа, 2009. – С.96, 166, 169, 203.

5. Журналисты России. XX-XXI: Справочно-энциклопедическое издание. – ИД «Журналист», 2013. - С.379.

© **Киньябулатов А.У.**, 2018
© **Ширяева Е.С.**, 2018
© **Хазиманова А.А.**, 2018

**Л.Р. Кирәева**,
*филол. ф. к., БашДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы доценты,Стәрлетамаҡ ҡ.,*
**Г.Ю. Дилмөхәмәтова**,
*В.И. Ленин исемендәге 2-се лицей-интернат тәрбиәсеһе,Стәрлетамаҡ ҡ.*

## МӘЖИТ ҒАФУРИҘЫҢ «ЯРЛЫЛАР, ЙӘКИ ӨЙҘӘШ ҠАТЫН» ПОВЕСЫНДА ЭКЗИСТЕНЦИАЛИЗМ ҺЫҘАТТАРЫ

XIX быуат аҙағы – XX быуат башында әҙәбиәт ярҙамында донъяны, йәшәйеште үҙгәртеү фекере беренсе планға сыға. Был осорҙа донъя күргән әҫәрҙәр традицион булмаған эҙләнеүҙәр, быға тиклем милли һүҙ сәнғәтендә күҙәтелмәгән алымдарҙан файҙаланыу менән айырылып тора. Мәжит Ғафури, Афзал Таһиров, Дауыт Юлтый, Әхнәф Таңғатаров һ.б. яҙыусылар кеше, донъя, йәшәйеш мәсьәләләрен күтәрә, тормошта бәхеткә ирешеү, йәшәү мәғәнәһен эҙләү юлдарын барлай. Йәмғиәттең камил булмауын, кешенең был тормоштағы урынын күҙаллау күп кенә әҙәби-фәлсәфәүи мотивтарҙы барлыҡҡа килтерә. Экзистенциализм ағымы ла шундайҙарҙан.

Был йүнәлеш тормошто ләззәт һәм һыҙланыу сығанағы итеп ҡарай, йәшәйештең асылын ғазап сигеүҙә күрә, шундай донъяға килгән кеше лә ғазап сигеүсе, сараһыҙлыҡтан бер сиктән икенсеһенә ташланыусы кеүек һүрәтләнә. Ошо һыҙланыу фәлсәфәһе XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенә лә йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Р.Фәхретдиндың «Әсмә йәки ғәмәл вә яза», М.Ғафуриҙың «Болғар ҡыҙы Айһылыу», З.Һаҙыйҙың «Бәхетле ҡыҙ», «Бәхетһеҙ ҡыҙ», А.Таһировтың «Һатылған ҡыҙҙар», «Мазлумалар», С.Яҡшығоловтың «Ҡарт иргә бирелгән башҡорт ҡыҙының зары» кеүек ғазапланыусы кеше образын үҙәккә ҡуйған фәлсәфәүи-дини йөкмәткеле әҫәрҙәр яҙыла. Кешене ихтыярһыҙ, көсһөҙ яһай торған үлем, өмөттөң өҙөлөүе, гонаһ һәм яза, хәҡиҡәт кеүек төшөнсәләр тирәһендәге ҡараштар әҫәрҙәрҙең поэтикаһына ла тәьҫир яһаған. Йәшәйеште ғазап сығанағы булараҡ күрһәтеү өсөн, яҙыусылар мистик-әкиәти йәки кешене иң һуңғы сиккә еткергән ваҡиғалар (сир, хәйерселек, яңғыҙлыҡ, енәйәт, бәхетһеҙлек) сюжетына мөрәжәғәт итәләр.

Мәжит Ғафуриҙың «Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын» повесында был мотивтар айырыуса асыҡ сағылыш таба. Йәмилә һәм Бәҙри образдары менән М.Ғафури башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ауыр яҙмышы проблемаларын асыуҙы дауам итә. Был образдар яҙыусының элекке әҫәрҙәрендәге образдарҙан тәрәнерәк һәм күп яҡлыраҡ булыуҙары менән айырыла. Бына Бәҙри. Яҙыусы героиняның исемендә үк уның бәхетһеҙ, ярлы булыуын баҫым аҫтына ала: «Шәрифтең ҡатыны Бәҙриямал исемле булһа ла, ярлы булғанға күрә, Бәҙри, йәки Бәҙрәш тип кенә йөрөтә торғандар ине…». Бәҙриҙең портреты ла уның исеменә тура килеп тора: «...Оҙон ғына буйлы, ас яңаҡлы, күҙҙәре эскә батҡан, өмөтһөҙ генә сифатлы бер ҡатын... Өҫтөнә кейгән күлдәгенең ике еңе аҡ, билдән юғары яғы ҡыҙыл, түбән яғы һарғылт, башына ураған, былтыр ураҡ ваҡытында алған яулығы ҡып-ҡыҙыл булғанға күрә, ала кейемле тип әйтерлек ине...». Бәҙри – иренең һүҙен генә тыңлап тороусы, сыҙам һәм иҫ киткес түҙемле, ғаиләһен яратыусы ҡатын. Ире сирләп киткәс тә, ниндәй генә ауырлыҡтар килһә лә, кешелек сифаттарын юғалтмай: Йәмиләне ташламай, йә

ҡыуып сығармай. Әçәрҙең аҙағы шулай тамамлана: «Шәриф ауырып ятҡан ваҡытта, Бәҙри балаларын теләнеп туйҙырып торҙо. Был ваҡытта Бәҙриҙең күрмәгән ауырлыҡтары ҡалманы. Ул хәйерселәрҙең дә иң оятһыҙы булды. Был ауырлыҡтарҙың бөтәһе, Шәрифтең үлеүенә ҡарағанда, бик еңел булып ҡалды. Икешәр-өсәр көн ас тороп иламаған Бәҙри Шәриф үлгән ваҡытта иланы. Бының өçтөнә, Шәриф үлгәндән бер аҙна һуң, эсендәге балаһы донъяға килде. Бына ул шул ваҡытта аслыҡтың ауырлығын татыны. Үҙе бер ергә лә сыға алмағанға күрә, Гөлйыһан менән Хоҙайбирҙе теләнеп йөрөй башланылар. Ул ваҡыттар ҙа үтте. Ҡар бөтөп, арба юлы төшкәс, ауыл еренә ҡайтырға уйлап, ҡаланан сығып китте. Эçе көндә имсәк балаһын арба менән һөйрәп, ике балаһын эйәртеп, юл менән барған ҡатын бына шул Бәҙри ярлы ине». Нимә көтә уны ауылда? Тағы нимәләр күрер ул?

Повеста Йәмилә образына ла ҙур урын бирелгән. Автор уны ошондай итеп күҙ алдына баçтыра: «Йәмиләнең ҡиәфәте, тормошо ауыр бер хәлдә, донъяның бөтмәç мәшәҡәттәрендә икәнлеген белдереп тора ине. Уның төçө һарғайған, күҙҙәре эскә батып кергән, өçтөндә иçке генә күлдәк, башына йыртылып бөткән яулығын ураған һәм аяғына туҙып, мыйыҡтары сыҡҡан сабата кейгәйне… Үҙенә ҡарағанда, унан һәр кеше нәфрәтләнә, уны бер кем дә яратмай, бер кеше лә ҡыҙғанмай төçлө ине…». Йәмиләгә йыртҡыстарса тупаç, ауыр ҡылыҡлы ир менән йәшәү ғазабын кисерергә тура килә. Тиран Шәйех йөклө ҡатынын яҙмыш ҡосағына ташлап сығып китә. Хәйер һорашып, ҡыуылып йөрөгән, бик күп михнәттәр күргән Йәмиләнең үлеме – ошо тигеҙһеҙлек донъяһына нәфрәтле ләғнәт ул. Автор шулай тип яҙа: «Йәмиләнең теле булһа, «Йәнем! Һин мине өйөң алдынан эт кеүек итеп ҡыуып ебәргәйнең. Инде мин шул дәрәжә бәхетле бер хәлдәмен, һинең мал һәм мөлкәтең минең күҙемә сүп ҡәҙәре лә күренмәй, һин инде үҙеңдең был малдарың бер нәмәгә лә яраҡһыҙ икәнен аңлар инең! Инде минең күҙемә һинең ебәк күлдәктәрең өçтөмдәге кәфен ҡәҙәре лә күренмәйҙәр. Мин инде тигеҙлек донъяһына сыҡтым, бында инде беҙҙең арала туҙан тиклем айырма юҡтыр», – тигән

һүҙҙәрҙе әйтер ине».

«Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын» әҫәрендә экзистенциализмдың шундай һыҙаттары сағылыш таба: йәшәү һәм үлем араһындағы тормош моделе, йәшәйеште ғазап сығанағы итеп күрһәтеү (сир, хәйерселек, яңғыҙлыҡ, енәйәт, бәхетһеҙлек), яңғыҙ кеше трагедияһы һ.б. Экзистенциализм фәлсәфәһе донъяла рухи ҡиммәттәр юйыла барыуҙы проблема итеп күтәрә. Ләкин экзистенциалистар кешенең сараһыҙлығын – яңғыҙлығын ғына һүрәтләп ҡалмай, бәлки йәшәйештәге хәҡиҡәткә тура ҡарарға, тормошта үҙ юлыңды табырға ла өйрәтә.

Шулай итеп, Мәжит Ғафуриҙың «Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын» повесы – үҙенең идея-тематик йөкмәткеһе, проблематик тәрәнлеге, әҙәби йүнәлеш һәм ағымдарҙың үҙенсәлекле синтезын биреүе менән бер башҡорт әҙәбиәтенең генә түгел, донъя әҙәбиәтенең дә хазинаһы ул.

© **Кирәева Л.Р., Дилмөхәмәтова Г.Ю.**, 2018

**Л.А. Коханова**,

*д. филол. н., профессор МГУ имени М.В. Ломоносова, г. Москва*

## ИСПОЛЬЗОВАНИЕ СОВРЕМЕННЫХ ИНФОРМАЦИОННЫХ ТЕХНОЛОГИЙ В ОСВЕЩЕНИИ ДЕЯТЕЛЬНОСТИ МУЗЕЕВ

Сегодня значимым в актуальной повестке дня становится вопрос о современных информационных технологиях в освещении деятельности музеев, которые как и средства массовой информации являются одним из субъектов, формирующих образ локальных территорий. В их задачи, как утверждает И.В Варламова, «входят повышение позитивной известности территории и моделирование в общественной среде представлений о ней как о благоприятном месте для капиталовложений, организации бизнеса, рекреации и жизни» [2,3].

Республика Башкортостан, по информации журналистки М. Шумиловой, сегодня имеет на своей территории более 500 музеев. В их число входят государственные, ведомственные, муниципальные и школьные музеи. Один из крупнейших – Национальный музей республики, представляющий собой музейное объединение. В него входят головной музей в Уфе и 46 филиалов в городах и районах Башкорстостана. Не менее значимым является Национальный литературный музей республики, объединивший литературные музеи в единое целое [11].

Однако, как показало исследование информационного пространства республики, до сих пор участие музеев в процессе создания и кристаллизации территориального образа республики остается еще явно недостаточным. По-прежнему в нем лидируют средства массовой информации, опыт которых может быть взят ими на вооружение.

Следует отметить, что оно является фрагментом исследовательского проекта «Россия глазами молодых», предпринятого студентами факультета журналистики Московского государственного университета имени М.В Ломоносова. Результаты исследования прессы 85 регионов частично опубликованы в целевом номере журнала «Идеи и новации» (2016, №2 (5)). Предваряя этот номер, член комитета по науке, образованию и культуре Совета Федерации Г.А. Савинов в своей статье в качестве выпускающего редактора написал: «Но мне бы хотелось, чтобы, знакомясь с публикациями этого номера журнала «Идеи и новации», читатель обратил внимание как минимум на два его инновационного преимущества: первое – основа исследования – публикации молодых журналистов; второе – анализировали их творчество молодые будущие журналисты» [9, 5] .

Выводы начинающих исследователей подтверждают авторы коллективной монографии «Газеты средних и малых городов России в 2010-х гг. Контент-аналитическое исследование» [3, 2016]. Об этом говорят и практики. Так, один из экспертов совета конкурса «10 лучших газет России-2016» Н.

Скворцова пишет: «Людей самых разных возрастов, например, объединяют интересы, связанные с историей своей малой родины. Эта читательская группа местной прессы, пожалуй, самая многочисленная. Уходят в прошлое наукообразные публикации, подготовленные квалифицированными специалистами из музеев и архивов. Потому что, помимо верности историческим фактам, материалы эти должны быть занимательными, увлекать аудиторию, научить ее радоваться своим малый открытиям, создавать мосты во времени и даже пространстве» [10, 41].

Такой подход демонстрирует и пресса республики. На основании анализа средств массовой информации республики в течение 2005 – 2018 гг., можно утверждать, что большинство публикаций написано журналистами. В выборке из 200 публикаций культурологической тематике посвящено треть из них. На музейные темы написано 17 материалов. Во многом это связано с юбилейными датами народного поэта Башкорстана Мажита Гафури. В данном случае речь идет о 70-летии со дня открытия Мемориального дома-музея его имени в Уфе.

Эта тема присутствует в СМИ республики постоянно. В качестве примера можно назвать следующие публикации: «Премьера спектакля «Красная звезда» стала итоговой точкой в череде мероприятий, посвященных 125-летию Мажита Гафура» журналиста А. Давлетшиной [4], «В рамках Литературного марафона» А. Валеевой [1], а также корреспонденции «Мажит Гафури – основоположник национальной литературы (К 132-летию со дня рождения поэта и писателя)» [7], «Мажит Гафури в 11 лет стал учителем в сельской школе. 5 фактов о самом народном поэте Башкирии» [8] и др.

Таким образом, явно видно активное вовлечение местной журналистики в конструировании образа республики, которое испокон веков было тесно связано с желанием региональной власти скорректировать сложившуюся в стране репутацию республики как российскую глубинку. Причем, по самым разным источникам видно, что популярность прессы у местного населения республики растет, а не падает. Со стороны аудитории происходит повышение

интереса к региональным, локальным новостям. Этому способствует подача новостей на русском, башкирском и татарском языках.

Между тем благоприятное представление родного края и населяющих его жителей было и остается одной из важных задач, основой которого должна быть его история. В данном случае не обойтись без музеев, без которых невозможно реализовать одну из основных идей образа республики – «уважение к прошлому – залог будущего». Благодаря своим фондам именно они являются уникальными хранилищами исторической памяти многонационального народа, населяющего Башкорстостан.

Следовательно, музейное сообщество должно более активно способствовать развитию служб по связям с общественностью, целью которых является освоение информационного пространства республики. Этому им во многом может помочь поставленное на профессиональную основу взаимодействие с прессой или медиарилейшнз, которое «можно определить как отношения со средствами массовой информации, которые выстраивают государственные органы, бизнес-структуры, общественные организации» [6, 5].

Вполне естественно, что музеи находятся в этом ряду. На данный момент это крайне важно, так как у самих музеев начинается другая цифровая эра их существования. Как утверждает А.Н. Козырев, «это касается сохранения и эффективного использования культурного наследия, обеспечения равного доступа к культурным ценностям, информационного обеспечения научной деятельности в современных условиях и т.д. Все эти вопросы, так или иначе, связаны с возможностью оцифровки произведений науки, искусства, кино, музыки, печатной продукции, исторических документов, а также обеспечения доступа к их цифровым копиям» [5, 8 -9].

Это означает, что в освещении деятельности музеев все более активно должны использоваться современные информационные технологии. Это должны делать как сами музеи, так и средства массовой информации во взаимодействии между собой. Это объясняется тем, что, по мнению

специалистов, «самым дефицитным ресурсом с какого-то момента становится внимание целевой аудитории. Все это не может не отражаться на характере отношений, возникающих вокруг создания, распространения и потребления продуктов» [5, 8].

Следовательно, музеям не достаточно иметь уникальные архивы в традиционном или оцифрованном виде, о них необходимо постоянно информировать общественность. Поэтому они, как и средства массовой информации республики сегодня имеют свои интернет-ресурсы, с помощью которых растет количество посетителей не только сайтов, но и музеев. Они имеют следующие адреса в сети:

Музеи Республики Башкоростан - http://www.museum.ru/Mus/location.asp?map=ru&region=61;

Национальный музей Республики Башкоростан - www.museum.ru/M1160 или www.museum.ru/Mus/location.asp?map=ru&region=61;

Национальный литературный музей Республики Башкортостан - literatmuzey.ru/ и др.

Одной из новаций следует считать присутствие музеев республики в социальных сетях. Так выглядит адрес: Национальный Музей-Рб | ВКонтакте //https://vk.com/nmrb_ufa. Информируя о деятельности музея, Антон Фокин рассказывает 8 ноября 2017 г. о об открытии в Стерлитамакском городском музее выставки «Преодолевая забвенье», 19 января 2018 г. об Уроке мужества «Награды Победы», 27 января 2018 г. о Всероссийском историческом квесте «Блокада Ленинграда» в Национальном музее республики *Башкоростан и т.д.* Его тексты (посты) пользуются спросом у пользователей и сопровождаются их комментариями.

Безусловно, эта деятельность музеев находится на стадии освоения виртуального пространства. Их интернет-ресурсы во многом статичны, не всегда своевременно обновляют информацию. Но главное – начало положено, что во многом ускоряет процесс интеграции музеев в глобальное

информационное пространство. Это значит, что благодаря новым коммуникативным возможностям музеи во взаимодействии с местными средствами массовой информации способны позиционировать республику далеко за ее пределами как «место для достойной жизни с богатой историей».

### *Литература*


1. Валеева А. В рамках Литературного марафона. 23.05.2015 // [Электронный ресурс] / Режим доступа: http://www.onlinegazeta.info/bashkortostan/bashkortostan_gazeta_avangard_online.htm
2. Варламова И.В. Формирование современного образа республики средствам массовой информации Чувашии // Автореферат дисс. канд. филол. наук. М., 2015. – 30 с.
3. Газеты средних и малых городов России в 2010-х гг. Контент-аналитическое исследование. М.: Ф-т журн. МГУ, 2016. – 280 с.
4. Давлетшина А. Премьера спектакля «Красная звезда» стала итоговой точкой в череде мероприятий, посвященных 125-летию Мажита Гафура. 28 октября 2005 // [Электронный ресурс] / Режим доступа: http://www.onlinegazeta.info/ria/ria_bashinform-online.htm
5. Козырев А.Н. Цифровое будущее культуры: Измерение и прогнозы. М.: Издательские решения, 2016. – 350 с.
6. Коханова Л.А., Головко С.Б. Медиарилейшнз: методика дискурса. Схемокурс. М.: Академия медиаиндустрии, 2017 – 88 с.
7. Мажит Гафури — основоположник национальной литературы (К 135-летию со дня рождения поэта и писателя). башинформ.рф 20 июля 2015 // [Электронный ресурс] / Режим доступа: http://www.bashinform.ru/news/749270-mazhit-gafuri-osnovopolozhnik-natsionalnoy-literatury-k-135-letiyu-so-dnya-rozhdeniya-poeta-i-pisate/

8. Мажит Гафури в 11 лет стал учителем в сельской школе 5 фактов о самом народном поэте Башкирии “Комсомольская правда” Уфа 29 сентября 2017 2015 // [Электронный ресурс] / Режим https://www.ufa.kp.ru/daily/26565/3581922/

9. Савинов Г.А. Региональная пресса в номинациях исследования (2000-е -2016 гг.) //Идеи и новации, 2016, № 2 (5). – С.5.

10. Скворцова Н. Моя газета //Журналистика и медиарынок. 2017, № 8. – С. 41.

11. Шумилова М. 18 мая - международный день музеев. 17 мая 2004 // [Электронный ресурс] / Режим доступа: http://www.onlinegazeta.info/ria/ria_bashinform-online.htm

© **Коханова Л.А.**, 2018

***Г.Н. Ҡаҫкынова***,

*филол. ф. к., БашДУ-ның Бөрө филиалы доценты*

## ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНАНЫҢ ЯРАТҠАН ОБРАЗЫ

Башҡорт халыҡ йыры “Зәлифәкәй” – халҡыбыҙҙың яратҡан йырҙарының береһе. Ырғыҙ буйындағы Диңгеҙбай ауылында сыҡҡан был йырға Һамар башҡорттарының йөрәкһерлек дәрәжәлә йылы мөнәсәбәттә булыуҙары билдәле. Диңгеҙбай ауылында тыуған шағир Рәшит Ниғмәти тураһындағы хәтирәләр менән танышҡанда ошо фекерҙе ҡеүәтләр күренештәр йыш осрай. “Рәшит, һәр ваҡыттағыса, “Зәлифәкәй”ҙе йырлап ебәрҙе” [3, 43]. «Башҡорт халыҡ йырҙарын мин бөтә булмышым, йөрәгем менән ысын күңелдән һөйөп йырлайым», – ти торғайны йырсы (Сөләймән Абдуллин – Г.Ҡ.) халҡына. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең: «Мин үлгәс, Сөләймән Абдуллин баш осомда «Зәлифәкәй» йырын йырлаһын», – тип васыят әйтеп ҡалдырыуы ошоға дәлил түгелме ни?!” [6].

Һәҙиә Дәүләтшинаның яҡын ҡәрҙәше Миңнур Аткина ла әҙибәнең был йырға битараф булмағанлығы хаҡында һөйләне. “Һәҙиә апайҙың ятаҡан йырҙары “Тәфтиләү” менән “Зәлифәкәй” була... Ырғыҙ буйында тыуған йырҙың тарихы ошолай: Диңгеҙбай ауылында Әбделкәрим тигән кешенең Зәлифә исемле ҡыҙы була. Зәлифә Алламорат атлы егет менән бер-береһен яратышалар, ләкин улар араһына Яҡуп исемле егет төшә. Яҡуп, мал биреп, Зәлифәнең ағаларын һатып ала, һәм улар һеңлеләрен Яҡупҡа ҡуша. Яҡуп үҙенең теләген тормошҡа ашырғас, ҡыҙға әйләнеп тә ҡарамай. Алламорат та унан баш тарта. Зәлифәне йәлләп, халыҡ ошо йырҙы сығара. Был йырҙы Гөлйәүһәр апай ҙа (Һәҙиә Дәүләтшинаның әсәһе – Г.Ҡ.) йыш ҡына йырлай ине” [4].

“Зәлифәкәй” йырының тарихына ҡағылышлы ҡыҙыҡлы факттарҙы 2014 йылда Һамар өлкәһендәге фольклор экспедицияһы мәлендә Сәғитова Маһинур Кәрим ҡыҙынан да яҙып алырға тура килде: “Зәлифә минең атайым Кәрим ҡарттың ике туған апаһы булған. Яратҡан егетенә кейәүгә бара алмаған, Аҡъегет Муса исемле берәү араларына төшкән. Йырҙың:

*Ҡара ғына тырантас, ай, күн япҡан.*

*Зәлифәкәй менән Муса ятҡан,*

*Алламорат барып уятҡан*, – тигән юлдары хәтеремдә ҡалған.

Атайымдар, ғәрләнеп, был йырҙы башҡаларҙан да йырлатманы, тарихын да һөйләтмәй торғайнылар” [5, 115].

Һәҙиә Дәүләтшинаның БДУ-ның Бөрө филиалындағы музейы фондында урта өлөшө генә һаҡланған шиғырҙың геройы ла – Зәлифәкәй. Оҙаҡ ваҡыт шиғырҙың исемен шартлы рәүештә “Зәлифәкәй” тип атап йөрөттөк. 2016 йылдың март айында әҫәрҙең тулы варианты табылды, ул шиғырҙың исеме “8 март ударницаларына” тип аталыуы асыҡланды. Шиғыр үҙ мәлендә Баймаҡ районының “Ҡыҙыл Баймаҡ” газетаһында баҫылған булып сыҡты [1].

*Үткән йылдар төштө иҫтәремә,*

*Үткән көндәр, ҡара шәүләләр,*

*Үткән илдең иҫке ҡулдарында*

*Һатылған ҡыҙ – матур кәүҙәләр.*

*Сәс тәңкәләр тағып толомона,*

*Башҡайына ҡашмау кейҙереп,*

*Ҡара күҙҙәренән йәш түктереп,*

*Ҡыҙ һатыуҙар йөрәк өҙҙөрөп.*

*Баштан аша япкан бәрхәт елән*

*Уҡалары ялтырай ҡояшҡа.*

*Риза түгел Зәлифә, ярһып илай.*

*Һөйгәне бар – күңеле һан башҡа.*

Шиғырҙың тәүге строфаһы уҡыусыны ретроспектива алымына көйләй. Этик йәһәттән сығыптыр, әҙибә Зәлифәнең яҙмышын икенсе юҫыҡҡа бороп ебәрә. Һөйгәне Тимербайҙан айырып, Ҡоланбайға көсләп кейәүгә бирелгән ҡыҙ образын тыуҙыра.

Зәлифә яҙмышын тасуирлап бөткәндән һуң, яҙыусы "Һигеҙенсе марттың шатлығынан // Аҙып артҡа китте бит күңел" тигән юлдар менән уҡыусыны XX быуаттың 30-сы йылдары ысынбарлығына ҡайтара.

1934 йылда яҙылған ошо шиғырҙан уҡ Һәҙиә Дәүләтшинаның туй йолалары, халыҡ ижадын төплө белеүе, әҫәрҙәрендә урынлы ҡулланыуы күренә. Сағыштырайыҡ:

| **"8 март ударницаларына"** | **"Ырғыҙ" романы** |
|---|---|
| Ил араһы тула дан менән:<br>"Өс йөҙ мәһәр, ҡалым бирә",<br>"Туйға һуя икән тыу бейә",<br>"Инә туны, байтал, сәрмә төбө",<br>"Ебәк сапан ағаһы кейә". | – Әйтәм бит инде, оҙаҡламай никах уҡыталар. Никахҡа бер һарыҡ, йөҙ ҡырҡ һум мәһәр, туйҙа бер тыу бейә, ҡалымына ла бер һимеҙ йылҡы малы, ҡайныма бер сапан, ҡәйнәмә инә туны, һиңә бер ҡат яҡшы кейем, тағы әллә нәмәләр алырға һөйләшкәндәр (180-се бит). |

Яҙыусының Баймаҡ районы Йылайыр совхозының "Орлоҡ фабригы" газетаһында әҙәби хеҙмәткәр, ире Ғөбәй Дәүләтшиндың политбүлек начальнигы булып эшләгән дәүерҙә яҙылған был шиғырҙың тәрбиәүи әһәмиәтте беренсе планға ҡуйыуы, политбүлектең халыҡ араһындағы абруйын күрһәтеүгә төбәлеүе лә ғәжәп түгел:

*Һигеҙенсе мартка ударница*

*Булып киткән токарь Илбикә*

*Бүләк ала, тағы вәғәҙә бирә,*

*Рапорт яһай политбүлеккә.*

Әйткәндәй, политбүлектең халыҡ менән тәрбиәүи эш алып барыуы тураһында 1934 йылда ижад ителгән “Арыҫланбәк” шиғырында ла, “Аҡыҡ бөртөктәре” әҫәрендә лә осрай.

Яҙыусының 8 март байрамы уңайы менән газетаның яңы һанына өлгөртөр өсөн оператив рәүештә яҙылған шиғырының теле бай, ҡыҙыҡлы. “Байға мал моң түгел”, “Ун биш тәңкә алды ҡул ялы”, “Тимерәй, Зәлифәнең һөйгән егете, бөгөлә билен өҙгән йыландай” кеүек халыҡ телендәге әйтемдәр, үҙенсәлекле сағыштырыуҙар урынлы ҡулланыла.

“Туйыр (күп тынлы ҡайыштан йыуан итеп үреүле – Г.Ҡ.) ҡамсы менән зифа тәнгә ҡанлы эҙ һалды”, “Яйыҡбай ҙа тигән ай ҡупаның (күл уртаһындағы, һаҙлыҡтағы ҡамышлыҡ – Г.Ҡ.) // Әйләнәһе ун ике саҡрым”, “...ҡомһарышып (төҫө боҙолоп – Г.Ҡ.) трактор ямай ине” кеүек башҡорт теленең көньяҡ диалектына хас һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр шиғырға тәбиғи туҡылған.

Шиғырҙа ҡаймалау алымы ҡулланыла: тәүге строфа аҙаҡта ла ҡабатланып бирелә. “Матур кәүҙәләр” һүҙбәйләнешенең аныҡлаусыһы “ҡол ителгән”дән “һатылған” һүҙенә алмаштырылып, конкретлаштырыла.

*Үткән йылдар төштө иҫтәремә,*

*Үткән көндәр, ҡара шәүләләр,*

*Үткән илдең иҫке ҡулдарында*

*Һатылған ҡыҙ – матур кәүҙәләр.*

Автор артабанғы ижадында фажиғәле яҙмышлы был образға әйләнеп ҡайтмай. “Ырғыҙ” романынан Гөлйөҙөм дә, “Һырға һабағы” повесынан Көмөшбикә лә – боронғо йолаларҙы йырып сығып, һөйгәндәре менән ҡауышыу бәхетенә ирешкән ҡатын-ҡыҙҙар. Шулай ҙа Һәҙиә Дәүләтшина күңеленә нығ яҡын образды персонаж рәүешендә “Ырғыҙ” романына индерә. Зәлифә бында яҡты яҙмышлы яңы заман кешеһе. “*Ул арала баянан бирле килеп етмәй әбейҙең эсен бошороп торған ейәнсәре Зәлифә килеп инде. Ул әллә нисәмә ҡабат төрлөк тотҡан ҡыҙыл сатин күлдәк кейгән. Ике ҡат нәҙек ука уртаһынан тәңкә теҙгән йәшел бәрхәт кәзәкей эсенән өлкән һаҡал һалынған. Уртаға ярып майлап шымалап тараған һарғылт ҡуңыр сәсенең йыуан толомдары өҫтөнән өсәр ҡат тәңкә теҙелгән сәстәңкә таҡҡан. Ҡул бармаҡтарының ҡайһыһына берәр, ҡайһыларына икешәр ҡат итеп йөҙөк-балдаҡтар, әллә нисә төрлөнән ике беләген тултырып беләҙектәр кейгән. Олатаһы тегеп биргән дағалы ҡара итектәр, туң майға ялтырап, баҫҡан һайын шығырлап торалар. Ул аҡҡоба алһыу битле, әҙ генә ҡапысыраҡ йәшкелт һоро күҙҙәр өҫтөнән һыҙылған ҡуңыр ҡашлы, киңсә танаулы, һәр ваҡыт йылмайып көлөргә әҙер торған ҡалынса ҡыҙыл иренле, ҡыйыу шаян Зәлифә – Солтан ҡарттың ауылға оҙатҡан ҡыҙы тегенсе Тутыяның яңғыҙ иркә ҡыҙы Таллының ҡупшыларынан ине”.*

Сибәрлеге, ҡупшылығы өҫтөнә Зәлифәне бик үткер ҙә итеп һүрәтләй яҙыусы: “*...ул йылдам атлап, ҡупшы баҫып, ялтырап көлөп инде лә тирә-яҡҡа ялтаңлап ҡаранып:*

*– Ҡайҙа, еңгәмде күрәйем әле! – тине”.*

Романдың ”Һыуға башлағанда” бүлегендә бирелгән Зәлифә образы тураһында тағы ла бер тапҡыр юлайҡан иҫкә ала автор. Ҡыҫҡа ғына диалогтан ҡыҙҙың баҙыҡ холҡо, ҡыйыулығы, бәхетле булыры тураһында мәғлүмәт алып өлгөрә уҡыусы.

*“– Һуғыштан бушамағас ни. Инде бик оҙаҡ буйҙаҡ йөрөй алмаҫ”, – Исмәғил мәғәнәле көлөп ҡуйҙы.*

– *Ниңә улай тиһең, күҙләгәнме ни?*

– *Беҙҙең Сафура апайымдың бикәсе Зәлифә ҡоҙасаға күҙе төшкән шикелле.*

– *Ә теге “сей ауыҙ малайҙарҙы мин күҙгә элмәйем, егеткә лә һанамайым” тигән ҡыҙмы?*

*Исмәғил тағы ла көлдө.*

– *Шул беҙҙең наҙлы ҡоҙаса, минең ағайҙы күҙгә элгән инде, күрәһең*”.

Автор был персонажын бик яратып һүрәтләй. Ҡыҙҙың үҙ ҡәҙерен, үҙ дәрәжәһен белеүе, бәхетен сабыр көтөп алыуы, үҙәкле булыуы төҫмөрләнә.

Һамар өлкәһе Диңгеҙбай ауылы кешеһе, ғүмере Башҡортостанда үткән Әхмәт Йәрмөхәмәтов 1929 йылда Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына яҙып ебәреүе буйынса, реаль Зәлифәкәйҙең дә артабанғы яҙмышы ыңғай боролош алған булып сыҡты. “Зәлифәкәй Бәкәтәргә барғас, Игенбай тигән бер мөәзингә кейәүгә сыҡҡан, тиҙәр. Ул кейәүе менән 1863-сө йылдарҙа Кәрим ҡартҡа, Диңгеҙбай ауылына ҡунаҡҡа килеп китә. Шунда Мәхиән (Зәлифәнең ҡустыһы – Г.Ҡ.) Бәкәтәргә кире бармай, Диңгеҙбайҙа тороп ҡала. Зәлифәкәйҙең бер ҡыҙы булып, исеме Миңлебикә булһа кәрәк тиҙәр. Шул ҡыҙы инде, хәҙерге Баймаҡ волосында булып, бик йыраусы тип һөйләйҙәр” [2, 145].

Зәлифә – Ырғыҙ буйҙарындағы бәхетһеҙлеккә тарыған ҡыҙ яҙмышынан һынланыш алып, халыҡ йыры геройы дәрәжәһенә күтәрелгән, Һәҙиә Дәүләтшина прозаһында йыш ҡабатланыш тапҡан һөймәлекле образ. Заман менән бергә Зәлифәләрҙең дә үҙгәрә барыуы үҙенсәлекле күренеш.

### *Әҙәбиәт*


1. Дәүләтшина Һ. 8 март ударницаларына // Ҡыҙыл Баймаҡ. – 1934. – 8 март.

2. Дәүләтшина-Сынбулатова М. Ике йырҙың тарихы // Ватандаш. – 2011. – №1. – 145-се бит.

3. Кулибай С. Ҡорҙашым // Баязит Бикбай тураһында иҫтәлектәр. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978. – 43-сө бит.

4. Ҡасҡынова Г. Һәҙиәнең яратҡан йыры // Йәшлек. – 2015. – 6 март.

5. Ҡасҡынова Г. Ырғыҙ буйҙарында // Ағиҙел. – 2015. – № 5. – 115-се бит.

6. Юлдашбаева Г. Күңелендә моң даръяһы ине… // Ейәнсура таңдары. – 2013. – 22 ғинуар.

© **Ҡаскынова Г.Н.**, 2018

**Ғ.С. Ҡунафин**,

*филол. ф. д., профессор, БР ФА-ның мөхбир ағзаһы, Өфө к.*

## М.ҒАФУРИ ПРОЗАҺЫНДА МОДЕРНИЗМ КҮРЕНЕШТӘРЕ

### (ҠАЙҺЫ БЕР КҮҘӘТЕҮҘӘР)

XX быуат башында башҡорт әҙәбиәтенә романтизм менән бик тығыҙ бәйләнештә *модернизм* (француз теленән “яңыса”, “заманса”) алымдары ла үтеп инә башлай. Башҡорт әҙәбиәте ғилеме тарихында әҙәбиәтебеҙҙәге был күренеш хаҡында башлап ошо мәҡәләнең авторы фекер-күҙәтеүҙәре менән сығыш яһаны [3, 74-89; 4, 129-149]. Унық күҙәтеүенсә, ҡайһы бер башҡорт яҙыусылары әҙәбиәттәге традицион формаларҙы, сара-алымдарҙы кире ҡағып, художестволы әҫәр ярҙамында тормош моделе тыуҙырыуҙың “донъяны ҡояш байышы нурҙарында күрһәтеү”ҙең [1, 261] өр-яңы ысулдарын эҙләп һәм һынап ҡарай. Улар тормош, йәшәйеш һәм уның тәбиғәтен, серен образлы “аңлатып”, “асып” бирергә тейешле әҙәбиәттең торошо менән риза булып бөтмәүҙән, уларҙы үҙгәртергә теләүҙән килеп сыға һәм һүҙ сәнғәтен үҙгәртеүгә этәргес бирә [4, 129-130].

Модернизм әҙәбиәттә, ғөмүмән, сәнғәттә символизм, футуризм, акмеизм, сюрреализм, импрессионизм, конструктивизм, экспрессионизм кеүек формалистик ағымдарҙы берләштерә. Был идея-эстетик йүнәлеш империализм осорондағы буржуаз йәмғиәттә сәнғәттең кризис кисерә һәм деградацияға бирелә башлауы сағылышы булды. Һүҙ сәнғәтендә гуманистик-инсани

идеалдың, хәҡиҡәткә ынтылыуҙа өмөт-ышаныстың юғала, социаль-сәйәси проблемалар, реаль донъя менән ҡыҙыҡһыныу кәмей барыуы унының формалашыуына һәм үҫеүенә этәргес бирә. Был йүнәлештәге әҙәбиәт йәшлекте, мөхәббәтте, өмөттө, яҡтылыҡты һәм башҡаларҙы юғалтыуҙан алып юҡҡа сығарылған бөтөнлөктө, матурлыҡты, камиллыҡты тергеҙеүгә, аяҡҡа баҫтырыуға тиклемге киңлеккә фәлсәфә тәҡдим итә; алға барыуҙың, үҫештең юғалыуы, ҡайғы-хәсрәт, фажиғә менән тамамланыуы ихтималлығын иҫкәртә, уларҙы булдырмау юлдарын эҙләй. Ошо процеста йәшәйеште тышҡы ысынбарлығына оҡшашлыҡта һәм тәрән кинәйәле (метафорик) шартлылыҡта һүрәтләү арҡаһында әҫәрҙәрҙә ҡуйылған һорауҙарға яуап варианттары күбәйә, күп мәғәнәлелек, төрлөсә фараз итеү атмосфераһы хасил була. Модернистар өсөн кинәйәле образлылыҡҡа өлгәшеү, кешене икһеҙ-сикһеҙ йыһан ҡаршыһына ҡуйып, ундағы туҙан бөртөгө хәтле итеп ҡарау, йәшәүҙең мәғәнәһеҙлеге хаҡында фәлсәфәгә бирелеү ниндәйҙер яңы йәшәйеш, яңы ғөрөф-ғәҙәт формалары барлыҡҡа килтерергә ынтылыу, гүйә, үҙмаҡсатҡа әүерелә [5, 93-94; 7, 134-137; 8, 86-87; 9, 106; 11, 210-211].

Модернизм йүнәлешенең бер нисә формалистик ағымдары араһында XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә ярайһы күп урын алғаны – *символизм. Импрессионизм* менән *экспрессионизм* алымдарына мөрәжәғәт итеү ҙә үҙен һиҙҙертә. *Символизм ағымының* нигеҙендә ер донъяһын танып-аңлап бөтөрмәҫлек тәрән эстәлекле, мәңгелек рухи йәшәйеш менән бәйләүсе символ ята [4, 132]. Ә символ художестволы ижад күҙлегенән ҡарағанда, “эстетиканың универсаль категорияһы,.. образдың бөткөһөҙ күп мәғәнәлелегенә эйә булған билдә” [11, 311-312]. Символизм ағымы вәкилдәре үҙ ижадтарында йәшәйеш ҡанундарын сағылдырыу өсөн образ-символдың ҡапылда ғына маңлай күҙенә салынып бармаған, күңел күҙе менән генә тотоп-тойоп алыныр ана шул серле күп мәғәнәлелегенән, шартлылығынан файҙаланырға һәм йәшәйеште хис-тойғо аша танып белеү сиктәренән сығып китеп үҙләштерергә һәм күҙалларға тырышалар. Һөҙөмтәлә, күҙ алдындағы реаль, ғәҙәти күренештәр менән

ниндәйҙер фантастик, мөғжизәүи донъя, өн менән төш араһындағы сиктәр юйыла, ер тормошонан, йәмғиәттән алыҫлашҡан, “уҡыусыны гипнозлаған” (В.Я. Брюсов) яңы әҙәби ысынбарлыҡ хасил була. *Символистар, нигеҙҙә, реаль донъяның ысынлығын кире ҡаға, уны бары кешенең, шул иҫәптән, әҙиптең һиҙем-тойомлауҙары комплексы тип ҡарай* [3, 76; 4, 132]. Урыҫ символист шағиры Ф.Сологубтың “Бөтәһе бөтәһендә” (“Все во всем”) тигән шиғырында әйтелгәнсә, “Минән башҡа бүтән йәшәйеш юҡ” (“Нет иного бытия, как только Я”). Әгәр донъя “Мин”дең һиҙем-тойомлауҙары комплексы икән, тимәк, ул бары уны ҡабул итеүсе йәшәгәндә генә йәшәй булып сыға. Был субъектив ҡараш ижад әһелдәренең кинәт була торған, ҡабатланмаҫ, берҙән-бер һәм бик тотороҡһоҙ хис-тойғолары культына алып килә, донъяның асылына улар аша стихиялы, интуитив рәүештә генә төшөнөргә мөмкин, тигән идеяны тыуҙыра һәм алға һөрә. Ошо рәүешле, донъяның үҙгәреп тороуы әҙиптәрҙең (ғөмүмән, ижад кешеләренең) кәйефтәре тотороҡһоҙлоғона, хис-тойғолары ағымының иррациональ үҙгәреүсәнлегенә бәйле булып сыға. Һөҙөмтәлә, былдай идея-ҡараштар әҙиптәрҙең, улар уйлағанса, “шөкәтһеҙ” булған реаллеккә хис-тойғоларҙы, хыялдарҙы ҡаршы ҡуйып, ижтимағи йүнәлештәге темаларҙан ситләшә төшөүҙәренә килтерә [2, 11-24, 46-77; 10, 219-371].

Башҡорт әҙәбиәтендә символдарҙы үҙәккә ҡуйған әҫәрҙәр ХХ быуаттың 10-сы йылдарында ныҡлап күренә башлай. Уларҙа йыш ҡына символистик идеал эҙләп осорҙоң ижтимағи проблемаларынан йөҙ борған килеш үткәнгә мөрәжәғәт итеү һәм уны үҙ заманың менән йәнәш ҡуйып сағыштырыу аша мәңгелек символдар һәм оҡшашлыҡтар табыу теләге үҙәктә тора [3, 76; 4, 133]. Яҙыусылар йыш ҡына милли фольклор әҫәрҙәренә, айырыуса риүәйәттәргә һәм легендаларға мөрәжәғәт итә. Тарихи хәтер авторҙар өсөн хыялда үткән менән бөгөнгөнө тоташтырыу, киләсәк моделен фәлсәфәүи тәрәнлек, сәнғәтсә матурлыҡ менән төҙөү өсөн таяныу нөктәһе була. Миҫал өсөн М.Ғафуриҙың 1914 йылда “Аң” журналының 16 – 17-се һандарында баҫылған “Хан ҡыҙы Алтынсәс” (әҙиптең совет осоронда донъя күргән йыйынтыҡтарында ул

“Ағиҙел буйында” тигән исем менән бирелгән) әҫәренә күҙ һалайыҡ. Уның эстәлеге ҡыҫҡаса түбәндәгеләрҙән ғибәрәт. Балыҡ тотоу ғәҙәттәренә инеп бөткән үҫмер малайҙар йәйге матур көндәрҙә иртән үк Ағиҙел буйына ҡармаҡ һалырға йүгерә, “балыҡсы бабай янына барып, балыҡ бешереп, сәй эсеп,.. ҡояш байыр алдынан ғына” өйҙәренә ҡайта. Ә балыҡсы ҡарт шундай мәрхәмәтле, изге күңелле, тәбиғәткә лә, “һәммә кешеләргә лә дуҫ” була, балалар менән дә “балалар булып” аралаша белгән идеаль кеше. Берҙән-бер көндө ул малайҙарға Ағиҙелдең аръяғындағы “ҡояштың нуры ғәкес итеп (сағылып), күҙҙе ҡамаштырып торған” Аҡташ тауы өҫтөндәге “мосолман хандарынан ҡалған шәһәр урындары”, унда булып үткән бер ваҡиға хаҡында бәйән итә. Ул шуға ҡайтып ҡала: борон заманда тау башындағы ҡалала “бик көслө булып ғүмер иткән” хандың “бер бите – ай, бер бите – көн кеүек һылыу ҡыҙы” Алтынсәсте алырға тип яу килгән. Ҡыҙы “йәйенке битле” илбаҫарға кейәүгә барырға риза булмағас, уны бик яратҡан хан дошман ғәскәренә ҡаршы һуғышырға ҡарар иткән. Ләкин хан ғәскәре еңелә, үҙе әсиргә эләгә. Һуғышта үҙ азатлығы өсөн көрәшеп яраланған Алтынсәс хеҙмәтсе ҡыҙ менән тауҙағы мәмерйәгә инеп юғала. Уның менән бергә, яуҙа ғәскәре еңелә башлағас, хан тау тишегенә йәшерткән ҡаҙна хазиналары – алтын-көмөштәр, гәүһәр-яҡуттар ҙа юғала. Балыҡсы ҡарт әйтеүенсә, уларҙы ендәр һаҡлай, ә Алтынсәсте “йәйге матур төндәрҙә... тау тишегенән сығып,.. оҙон сәстәренә күмелеп”, таң атҡансы Ағиҙел туғайына ҡарап тау киртләсендә ултырған килеш күрә, матурлығына иҫтәре китеп һоҡлана торған булғандар, имеш.

Шул рәүешле, “әҫәрҙә ике ваҡыт – үткән һәм бөгөнгө, тарихи-мифологик һәм заман ысынбарлығы осраша, ошо осрашыу нөктәһе символға әүерелә: *тарихи урындар һәм ваҡиғалар бөтәһенән дә элек үткән менән бөгөнгөнө тоташтырыусы илаһи хәтер, ситтән ҡарап һоҡланыу һәм ғорурланыу сығанағы; улар буй етмәҫтәй серле, мөғжизәүи күренештәр булып хәтерҙә һаҡланғанда ғына киләсәк быуындар өсөн матурлыҡ һәм ғорурлыҡ сығанағы булып ҡаласаҡ*” [4, 134]. Балыҡсы бабайҙың рациональ һәм иррациональ, логик

һәм дини-мистик ҡараштарҙы йәнәш ҡуйып бәйәнләгән хикәйәтендә үҫмерҙәрҙең боронғо хандар ҡалаһы урынлашҡан Аҡташ тауына, Алтынсәс һәм ҡаҙна юғалған мәмерйәгә күтәрелеп хазина эҙләү теләгенә һүҙе менән дә, бөтә йөҙ-ҡиәфәте менән дә ҡаршы төшөүе авторҙың ошо фекерен һыҙыҡ өҫтөнә алып тора ла инде.

Әйтергә кәрәк, әгәр ҙә реализм тормоштағы типик шәхесте үрнәк яһаһа, ә романтизм тыштан да, эстән дә үҙен азат тойған шәхесте идеаллаштырһа, "*символизм* нигеҙҙә сер томанына төрөнгән, уҡыусы өсөн үҙе бер сер йомғағы булып торған мистик кешене идеаллаштыра. М.Ғафури әҫәрендәге Алтынсәс – ана шундай серле идеал образ. Ул – матурлыҡ, ғорурлыҡ, азатлыҡ символы. Үҙ бәҫен, матурлығын, иреген яҡлап үлемгә һәм башҡа аҙымдарға барырға әҙер булыуы, ошо сифатын "борон замандан... был көндәргә" тиклем һаҡлап ҡалыуы менән балыҡсы ҡарт өсөн дә, үҫмер малайҙар өсөн дә идеал. Тимәк, азатлыҡ, матурлыҡ, бәҫ-абруй өсөн көрәшеүсе зат халыҡ хәтерендә һаҡлана, онотолмай" [3, 77; 4, 134].

Романтик-модернистик йүнәлештә ижад ителгән әҫәрҙәрҙә мөхәббәт илаһи тасуирлана: ул тыуҙырған хис-тойғоларҙы бөтә тулылығында һәм нескәлегендә кисереү өсөн ер тормошонан, уның ваҡлыҡтарынан айырылырға, илаһи бейеклектәргә һәм бөйөклөктәргә ынтылырға кәрәк. Ошондай фәлсәфәне сағылдырған әҫәрҙәрҙә ер менән ғаләм, тәбиғәт менән күк, был донъя менән теге донъя, ер ҡыҙы менән фәрештә, йәшәү менән үлем, бәхет менән ғазап... араһында сиктәр юйылып, мөхәббәт ғәжәйеп бер сер пәрҙәһенә төрөлөп яҡтыртылыусан. Бына, мәҫәлән, М.Ғафуриҙың "Тәьҫораттар" (1913) тигән нәҫере. Унда яҙыусы ижтимағи тормоштан, социаль ысынбарлыҡтан бөтөнләй азат булған, бөтә нәмәне үҙенә буйһондорған, илһамландырған, серле, илаһи мөхәббәткә дан йырлай. Мөхәббәткә мәдхиәне тәрәнәйтеп, мәғәнәүи яҡтан байытып килгән символдар әҫәрҙе бермә-бер тулыландыра, ғәжәп эмоциональ һәм фәлсәфәүи эстәлекле итә. "Әҫәрҙә мөхәббәт йәшәйеш фәлсәфәһе кеүек

аңлатыла, асылына төшөнөү һәм аңлатып биреү ҡапыл да мөмкин булмаған ниндәйҙер бер көс һымаҡ яҡтыртыла” [4, 142].

Нәҫер *импрессионистик* алымға – ауаз-тауыш үҙгәрештәренә ҡоролған. Тынлыҡты тауыш-хәрәкәт, уны тағы ла тәрәнерәк тынлыҡ, ә уны, үҙ сиратында, “баяғынан да әҫәрле, серле моңло тауыш” һәм “һәммә нәмәнең” хәрәкәте алмаштыра. Тәбиғәттәге ошо үҙгәрештәр менән хикәйәләүсенең хис-кисерештәре лә үҙгәрә бара: шатланыу – һағая төшөп нимәнелер көтөү – ләззәт, рәхәтлек кисереү.

*Импрессионизмдың әҙәби концепцияһы нигеҙендә нескә күңелле, тормоштоң, тирә-йүндәге күренештәрҙең гүзәллегенә, кеше ғүмерендәге айырым миҙгелдәргә һоҡлана белгән зауыҡлы, хис-кисерешкә бай шәхесте раҫлау ята* [6, 240]. Был алымға мөрәжәғәт итеп М.Ғафури нәҫерендә тәьҫирләнеүсән, күҙәтеүсән, тәү ҡарашҡа ғәҙәти тойолған күренештәрҙән матурлыҡ тапҡан зауыҡлы хикәйәләүсе образын тыуҙыра.

Эпитеттарҙың, сағыштырыуҙарҙың муллығы, теленең һығылмалылығы, серле яңғырауы, биҙәклелеге менән айырылып торған был әҫәрҙә тәбиғәттәге һәм хикәйәләүсе күңелендәге үҙгәрештәрҙе тасуирлау иң юғары нөктәгә етә.

Айлы төндә Ағиҙел буйындағы ағаслыҡтар араһында “ниндәйҙер бер матурлыҡ аҫтында арбалған-сихырланған кеүек” ултырған егет менән ҡыҙ ер йөҙөндәге бөтә нәмәнең “мәғәнәүи бер ҡеүәттең тәьҫиренән… бик тәрән сөкүнәтҡә (тынлыҡҡа)” сумғанлығына, ай яҡтыһында хатта “ағастар аҙ ғына аҡҡа маил булып (мансылып, төрөнөп)” торғанлығына, “ҡайҙандыр бер илһам, серле бер тәблиғтең (хәбәрҙең) булыуын” көткәнлегенә иғтибар итә. Шунан һуң һүрәтләнгән матурлыҡ тәбиғәттең тынлығы (сөкүнәт) тыуҙырған ғәжәп бер күренеш, торош итеп күрһәтелә. “Был ваҡытта бөтә ер өҫтөн бик тәрән сөкүнәт ҡаплаған”, бөтә тәбиғәт был тынлыҡ алдында теҙ сүгеп, уны боҙорға йөрьәт итмәйенсә, нимәлер көтә. Автор тәбиғәттәге илаһи сөкүнәт мәлендәге күренештәрҙе бер-бер артлы һынландырып үтә. Бына йондоҙҙар ғәҙәттәренсә күп йымылдамай, елберҙәмәй, шөбһәһеҙ бер нәмәгә мәфтүн булып (һоҡланып,

ғашиҡ булып), шаҡ ҡатып урындарында торалар. Тулған ай ҙа, бер ғазамат (ололоҡ, олпатлыҡ) алдында сәждә ителгән (баш эйгән) кеүек ергә ҡарап, урынында ҡуҙғалмай тора, нурҙары үҙенең ихтыярынан башҡа ғына ергә һирпелә… Ағастарҙың япраҡтары, был сөкүнәтте боҙмаҫ өсөн, бер-береһенә бәрелешеүҙән, ботаҡтары бер-береһенә сәләм биреүҙән туҡтап… торорға мәжбүр булғандар. Мәңгенән бирле… фәҡәт мөһабәт… аға торған Ағиҙелдең һыуы, тауыш сығарыуҙан ҡурҡып, үҙенең ағыуын, тәртипле рәүештә әкренәйтеп, ни нәмәгәлер итәғәт иткән” һ.б.

Илаһи тынлыҡ үҙенең иң юғары нөктәһенә еткәс, нәҫергә һандуғас образы килеп инә. “Һәммә нәмә… был ләззәтле минуттарҙың, был илһам ваҡытының оҙаҡҡа һуҙылыуын теләгән” саҡта “бөгөлөп-һығылып үҫкән ағастар араһында” бер һандуғас шыңғырҙатып, бер күтәреп, бер төшөрөп, һыҙҙырып-һыҙҙырып сутылдатып“ һайрап ебәрә. Ул һайраған һайын “мөхәббәт, ғишыҡ, сер моңло тауыш менән тирә-яҡҡа тарала”, ер өҫтө матурлана, илһам менән тула бара һәм “һис бер енәйәт һәм уҫаллыҡ эшләмәгән мөҡәддәс (изге) һүрәтте” ала. Һандуғас һайрауҙан туҡтау менән, тәбиғәт, был ниндәй мөғжизә булды әле тигәндәй, иләҫләнеп, тағы ла тәрәнерәк тынлыҡ ҡосағына сума. Унда “ғазамат (олпатлыҡ), әллә ниндәй мәғәнәүи бер ҡеүәт тағы ла арта” төшә. Әммә күп тә үтмәй, әҫәрҙең беренсе өлөшөндә тынлыҡ хәлендә һүрәтләнгән бөтә нәмә “шатлыҡтарын белдереү өсөн… хәрәкәткә килә”, “бер-береһенә мәғәнәүи,.. ныҡлы бер көс менән бәйләнә,.. бер-береһен ҡосаҡларға, бер-береһенең муйынына һырылырға ынтыла башлай”. Күктәге йондоҙҙарҙың да һандары, айҙың да нурҙары артып китә, япраҡтар ҙа бер-береһенә сәләм бирешә, айҙағы Зөһрә ҡыҙ ҙа, ергә ҡарап, башын эйә… Был күренештән тулҡынланған һандуғас тағы баяғыһынан да әҫәрлерәк, моңлораҡ итеп һайрап ебәрә. Нәҫерен яҙыусы ошондай юлдар менән тамамлап ҡуя: “Был минутта һәммә нәмә тәьҫиренең иң ниһайәтенә еткән ине. Сөнки был минутта ер өҫтөндә *ысын мөхәббәт менән ысын ғишыҡ хөкөм һөрә ине…* (курсив беҙҙеке – Ғ.Ҡ.). Аһ, ысын мөхәббәт менән ысын ғишыҡ!..”

Күренеүенсә, “әҫәрендә М.Ғафури мөхәббәтте ғәмәлдәге бөтә нәмәнең нигеҙен тәшкил иткән, уларҙы хәрәкәткә килтергән, илаһиландырған, алға әйҙәгән иң серле, иң өҫтөн көс итеп күҙ алдына баҫтыра. Уны автор тәбиғәт матурлығынан да юғарыраҡ, уға үҙе яңы һыҙаттар, мәрхәмәтле гүзәллек өҫтәүсе, йәшәйештәге хәҡиҡәтте һиҙемләүсе иң оло матурлыҡ, иң юғары камиллыҡ тип иҫәпләй һәм шунан сығып уҡыусыға ысынбарлыҡта ер тормошонан тыш ниндәйҙер аңлап һәм аңлатып булмаҫлыҡ өҫтән ҡеүәт бар, тигән идеяны еткерергә тырыша” [4, 144]: “Быларҙың һәммәһе үҙҙәренең өҫтәрендә был ҡеүәттең ғалиб (өҫтөн, юғары) булыуын һиҙәләр… Һәммә нәмә күңелдәрен илһам килә торған тарафҡа йүнәлдергәндәр”. Тап ошо илаһи көс-ҡеүәт арҡаһында донъя иҫ киткес матур, ер йөҙөндә яуызлыҡ, насарлыҡтар тантанаһына сик ҡуйыла, бөтә нәмәләр – йәнлеләре лә, йәнһеҙҙәре лә бер бөтөн организм кеүек гармониялы йәшәргә ынтыла. Мөхәббәт – йәшәйештең төп ҡануны. Ғәләмдәге бөтә нәмәләр ҙә – тәбиғәт һәм кеше, ер һәм күк ошо ҡанун буйынса бер-береһен яратып, “бер низам (тәртип) менән” йәшәргә тейеш. Һөҙөмтәлә әҫәрҙә, ғалимә Д.Заһидуллинаның бик дөрөҫ билдәләүенсә, *“мөхәббәт хәҡиҡәткә төшөнөү, хатта шуның аша тормошто, йәшәйешкә мөнәсәбәтте һәм һуңғы сиктә кешене үҙгәртеү юлы* тип күрһәтелә” [2, 139].

### *Әҙәбиәт*


1. Борев Ю. Модерн: мир в лучах заката // Теория литературы. В 4-х томах. Т. 4. – М., 2001.
2. Заһидуллина Д. Модернизм һәм XX йөз башы татар прозасы. – Казан: Татар. кит. нәшр., 2003.
3. Ҡунафин Ғ.С. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 3 киҫәк. XX быуат башындағы әҙәбиәт. – Өфө: БДУ-ның РНБ, 2014.
4. Ҡунафин Ғ.С. XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең идея-художество үҙенсәлектәре. – Өфө: Ғилем, 2016.
5. Краткий словарь по эстетике. – М. 1983.

6. Теория литературы. В 4-х томах. Т. 4. Литературны процесс. – М., 2001.

7. Федоров А.А. Введение в теорию и историю культуры. Словарь. – Уфа, 2003.

8. Хализев В.Е. Теория литературы. – М., 2000.

9. Хөсәйенов Ғ.Б. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. – Өфө, 2006.

10. Соколов А.Г**.** История русской литературы конца XIX – начала XX века. – М., 2000.

11. Эстетика. Словарь. – М., 1989.

© **Ҡунафин Ғ.С.**, 2018

**Ғ.С. Ҡунафин**,

*филол. ф. д., профессор, БР ФА-ның мөхбир ағзаһы, Өфө к.*

## М. ҒАФУРИ ТОРМОШОНОҢ ЯҢЫ БИТТӘРЕ ХАҠЫНДА

Башҡортостандың беренсе халыҡ шағиры Мәжит Ғафури яҡты донъяға килгән ваҡытта Стәрлетамаҡ өйәҙенә, хәҙерге Ғафури районына ҡараған ауылдың исеме мул һыулы тау йылғаһы Еҙемдән һәм ауыл эргәһендәге ҡышын да туңмай торған йылғасыҡтан – ҡарандан (хәҙер уны халыҡ Ғафури шишмәһе тип йөрөтә) алынған – Еҙем-Ҡаран. Был исемдең тарихи мәғәнә асылы булғанға оҡшай. Эш башы шунда: Еҙем-Ҡаранға башлап нигеҙ һалыусы Табын башҡорттары башта Еҙем йылғаһының буйында ғына йәшәгән булғандар. 1753 йылда Ҡумырыҡ Табындар ерендә төҙөлгән Архангел баҡыр иретеү заводының (Аҫҡын йылғаһы буйында урынлашҡанлыҡтан уны Аҫҡын заводы тип тә йөрөткәндәр) хужалары И.Твердышев менән И.Мясников, һуңғараҡ графиня Коссоковская менән байбисә И.Бекетова ул тирәләге ер-һыуҙарҙы, урмандарҙы алдап-йолдап һатып алып бөткәс, башҡорттарҙы ауылдарынан, ерҙәренән ҡыуып ебәргәндәр, унда Рәсәйҙең үҙәк өлкәләрәнән урыҫ крәҫтиәндәрен һәм

үҙенә кәрәкле башҡа кешеләрҙе килтереп ултыртҡандар. XVII быуат аҙағы – XVIII быуат баштарында Еҙем йылғаһының яр башында ғына барлыҡҡа килгән башҡорт ауылы ла шундай яҙмышҡа дусар булған. Еҙем ауылының исеме завод хужалары Твердышев менән Мясников һатып алған ерҙәр биләмәһендә 1855 йылда ла телгә алына әле. Унда сиркәү һалынып, урыҫтар күпләп күсерелеп килтерелә башлағас, ерле халыҡ төйәген бөтөнләйгә ташлап китергә мәжбүр булған. XVIII быуат аҙағына ҡарай ауыл тулыһынса урыҫлаша. Уны Урыҫ Еҙеме – Русский Зилим тип атай башлайҙар. Революция йылдарында һәм унан һуңғы осорҙа ауылдың исеме Ҡыҙыл Еҙемгә – Красный Зилимгә әүерелә. Ҡумырыҡ Табын улусына ҡараған ошо ауылдың төп хужалары, аҫабалыҡ хоҡуҡтарынан бөтөнләйгә яҙып, был төйәктән әллә ни алыҫ булмаған Ҡаран йылғасығы (шишмәһе) буйына, табын ҡан-ҡәрҙәштәре ерҙәренә, уларҙан ризалыҡ алып, әтәмбәйҙәр (припущенниктар) сифатында килеп төйәкләнергә мәжбүр була. Аҫаба хоҡуҡтарын юғалтҡан, ҡыйырһытылған, күп михнәт-ғазаптар сиккән табын башҡорттары яңы урынға үҙҙәре менән элекке ауыл исемен дә алып килгән, уны күңелдәренән сығармаған. Һөҙөмтәлә уларҙың яңы көн иткән төйәге ике йылға исеме менән аталып йөрөтөлә башлаған [1; 2, 590-591; 3, 187-188].

XIX быуатта Еҙем-Ҡарандағы аһ-зарҙарҙы, ғәҙелһеҙлектәрҙе күп күргән башҡорттар араһына михнәттәрҙе шундай уҡ күп татыған, иң яҡын ҡәрҙәш халыҡ һәм диндәш булған татар килмешәктәре килеп һыйына, шунда дуҫлыҡ, туғанлыҡ йылыһын, йәшәү усағын таба. Заманына күрә сәнәғәт төйәгенә әүерелгән Архангелға ҡарай үткән юл өҫтөндә ятҡан был ауыл XIX быуатта аҡрынлап тирә-йүндә танылыу алған сауҙа үҙәгенә әүерелә. Ундағы ҙур баҙарға ялан яҡтарынан да, тау төбәктәренән дә башҡорт, урыҫ, татар, мишәр, сыуаш һәм башҡа халыҡтарҙың төрлө һөнәр эйәләре үҙ тауарҙарын һатырға килтерә. Алыш-биреш барған ерҙә фекер-лөғәт алмашыуҙарға, уйын-көлкөләргә, төрлө ярыштарға, күңел асып алыуҙарға ла форсат табылмай булмай [1; 2, 591; 3, 188].

М. Ғафури бөләкәйҙән бына ошондай социаль-мәҙәни мөхиттә тәрбиәләнеп үҫкән. Милли сығышына килгәндә инде, ул башҡорттоң Кәлсер Табын ырыуынан сыҡҡан шәхес. Быны һаҡланып ҡалған шәжәрә раҫлай. Шағирҙың башҡорт халҡы вакиле булыуы паспорты менән дә дәлилләнә.

Ғәбделмәжиттең ата-олатайҙары Еҙем-Ҡаран ауылына нигеҙ һалыуҙа туранан-тура ҡатнашмаған. Өлкән быуын кешеләренең хәтерләүҙәренә ҡарағанда, уның ҡарт олатаһы Еҙем-Ҡаранға Еҙем буйындағы күршеләге бәләкәй генә башҡорт ауылы Таштамаҡтан (хәҙерге Ғафури районының Абдулла ауылынан) күсеп килгән булырға тейеш.

Ғүмер юлы Абдулла (Таштамаҡ) һәм Еҙем-Ҡаран ауылдары менән бәйле булған Ғәбделмандың (Ғәбделманнан, шәжәрәләгесә иһә – Ғәбделханнан) өс улының береһе Ғәбделғәфүр ғаиләһендә Мәжиттең атаһы, буласаҡ ауыл хәлфәһе Нурғәни яҡты донъяға килгән. Ғәбделғәфүр Еҙем-Ҡаранда мулла булып торған. Уның биш улы араһында Ғәбделғәни менән Нурғәни нығыраҡ ҡыҙыҡһыныу уята. Башҡортостан Үҙәк дәүләт архивы материалдарынан (1711-се дело) күренеүенсә, уларҙың тәүгеһе 1850 йылдың 23 ноябрендә Еҙем-Ҡаран ауылы мәсетендә мулла итеп тәғәйенләнә. Күп тә үтмәй уның энеһе Нурғәни ҙә хеҙмәт юлына баҫа, хәлфә вазифаһында эшләй башлай. Ул ябай ауыл тормошо менән йәшәгән, умартасылыҡ менән дә шөғөлләнгән. 1880 йылдың йәйге сыуаҡ көндәренең береһендә, 20 июлдә (яңыса 2 августа), уның ғаиләһендә ир бала тыуған. Ата-әсә, алдан белгәндәй, уға Ғәбделмәжит (Мәжит – данлы, маҡтаулы) тип исем ҡуша. Ысынлап та, киләсәктә был бала халҡын, илен ҡыуандырыр, данлы, шөһрәтле шәхес булып таныла.

Буласаҡ шағирҙың ҡарт олатаһы менән олатаһының исемдәре уның туған-тыумасаларының ике фамилия тармағын барлыҡҡа килтергәндер ҙә инде. Ғәбделмәжит (Мәжит) үҙе Ғәбделғәфүров (Ғәфүров – Ғафури) фамилияһын йөрөтһә, уның бер туған ҡустыһы Әҡсән Ғәбделмәнов (Әбделмәнов) фамилияһын үҙ итә. Нурғәни хәлфәнең Мәжит менән Әҡсәндән башҡа Мәһәҙи, Нурислам атлы улдары, ике ҡыҙы була. Атаһына оҡшап, Мәһәҙи ҙә уҡыуға

барымлы булып сыға, тырышып уҡый торғас, батша армияһы офицеры булып китә, Октябрь революцияһынан һуңғы дауыллы, болғансыҡ йылдарҙа аҡтар яғында хеҙмәт итә [1].

М.Ғафуриҙың белем алыу осоро ентекле өйрәнелгән. Бында тик шуны әйтергә кәрәк: төрлө ерҙәрҙә, төрлө мәҙрәсәләрҙә һабаҡ алып, 1906 – 1908 йылдарҙа Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһендә дауам иттергән мәлдән алып ул үҙ яҙмышын Өфө ҡалаһы, тыуған яғы, Башҡортостаны менән бәйләй.

Өфөлә йәш шағир ҡалала тегенсе булараҡ танылыу алған Зөһрә исемле ҡыҙға ғашиҡ була. Ул төрлө һылтауҙар табып, уның менән танышырға тырыша, берҙән-бер көндө күлдәк тектереү һылтауы менән ҡыҙ йәшәгән фатирға килә, Кәримә исемле хужабикәнән уның менән танышырға ярҙам итеүен үтенә. Ләкин егеттең ниәте тормошҡа ашмай: ҡыҙ уның менән күҙмә-күҙ осрашып танышыуҙан, күлдәк үлсәмен алыуҙан баш тарта. Уның ҡарауы үҙенең фатир хужаһы Кәримә әбей аша Мәжиттең иң ятраткан күлдәген өлгө өсөн үҙенә ебәреүен һорап мөрәжәғәт итә. Баҡһаң, Зөһрә йәш шағирҙы ижад емештәре аша оҡшатҡан, ҡайһы бер шиғырҙарын яттан белгән булған икән. Егет Кәримә әбей аша күлдәген тегенсе ҡыҙға ебәрә һала. Уның үлсәмдәренә ярашлы итеп матур күлдәк тегә лә Зөһрә, уның һул яғына, йөрәк тапҡырына, шағирҙың бер шиғырынан үҙенә бик оҡшаған  бер юлды ебәк еп менән сигеп яҙған туҡыма киҫәген тегеп ҡуя. Шулай, йәштәр күрешмәй, бер-береһенең күҙҙәренә ҡарап һөйләшмәй генә аңлаша. Шағир Зөһрәнең ағаларына өйләнеү өсөн ҡыҙҙың ҡулын һорап бара. Әммә ул ауыр хәлгә тарый: һөйгәнен Әстрәхән сауҙагәре яусылап йөрөй, унан ҙур ғына төшөм өмөт иткән ағайҙар ярлы шағирҙың ҡулынан килмәҫ, Зөһрәнән баш тартырға мәжбүр булыр, тигән уй менән унан ҙур мәһәр-ҡалым һорайҙар. Быны ишетеү менән М.Ғафуриҙың дуҫ-иштәре, таныштары уға ярҙамға киләләр, тиҙ арала һоралған сумма йыйыла. Зөһрәнең ағалары, нишләһендәр инде, шағирҙың үтенесен ҡәнәғәтләндерергә мәжбүр була. Ошо мәлдән алып М.Ғафури ғаиләһе менән ғүмеренең аҙағынаса Өфө ҡалаһында йәшәй [1; 2, 594; 3, 191-1192].

Әйткәндәй, М.Ғафури тормошона һәм ижадына бәйле яҙылған хеҙмәттәрҙә, мәҡәләләрҙә уның тыуған ауылы, тыуған яғы, ундағы шәхестәр менән бәйләнеше самалы, хатта бөтөнләй тип әйтерлек булмауы хаҡында фараздар һиҙелеп ҡала. Асылда шағир 1917 йылдағы революцияға тиклем дә, унан һуң да тыуған яҡтары менән бәйләнеште өҙмәгән. Мәҫәлән, арҙаҡлы ғалим, сәйәсмән Әхмәтзәки Вәлиди Туған “Хәтирәләр”ендә Мәжит Ғафури тураһында ҡыҙыҡлы ғына мәғлүмәттәр килтерә. 1917 йылдың сентябрь баштарында З.Вәлиди тыуған ауылы Көҙәнгә ҡайтып, унда бер көн генә тора ла, Еҙем-Ҡаран ауылындағы имам Ямалетдин Байышҡа ҡунаҡҡа киткән ата-әсәһе артынан юллана. Сәфәрендә әсәһе яҡлап булған олатай-өләсәһен, үҙе уҡыған төйәкте күреп китеү ниәте менән Үтәк ауылында (хәҙерге Ғафури районына ҡарай) туҡтала. Әммә олатаһы Хәбибназар ҙа “Мырҙаҡайҙа (хәҙерге Ғафури районының Сәйетбаба ауылы. – Ғ.Ҡ.) йәшәүсе Хәсән улы Сабир хәҙрәт тигән ғалим һәм бай затҡа ҡунаҡҡа киткән” була. Әхмәтзәки икенсе көн кисләп кенә Еҙем-Ҡаранға барып етә. Атаһы Әхмәтшаһ менән әсәһе Өммөлхаятты, йорт хужаһы Ямалетдин мулланы ла Сабир хәҙрәт үҙенә саҡырған булып сыға. Әхмәтзәки был ваҡытта тыуған ауылында ял иткән Мәжит Ғафури өйөндә “мосафир булып ҡала”. “Өйөндә кисен бер ни тиклем шиғырҙарын уҡыны. Иртәнсәк икәүләп Мырҙаҡайға киттек. Минең килеүемде ишетеп, унда башҡа ауылдарҙан да байтаҡ кеше йыйылған... Шағирыбыҙ Мәжит Ғафури ҙа был мәжлестән илһамланды. Шиғырҙарын уҡыны... Ул саҡ шағир милләтсе ине. Сығышы ярлы ғаиләнән... Миңә 1908 йылда ҡыҙын бирергә риза булған Ғәбдерахман исемле байҙың өйөндә лә мосафир булдыҡ. Иртәгәһенә аҡшам ваҡытында бөтәбеҙ ҙә олатайыма Үтәккә килдек. Һөҙөмтәһе буйынса Өфөләге конгрестан да мөһимерәк бер йыйын булды. Мырҙаҡай һәм Үтәк йыйындары рәсми ваҡиға булманы, дуҫ һәм әҡрәбәләребеҙҙең мәжлестәре рәүешендә үткән был йыйылыштарҙа ҡағыҙға яҙылмаған гүзәл ҡарарҙар ҡабул ителде”, – тип яҙа З.Вәлиди Еҙем-Ҡарандағы, Мырҙаҡайҙағы һәм Үтәктәге осрашыуҙар хаҡында. Был иҫтәлектән күренеүенсә, революцион ваҡиғалар, Башҡортостан

Автономиялы Республикаһын төҙөү өсөн көрәш осоронда М.Ғафури ошо хәрәкәттең лидеры идеяларын хуплаған, уға теләктәлшлек белдергән булғанға оҡшай.

Әйткәндәй, М.Ғафури һуңынан да, үпкә ауырыуы менән яфаланған сағында, йәйҙәрен Сәйетбабаға ҡымыҙ эсеү өсөн бер нисә мәртәбә килгән. Ғәҙәттә, ул тормош иптәше менән сәйетбабаларҙың Теләпәй-Үләтле йәйләүен үҙ итә торған булған. Йәйләүгә килеп урынлашыу менән шағир үҙе менән алып килгән ҡыҙыл материянан флаг яһар ҙа, йәйләү эргәһенән генә аҡкан Мәндем йылғаһын кисеп сығып, ҡаршылағы урман менән ҡапланған тауға күтәрелер һәм айырылы-быраҡ торған, ҡеүәтле ҡарт ҡарама башына уны беркетеп ҡуйыр булған. Ҡатыны: “Юҡ менән булашма, кеше аптыратма”, – тип ҡараһа ла, ул: “Һин ни һөйләйһең, Зөһрәкәй. Таң һайын бит ул йәйләүҙәгеләрҙе ҡояш нурҙарына мансылып, йылмайып сәләмләп ҡаршы аласаҡ, киләсәккә, матур тормошҡа әйҙәп, илһамландырып торасаҡ”, – тигән кире ҡаҡкыһыҙ яуабын бирер булған [1; 2, 595-596; 3, 193].

Бында шуны ла ап-асыҡ әйтергә кәрәк: М.Ғафури арҙаҡлы ғалим һәм сәйәсмән З.Вәлиди менән, Ғ.Рамазановтың “М.Ғафури. Халыҡ шағиры хаҡында китап” (1991) тигән ярым документаль, ярым әҙәби ижад емешендә әйтелгәнсә, бары 1918 йылдың ғинуарында ғына тәүге тапҡыр осрашмаған. З.Вәлидиҙең “Иçтәлектәр”ендә үрҙә телгә алынған 1917 йылдың сентябрендәге осрашыуҙан башҡалары хаҡында ла бәйән ителә. Мәçәлән, М.Ғафури Троицкийҙа Зәйнулла Рәсүлев мәҙрәсәһендә бергә уҡыған дуçы, “аҡыллы һәм шағир егет” Ғәзиз менән, “йәйен ҡаҙаҡтар араһында мөғәллимлек итеп” йөрөгәндән һуң, ҡайтышлай уның тыуған ауылы Маҡарға килеп йөрөгән, 1907 йыл тирәһендә З.Вәлиди менән бер нисә тапҡыр осрашҡан. Һуңғараҡ ул Ғәзиз менән бергә Көҙән ауылына Әхмәтзәкиҙәргә лә бер нисә тап-ҡыр килгән. “Һәр икеһе шиғырҙарын уҡыны, әсәйем менән атайым ҡәнәғәтләнеп тыңланы”, – тип хәтерләй был хаҡта З.Вәлиди. Үҙенең буласаҡ тоғро фекерҙәше, ярҙамсыһы, яҡын дуçы Маҡар ауылы егете Әмир Ҡарамышевтың да уларҙы яҡын күреүен,

шиғырҙарының мәғәнәләрен яҡшы аңлауын, уларҙы яттан һөйләүен телгә ала ғалим һәм сәйәсмән. Артабан ул көрәштәше Ә.Ҡарамышев менән бергә 1918 йылдың 9 апрель төнөндә Еҙем-Ҡаранға, унан Мырҙаҡайға (Сәйет-бабаға) килеүе, сәфәрендә “1917 йылдың сентябрендә өйөндә... мосафир булған Ямалетдин Байышевты, Мәжит Ғафуриҙы,... Сабир хәҙрәт Хәсән улын” күреүе тураһында бәйән итә.

Бөтә был факттарҙан аңлашылыуынса, М.Ғафури менән З.Вәлиди күптән таныш булған. Шағир тыуған төйәге халҡы менән яҡындан аралашҡан, хатта йыллап, атап әйткәндә, 1917 йылдың йәйенән алып 1918 йылдың аҙағынаса тыуған ауылы Еҙем-Ҡаранда йәшәгән сағы ла булған. Ләкин үҙенең “Тәржемәи хәлем”ендә лә (автобиографик яҙмаһында ла), башҡа ижад емештәрендә лә ул былар хаҡында ла, З.Вәлиди менән яҡындан таныш булыуы тураһында ла, аҡ офицер Мәһәҙи туғаны хаҡында ла телгә алмай. Бының төп сәбәбе үткән быуаттың 20 – 30-сы йылдарында илдә ваҡиғаларҙың үтә ҡуйыра, сетерекле боролош ала, үҙ дәүләтселеген булдырыу өсөн көрәшеүселәргә “башҡорт милләтсеһе”, “вәлидовсы”, “халиковсы” тигән ярлыҡтарҙың тағыла һәм төрлө язалар бирелә башлауындалыр.

1917 йылғы революцияны “Ҡыҙыл байраҡ” менән ҡаршы алған шағир унан һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда һәм Рәсәйҙә барған ваҡиғалар, З.Вәлиди, М.Халиҡов, Ә.Ҡарамышев кеүек башҡорт дәүләтселеге, автономиялы Башҡортостан өсөн көрәшеүселәр менән аралашыу, фекер-лөғәт алмашыу йоғонтоһонда ныҡ уйға ҡала, болоҡһой, дөрөҫ юлды табыу хаҡында баш вата, хатта ижадын бермә-бер һүлпәнәйтә, әҙәбиәт донъяһынан ситләшә төшә. Тыуған ауылында йәшәгән осоронда ул Башҡортостанда барған ваҡиғаларға артыҡ ҡыҫылып, үҙ позицияһын әҫәрҙәре аша асыҡ белдереп бармай. 1917 йылдың октябренән алып 1919 йылға тиклем шағир бары “Инҡилап” тигән алты юллыҡ ҡына шиғырын ижад итә. Унда ул, элекке ваҡыттағыса, халыҡҡа туранан-тура мөрәжәғәт итеү, өндәү, лозунг ташлау, оран һалыу алым-сараларына мөрәжәғәт итмәй. Инҡилаптың – революцияның социаль

мәғәнәһен, тарихи ролен асып биреү өсөн ул үтә лә ябай, халыҡсан аллегорик образға – ҡыл иләккә мөрәжәғәт итә, уны сағыштырыу предметы итеп ала: революция – ул ысын ынйыларҙы ҡомдан, иманлыларҙы яуыздарҙан, ҡаһарман көслөләрҙе көсһеҙ ҡурҡаҡтарҙан айырып ала торған ҡыл иләк. Данлыҡлы “Ҡыҙыл байраҡ”ынан һуң 1917 йылдың октябрендә көрәш дәрте, полемик рух менән һуғарылған, алдашып, ришүәт алып, халыҡты талап байыған “кисәге” тормош хужаларына киҫкен талап һәм янау һүҙҙәре менән мөрәжәғәт иткән “Хисап көнө” кеүек шиғри хат-мәктүбтәрен яҙған, тормош ауырлыҡтарын ныҡ татыған шағир, заманында милләте яҙмышы өсөн нык борсолоп милләтселек рухындағы әҫәрҙәр ижад иткән булһа ла, башҡорт милли хәрәкәтенә әүҙем ҡушылып китмәй, шул уҡ ваҡытта З.Вәлиди, М.Халиковтар менән бәйләнешен дә өҙмәй. Ул ике ут араһында ҡала, шулай ҙа аҡрынлап ғәҙел тормош төҙөүҙең “ҡыл иләге” тип иҫәпләнгән революцион көрәш идеяларын, советтар сәйәсәтен йырлауҙы хуп күрә башлай. Артабан шағир ижадын тулыһынса яңы ижтимағи ҡоролош талаптарына ярашлы юҫыҡта алып бара, алда әйткәнебеҙсә, З.Вәлиди кеүек сәйәсмәндәр менән аралашыуын бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла иҫкә алмай, тормош һәм ижад юлының ул заман өсөн үтә лә һикәлтәле, ҡытыршы һаналған был өлөшөн үҙенсә шулай “шымарта”, “таҙарта”. Шул уҡ ваҡытта М.Ғафури үҙенең хөрмәт иткән остазы Хатип хәҙрәт Халиковтың улы, Башҡортостан йөмһүриәтенең беренсе мөфтөйө, электән үк яҡын аралашҡан дуҫы Мансур Халиков өсөн ауыр замандар, төрлө йәберләүҙәр башланғас, уға ярҙамға килә. Уның дуҫын бер нисә тәүлек үҙ өйөндә йәшереп йәшәткән саҡтары ла була.

Шулай итеп, ҡайһылай ғына булмаһын, М.Ғафури ижадында ғына түгел, көндәлек ҡәҙимге тормошонда ла, эш-ҡылыҡтарында ла халҡы менән бергә булған. Уның 1912 йылда уҡ яҙылған “Үҙем һәм халҡым” шиғырындағы фекерҙәр һис кенә лә яңғырауыҡлы декларация, буш һүҙ булмаған. Улар шағирҙың ысын инаныуы ерлегендә тыуған һәм уның иманына, тормош кредоһына, йәшәү принцибына әүерелгән. Был принципҡа М.Ғафури ғүмеренең аҙағынаса тоғро ҡалған [1; 2, 597-598; 3, 195-196].

*Әҙәбиәт*

1. Ҡунафин Ғ.С. М.Ғафури тормошоноң билдәһеҙ биттәре // Башҡортостан, 2011, 15, 18, 19 ғинуар.

2. Ҡунафин Ғ.С. XIX – XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш үҙенсәлектәре. – Өфө: БР полиграфкомбинаты, 2004.

3. Ҡунафин Ғ.С. XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең идея-художество үҙенсәлектәре. – Өфө: Ғилем, 2016.

© **Ҡунафин Ғ.С.**, 2018

***Н.А. Ласынова, Ә.В. Сөнәғәтова,***

*БашДУ-ның Сибай институты (филиалы), Сибай ҡ.*

## ҺЫНЛЫ СӘНҒӘТТӘ МӘЖИТ ҒАФУРИ ОБРАЗЫ

Мәжит Ғафури – Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры, башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы яҙыусы. Үҙ ижадында ул күп жанрҙарға мөрәжәғәт итә, әҫәрҙәрендә халыҡтың ауыр, әсе яҙмышын һүрәтләй, мәғрифәтселек темаһын асыҡлай. Шуға күрә уның әҫәрҙәрен китап уҡыусылар яратып уҡый, һәм улар беҙҙең көндәрҙә лә актуаллеген юғалтмай. Мәктәп дәреслектәренә ингән “Гөлдәр баҡсаһында”, “Эш һәм белем”, “Болон”, “Йәйге эш ваҡыты” шиғырҙары, “Һарыҡты кем ашаған?”, “Бабай менән айыу”, “Ике себен” мәҫәлдәре, “Ҡыр ҡаҙы” хикәйәһе, “Ҡара йөҙҙәр” драмаһы – һәр кем күңеленә яҡын ижад өлгөләре.

Әҙәбиәттең бөтә жанрҙарында ла уңышлы эшләгән, башҡорт совет әҙәбиәте үҫеше сығанағында торған әҙип оло хөрмәткә лайыҡ. Башҡортостан Республикаһы халҡы һәм Хөкүмәтебеҙ тарафынан М. Ғафури исемен мәңгеләштереү маҡсатында бик күп эштәр эшләнә. Мәҫәлән, 1970 йылдың 6 февралендә Башҡорт академия драма театрының 50 йыллығы уңайынан уға М.Ғафури исеме бирелә, тыуған ауылы Еҙем-Ҡаранда музей асыла. 1940 йылда

М.Ғафуриҙың тыуыуына 60 йыл тулыу уңайынан Башҡортостандың Красноусол районына Ғафури исеме бирелә. Ошо уҡ йылда РСФСР-ҙың Юғары Советы президиумы указы менән Тел һәм әҙәбиәт фәнни-тикшеренеү институтына халыҡ шағирының исеме бирелә. Өфө ҡалаһының Совет районындағы ял һәм мәҙәниәт паркы ла 1961 йылдан алып шағир исемен йөрөтә.

Үрҙә һаналған саралрҙан тыш, шағир үҙе иҫән саҡта уҡ, йәғни 1923 йылда, Өфөнөң Николь урамы М.Ғафури урамы тип үҙгәртелә. Уның исемен Өфө ҡалаһы урамдарынан тыш, Ишембай, Салауат, Сибай, Стәрлетамаҡ, Дәүләкән ҡалаларында осратырға мөмкин. Ғафури исеме Рәсәйҙә бөтәһе 200 урамға ҡушылған.

Бер аҙым алға баҫам да / Әйләнәм мин артыма, / Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,

Күҙ һаламын халҡыма, – тип яҙа М.Ғафури “Үҙем һәм халҡым” шиғырында. Ә “Мин ҡайҙа?” әҫәрендә:

Ҡайҙа ярлы, ҡайҙа зарлы, ҡайҙа моңло күп була,

Мин шулар янында булам, улар менән килешеп була, – тип, һәр саҡ туған халҡы менән бергәлеген билдәләй. Һәр саҡ халыҡ менән, һәр саҡ халыҡ өсөн, тип йәшәгән шағир милләттәштәре, ҡәрҙәштәре араһында оло ихтирам, хөрмәт яулаған. Уға арнап ҡәләмдәштәре бихисап әҫәрҙәр ижад иткән. Мәҫәлән, Д.Юлтый “Урал һандуғасына”, М.Кәрим “Алыҫта ҡалған эҙҙәр”, З.Биишева “Халҡың янһа – яндың бергә” һ.б.

Шулай уҡ һынлы сәнғәттә лә уға арнап төшөрөлгән картиналар байтаҡ. Мәғлүм булыуынса, башҡорт һынлы сәнғәтенә нигеҙ һалыусы Дәүләткилдиев Ҡасим Сәлиғәсҡәр улы 1937 йылда Мәжит Ғафуриҙың портретын яҙа. Яҙыусының портреты сағыу булмаған фонда төшөрөлгән, беренсе планда ултырған шағир иғтибарҙы үҙенә ала. Рәссам М. Ғафуриҙы профилдән һүрәтләй. Шағирҙың ҡарашы алыҫҡа төбәлгән, күҙҙәре уйсан, шул уҡ ваҡытта уның йөҙ һыҙаттарында ихтыяр көсө ярылып ята. Картинала йылы һоро төҫтәр

ҡулланылған, бының менән Ҡ. Дәүләткилдиев яҙыусының тыныс, изгелекле, бик хисле күңелле булыуын еткерә. Ә туп-тура ҡараш иһә шағирҙың киләсәккә ҙур маҡсаттар, хыялдар менән йәшәүен күрһәтә.

1986 йылда Арыҫланов Әмир Солтан улы төшөргән картина "Мәжит Ғафури менән Ғабдулла Туҡай осрашыуы" тип атала. Был картинала туғандаш ике халыҡтың күренекле ике шәхесе осрашыуы һүрәтләнгән. Беренсе планда, бейек тау башында, ике шағирҙың дуҫтарса әңгәмә алышыуы төшөрөлгән. Йөҙҙәренә ҡарағанда, етди, бик мөһим һөйләшеү һыҙатлана. Әҙиптәр ҡарашында бөйөк уйҙар, төплө аҡыл сағыла. Артҡы планда башҡорт ерҙәренең бай тәбиғәте төшөрөлгән: офоҡҡа тиклем һуҙылған ҡара урман, бормалы йылға. Рәссам шағирҙарҙы тау башындағы сәхрәлә, хозур тәбиғәт ҡосағында һүрәтләп, уларҙың эске донъяларының бик бай, матур булыуын күрһәтергә теләй.

Шулай уҡ Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры М. Ғафуриға арналған скульптуралар ҙа байтаҡ ҡына. Шуларҙың иң билдәлеһе – Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры алдындағы майҙанда 1978 йылда ҡуйылған һәйкәлдер, моғайын. Был скульптураның авторҙары – СССР-ҙың халыҡ рәссамы Лев Кербель һәм архитектор Лев Хихлуха. Һәйкәлдә шағир ултырған килеш кәүҙәләндерелә, уның ҡарашы алыҫҡа төбәлгән. Бөтә тышҡы ҡиәфәте илһамланып ижад иткән кешене күҙ алдына баҫтыра. Башҡорт совет драматургияһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе булған Мәжит Ғафуриҙың исеме академия драма теартына бирелеү һәм уның алдына ҡуйылған һәйкәл – барыһы ла республикабыҙҙа шағир иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса ҙур эштәр атҡарылыуы тураһында һөйләй.

Урал аръяғының баш ҡалаһы булған Сибайҙа ла халыҡ шағирының исемен мәңгеләштереү эштәре алып барыла: бер урам, ял һәм мәҙәниәт паркы уның исемен йөрөтә. 1966 йылда скульптор Г.И. Мөхәмәтшин эшләгән бюст асыла. Бөгөнгө көндә был бюст Балалар ижады үҙәге алдынд тора. Бюст үҙе суйындан, ә нигеҙе буто-бетондан эшләнгән.

Шулай итеп, Мәжит Ғафури образы әҙәбиәттә генә түгел, һынлы сәнғәттә лә бик уңышлы сағылыш тапҡан.

***Әҙәбиәт***


1. Рамазанов Г.З. Мажит Гафури: очерк жизни и творчества. – М.: Сов. Россия, 1980. – 160 с.

2. Шәрипова Ә. Мәжит Ғафуриҙың Өфөләге йорт-музейы. – Өфө: Китап, 1997. – 40 бит.


© **Ласынова Н.А., Сунагатова А.В.**, 2018


**Р.М. Латыпова**,

*филол. ф .к., доцент, БашДУ-ның Сибай институты (филиалы), Сибай к.*

**И.И. Ҡаскынбаев**,

*БашДУ-ның Сибай институты (филиалы) IV курс студенты,Сибай к.*


## МӘЖИТ ҒАФУРИ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ “ҠАРА” ҺҮҘЕНЕҢ ҠУЛЛАНЫЛЫШЫ

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафури ҡалдырған бай мираҫ башҡорт әҙәбиәтендә айырым урын алып тора. Оло талант һәр ваҡыт күп яҡлы була. Шундай шәхестәрҙең береһе булған Мәжит Ғафури берҙәй талант менән төрлө жанрҙа эшләй: нескә хисле шағир, хикәйә, повесть һәм очерктар оҫтаһы, тәрән мәғәнәле мәҫәлдәр ижад итеүсе, талантлы драматург. Шул уҡ ваҡытта ул халыҡ ижады әҫәрҙәрен яҙып алып баҫтырыу менән дә шөғөлләнә. Уның әҫәрҙәренең тел-стиль үҙенсәлектәрен өйрәнеү башҡорт тел ғилеменең ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс тикшеренеү өлкәһе булыуҙан туҡтамай.

Был мәҡәләлә беҙ М. Ғафури әҫәрҙәрендә “ҡара” һүҙенең ҡулланылышын ҡарап китәбеҙ. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә “Ҡара” һүҙенә түбәндәгесә аңлатма бирелгән: **Ҡара.** 1. Ҡором, күмер төҫөндәге: *кireһе* **аҡ**.

*Ҡара болот. Ҡара сәс.* 2. Ҡары булмаған, асыҡ ятҡан. *Ҡара күҙ.* 3. Керле бысраҡ. *Бите ҡара. Ҡара ҡул.* 4. Түбәнге ҡатламға ҡараған, белемһеҙ, наҙан. *Ҡара халыҡ. Ҡара ҡул.* 5. *күсм.* Ҡыуаныс килтермәгән; ҡайғылы, ғазаплы. *Ҡара бәхет. Ҡара бәхет.* 6. *күсм.* Үтә яуыз, мәкерле. *Ҡара уй.* 7. *күсм.*Үҙе эйәреп килгән исемдәргә юғары кимәл, көслө дәрәжә билдәһе өҫтәй. *Ҡара аҡһаҡ, ҡара тир.* **Йөҙгә ҡара яғыу** ҡар. йөҙ. **Йөҙө(ң) ҡара** 1) әрләгәндә әйтелә; 2) көнләшеү ҡатыш һоҡланып әйтелә. **Йөҙ(ө) ҡара ҡойолоу** ныҡ ҡайғырыу, бошоу.

Мәжит Ғафури әҫәрҙәрендә "ҡара" һүҙе тура мәғәнәлә лә, күсмә мәғәнәлә лә ҡулланылған. Мәҫәлән, "Фәҡирлек менән үткән тереклек" әҫәренән миҫалдар: 1.*Ул (Әхмәтғәли) ҡыҙыл бишмәт кейгән,* ***ҡара билбау*** *менән билен быуған, бейек үксәле итек кейеп, салбарын һалындырған.* 2. *Ниғмәтулла һикегә килеп ултыра ла кеҫәһен аҡтара башлай. Ҡулы менән бер* ***ҡап-ҡара янсыҡ*** *(...); янсыҡты алдына һала ла, ҡағыҙҙы бер тарафынан йыртып алып, ҡулы менән бөтөрөп, ауыҙы менән төкөрөп йәбештерә лә, мәғлүм янсыҡтан усына тәмәке һалып, ҡағыҙға тултырып, ауыҙын беркетеп, мейес янына барып, сүгәләп ултырған кеше кеүек ултыра ла, тәмәкеһен ҡабыҙып, бер генә тарта ла, ике бармаҡ араһына ҡыҫтырып, һис ҡайғыһыҙ кеше кеүек һүҙгә керешә.* 3. *Аһ, ни* ***ҡара фәҡирлек*** *бәләһе үткән шул.* 4. *Етер, тимен,* ***ҡара йөҙ****! Етер!.. Тик торғансы эт урынына туҡмап ташлармын!* Беренсе һәм икенсе осраҡта "ҡара" һүҙе тура мәғәнәлә килеп, төҫтө белдерә, өсөнсөлә – көсәйтеү (үтә ярлы), дүртенселә әрләү, орошоу мәғәнәһендә ҡулланыла.

"Аслыҡ йыл йәки һатлыҡ ҡыҙ" хикәйһенән килтерелгән миҫалдарҙың тәүгеһе "ҡараңғы" мәғәнәһен (ҡара ҡәбер) белдерһә, икенсеһе тән төҫөнә генә түгел, ә был кешенең насар ниәт менән йөрөүенә ишаралай: 1. *Тиҙ-тиҙ Ғәйшә абыстайҙы* ***ҡара ҡәбергә*** *оҙаттылар.* 2. *Кавказлы,* ***ҡара йөҙ,*** *Мәрйәм аңламаған бер төрлө һүҙ менән Мәрйәмде ҡурҡытып туҡтатты.*

"Тормош һабаҡтары" повесында был һүҙ түбәндәге мәғәнәләрҙә бирелгән: 1. *Ер өҫтөнә сығарылған ләхет кеүек, ат менән генә йөрөтөлгән* ***ҡара карета****, үҙенең эсендәге ҡорбандарын ҡоралы кешеләр уртаһында ҡалдырғас, үҙе әкрен*

*генә икенсе ергә барып туҡтаны. 2. Батып барған моңло айға һуңғы тапҡыр күҙҙәрен тултырып ҡараған һәм* ***ҡара көстөң*** *иң ҡаты яза тип биргән үлем язаһына хөкөм ителгән кешеләр өсәү ине.* Бында *ҡара карета* – символик образ, ул “үлем” мәғәнәһе менән бәйле. Был каретала үлем язаһына хөкөм ителгән кешеләрҙе ташыйҙар. *Ҡара көс* – ошо язаны сығарыусылар.

Идея-эстетик йәһәттән дә, әҙәби-художестволы эшкәртелеүе яғынан да М.Ғафуриҙың ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышына арналған күп кенә әҫәрҙәренең һығымтаһы, синтезы булып торған “Ҡара йөҙҙәр” повесының исемендә үк “ҡара” һүҙе ҡулланылған. Әҫәрҙә автор һүрәтләгән осорҙоң трагик-драматик, йәғни “ҡара” яҡтарына нығыраҡ иғтибар итә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың аяуһыҙ һәм аяныс яҙмышын ул төрлө буяуҙар аша бөтә тулылығында күҙ алдына баҫтырыуға ирешә. Повеста ваҡиғалар йөрәктәрҙе һурып алырҙай тетрәндергес һүҙҙәр менән һүрәтләнә. Күңел түрендә ҡайнар хистәр йөрөткән ике йәш йөрәктең бәхетһеҙ мөхәббәте хаҡындағы фажиғәле әҫәр ул.

Был повеста “ҡара” төҫө әҫәрҙәге ваҡиғаларға төҫмөр генә түгел, бөтә ваҡиғаларға төҫ бирә: 1. *Хәҙер Ғәлимә апайҙың шәле битен ҡапламаһын өсөн уны башына уратып, артҡа бәйләгәндәр, йөҙө асыҡ булып, бөтә битенә* ***ҡара*** *буяғандар һәм уның һул ҡулын Закир ағайҙың уң ҡулына бәйләп ҡуйғандар. Шулай уҡ Закир ағайҙың йөҙөн* ***ҡараға*** *буяғандар, уның да күҙҙәре генә ағарып күренеп тора ине.* 2. *Ошо ерҙә Ғәлимә апай, һушынан яҙған кеүек, ергә бөгөлөп төштө. Уны күтәреп алдылар. Ул хәҙер иламай ҙа, өндәшмәй ҙә ине. Уның* ***ҡап-ҡара йөҙөндәге*** *күҙҙәре һирәкләп асылып ҡуйһа ла, уларҙы тағы ла йома, ул был халыҡты, был тормошто, быларҙың был тиклем вәхшәттәрен күрмәҫкә тырышҡан була ине.* 3. ***Ҡара сәүкә*** *кеүек халыҡтың таралыуы, уларҙың асыуҙары баҫылып, үҙ йорттарына ҡайтыуҙары Ғәлимә апайҙың улар ҡулынан иҫән ҡалыуы – минең күңелгә бер аҙ тыныслыҡ бирһә лә, Ғәлимә апайҙың артыҡ хәлһеҙләнеүе, уның шулай хәҙер ҡайҙа алып барһалар ҙа, ҡайҙа алып барып ташлаһалар ҙа, уның өсөн барыбер төҫлө килеүе – ул тыныслыҡ урынына икенсе бер төрлө уңайһыҙлыҡ тыуҙырҙы.* 4. *Кешеләр араһынан:*

*“Икәүһен ике* ***ҡара мунсаға*** *ябып, шунда ҡарауыл ҡуйырға кәрәк!” – тип әйтеүселәр булһа ла, уларҙың һүҙҙәрен ҡабул итмәнеләр.* 5. *Һин,* ***ҡара йөҙ****, ҡарт көнөмдә һаҡалыма оят килтерҙең, бөтә ғәләм алдында рисуай иттең!*

Тәүге ике миҫалда “ҡара” һүҙе буяуҙы ғына түгел, ғәйепләүҙе белдерә. Өсөнсө, дүртенсе миҫалдарҙа ул символик мәғәнәгә яҡын. Йәштәрҙе нахаҡ хөкөмгә этәргән аңы томаланған наҙан халыҡ ҡара сәүкә менән сағыштырыла, “ҡара мунса” һүҙенә лә насар ҡылыҡ өсөн яза биреү урыны мәғәнәһе һалынған. Һуңғы миҫалдағы мәғәнәне автор һөйләм эсендә асып бирә. Ғөмүмән, повеста “ҡара” һүҙе күсмә мәғәнәлә “насарлыҡ”, “яуызлыҡ” йәки “ҡайғы”, “аһ-зар” мәғәнәләрендә асыла.

Автор ахун хәҙрәт тирәһенә йыйылған хәлфәләр төркөмөнә дөйөм характеристика биргәндә, уларҙың йыртҡыслығын, әхлаҡ яғынан боҙоҡ булыуҙарын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Был төркөм тәүҙә Ғәлимә менән Зәкиргә хөкөм сығарғанда, аҙаҡ Ғәлимәне өшкөргәндә, бик ҡуйы буяуҙар менән һүрәтләнә. Улар өшкөрөп бөткәс, тәһәрәт яңыртыу һылтауы менән ышыҡҡа сығып, тәмәке сәйнәйҙәр һәм Ғәлимә хаҡында ғәйбәт һаталар. “Мужик менән йөрөп әрәм булғансы, беҙгә белдерһә, беҙ шәриғәттең юлын табыр инек”, – тиҙәр. Ана шул рәүешле, автор кемдәрҙең ысын мәғәнәһендә *ҡара йөҙ*, ә кемдәрҙең әхлаҡ яғынан саф булыуын уҡыусыға еткерә. Ҡара йөҙҙәр – был әҫәрҙә һүрәтләнгән ахун хәҙрәт, мулла, суфый һәм хәлфәләр ул. Улар шәриғәт исеме менән халыҡты ҡурҡытып, уны үҙҙәренең теләгән һүҙһеҙ үтәүсе итеп тоталар. М.Ғафури үҙ повесының тәнҡит, аяуһыҙ фашлау һәм кире ҡағыу пафосын шул осорҙағы ҡоролошҡа ҡаршы ҡаршы йүнәлтә. Автор “ҡара йөҙ” Ғәлимәнең яҙмышын шәриғәттең генә түгел, ғөмүмән, “иҫке тормоштоң миллион ҡорбандарының береһе, шуларҙың да иң ҡыҙғанысы” тип атай [2, 315-316].

Шулай итеп, “ҡара” һүҙенең мәғәнә нескәлектәрен тулы иҫәпкә алып, уларҙы урынлы һәм уңышлы ҡулланып, М.Ғафури әҫәрҙәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙы халыҡсан, геройҙарҙың уй-кисерешен, күңел торошон образлы һәм үҙенсәлекле һүрәтләүгә ирешә.

*Әҙәбиәт*

1. Башҡорт теленең һүҙлеге: Ике томда/Рәсәй Фәндәр Академияһы Башҡортостан ғилми үҙәге. Тар., тел һәм әҙ. институты. – М:. Рус. яз., 1993. – том I. – 862 бит.

2. Вәхитов Ә. Халыҡ шағиры Мәжит Ғафури //Ғафури М. Өс повесть. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. – 312-317 бб.

3. Ғафури М. Өс повесть. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. – 320 бит.

4. Ғафури М.  Әҫәрҙәр. 4 томда. II том. Повестар, хикәйәләр, мәҡәләләр. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978. –  416 бит.

© **Латыпова Р.М., Ҡаҫҡынбаев И.И.**, 2018

**Г.Н. Мөхәрләмова**,

*филол. ф. к., ТР ФА Г.Ибраһимов исемендәге*

*Тел, әдәбият һәм сәнгать институты*

*өлкән фәнни хезмәткәре, Казан ш.*

## МӘҖИТ ГАФУРИ ШИГЪРИЯТЕНДӘ ФӘЛСӘФИ МОТИВЛАР

Мәҗит Гафури – ике гасыр арасында иҗат иткән әдип. Аның иҗаты “XIX йөз башы поэзиясе белән XX поэзиясен, прозасын бәйләп торучы җеп булып тора” [2, 91], –дип яза Р.Әхмәтов.

М.Гафуриның башлангыч иҗаты тематикасы гыйлем, мәгърифәт, әхлакый тәрбия белән бәйле, ягъни мәгърифәтчелек идеяләре белән сугарылган. 1905-1907 еллар революциясе тәэсирендә аның шигъриятенә өмет, ышаныч мотивлары килеп керә. Шуның белән бәйле иҗатында социаль мотивлар, реализм, тарихка карата мөнәсәбәте чагылыш таба.

1908-1913 еллар лирикасында исә кайбер үзгәлек күзәтелә: аның шигырьләре идея-эстетик яктан үзгәрәләр, ягъни әсәрләрендә хис-кичерешләр

тагын да тирәнәя, тематик яктан төрле әсәрләр иҗат ителә, романтизм көчәя, поэзиясе үгет-нәсихәттән арына башлый һәм аеруча күңел һәм фәлсәфи лирика өстенлек итә. Соңгысы исә шактый шигырьләрендә күзәтелә. Алар рәтенә “Яфрак”, “Тәрәддед”, “Уйланган чакта”, “Уйлану”, “Гомер”, “Тормыш”, “Хакыйкать”, “Кайвакытта”, “Үтә гомерем” һ.б. шигырьләрен кертә алабыз.

М.Гафури иҗатында зур урынны яшәү һәм үлем, язмыш-тәкъдир, гомер, аның үтүе, тормыш, аның мәгънәсе турында уйланулар алып тора. Үзенең язмышына үпкәле лирик герой:

Аһ, мине сабый чагымнан бирле яндырган фәләк,

Һич гөнаһсыз күз яшемне җиргә тамдырган фәләк!

("Фәләк")

Ләкин үпкәсен белдерсә дә, ул аңа ачуланмый. Язмышына җавабы әзер аның, ул аны барыбер сөйми. Һәм сөймәячәк тә. Моның тагын бер сәбәбе – лирик геройның язмышы, тәкъдире алдында көчсезлеге. Дөньядагы тормышны зур газап дип санап, тормышта максат, өмет булмаганга борчыла, чөнки киләчәк билгесез. Киләчәкнең якты көннәре бары тик хыял, мираж булганга тормышны яхшырганына ышанып көтәсе юк дип саный.

"Яхшылык", "хаклык" дигән сүзләр – алар алдау гына,

Һичвакыт алданма бу сүзләргә, "чын сүз" дип карап...

("Тәрәддед")

Киләчәкнең билгесезлеге турындагы фикерләрне башка шигырьләрендә дә табып була:

Киләчәк көн-кәгазьләре киселмәгән китапка охшый

Күңелле нәрсәләр чыкса ярый ла анда бик яхшы

("Уйлану")

Кайда ул – яшьлектәге нык талпынулар дәрт белән,

Уйлыймын киләчәк гомерне – анда бер бушлык күрәм...

("Гомер")

Бу юллар Дәрдемәнд фикерләренә аваздаш. Ләкин Дәрдемәндтән аермалы буларак, М.Гафури үзенең киләчәген, караңгы, тонык төсләрдә булса да, күзаллый ала. Дәрдемәнд өчен исә киләчәк юк, ул үткән һәм бүгенге белән генә яши.

"Уйлаган чакта" исемле шигырендә дә икеләнү, билгесезлек мотивлары чагылыш тапкан. Дөньяны шагыйрь зинданга тиңли, дөньяның куркыныч, шомлы булуы кешеләрдә дә ышанычсызлык, курку хисләре тудыра, ди.

Шагыйрь моннан котылудан билгесез булуына борчыла, хәтта үлгәнчегә кадәр дөньяның яхшырачагына ышанмый. "Күңелсез нәрсәләр чыкса, өмид тәмам китә җилгә, гомер буе рәхәт күрми керемен мин кара җиргә!.." – дип яза ул "Уйлану" дигән шигырендә.

Гомернең үтүе, яңадан әйләнеп кайтмавы борчуга сала шагыйрьне. Гомере минутлары чишмәдән чыгып агучы су тамчыларына охшатып чагыштыру китерә.

"Гомер" исемле шигырендә гомеренең көзе җитүен белдерә – лирик герой инде картайган, шуңа күрә ул сагышлана.

Үтте гомеремнең җәе – бу әйләнеп килмәс тагын,

Җитте көзләр, койды гәүдәм инде яшьлек яфрагын...

Лирик герой яшьлеген кире кайтару турында хыяллана, ләкин моны булмас эш булуын аңлап, шул яшь гомерен уйлавыннан да тәм, ямь табып яши, ягъни ул үткәч гомерен сагынып, үткәне белән юанып яши. Үткән тормышның мәгънәсез булуына күңеле әрни, аның гомере икеләнү һәм уйлануда үткән, киләчәге дә билгесез.

Тормыш, аның асылы турында уйлану "Яфрак" исемле шигырендә ачык итеп бирелә. Шагыйрь яфрак, ягъни җансыз предмет аша, сынландыру чарасын кулланып, тормыш, аның мәгънәсенә төшенергә тырыша, яшәү һәм үлем турында уйлана. Кеше тормышының асылы кызыксындыра шагыйрьне. Ул үзенең язмышын яфрак язмышы белән чагыштыра, яфрак теле белән үзенең тормышы турында сөйли кебек. Яфрак кырыс җилгә каршы тора алмый, чөнки

аның гомеренең көзе житә. Сап-сарылык – куркынычлык – ул яфрак өчен картаю, үлем, үлгәч-коелгач ул бер чокырга төшәчәк. Бу чокыр кеше өчен – кабер. Бары тик шунда гына лирик герой күңеле тынычлану табачак, ул рәхәтлек хисен кичерәчәк. Кеше дә кара туфракка әйләнеп, кире үз асылына кайтачак, ягъни Ходай тагын аңа бер кат тормыш бирәчәк. Шулай итеп, шагыйрь кеше гомеренең мәгънәсен табигатьтән табарга, шуның аша аңларга өнди.

Күргәнебезчә, М.Гафури лирикасындагы фәлсәфи мотивлар кайгы-хәсрәт, өметсезлек, үкенү турында уйлануга кайтып кала. Төшенкелек, чарасызлык чаткыларын “Кайвакытта” шигырендә күзәтәбез. Лирик герой: “Бер урында тормый күңлем, тибрәнә, тапмый карар, җир йөзе нурсызлана, бал-майлары тәмсезләнә” – дип хафалана, тынычсызлана. Моның сәбәбен ул дөньяда бәхетнең, чын сәгадәтнең булмавына бәйли.

Көтәсең тып-тыныч, яп-якты көннәрне өмид берлән;

Бәхет йолдызы чыкмый – әллә инде мәңгегә сүнгән? –

дип шикләнә шагыйрь “Тормыш” дигән шигырендә. Аның дөньяга ышанычы үлгән, чөнки ул аны бәхетле итәм дип гел алдалап тора.

Бу караңгылыктан, чарасызлыктан һәм гаделсезлектән чыгу юлын лирик герой кеше акылының көчендә күрә һәм аның бу хисләре шатлану хисенә алмашына.

Бәхет, аның асылы турында уйлану "Ишет, тәңрем" исемле шигырендә дә урын алган. Дөньядагы явызлыкның, яманлыкның күп булуы шагыйрьне борчуга сала.

Яхшылыкның, киң күңеллелекнең азлыгына сукранып, шагыйрь аның көчен мәхәббәттә күрә:

Чын мәхәббәт, чын кешелек, белмимен, кайчан туар?

Чын мәхәббәт юклыгыннан азмы түгелде күз яше!

Шул ук фикерләрне "Ачы?.." исемле шигырендә дә табабыз:

Мәхәббәт орлыгын чүпли, әтәч төсле, усал затлар,

Аларга соң кешенең вөжданы һәм күз яше нәрсә?

дип уйлана лирик герой. Чөнки "М.Гафури мәхәббәт хисенә кешенең асылын һәм аның әхлакый камиллеген аеруча тулы чагылдыручы көч итеп карый"[1, 134].

Күңел сафлыгын, аклыгын да ул мәхәббәттән күрә, мәхәббәт хисен кичергән саф күңел дәрьядай киң дип билгели. Ә күңел тарлыгын тәнкыйтьләп, алладан үзен моннан сакларга сорый.

Шулай итеп, М.Гафури иҗатында фәлсәфи уйланулар чагыштырмача киң урын алып, яшәү һәм үлем, язмыш-тәкъдир, бәхет, гомер һәм аның үтүе, тормыш һәм аның асылы рәвешендә тәгаенләнәләр.

### Әдәбият


1. Абдуллин Я. Гуманистик идеаллардан революцион тәгълиматка // Мәгърифәт нуры ачар. – Казан, 1987. – 200 б.

2. Әхмәтов Р.М. Гафури иҗатында XIX йөз татар поэзиясе традицияләре / Р.М. Әхмәтов // Маджит Гафури: мат. научн. конф. – Казань, 1981. – Б. 91-100.

3. Гафури М. Әсәрләр. Дүрт томда / М.Гафури. – Казан: Татар. кит. нәшр., 1980.


© **Мөхәрләмова Г.Н.**, 2018

**Г.С. Муратова**,
*директор ГБУКИ Национальный литературный музей РБ,*
*Заслуженный работник культуры РБ, г. Уфа*

# НАЦИОНАЛЬНЫЙ ЛИТЕРАТУРНЫЙ МУЗЕЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

В системе Министерства культуры Республики Башкортостан состоит 94 музея, 23 из которых – литературные. Главным среди музеев литературного профиля является Национальный литературный музей РБ.

Государственное бюджетное учреждение культуры и искусства Национальный литературный музей Республики Башкортостан был создан на основании Указа Президента РБ № УП-68 от 22 октября 1996 г., распоряжения Кабинета Министров № 516-Р от 30 мая 1997 г., приказа Министра культуры РБ № 2 от 6 января 2000 г., как научно-просветительское, пропагандистское учреждение и как государственное хранилище уникальных памятников древней и современной литературы. Предполагалось, что в нём будут собраны рукописи произведений и биографических сведений писателей Башкортостана, всё то, что имеется в различных архивах и музеях по литературной тематике, а также для системного изучения, освещения различных этапов многовекового литературного процесса в Башкортостане, ознакомления широких слоев населения с длительным путем становления и развития башкирской литературы и литературы народов Башкортостана. Научная концепция Национального литературного музея была рассмотрена и принята на Ученом совете музея при участии представителей Министерства культуры РБ, видных писателей, ученых, художников.

За годы работы музей накопил богатый документальный фонд, крупное собрание материалов о писателях Республики Башкортостан, о писателях-фронтовиках, среди них есть уникальные фотографии, рукописи, редкие издания, мемориальные вещи, документы, предметы декоративно-прикладного

искусства, фонотека. В музее собрано более 12 тысяч единиц хранения основного фонда. Все это является основой для передвижных выставок и позволяет воплощать разнообразные проекты.

Музей расширяет выставочную деятельность за счет передвижных выставок в библиотеках, школах, музеях муниципальных образований, а также и за пределами республики. На сегодняшний день разработаны более 30 передвижных выставок, каждая из которых могла бы стать основой полноценного литературного музея: «Жизнь и творчество Мифтахетдина Акмуллы»; «Мажит Гафури, Шайхзада Бабич, Зайнулла Расулев»; «Жизнь и творчество Равиля Бикбаева»; «Жизнь и творчество Мухаметши Бурангулова»; «Жизнь и творчество Габдуллы Амантаева»; «Жизнь и творчество Зайнаб Биишевой»; «Жизнь и творчество Рами Гарипова»; «Жизнь и творчество Шайхзады Бабича»; «Национальный литературный музей Республики Башкортостан: Яркие страницы Года литературы»; «Жизнь и творчество Сафуана Алибаева»; «Слово поэта народного (Мустай Карим)»; «Вдохновленные Башкирией»; «К 175-летию Мухаметсалима Уметбаева»; «Яҡтыға әйҙәүсе ижад» (о М.Акмулле) и т.д.

Сотрудники Национального литературного музея ведут научные исследования, участвуют и организуют конференции, издают буклеты, проспекты, проводят конкурсы среди учащихся школ, встречи с писателями, музыкально-литературные вечера, организуют передвижные выставки. Во время экспедиций Национального литературного музея в Оренбургскую, Челябинскую, Самарскую области, в Москву приобретены документы, исторические книги, экспонаты, личные вещи башкирских писателей, уроженцев этих регионов.

В состав Национального литературного музея РБ входят пять филиалов: Мемориальный дом-музей Мажита Гафури в г. Уфа (ул. Гоголя, 28/1); музей Мифтахетдина Акмуллы в д. Туксанбаево Миякинского района; музей Шайхзады Бабича в с. Асяново Дюртюлинского района; музей Мухаметсалима

Уметбаева в д. Ибрагимово Кармаскалинского района; музей Арслана Мубарякова в с. Ассы Белорецкого района.

С 2007 года Национальный литературный музей РБ активно участвует во всероссийских культурно-образовательных акциях «Ночь музеев» и «Ночь искусств».

Все филиалы Национального литературного музея живут многогранной творческой жизнью. Почти каждый день в их стенах проходят разнообразные встречи – литературные и музыкальные вечера, театральные представления, научные заседания и конференции, детские праздники и конкурсы, интерактивные занятия и лекции. Во время праздников и каникул музеи проводят традиционные мероприятия («Зимние чудеса», «Мама, папа, я – спортивная семья!», «Ҡарға бутҡаһы» и т.д.), Дни открытых дверей (1 сентября – ко Дню знаний, 1 июня – ко Дню защиты детей, 1 октября – ко Дню пожилых) и становятся центром культурной жизни сёл. Музейные мероприятия посещаются целыми семьями. Заметный вклад в развитие образовательных программ внесли кружки «Умелые руки» (музей М.Акмуллы), «Юные экскурсоводы» (музей Ш. Бабича), танцевальный кружок «Юные таланты» (музей М.Уметбаева), танцевальный кружок «Ляйсан», «Юные экскурсоводы» (музей А. Мубарякова).

С целью приобщения подрастающего поколения к литературному наследию башкирских писателей Мажита Гафури, Мухаметсалима Уметбаева, Шайхзады Бабича, Мифтахетдина Акмуллы, в поддержку и продвижению башкирского языка и литературы, музеи совместно с администрациями районов проводят традиционные Чтения (Гафурийские, Акмуллинские, Уметбаевские).

Как правило, литературные музеи в своей работе не ограничиваются тематикой жизни и творчества определённых личностей, а организуют выставки и мероприятия, посвящённые истории и этнографии своих сел, известным личностям-выходцам села, флоре и фауне края (выставки «Жизнь и быт башкир», «Уралым мөғжизәһе», «История моего села», «Я поражен твоею

красотой – Башкортостан, моя отчизна!», «Новогодняя мозаика», «Бытовые предметы XX века» и др.

Согласно разработаннаму графику, во всех филиалах прошли реэкспозиционные работы, т.к. экспозиции этих филиалов морально и физически устарели. Все филиалы оборудованы современной оргтехникой и и имеют выход к Интернету.

Литературные музеи республики проделали большую работу в 2015 году, в Год литературы. Впервые на базе филиала Национального литературного музея – в доме-музее Мажита Гафури состоялся Республиканский форум литературных музеев республики. В ходе мероприятия были рассмотрены вопросы укрепления сети литературных музеев в Республике Башкортостан, сотрудничества с литературными музеями регионе России, а также роли литературных музеев в сохранении культурного наследия Республики Башкортостан.

Большим событием явилось открытие виртуального центра Всероссийского музея А.С. Пушкина в Мемориальном доме-музее Мажита Гафури. Проект реализован в рамках сотрудничества между Всероссийским музеем А.С. Пушкина и Национальным литературным музеем РБ. Из фондов Всероссийского музея А.С.Пушкина представлена выставка «Путешествие поэта», также состоялась презентация виртуального центра и медиаресурсов.

Выставка «Путешествие поэта» посвящена путешествию А.С.Пушкина осенью 1833 года, когда великий русский поэт совершил поездку по тем местам, где еще жива была память о пугачевском восстании. На выставке «Путешествие поэта» представлены произведения четырех наиболее известных иллюстраторов повести «Капитанская дочка» и «Истории Пугачева»: П.П. Соколова, А.Н. Бенуа, Б.И. Кожина, С.В. Герасимова. Особое внимание привлекают портреты А.С. Пушкина: портрет неизвестного художника 1831 года, сделанный летом в Царском Селе (так выглядел Пушкин, когда путешествовал по пугачевским местам), портрет П.Ф. Соколова 1836 года,

портрет работы В. Серова 1899 года и его же иллюстрация «Зимняя дорога». В экспозицию вошли работы И. Кольмана, А. Орловского; листы из альбома Х. Гейслера «Живописные картины нравов, обычаев и развлечений русских, башкир, татар, монголов и других народов Российской империи» (1804), альбома Е. Корнеева «Народы России» (1812).

Ресурсы центра позволяют уфимцам и гостям города познакомиться с оцифрованными материалами и мультимедиа-ресурсами, фильмами и научно-популярным изданиями старейшего пушкинского музея России. Здесь регулярно проводятся онлайн-лекции, конференции, вебинары («Друзья мои, прекрасен наш союз!» (кандидат филологических наук, зав. Медиацентром Всероссийского музея А.С.Пушкина Ирина Розина (г. Санкт-Петербург), конференция-вебинар «День памяти А.С. Пушкина» ФГБУ «Президентская библиотека имени Б.Н. Ельцина» (г. Санкт-Петербург и т.д.).

В целях содействия развитию музейного дела Республики Башкортостан, распространения передового опыта и внедрения в практику работы музеев инновационных разработок, ГБУКИ Национальный литературный музей при поддержке Министерства культуры Республики Башкортостан с 2015 года ежегодно организует Республиканский конкурс «Мой музей» среди государственных и муниципальных музеев республики. Участниками конкурса стали более 50 музеев различного профиля. Проект необходим для совершенствования музейной работы, развития сотрудничества и партнерских связей между музеями республики, выявления талантливых, творчески работающих музейных сотрудников, стимулирования и развития творческого потенциала музеев.

Национальный литературный музей Республики Башкортостан является научно-методическим центром для всей сети литературных музеев системы Министерства культуры Республики Башкортостан.

За последние годы подготовлены и реализованы проекты на конкурс по соисканию грантов Главы Республики Башкортостан на темы: Виртуальный тур

по Мемориальному дому-музею Мажита Гафури в Уфе» (2014); Путеводитель по литературным музеям Республики Башкортостан (2015); Виртуальный тур по музею Шайхзады Бабича (2015); Создание интерактивной экспозиции в музее Арслана Мубарякова (2016); Виртуальный тур по музею Мифтахетдина Акмуллы (2017).

Важнейшим направлением в работе музеев является обслуживание посетителей. Ежегодно музей посещают люди самых различных возрастов, образования и интересов. Своей просветительской, образовательной, воспитательной работой среди школьников, студентов, молодежи Национальный литературный музей РБ и его филиалы вносят большой вклад в развитие культуры Башкортостана. Одним из направлений деятельности является – воспитание патриота, гражданина Республики Башкортостан с активной жизненной позицией, гармонично развитую личность, знающую язык, историю и культуру родного края, бережно относящуюся к его духовным ценностям.

Национальный литературный музей РБ занимает достойное место в культурной жизни республики, способствуя развитию интеллектуального и эмоционального проникновения в прошлое, служит не только целям просвещения и пропаганды знаний, но и стал местом приобщения людей к литературному наследию Башкортостана.

© **Муратова Г.С.**, 2018

**Л.Р. Надыршина**,
*филол. ф. к., ТР ФА Г.Ибраһимов исемендәге Тел, әдәбият һәм сәнгать институты фәнни хезмәткәре, Казан ш.*

## М.ГАФУРИНЫҢ «АДӘМ ВӘ ИБЛИС» ПОЭМАСЫНДА МИФОЛОГИК ОБРАЗЛАР

XIX–XX гасыр чикләрендә татар әдәбияты үсеш юлында яңа сукмаклар сала башлый. Бу фикер, бердән, сүз сәнгатендә модернистик эзләнүләргә, шартлы алымнарга, икенчедән, милли-мәдәни традицияләргә игътибарның артуы белән дә дәлилләнә. Бу алгарыш үз чиратында мифологик образлар, сюжет-мотивлар, мифопоэтик шәхесләр, архетипик образлар белән кызыксыну көчәюгә алып килә. Шуның нәтиҗәсе буларак, милли поэзиядә мифологик образларны гәүдәләндергән бер төркем лирик һәм лиро-эпик әсәрләр мәйданга килә.

XIX–XX гасыр чикләрендә дә сәнгати образның киңәюе, нигездә, дөнья мифологиясенең (антик, христиан, көнчыгыш һ.б.) бай чыганакларыннан киң файдалануга бәйле төстә бара [2, 22]. Татар сүз сәнгатендә бу чорда борынгы ышануларга, ислам мифологиясенә мөрәҗәгать итеп язылган поэмалар үзләре бер катламны тәшкил итә. Күпчелегендә үзәк образ буларак ислам мифологиясенә бәйле Җен, Иблис, Хозер, шулай ук төрки-татар ышануларына бәйле Су анасы, Убыр, Өрәк кебек мифологик образлар алынган Ш.Бабичның «Газазил», М.Гафуриның «Адәм вә Иблис», Һ.Такташның «Газраилләр», Г.Сөнгатинең «Хозер», Г.Харисның «Өрәк» кебек әсәрләре дөнья әдәбиятындагы «антижанр» функцияләрен яңарта. Антижанр иске форманың яңа функциядә кулланылуы буларак карала. Ул, башлангыч формасыннан аермалы буларак, капма-каршы эчтәлектә укучыга тәкъдим ителә. Әдәбят белемендә аның ике төре аерып чыгарыла: көлке, сатира, пародиягә корылган һәм җитди антижанр [3, 60-63]. М.Гафуриның «Адәм вә Иблис» (1910) поэмасы беренче төргә карый, биредә без демифологизация – яшәп килүче мифны юкка

чыгару, шартлылык күренеше белән очрашабыз. Аның нигезенә дә Адәмнең яратылуы һәм җиргә сөрелүе белән бәйле дини миф салынган. Әлеге миф, антижанр таләпләренә буйсындырылып, эчтәлек ягыннан үзгәртеп корыла, милли-иҗтимагый фикерләү белән тулыландырыла.

Берничә катламның синтезы төсендә уйланылган поэмада яшәешкә караган, кеше белән бәйле фәлсәфи фикерләр аерым катламны тәшкил итә. Ул – Адәм, Хаува, Иблис кебек мифологик образлар аша тормышка ашырыла. Нигездә, фәлсәфи катлам явызлык, аның чыганагы турындагы уйланулар төсендә чагылыш тапкан. Явызлык күктән, Алла катыннан төшми, ә бәлки кешенең табигатеннән үк килә торган көч буларак тәкъдим ителә. Шуңа нисбәтле, Иблис кешенең ләззәткә омтылышы буларак кабул ителә. Аның бар начарлыгы, ялгышы – Аллага каршы килүендә, буйсынмавында дип аңлатыла. Шуның өчен дә ул Алла тарафыннан Адәм яшәргә тиешле җиргә сөрелә, ә Адәм исә җәннәткә урнаштырыла: *Өметсез хәлдә Иблис шул сәгать җиргә төшеп киткән, / Япа-ялгыз җир өстендә зарарсыз гына көн иткән. / Җир өстендә тулы җанварга кылмаган зарарлы эш. / Адәмнәр җиргә тулгач та зоһур иткән янә Иблис...*

Явызлык кеше фәлсәфәсе дәрәҗәсендә дә бирелә. Шагыйрь раславынча, кеше – җир йөзендәге бар начарлыкның чыганагы. Фәрештәләрнең кеше турында баштан ук әйткән фикерләре, Адәм белән Хаува җиргә төшерелгәннән соң, җанварлар тарафыннан тагын кабатланыпраслана. М. Гафури фикеренчә, адәм балаларының башына җиткән иң төп сыйфат – фани ләззәткә, тән ләззәтенә омтылу. Җиргә төшерелгән фәрештәләр дә, күп вакыт һәртөрле рәхәтлекләрдән баш тартып, ялгышлардан сакланып яшәсәләр дә, бер кыз аркасында гөнаһ пычрагына баталар.

Әсәр композициясендә урын алган фәлсәфи катламнан аңлашылганча, явызлык кешенең табигатенә салынган. Аның аерылгысыз сыйфаты булган нәфес – гөнаһка китерүче бердәнбер төшенчә. Ике фәрештәнең, Алла тарафыннан җисем һәм нәфесле ителеп, җиргә төшүләре һәм гөнаһ кылулары

шуны раслый. Алла үзе дә кешенең ялгышларына нәфесен тыя алмавы сәбәпче икәнен ачык аңлый: *Диде Алла: «Әгәр сезгә җәсед берлән нәфес бирсәм, / Шулар төсле гөнаһ эшләр кылырсыз шөбһәсез һәм».* Шулай булгач, кешеләрнең гөнаһ кылуына Иблис коткысы сәбәпче, дип әйтү дөреслеккә туры килми. *«Кеше кылмас гөнаһ эшне, әгәр дә нәфесен тыйса»* дигән фикер идея төсендә алга чыгарыла. Кеше үз гомерен үзе теләгәнчә кора, үз юлын үзе сыза: *«Үзеңнең ихтыярыңда мәгыйшәт юлларын тапмак».* Авторның дингә карашы үзенчәлекле. Дин, шәригать, канун – инсаннарның хаталары күбәюенә каршы зарури барлыкка килгән кыйммәтләр. Тату яшәгән, изгелеккә хезмәт иткән җәмгыятьне кануннар белән тыеп торуның һич кирәге юк.

М. Гафури кешедәге тагын бер сыйфатны проблема дәрәҗәсенә күтәреп сурәтли. Ул – курку һәм куркудан туган явызлык. Җиргә төшкән көннәрендә үз башын кайгырту белән генә мәшгуль булган Адәм куяннан да куркып гомер кичерә. Ә инде ияләшеп беткәч, үзенә каршы чыгучыларны очратмагач, ул көче җиткән бер әйберне таптый, кыса һәм изә башлый. Шул рәвешле, биредә үзеңнән көчсезләрне рәнҗетергә омтылу проблемасы куела. Җанында курку асраган, көчсез затның яклаучысыз булган башкаларны изүдән тәм табуы, шул рәвешле үз-үзенә «көчлелеген» раславы – аларның яшәү рәвеше.

Әлеге әсәрдә билгеле мифны куллану демифологизация максатыннан башкарыла. Автор ислам мифологиясендәге Адәм белән Хаува турындагы мифны үзгәртә. Бу – поэмадагы җәмгыятькә бәя бирү белән бәйләнгән тагын бер катлам таләпләреннән чыгып билгеләнә. М. Гафури шуның аша яшәешкә бәясен җиткерә: *Үтә көннәр, җир өстендә фәсак-фәсад һаман арта. / Итагать юк, бирәләр һәрвакыт Хак әмеренә арка, / Ходаның үзенә дә сәҗдә кылмый башлагач инсан, / Мәләкләр әйткәненчә, башлады бунлар түгәргә кан.*

*«Адәмнәрнең газиз гомерләре үтә сугыш белән»*, – дип, автор Беренче Бөтендөнья сугышына үз мөнәсәбәтен белдерә. Кешелек дөньясы үз тарихында күп сугыш, кан коешлар күргән. Аның төп хатасы – үткәннәреннән сабак ала белмәвендә, аянычлы һәм фаҗигале тарихны онытуларында.

Поэмадагы Иблис һәм Адәм символик образлар дәрәҗәсендә кабул ителә. Адәм образы җирдәге явызлык билгесен аңлатса, Иблис исә кешелекнең начарлыкка омтылышы булып төгәлләшә.

Әсәр экзистенциаль рухта тәмамлана. Шагыйрь фикеренчә, җир тормышында яхшылыкка урын юк. Җир үзе үк гөнаһлы булып яратылган. Гөнаһ кылу, нәфес, үтереш кебек төшенчәләр кешенең табигатенә салынган. Бозыклык, явызлык, гөнаһның һаман арта баруы, туктаусыз сугышлар кешелекнең юкка чыгуына китерәчәк. Алланың үзенең дә бу инсаннарны барлыкка китерүенә үкенүе ассызыклана. Яшәешне тәүбәгә килү, Аллаһка сыену, рухи чистарыну, изгелекне яшәү кыйбласы итү генә бетүдән саклап калачак. Автор үткәргән төп идея шуннан гыйбарәт.

***Әдәбият***


1. Гафури М. Адәм вә Иблис. – Уфа, 1910.

2. Гудкова С.П. Миф и способы поэтического освоения в художественной системе А.А. Фета // Литература: миф и реальность. – Казань: Издательство КГУ, 2004.

3. Давыдова Т., Пронин В. Теория литературы: Учебное пособие. – М.: Логос, 2003.


© **Надыршина Л.Р.**, 2018

**Р.З. Нәжметдинова**,
*БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре,*
*Еҙем-Ҡарандағы М.Ғафури музейы мөдире,*
*Ғафури районы*

## КҮККӘ АШҠАН ҠАЯТАШТАЙ...

Гүзәл тәбиғәтле районыбыҙ хазиналарға бик бай. Уның бик ҡиммәтле хазинаһы – хеҙмәт һөйгән халҡы, ошо бәрәкәтле тупраҡ биргән бөйөк шәхестәре.

Быйыл яҡташыбыҙ – Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың Өфө ҡалаһындағы Гоголь урамында урынлашҡан әҙәби-мемориаль йорт-музейының асылыуына 70 йыл тулды. 1923 йылда М.Ғафуриға әҙәби эшмәкәрлегенең 20 йыллыҡ юбилейы айҡанлы, Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән оло исем бирелә һәм хөкүмәт тарафынан уға Гоголь урамынлағы йорт бүләк ителә. Хәҙерге ваҡытта ул – шағирҙың әҙәби-мемориаль йорт-музейы.

Мәжит Ғафуриҙың исемен тыуған ерендә лә мәңгеләштереү йәһәтенән тыуған ауылы Еҙем-Ҡаранда 1970 йылдың октябрь айында йорт-музейы асыла.

Музей – ул хәтер тигән һүҙ. Хәтерле халыҡ – ғүмерле халыҡ. Һәр бер халыҡ үҙенең данлы ул-ҡыҙҙарын, күренекле шәхестәрен онотмаҫҡа тейеш.Йәш быуындың киләсәген ҡайғыртҡан халыҡ ҡына музейҙар төҙөй.

Ҡара көндәр урап алғанда ла,
Өмөт йондоҙоңдо һаҡланың.
Алда хәтәр уттар янғанда ла,
Халҡың менән бергә атланың.
Бергә барҙың, ҡанлы майҙандарға
Халҡың ҡылыс алып сапҡанда.
Таштар ватып, тауҙар аҡтарғанда,
Һаман ҡалдың алғы сафтарҙа.

Таң нурҙары булып балҡып яна
Һинең ҡайнар йөрәк йырҙарың.
Йырҙарыңдан һаман илһам ала
Һинең йәш ҡыҙҙарың һәм улдарың.

Халыҡ шағиры Мәжит Нурғәни улы Ғафури 1880 йылдың 2 авгусында Ғафури районының Еҙем-Ҡаран ауылында тыуған. Ул бик йәшләй үкһеҙ етем ҡала. Шулай ҙа бәләкәйҙән белемгә ынтылышы уны Өфө эргәһендәге Ҡыйышҡы мәҙрәсәһендә алып килә, әммә ауыр тормош шарттарына бәйле, Мәжит уны тамамлай алмай. Тыуған ауылында уҡыта, Урад заводтарында эшләй. Троицкийҙа Зәйнулла ишан мәҙрәсәһендә, Ҡазандағы “Мөхәммәдиә” мәҙрәсәһендә уҡый. Ҡаҙаҡ далаларында уҡыта, рус, ҡаҙаҡ әҙәбиәтен өйрәнә. 1906 йылда Өфөгә ҡайта, “Ғәлиә” мәҙрәсәһендә уҡыған йылдарында Башҡортостан матбуғаты үҫешенә күп көс һала. Башҡорт һәм татар әҙәбиәтенең классигы, башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе Мәжит Ғафури ижады күп милләтле совет әҙәбиәте тарихында күренекле урын биләй.

Мәжит Ғафури ижадының тәүге осоро шиғриәткә арналған. Унда хәл иткес алышҡа әйҙәү, выждан һәм намыҫ, мөхәббәт, туғанлыҡ, хәҡиҡәт темалары өҫтөнлөк итә.Тәүге шиғырҙарының береһе “Иман шәкерттәренә” тип атала. Был шиғырында үҙен уратып алған шәкерттәрҙең ғәмһеҙлегенән, тома һуҡырлыҡтарынан, ишандың ике йөҙлөлөгөнән әсе көлә.

Гуманизм менән һуғарылған, аң-белемгә саҡырған, өгөт-нәсихәтле дидактик шиғырҙары халыҡ күңеленә бик яҡын. Миҫалға “Себер тимер юлы”, “Ғилем”,” Йәш ғүмер” һ.б. шиғырҙарын килтерергә була. Ғафуриҙың үҙ халҡы өсөн янып-көйөп йәшәүе “Үҙем һәм халҡым”, “Ир-егеткә” шиғырҙарында бик асыҡ сағыла.

Бер аҙым алға баҫам да
Әйләнәм мин артыма,
Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,
Күҙ һаламын халҡыма.

Шул ваҡыт мин бик юғары

Ҡош кеүек осһам әгәр.

Ә улар һаман шулай

Баҫҡан урында торһалар?

Мәжит Ғафури проза өлкәһендә лә ҙур уңыштарға өлгәшә.Егерменсе йылдарҙың икенсе яртыһында һәм утыҙынсы йылдар башында ул үткән тормошҡа арналған иң күренекле әҫәрҙәрен ижад итте.Иң мәшһүр проза әҫәрҙәренең береһе – “Ҡара йөҙҙәр” повесы.Ислам диненең аяуһыҙ ҡанундары, шәриғәт ҡыҫымы аҫтында кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең ни тиклем киҫкен төҫ алыуы, татар, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының аяныслы яҙмышы драмала ҙур оҫталыҡ менән кәүҙәләндерелгән. Ябай крәҫтиән ҡыҙы Ғәлимәнең тормошта прототиптары күп була. Шуларҙың береһе шағирҙың бер туған апаһы Сафия. Ул, йәшләй, һөйгән егетенән айырып, көсләп кейәүгә бирелгәндән һуң, ауырып һәләк була. “Был апайым төҫкә матур, буйы зифа, артыҡ мөләйем тәбиғәтле, нескә күңелле ине”, – тип яҙа Ғафури үҙенең автобиографик яҙмаһында. Ғәлимә лә шундай ҡыҙ сафлығы, гүзәллеге, хеҙмәт һәм тормош һөйөүсәнлеге менән ауыр, ҡараңғы тормошта яҡтылыҡты, матурлыҡты символлаштырған образ.Ғәлимәнең үҙе кеүек үк саф күңелле ауыл егете Закирға булған мөхәббәтенең трагедияға әйләнеүе әҫәрҙең идея йөкмәткеһен тәшкил итә.

“Ҡара йөҙҙәр” әҫәрендә һүрәтләнгән ике төркөм геройҙар араһында уртаҡлыҡта торған, ваҡиғалар барышында бик күпте кисергән Ғәлимәнең атаһы Фәхри ҡарт образы повеста айырым урын алып тора. Ул – дингә ныҡ ышанған, ысын фанатик кеше. Башта ҡыҙынан баш тартып, уны өйөнән  ҡыуа, әммә Ғәлимәнең оло фажиғәһе аҡрынлап Фәхриҙе үҙенең хатаһын аңлауға, дингә һәм динселәргә ышанысы ҡаҡшауға килтерә.

Яҙыусының күп хикәйәләре юғары ынтылыш, романтика, азатлыҡ, саф һөйөү тураһындағы яҡты хыялдар менән һуғарылған. Мәҫәлән, “Йәй көнөнөң төнгө ай яҡтыһында” хикәйәһендә М.Ғафури мөхәббәттең бөйөклөгө алдында

хатта тәбиғәттең дә баш эйеүен күрһәтеп, уны “бөтә ер өҫтөн, ҡырҙарҙы, урмандарҙы, тауҙарҙы үҙенә ҡарата алыусы алла” тип иғлан итә.

“Был мәғәнәһеҙ донъяла ваҡ нәмәләр менән ваҡыт үткәрелә, фани донья фәҡәт мөхәббәт арҡаһында ғына матурлана ул, тормоштоң бөтә матурлығы шунда ғына, һин мөхәббәт менән генә үҙ рухында йәшәртә алырһың”, – тип яҙа М.Ғафури үҙенең “Серле бер мөхәббәттең тарихы” исемле хикәйәһендә.

Күп яҡлы талант эйәһе Мәжит Ғафури – бөтә аңлы ғүмерен халҡының уй-теләктәрен, ынтылыштарын тормошҡа ашырыу өсөн көрәшкән, ижади эҙләнгән, ҙур бейеклектәргә күтәрелгән мәшһүр ил ағаларының береһе. Шуның өсөн дә беҙ уны яратабыҙ, хөрмәт итәбеҙ.

Филология фәндәре докторы, профессор, халыҡ-ара төркиәт академияһы академигы Ғиниәт Сәфиулла улы Ҡунафин әйтеүенсә, “М.Ғафури шәхесен һәм ижадын бөтә яҡлап күҙалларға һәм баһаларға ынтылғанда, уны әҙәбиәтебеҙ донъяһындағы түбәһе күккә ашҡан ҡаяташҡа оҡшатырға мөмкин. Бик хаҡ һүҙҙәр. Тәбиғәттең ғәжәйеп был бүләге, бер яҡтан ҡараһаң, үҙенең олпатлығы, мәғрурлығы менән Ер-әсәнең мәңгелек булыуын раҫлап, кешенең уй -хистәрен һалмаҡландыра, тынысландыра, икенсе яҡтан ҡараһаң, ғорурлыҡ тойғоһо уята, өсөнсө яҡтан ҡараһаң, матурлығы менән һоҡландыра, илһамландыра, дүртенсе яҡтан ҡараһаң, текә бейеклеге менән шомландыра, өҫкә ауып китерҙәй тойола, алыҫтанырaҡ күҙ һалһаң инде, башҡа тау-каялар теҙеме араһында тағы ла мөһабәтерәк, матурыраҡ күренә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, кеше тәбиғәттең быға тиклем дә ғәжәйеп серле күренешен бер юлы күҙ алдына баҫтыра алмай” [2; 191].

Шуның кеүек үк оло талант эйәһе Мәжит Ғафуриҙың бөйөк ижад ҡаяһын бер сәғәт эсендә, бер юлы ғына бөтә яҡлап байҡау һәм баһалау мөмкин түгел.

### *Әҙәбиәт*


1. Башҡорт драматургияһы антологияһы.1984. – 67-75 б.

2. Ҡунафин Ғ.С. Замандарҙың рухи балҡышы. – Өфө: Китап, 2006. – 491 бит.

3. Гафури М.Сочинения в 4-х томах: 1 том – Уфа, 1978. - 315 с.

4. Гафури М.Сочинения в 4-х томах: 2 том – Уфа, 1978. – 356 с.

5. Рамазанов Ғ. «Мәжит Ғафури». – Өфө, 1991.

6. Шәрипова З.Я., Ғәлимова Ғ.Ғ. Мәжит Ғафури тормошо һәм ижады. – Өфө, “Китап”, 2005.

© **Нәжметдинова Р.З.**, 2018

**С.С. Низаметдинова**,

*Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы мөдире, Өфө ҡ.*

## МӘЖИТ ҒАФУРИҘЫҢ МЕМОРИАЛЬ ЙОРТ-МУЗЕЙЫ ФОНДЫ: ӘҘӘБИ-ТАРИХИ ҺӘМ МӘҘӘНИ ӘҺӘМИӘТЕ

Музейҙарҙа тарихи ысынбарлығыбыҙ һәм халҡыбыҙ ҡаҙанышы дәлилдәре, ил тормошонда тәрән эҙ ҡалдырыусы бөйөк шәхестәребеҙ тормошона ҡағылышлы материалдар һаҡлана. Уҙған быуаттарҙан һуҙылған күпер ролен башҡара ул музейҙар. Элекке дәүер һулышы, уның мөһим күренештәре, һәр өлкә эшмәкәрлегенең билдәле моменттары экспонаттар, йәғни музей фонды, ярҙамында күҙ алдына баҫа. Тимәк, музей фонды ошондай тарихи-мәҙәни усаҡтарҙың нигеҙен тәшкил итә.

Музей тарафынан даими һаҡлау өсөн ҡабул ителгән барлыҡ материалдар музей фонды тип атала. Был әйберҙәр махсус тупланған бүлмәлә генә түгел, ә экспозиция залдарында урын алыуы, тикшертеүгә йәки тергеҙелеүгә, йәиһә башҡа ергә ваҡытлыса ҡулланылыуға тапшырылыуы мөмкин. Музей фонды ике тармаҡҡа бүленә: музей әйберҙәре – тарих һәм мәҙәниәт һәйкәлдәре, йәмғиәт, тәбиғәт күренештәрен көнкүреш мөхиттән сығып, документаль нигеҙҙә дәлилләүсе бирәмектәр; ғилми-ярҙамсы материалдар – музей

предметтары үҙенсәлектәренә эйә булмаған, әммә уларҙы урынлаштырыуҙа ярҙам итеүсе сығанаҡтар (төрлө таблица, схема, график, план, карта, макет, реконструкция һ.б.).

Фонд эшенең маҡсаты:

– музей әйберҙәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм ҡулланыуҙа уңайлы шарттар тыуҙырыу;

– матди һәм рухи мәҙәниәт тарихы өлкәһендә тикшеренеү эштәре алып барыу;

– фонд эшенең теорияһын һәм методикаһын булдырыу.

Хәҙерге күҙлектән сығып, шуны билдәләргә кәрәк: музей әйберҙәрен һәм ғилми-ярҙамсы материалдарҙы һаҡлау, уларҙы тәүге хәлгә ҡайтарыу, ҡулланыу мөмкинлеген киңәйтеү өсөн шарттар булдырылырға тейеш. Сөнки һәр экспонаттың бөтөнлөгөн тәьмин итеү – музей фонды өсөн бик актуаль мәсьәлә.

1948 йылдың 10 ғинуарында Өфөлә асылған Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейының фондына күҙ һалайыҡ. Тәү башлап музейҙың төп фондын 494 берәмек тәшкил итә. Артабан иһә ул, тулыландырылып, бөгөнгө көндә бында 2000-дән артыҡ берәмек төп фонд, меңдән ашыу берәмек ғилми-ярҙамсы фонд бар. Музей фондының иң мөһим өлөшөн мемориаль бүлмәләр биләй. “Мемориаль” һүҙенә “Мемориальный музейный предмет. Особенности изучения и научного описания” тигән китапта түбәндәгесә аңлатма бирелә: “Понятие “мемориальный” происходит от латинского “memorialls” – памятный. Близкие понятия: мемориальная доска, мемориальное сооружение. Но в ряду этих близких понятий мемориальный музейный предмет отличает то, что это всегда подлинный памятник прошлого, а не предмет, созданный в память о чем-то” [3; 4]. Тимәк, М.Ғафури йорт-музейында, шағирҙың шәхси һәм ғаиләһенең көнкүреш әйберҙәре уникаль мемориаль предметтарҙы хасил итеп, музей фондының төп материалы булып тора. Артабан уларҙың бер нисәүһенә айырым туҡталып үтәйек.

Иң ҡәҙерле ҡомартҡыларҙың береһе – 1915 йылдың 3 июлендә Стәрлетамаҡ өйәҙе Кәлсер-Табын волосы идаралығы тарафынан башҡорт милләтендәге Абдулмәжит Нурғәни улы Абдулғафаровҡа бирелгән паспорт. Унда шағирҙың үҙ ҡултамғаһы ла бар.

Тағы бер тарихи ҡомартҡы – Мәжит Ғафуриға 1923 йылда бүләк ителгән көмөш портсигар. Уның ҡапҡасына “Эшселәр шағиры Мәжит ағаға Башҡортостан матбаға (типография) эшселәренән йәдкәр” тип яҙылған.

Ҡунаҡ залындағы “Дидерихс” фирмаһы пианиноһы ла – музейҙың ҡәҙерле экспонаты. Уны шағирға 1923 йылда республиканың Мәғариф комиссариаты бүләк иткән. Пианино маркаһы буйынса ҡыҫҡаса мәғлүмәт: «В 1810 году в Петербурге родилась первая в России фортепианная фабрика. Основал ее выходец из Брауншвейгского герцогства Фридрих (Федор Федорович) Дидерихс (1779—1846). Первые инструменты, изготовленные Ф. Дидерихсом, были точными копиями венских образцов» [4; 23]. М.Ғафуриға килгән сәнғәт әһелдәре – Башҡортостандың тәүге халыҡ йырсыһы, бөйөк композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов, композиторҙар Солтан Ғәбәши, Анатолий Виноградов, Заһиҙулла Яруллиндар был музыка ҡоралында уйнаған, шағирға йәшәү дәрте, ижад илһамы биргән.

Замандаштарының иҫкә алыуынса, шағир үҙе лә музыкаға, йыр-моңға әүәҫ булған. Ҡатыны Зөһрә, улы Әнүәр ҙә пианинола һәйбәт кенә уйнағандар. Был хаҡта Әнүәр Ғафуриҙың «Атайым» исемле иҫтәлектәр китабында шундай юлдар бар: «1924 йылда шағирға Башнаркомпрос пианино бүләк итте. Уҡыуҙан буш ваҡыттарҙа мин шул пианино эргәһендә булам, уйнарға өйрәнә инем. Әсәй ҙә, минән ҡалышырға теләмәй, ул да уйнаштырғылай. Атай үҙе уйнарға ератһа ла, тыңларға һәр саҡта ла әҙер ине» [2; 14].

Зөһрә Ғафуриҙың “Зингер” тегеү машинаһы ла мемориаль ҡомартҡылар рәтендә. Ҡул эшенә маһир, оҫта тегеүсе була шағирҙың ҡатыны: «Төн... Мин йоҡларға күптән ятҡанмын, тик күҙҙәрем һаман асыҡ. Бүлмә ишеге саҡ ҡына

ябылмай ҡалған. Кәрәсин лампаһы яҡтыһында тегеү тегеп ултырған әсәйҙең йөҙө миңә тағы ла матурыраҡ, тағы ла яғымлыраҡ булып күренә»[2; 63].

Зөһрәнең шағир менән тәү башлап танышыуҙарына ла ошо тегенселек кәсебе булышлыҡ итә. Был хаҡта шул уҡ китаптың “Әсәйем” тигән бүлегендә түбәндәгесә бәйән ителә: «Көндәрҙең береһендә, ҡулына бер кескәй генә төйөнсөк тотоп, Сәрби әбей килеп керҙе:

– Ҡыҙым, бына ошо күлдәкте бик яҡшылап тегеп бир әле. Был беҙҙә йәшәгән шәкерттәр эргәһенә килеп йөрөй торған Мәжит Ғафури тигән шағирға. Иртәнән һуңға өлгөртһәң, бик шәп булыр ине. Уны беҙҙең шәкерттәр бик ҙур кеше тип һөйләйҙәр» [2; 43].

Музей экспозициялары шулай уҡ шағирҙың «Рәсүлиә», «Мөхәмәҙиә», «Ғәлиә» мәҙрәсәләрендә белем алыуы, кемдәр менән аралашып йәшәүе, ҡулъяҙмаларының һәм китаптары тышлыҡтары күсермәләре кеүек мәғлүмәттәр менән байытылған. Сәхнә әҫәрҙәре хаҡындағы зал афишалар, спектаклдәрҙән күренештәр, баш ролдәрҙе башҡарыусы артистар тураһында бәйән итә.

Гипстан эшләнгән Мәжит Ғафури бюсы ла ошо залды биҙәй. Уның авторы – скульптор Вера Морозова. Бюст 1948 йылда скульпторҙың үҙенән һатып алына.

Музей фондын шағирҙың шәхси әйберҙәре, документтары, ҡулъяҙмалары һәм китаптарынан тыш, уның ижади эшмәкәрлегенә бәйле яҙылған хеҙмәттәр, әҫәрҙәр, китаптар тәшкил итә. Мәжит Ғафури ижадын ныҡ хөрмәт иткән Башҡортостандың буласаҡ халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаш ғаиләһе менән ошо йортта йәшәп китә. Уның ҡыҙы Сөйөмбикә Ҡудашеваның хәтирәләрендә ошондай юлдар бар: “Ғафури вафат булған 1934 йылда ла уға (атайға) ҡырын күҙ менән ҡаранылар. Әммә атайым дуҫы хаҡында иҫтәлектәр йыйынтығы баҫтырыуҙы, уның йорт-музейы хаҡында хәстәрлек күреүҙе үҙенең бурысы тип һананы. Мәжит Ғафуриға арнап “Шағирға” (1917), “Егерме йыл” (1923), “Ғафури тауышы” (1941) исемле шиғырҙарын һәм “Хәтерҙә ҡалған минуттар” исемле иҫтәлектәр китабын яҙҙы (1957), Мәжит ағайҙың йорт-музейына

экспонаттар туплауҙа уның тәүге директоры булған Әклимә апай Мостафинаға күп ярҙам итте...” [1; 4]. Хәҙерге көндә был китап, шулай уҡ Сәйфи Ҡудаштың шәхси әйберҙәре һәм әҫәрҙәре йорт-музей фондында һаҡлана. Улар Мәжит Ғафуриҙың бар булмышын күҙҙалларға мөмкинлек бирә.

Бынан тыш, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Украинанан эвакуацияланған кешеләр ошо йортҡа ваҡытлыса индерелә. Улар араһында Украина яҙыусыһы Петр Панч та була. Ул Мәжит Ғафури йортонда йәшәгәндә, шағирҙың байтаҡ шиғырҙарын украин һәм рус теленә тәржемә итә: беҙгә билдәле «Үҙем һәм халҡым», «Кешелек донъяһына изге хеҙмәт» һ.б. Был йортҡа шулай уҡ Павло Тычина, Максим Рыльский һәм башҡалар килеп йөрөүе билдәле. Был хаҡта билдәле әҙәбиәт белгесе С.Ғ.Сафуанов үҙенең бер мәҡәләһендә: “И в последствии П. Тычина неоднократно возвращается к творчеству М. Гафури. Он перевел многие стихотворения поэта и со своим предисловием издал на украинском языке книгу его избранных стихов. На украинском языке опубликована также повесть «Черноликие»” тип яҙа [5; 3].

Музей фондында шулай уҡ Ғилемдар Рамазанов, Ғайса Хөсәйенов кеүек билдәле башҡорт әҙәбиәте белгестәренең Мәжит Ғафури хаҡындағы хеҙмәттәре ләһаҡлана.

Үрҙә яҙылғандарҙан сығып, ошондай һығымта яһарға мөмкин: Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы фондын башлыса уның ҡульяҙмалары, китаптары һәм шағирҙың ижади эшмәкәрлегенә бәйле хеҙмәттәр тәшкил итә. Йорттағы көнкүреш һәм шәхси әйберҙәр иҫәбе сағыштырмаса бик аҙ, улар, үҙ сиратында, тейешле кимәлдә (бүлмәләрҙә температураның, дымлылыҡ кимәленең талап ителгән нормаға тура килеп бөтмәүе) һаҡлауға мохтаж.

Шулай итеп, был мәҡәләлә Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы фонды экспонаттарына ниндәйҙер кимәлдә байҡау яһалды. Йәш быуындың тарихҡа, үткәндәрҙе өйрәнеүгә, уның дөрөҫлөгөнә ҡарата ҡыҙыҡһыныуы көсәйеүе менән бәйле рәүештә, музей экспонаттарын ентекле өйрәнеү актуаль мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала. Мемориаль музей экспонаттарын өйрәнеү

эшен хәҙерге заман мөмкинселектәрен күҙ уңында тотоп, юғары кимәлдә башҡарыу талап ителә. Тарих көҙгөһө булараҡ, музей фондтарын өйрәнеү һәм һаҡлау эше менән шөғөлләнеү дауам ителергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта музейҙар заман менән бергә атларға тейеш: экспонаттарҙың оцифровка үтеп, халыҡҡа электрон варианттарҙа ла тәҡдим ителеүе хәл ителеүҙе көтә. Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейында экспонаттарҙы дәүләт каталогы исемлегенә теркәү эше башланды. Был эште урынына еткереү өсөн заманса техник саралар кәрәк, сөнки музейҙың бөтә эшмәкәрлеге тулыһынса тип әйтерлек уның фонды менән бәйле.

### *Әҙәбиәт*

1. Амангилдина Нурия. Бәхетле яҙмыш. // «Башҡортостан», № 209, 1994.

2. Ғафури Ә. Атайым. (Мәжит Ғафури тураһында хәтирәләр). – Өфө: «Китап», 2001. – 176 бит.

3. 3. Мемориальный музейный предмет. Особенности изучения и научного описания. Методические рекомендации. – Москва, 1990.

4. Отюгова Т.А., Галембо А.С., Гурков И.М. Рождение музыкальных инструментов. Из истории Ленинградского производственного объединения по изготовлению музыкальных инструментов. – Л.: Музыка, 1986. – 187 с.

5. Сафуанов Суфиян. На многих языках. К 100-летию со дня рождения Мажита Гафури. // “Советская Башкирия”, № 172, 1980.

© **Низаметдинова С.С.**, 2018

**М.Х. Нәзерғолов**,
*филол. ф. д., РФА ӨФТҮ ТТӘИ, Өфө к.*

## МӘЖИТ ҒАФУРИ ТУРАҺЫНДА УЛЫ ӘНҮӘРҘЕҢ ХӘТИРӘЛӘРЕ

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тормош һәм ижад юлы тураһында Башҡортостан һәм Татарстан ғалимдары, шул иҫәптән Ғилемдар Рамазанов һәм Рауил Бикбаев, төплө хеҙмәттәр яҙҙы. Әҙип хаҡында замандаштары, ҡәләмдәштәре ҡалдырған хәтирәләр ҙә байтаҡ. Ошо яҙмалар араһында шағирҙың улы журналист һәм публицист Әнүәр Ғафуриҙың ҡағыҙға теркәп ҡалдырған хәтирәләре айырым урын тота.

Әнүәр Ғафури (Әнүәр Ғәбделмәжит улы Ғафуров) 1910 йылдың 27 ноябрендә Өфө ҡалаһында тыуған. 1918-1927 йылдарҙа урта мәктәптә белем алған. Уны тамамлағас, Мәскәү туҡыу сәнәғәте институтына уҡырға инә. Бер үк ваҡытта баш ҡаланың “Коммунист” гәзите мөхәрририәтендә лә эшләп ала. 1933 йылда атаһының һаулығы үтә насарайыу сәбәпле, уҡыуын ташлап ҡайтырға мәжбүр була. Шул уҡ йылда, уңышлы имтихан тотоп, Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡый башлай, аҙаҡ белем алыуын Ҡазан пединститутында дауам итә. 1939-1940 йылдарҙа Әнүәр Ғафури Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, үҙ теләге менән фронтҡа китә. 11-се гвардия армияһы сафында бик күп алыштарҙа ҡатнаша, хәрби журналист вазифаһын башҡара, һуғыштан һуң ул оҙаҡ йылдар Башҡортостан радиоһы комитетында музыкаль тапшырыуҙар буйынса мөхәррир булып эшләй, республика “Белем” йәмғиәтенең актив ағзаһы, лектор-пропагандисы була. Әнүәр Ғәбделмәжит улы 1977 йылдың 6 июлендә Өфөлә вафат була.

Әнүәр Ғафури – башҡорт публицистикаһын үҫтереүгә шаҡтай өлөш индергән шәхестәрҙең береһе. Ижад эше менән ул утыҙынсы йылдар башында мауығып китә. Очерктар, хикәйәләр, шиғырҙар һәм фельетондар яҙа, ваҡытлы матбуғат биттәрендә төрлө темаға мәҡәләләр менән сығыш яһай. Ижади

әүҙемлеге менән тиҙ арала танылыу табып, ул 1935 йылда уҡ СССР Журналистар союзына ағза итеп ҡабул ителә.

Илленсе-етмешенсе йылдар Әнүәр Ғәбделмәжит улы өсөн бигерәк тә уңышлы һәм емешле осор була. Был йылдарҙа илһамланып-дәртләнеп ижад иткән әҫәрҙәре һәм мәҡәләләре “Совет Башҡортостаны”, “Советская Башкирия”, “Ҡыҙыл таң”, “Ленинсы”, “Башҡортостан пионеры”, “Пионер” кеүек республиканың үҙәк гәзит-журналдары биттәрендә күпләп баҫыла, ҡайһы берҙәре Украина, Ҡаҙағстан, Татарстан баҫмаларында ла донъя күрә. Уның матбуғаттағы сығыштарын айырыуса балалар яратып ҡабул итә. Уларҙы бигерәк тә атаһы тураһындағы хәтирәләре ныҡ ҡыҙыҡһындыра, шунлыҡтан уны осрашыуҙарға, әҙәби кисәләргә йыш саҡыралар.

Ғөмүмән, Әнүәр Ғафури атаһының ижадын, тормош юлын халыҡҡа еткереү буйынса бик ҙур эштәр башҡарған. Илленсе йылдарҙа “Совет Башҡортостаны” гәзитендә генә лә ул, мәҫәлән, “Мәжит Ғафури әҫәрҙәрендә ҡатын-ҡыҙҙар образы”, “Онотолмаҫ көндәр”, “Шағирҙың яҡын дуҫы”, “Илле йыл үткәс”, “Дауыт Юлтыйҙың Мәжит Ғафуриға хаттары”, “Шағир образы” һәм башҡа мәҡәләләр менән сығыш яһаған. 1953 йылда үҙе туплаған материалдар нигеҙендә “Нәфрәттең тыуыуы” (“Рождение гнева”) исемле китап әҙерләп сығарған. Республика радиоһы аша иһә “Шағир йөрәге”, “Һүнмәҫ мөхәббәт”, “Яҙыусы һәм заман”, “Туған моңдар”, “Далалағы хәл”, “Халыҡ йырсыһы”, Оло тантана”, “Халыҡ шағиры Мәжит Ғафури” тигән тапшырыуҙар ойошторған. Бер үк ваҡытта шағирҙың Өфөләге йорт-музейында һәм райондарҙа даими рәүештә лекциялар уҡыған, әңгәмәләр үткәргән.

Алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа бындай эштәрен тағы ла йәнлерәк, киңерәк алып бара ул. Бөтә күңелен, көс-ғәйрәтен һала. Хатта ғүмеренең һуңғы көнөн дә шуларға арнай: иртәнән кискә тиклем шағирҙың йорт-музейында Өфөгә курсҡа килгән уҡытыусылар менән осрашыуҙар үткәрә, йорт-музей менән таныштыра, атаһының шәхси тормошо, ҡайһы бер әҫәрҙәренең яҙылыу

тарихы тураһында һөйләй. Аҙаҡ, арып-талып өйгә ҡайтҡас, ҡапыл йөрәге ауыртып түшәккә йығыла һәм бер нисә сәғәттән донъя ҡуя ...

Төрлө йылдарҙа ҡағыҙға төшөрөлгән хәтирәләрендә Әнүәр Ғафури үҙенең сабый сағынан алып егетлек дәүеренә (23 йәшенә) тиклем күңелендә уйылып ҡалған хәл-ваҡиғаларҙы тасуирлай. Бер нисә яҙмаһында атаһы вафат булғандан һуңғы ваҡиғалар бәйән ителә, әммә улар ҙа теге йәки был йәһәттән Мәжит Ғафури шәхесенә, уның ижад емештәренә, тормош биографияһына бәйле.

Атаһы тураһында автор эске бер йылылыҡ, ғорурлыҡ тойғоһо менән яҙа, уның шәхси һыҙаттарын, холоҡ-ҡылыҡтарын конкрет деталдәрҙә, хәл-күренештәрҙә аса. Был йәһәттән балалыҡ хәтирәләре айырыуса ҡыҙыҡлы һәм фәһемле. Бер нисә тиҫтә йылдар үткәс яҙылған булһалар ҙа, уларҙан ескәйҙәр күңеленә хас ихласлыҡ, ябайлыҡ бөркөлөп тора. Алыҫ үткәндәренә әйләнеп ҡайтып, автор бәләкәй Әнүәр булып донъяға баға, бала сағындағыса фекерләй, хисләнә, баһа бирә.

Бына мәҫәлән, “Һабаҡ” тигән хәтирәһенән бәләкәй генә өҙөк:

*“... Яҙғы йылы көндәр башланды. Тышта шул тиклем күңелле – өйгә инге лә килмәй.*

*Бер көн шулай ескә табан, йорт алдында йөрөгәндә, баҡса ҡоймаһы буйлап сабып барған бесәйебеҙҙе күреп ҡалдым. Минең ҡулда рогатка бар ине. Тиҙ генә бер таш алдым да, яйлап ҡына төҙәп, бесәйгә атып ебәрҙем. Таш бесәйҙең эсенә тейҙе булһа кәрәк: ул тәкмәсләп барып төштө лә артҡы аяҡтарын һелкетә башланы. Үҙе асы итеп мыяулай. Мин уға оҙаҡ ҡарап торманым, урамға йүгерҙем.*

*“Был бесәй инде ни эшләр икән? Үлмәһә генә ярар ине ...” тигән борсоулы уй килде башыма. Ләкин бер нисә минуттан мин уның хаҡында бөтөнләй оноттом. Урамға сыҡҡан малайҙар менән таш атышырға тотондом...”*

Артабанғы юлдарҙа автор үҙенең ҡараңғы төшкәс кенә ҡайтып инеүе, атаһы менән әсәһенең, үҙҙәре һиҙемләһә лә, бесәйҙе кем имгәткәнлеге хаҡында юрый һорашыуҙары, әммә уның алдашыуы һәм аҙаҡ күңел ғазаптары кисереүе

тураһында әсенеп-хисләнеп яҙа. “Әгәр атайым шул ваҡыт мине бик ҡаты әрләгән, йә хатта туҡмаған булһа, миңә күпкә еңелерәк булыр ине!.. Уның шулай әрнеп һөйләүе, минең ғәйебемде белеп тә, ул турала әйтмәй, рәнйеү һәм үпкәләү менән ҡарауы, киләсәк тормошом өсөн ҙур бер һабаҡ булып ҡалды”, – тип тамамлай был хәтирәһен Әнүәр Ғафури. Бында халыҡ шағирының ғәҙәти, ғаилә тормошондағы шәхсиәте, булмышы, атай булараҡ үҙ балаларына мөнәсәбәте, тәрбиәүи алымдары күпмелер сағылып ҡалған.

Ғөмүмән, хәтирәләрҙе уҡығанда Ғафуриҙар йортонда, Дим һәм Ағиҙел буйҙарында, Еҙем-Ҡаранда, Өфөлә һәм башҡа урындарҙа барған ваҡиғалар йәнле картиналар булып күҙ алдынан үтәләр. Шағирҙы уратып алған мөхит, йәмғиәттәге социаль-сәйәси атмосфера һәм заман һулышы асыҡ тойолоп ҡала. Миҫал өсөн "Таныш моңдар" тип исемләнеп, айырым бер цикл рәүешендә яҙылған хәтирәләренә иғтибар итәйек. Ул түбәндәге юлдар менән асыла:

*“Ҡартайған һайын тормоштоң ҡәҙерен, уның тәмен һәм гүзәллеген ныгыраҡ аңлайһың икән ... Үтелгән юлдарға әйләнеп ҡарағанда йөрәктә тәрән эҙ ҡалдырған минуттар, тормош юлын биҙәкләгән ҡояшлы көндәр тураһында уйланам ...*

*Үткәндәрҙе хәтергә алырға һәр саҡ беҙҙең тогро юлдашыбыҙ – йыр ярҙамга килә. Исемдәре күңелдең иң түрендә һаҡланган һөйөклө кешеләр менән осраштыра ул ...*

*Башкорт халкының “Зөлхизә” исемле йырын мин гүмеремдең таңында ишеттем. Уны минең әсәйем йырлай ине. Ошо гүзәл йыр бына инде күпме йылдар буйына мине оҙатып килә, һәм беҙҙең дуҫлыҡ дауам итә, һаман ныгый ...”*

Ошо рәүешле бала саҡ хәтирәләренә төшөп китеп, Әнүәр Ғафури үҙҙәренең өйөнә мәшһүр шағир Шәйехзада Бабичтың йыш килеп йөрөүен телгә ала һәм бер килеүендә мандолинала уйнап, барыһын да таң ҡалдырыуын һөҡланып яҙа. Бында шулай уҡ атаһының данлыҡлы йырсы һәм композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов, музыканттар һәм йырсылар Заһиҙулла Яруллин, Асия

Измайлова, Фәйзулла Туйышев, Исмәғил Һилалов, Солтан Ғәбәши, Хәбибулла Ибраһимов һәм башҡалар менән яҡындан дуҫлашып-аралашып йәшәүе йәнле сағылыш тапҡан. Хәтирәләрендә автор Мәжит Ғафуриҙың Дауыт Юлтый Ғәлимйән Ибраһимов, Шәриф Сүнчәләй, Сәйфи Ҡудаш, Муса Йәлил менән булған мөнәсәбәттәрен дә мауыҡтырғыс итеп, фәһемле хәл-ваҡиғаларҙа асып һала.

2001 йылда ошо юлдарҙың авторына Әнүәр Ғафуриҙың ошондай ҡиммәтле хәтирәләрен туплап, айырым китап итеп сығарыу бәхете тейҙе. Уға ҡушымта рәүешендә халыҡ шағирының бығаса донъя күрмәгән бер нисә шиғыры ла индерелде. Китапта баҫылған был бай мәғлүмәтле, мауыҡтырғыс хәтирәләрҙең Мәжит Ғафуриҙың тормош һәм ижад юлын өйрәнеүҙә уңайлы өҫтәлмә сығанаҡ булырына, балалар, йәштәр, уҡытыусылар һәм, ғөмүмән, әҙәбиәт һөйөүселәр күңеленә хуш килеренә шик юҡ.

© **Нәҙерғолов М.Х.**, 2018

**Г.Д. Саламатова**,

*филол. ф. к.,*

*З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты, Өфө ҡ.*

## МӘЖИТ ҒАФУРИ ҺӘМ БАШҠОРТ АКАДЕМИЯ ДРАМА ТЕАТРЫ

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының бер быуаттан ашыу тарихы бар. Башҡорт театры өсөн сәхнә Ырымбурҙа асыла. Быға дәлил итеп 1917 йылдың декабрь айында Ырымбурҙа үткән ҡоролтай ваҡытында делегаттар һәм ҡала халҡы өсөн яһалған “Башҡорт әҙәбиәте кисәһе”н атарға кәрәк. “Йәш тулҡын” ойошмаһы тарафынан үткәрелгән был кисә “Беренсе Башҡортостан кисәһе” тип тә атала. Был кисә хаҡында 1918 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан 10-сы һанлы “Башҡорт Хөкүмәте газетаһы”ның 10-сы номерында Төхвәт Ченәкәй бына нимәләр яҙа: “Йырсыларыбыҙ, уйынсыларыбыҙ һәммәһе ҡылыҡтарына тиклем сәйәсәт дингеҙенә сумдылар,

милли әҙәбиәтебеҙҙе тәбиғи көйө тереклек иттереү юлында эшләгән йәштәребеҙ юғалды. Театр сәхнәләребеҙ тупаҫ тәржемәләр менән тулды. Ниндәй генә бер әҙәбиәт кисәһенә барма, азатлыҡ кисәһе, хөрриәт кисәһе, хөрриәт шиғыры, хөрриәт көйө, хөрриәт йыры... тигән һүҙҙәр менән ҡолағың тоноп бөтә. Йәнгә аҙыҡ булырҙай бер нәмә алып ҡайтып булмай. Төрлө исемдәге, төрлө милли ойошмалар әҙәбиәт кисәләрен “сауҙа баҙары” иттеләр. Ялғыш бына был йылдың ҡорбан байрамдарына беҙҙе аңлай алғандар ҙа, аҙыҡ булырҙай беренсе шәреҡ кисәһе менән сәләмләргә булғандар... Был кисә башҡорт йәштәренең “Йәш тулҡын” ойошмаһы тарафынан төҙөлгән “Башҡорт әҙәбиәте кисәһе” булды. Халыҡ был кисәне айырым һөйөп ҡаршыланы. Ағылып-ағылып килгән халыҡ төркөмдәре араһында урыҫ, татар, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, һәммәһе, милли моңдарын, иҫке йырҙарын юғалтмай үҙҙәрендә һаҡлай алған башҡорт халҡының үҙҙәре тарафынан яһалған кисәне күреү өсөн ашҡыналар. Өс бүлектән ғибәрәт булған был кисәлә хор, йыр, декламация, бейеү, музыкаһы, ҡурай булды. Хорҙары уҡыусы туташтар менән, башҡорт йәштәре тарафынан ойошторолған бер хор, ғәскәрҙәрҙән ойошторолған бер – барлығы ике хор ине. Йәштәр хоры 30-40 кешенән ысын башҡорт көйө, йырҙары ысын башҡорт йыры булған кеүек йырлаусылар ҙа саф башҡортса тәбиғи, матур ине. Хор башлығы “Урал балаһы”ның башҡортса кейенеп, гримда сығыуы, туташтар араһында башҡорт ҡыҙы булып кейенгән туташтарҙың булыуҙары – хорға айырым йәм, ысын тәбиғилек бирҙе. Ырымбур халҡы тулы һәм бөтөн килеш сыҡҡан хорҙы башлап был кисәлә күрҙе. “Зөбәржәт” һәм “Ҡуш беләҙек” көйҙәрен Ырымбур сәхнәһендә беренсе тапҡыр йырлауҙары булһа кәрәк. Шуның өсөн халыҡ айырыуса алҡыштарға күмде. “Ҡуш беләҙек” көйөн яңынан саҡырып йырлаттылар. Йырланып бөтөр - бөтмәҫ бер - береһенә ҡаршы бейей башлайҙар, башҡалар уларҙың аяҡ тауыштарына ҡул сабып торалар...”*

Тамаша “Люкс” кинотеатрында була. Ошо тамашаның программаһы ла һаҡланған. Программаға ярашлы, 1-се бүлектә Шәйехзада Бабич үҙенең бик

* Бында һәм артабан газеталарҙын алынған мәҡәләләрҙең орфографияһы һәм стиле үҙгәртелмәйенсә бирелде

оҙон шиғырҙан (балладанан) ғибәрәт булған “Ғазазил” әҫәренең өстән бер өлөшөн һөйләй. Нуриәғзәм Таһиров башҡарыуында “Ай, илкәйем” йыры яңғырай. Беренсе бүлек ҡурай менән тамамлана. Икенсе бүлектә “Урал балаһы” башҡарыуында “Һаҡмар көйө” яңғырай. Туташтар төркөмө “Киске әсе ел” йырын йырлай. Артабан программаға “бер шиғыр”тип яҙылған. Был Шәйехзада Бабичтың “Олуғ шатлыҡ” шиғыры булырға тейеш. Шиғырҙан һуң Нуриәғзәм Таһиров һәм Ғайнулла Ғирфановтан торған дуэт “Зәңгәр шәл”де башҡара. Икенсе бүлек “Каруанһарайҙы алғанда” тигән йыр менән тамамлана. Өсөнсө бүлектә ирҙәр хоры, Нуриәғзәм Таһиров башҡарыуында “Эскадрон” йыры, ирҙәр һәм туташтар ҡатнашыуында “Ҡуш беләҙек” йыры, ҡыллы музыка, ҡурай көйө яңғырай.

Илдә барған иң һынылышлы осорҙарҙа театр үҙенә иң яуаплы функция ала: аң-белем таратыу, башҡорт илен ваҡытлы матбуғат менән тәьмин итеү, ҡала менән ауыл араһында мәҙәни бәйләнеш булдырыу һ.б. Башҡорт Республикаһы менән йәштәш булған, 1971 йылдан Мәжит Ғафури исемендәге Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Башҡорт дәүләт академия драма тип йөрөтөлгән театрҙың тарих биттәрендә Бәләкәй Башҡортостандың йәшәйешен дә, Оло Башҡортостандың тарихын да, колхозлашыу һәм НЭП осорон да, 1937 йылдың фажиғәһен дә, 1941-45 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышын да, илдәге үҙгәртеп ҡороуҙар менән бәйле булған ваҡиғаларҙы – барыһын да күрәбеҙ. Театр – ул тарих хәтере һәм бөгөнгөнөң асылы.

Башҡортостандың беренсе халыҡ шағиры исемен йөрөткән театрҙың тарих биттәрендә Мәжит Ғафури исеме афишаларҙа башлап 1925 йылдың октябрь айында яҙыла. 1925 йылдың февралендә Башнаркомпрос тарафынан үткәрелгән конкурста шағирҙың “Ҡыҙыл йондоҙ” драмаһы беренсе премияға лайыҡ була һәм 24 октябрь көнө премьераһы була. 1938 йылда Башҡорт академия драма театрында Мәжит Ғафуриҙың 1927 йылда Ҡазанда баҫылып сыҡҡан “Ҡара йөҙҙәр” повесы буйынса театрҙың режиссеры Вәли Ғәлимов һәм яҙыусы Ғәйнан Әмири тарафынан повесть 4 актлы музыкаль драма итеп

сәхнәләштерелә. Май айында тамашасылар хөкөмөнә сығарылған сәхнә әҫәренең рәссамы – Мөхәммәт Арыҫланов, композиторы Мөсәлим Вәлиев була. Премьеранан һуң спектакль тураһында мәҡәләләр, әлбиттә, донъя күргәндер, әммә 1938 йылдағы ваҡытлы матбуғат насар һаҡланған. Минең ҡарамаҡта “Ҡыҙыл Башҡортостан” гәзитендә 1942 йылда баҫылған рецензия бар. Шәриф Рахманҡулов тарафынан яҙылған мәҡәлә күләме яғынан ҙур ғына. Мәҡәләнән бер абзацты тәҡдим итәм: “Ғәлимә ролендә уйнаусы Республиканың атҡаҙанған артискаһы Талиға Бикташеваның уйыны бик тәбиғи. Ирекле мөхәббәткә ынтылыусы, тормош батҡағына батырылған, намыҫы юғалтылған саф ауыл ҡыҙының иҫке кисерештәр тулҡынын оҫта бирҙе. Уның сәхнәләге кисерештәре тамашасыларҙың тойғоларына ныҡ тәьҫир итте. Бына дин менән хурланған Ғәлимәнең үле тәне... Ошо ваҡытта ҡарт ағастар ҙа, үҙҙәренең ботаҡтарын эшләпәһен һалып башын эйгән кеше кеүек аҫҡа эйҙеләр. Ошо минутта тамашасыларҙың йөрәк тибештәре лә алмашынды.

Иҫке тәртиптәргә риза түгеллеген ҡыйыулыҡ менән сағылдырған, халыҡ зирәклеген күрһәткән Ғимади ҡарт ролен артист Республиканың халыҡ артисы Зөбәйеров тәбиғи һыҙаттар менән ышандырырлыҡ итеп бирергә тулыһынса ирешә алған, тип әйтә алабыҙ.

Фәхриҙең ҡатмарлы психологияһын биреүҙә халыҡ артисы Ҡарамышев ҙур оҫталыҡ күрһәтә. Ике йөҙлө, хәйләкәр, тиҫтәгә яҡын ир ҡосағында булған, саф аҡ йөҙҙәрҙе ҡараға буяусы убырлы ҡарсыҡ Ғилми ролен атҡаҙанған артиска Мансурова матур итеп бирҙе, ләкин урыны-урыны менән артиска ысынбарлыҡтан ситкә сығып, сәнғәтсә уйнауға бирелә. Бигерәк тә, Ғимадиҙәр йортондағы күренештәрҙә һиҙелә.

Закир ролен Сыртланов, ҡазый – Ғәлимов, мулла – Минһажев, мөәзин – Ушанов. Һәр береһе үҙ ролдәрен бөтә характерлы сифаттары менән кәүҙәләндерҙеләр. Әммә артист Сыртланов беренсе шаршауҙа һәм мәсхәрәләнеү, ҡалаға китеү сценаларында – намыҫлы ауыл егетенең дөрөҫ характерын, ҡайғы һәм үҙенең ғәҙеллеген аҙ ғына зәғифләндереп ебәрә. Шулай

уҡ ҡаланан йөрөп, аҙмы-күпме көс, үткерлек алып ҡайтҡан һуңғы шаршауҙағы Закир һүлпән бирелде.

Артиска Башировалар һәм беренсе шаршауҙағы массаға ҡатнашыусылар артистар барыһы ла ышандырырлыҡ итеп уйнанылар. Башированың роле аҙ һүҙле булыуына ҡарамаҫтан, әһәмиәт менән, иғтибар менән башҡарылып тамашасыға үҙен матур танытты. Уның уйынындағы еңеллеге, һәр бер нәмәгә тиҙ реагировать итә белеүе – масса күренештәрен йәмләндереүҙә, матурлауҙа ныҡ ярҙам итәләр.

Артистарҙың уйындарына спектаклдең музыкаһы һәм декорацияһы яҡшы эшләнгән. Спектаклде тулыландырыуҙа композитор Вәлиевтың, художник Арыҫлановтың ижади эҙләнеүҙәре, оригиналлектәре һиҙелеп тора. Ғәйфулланың (артист Хәбибуллин) Ғәлимә менән Закир мөхәббәтенә ташланыуының сәбәбен асып еткермәй. Шулай уҡ драмала ауыл хеҙмәт эйәһенең ревлюцияға тиклем булған тормоштары ысынбарлыҡтан ситтә тора. Быға миҫал итеп Ғимади, Фәхриҙәрҙең йорт эсе байлыҡтарын һәм йәштәрҙең кейенеүҙәрен күрһәтергә кәрәк.

Ошо аҙ ғына һанда булған кәмселектәрҙе төҙәтеп, драманы революцияға тиклем булған халыҡтың ғазаплы тормошон бөтә асыҡлығы менән күрһәтә алырлыҡ әҫәр дәрәжәһенә күтәрергә кәрәк”.

“Ҡара йөҙҙәр” башҡорт академия драма театрында икенсе тапҡыр 1955 йылда ҡуйыла һәм Мәскәүҙә үткән башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте декадаһында ҡатнаша. 1938 йылдан алып 1980 йылға тиклем “Ҡара йөҙҙәр” дүрт тапҡыр ҡуйыла һәм дүртеһендә лә Вәли Ғәлимов режиссерлығында. Режиссер Айрат Абушахманов 2015 йылда ҡабаттан был әҫәрҙе сәхнәгә мендерҙе.

1937 йылдағы репрессия башҡорт театрына нигеҙ һалған бөйөк шәхестәрҙе ҡорбан итте. Вәлиулла Мортазин һәм Мәкәрим Мәһәҙиевтар тарафынан ҡуйылған спектаклдәр, Дауыт Юлтый, Афзал Таһиров, Хәбибулла Ғәбитовтар тарафынан ижад ителгән пьесалар репертуарҙан алып ташланды. Театрҙы ҡабаттан репертуар менән тәьмин итеү кәрәклеге килеп тыуа.

“Салауат”, “Ҡарағол”, “Маҡтымһылыу”, “Янғура”, “Ынйыҡай менән Юлдыҡай” кеүек героик әҫәрҙәр урынына бөгөнгө көн геройын сағылдырған әҫәрҙәр талап ителә. Театр идараһы Сәйфи Ҡудашҡа мөрәжәғәт итә һәм уның тарафынан “Мәжит Ғафури” тип аталған драма яҙыла. Әҫәрҙең башынан алып аҙағына тиклем шағирҙың тормош юлын һәм ижадын һүрәтләүгә ҡоролған был әҫәр 1942 йылда режиссер Хажи Бохарский тарафынан ҡуйыла һәм шул уҡ йылда премьераһы була. Төп ролде Вәли Ғәлимов башҡара. Зөһрә ролендә Зәйтүнә Бикбулатова, журналист-провокатор Харис Уразбаев образын Ғәлимйән Ҡарамышев, милләтсе-радактор Шакир Таһири ролен Рим Сыртланов кәүҙәләндерә. Сәйфи Ҡудаш тарафынан яҙылған был драма ваҡыт һынауын үтә алмай. Сезон ярым уйналғандан һуң репертуарҙан алына.

***Әҙәбиәт***


1. Рахманҡулов Ш. “Ҡыҙыл Башҡортостан” гәзите, 1942 йыл, 10 февраль.
2. Рахманкулов Ш. Газета “Красная Башкирия”, 1942 год, 5 ноября.


© **Саламатова Г.Д.**, 2018

**Г.Х. Сәмерханова**,

*филол. ф. к., БашДУ-ның Сибай институты (филиалы) доценты*

**М.А. Мырҙаҡаева**,

*БашДУ-ның Сибай институты (филиалы) студенты, Сибай ҡ.*

## М. ҒАФУРИ ПОЭЗИЯҺЫНДА РЕВОЛЮЦИОН ҮҘГӘРЕШТӘРҘЕ ҺЫНЛАНДЫРЫУ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

М. Ғафури – Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры. Уның ижады һынылышлы тарихи ваҡиғалар осорона тап килә. Әҙиптең әҫәрҙәрендә халыҡтың Октябрь революцияһына тиклемге ҡараңғы тормошо, мазлумдарҙың залимдар тарафынан иҙелеп, йәбер-золом күреп йәшәүе, социаль тигеҙһеҙлек, революция аша яулап алынған азатлыҡ, уға бәйле яҡты киләсәккә өмөт урын

ала. М. Ғафури йәмғиәттәге тарихи үҙгәрештәрҙе сағылдырыуҙа ҡабатланмаҫ образдар тыуҙыра һәм һүрәтләү саралары ҡуллана. Революциянан һуң урынлашҡан ирекле тормошто шағир яңы көн тыуыуы менән сағыштыра һәм халыҡтың батша заманында иҙелеп йәшәүен белдергән ҡара төнгә ҡаршы ҡуя. Ике тарихи ысынбарлыҡты антитеза рәүешендә ҡаршы ҡуйыу уның поэтик әҫәрҙәрендә лә, проза әҫәрҙәрендә лә күҙәтелә.

М. Ғафури ижадында революцион үҙгәрештәрҙе, яңы тормошто, яңы идеяларҙы сағылдырыуҙа яңы образдар тыуҙырыла. Уларҙың иң сағыуҙары – ҡыҙыл байраҡ һәм ҡыҙыл гөл образдары. Шағир әҫәрҙәрендә улар символик төҫ ала. Был турала шағир һәм әҙәбиәтсе-ғалим Ғ. Рамазанов: “... февраль көндәрендә М. Ғафури ижадына бөйөк революция символы, түгелгән ҡандар һәм йөрәк ялҡыны билдәһе – ҡыҙыл байраҡ образы килеп инде. Халыҡ шағиры ошо образға ғүмеренең ахырынаса тоғро булып ҡалды,” – тип билдәләй [1; 29-сы б.].

М. Ғафуриҙың 1917 йылда яҙылған “Хөрриәт иртәһе” исемле шиғырында батшаның тәхеттән төшөрөлөүе һүрәтләнә: “Батшаның тәхете емерелгән, имеш! Бар залимдар зил-зәбәр килгән, имеш! Бар яуыздар төрмәгә кергән, имеш!”. Революциянан һуң тыуған хөрриәт иртәһе халыҡтың азатлыҡ йыры менән тула, аһ-зарҙы шатлыҡ ауаздары алыштыра. Яңы тормош башланыуын ҡыҙыл байраҡ белдерә, ул азатлыҡ һәм иреклек символына әүерелә:

“Ҡанлы байраҡтар” юғары һелкенә,
Һөйөнсөнән йәш йөрәктәр елкенә.

Шағир ҡанлы ҡыҙыл байраҡ аша был азатлыҡтың ниндәй хаҡ менән яуланыуын билдәләй. Яҡты нурға, ҡоштар һайрауына тулған гүзәл хөрриәт иртәһендә был образ фажиғәле һынландырыла.

Шағирҙың шул уҡ йылда яҙылған “Ҡурҡмағыҙ!” тип исемләнгән шиғырында иһә ҡыҙыл гөл образы шул уҡ ҡыҙыл байраҡ образы булып ҡабул ителә. Был әҫәрҙә лә яңы тормош тыуыуы яңы таң тыуыуы менән сағыштырыла:

Китте өҫтән ул ҡараңғы пәрҙәләрҙең һәммәһе,

Бөттө ҡоллоҡтар, бөгөн һеҙ тик хоҙай бәндәһе.

Автор әҫәрҙә яңы йәмғиәт ҡоролошоноң төп сифатын – халыҡтар, кешеләр хоҡуҡтарында тәбиғи тигеҙлек урынлашыуын айырым һыҙыҡ өҫтөнә ала. Әҫәр азатлыҡ символы булған “ҡыҙыл гөлгә” саң-туҙан ҡундырмаҫҡа, дошман ҡулын тейҙермәҫкә саҡырыу менән тамамлана.

М. Ғафуриҙың 1917 йылда яҙылған “Ирекле көндәр” тип исемләнгән шиғырында ла ҡыҙыл гөл образы ирекле көндәрҙең символы булып тора. Әҫәрҙә лирик герой тәбиғәттең илаһи мәлен тасуирлай һәм ҡояшҡа, елгә, сәскәләргә өндәшә. Ул ҡояштан донъяны нығыраҡ яҡтыртыуын, елдән хуш еҫтәрҙе бар тирә-яҡҡа тиҙерәк, етеҙерәк таратыуын һәм ҡыҙыл гөлдөң бер ваҡытта ла шиңмәүен, хуш еҫтәр таратып, мәңге сәскә атыуын һорай. Был әҫәрҙә лә йәмғиәттәге революцион үҙгәрештәр тәбиғәт күренештәре аша һынландырыла. Лирик герой яңы таңдың матурлығы тирә-яҡҡа тиҙерәк таралыуын теләй:

Таки хөрриәт көнөндә

Нур булып торһон йыһан,

Һәр кеше күрһен был эште

Һәм килтерһен сын иман.

Шул уҡ 1917 йылда донъя күргән “Азатлыҡ хөрмәтенә” тигән шиғырында автор революцион үҙгәрештәрҙе “Тәңренең ҡөҙрәтле ҡулы менән ҡылынған ҡөҙрәтле эш” тип баһалай. Революцияға тиклемге ауыр тормош шулай уҡ ҡараңғы ҡурҡыныс төн менән сағыштырыла: “Яҡ-яғы сикһеҙ ҡараңғы, ҡурҡыныслы төн ине, / Бар халыҡ мазлум ине, меҫкен ине, мәхкүм ине. / Шул ҡараңғылыҡ эсендә ҡысҡырыу мәмнүғ ине, / Ҡуҙғалырға, эҙләнергә һис тә рөхсәт юҡ ине”. Революциянан һуң был мәхшәр бөтә халыҡтың ҡулындағы бығауҙар образында ысҡынып төшә.

Шағирҙың “Ҡыҙыл байраҡ” тип исемләнгән шиғырында ҡыҙыл байраҡ миллионлаған шәһиттәр ҡанына буялған. Әммә ул көслө эшселәр ҡулы менән

юғары күтәрелгән, сөнки “Хөрлөк, тигеҙлек – уның шиғары”. Был байраҡ – азатлыҡ һәм хәҡиҡәт, “сын иман”, халыҡтың көсө һәм ихтыяры билдәһе:

Бөгөн батша ул

Бөтә донъяға,

Уға ниндәй көс

Ҡаршы тора ала? [...]

Эй, ҡыҙыл байраҡ,

Нур бир йыһанға!

М. Ғафуриҙың “Хөрриәткә ҡаршы тороусыларға” тип исемләнгән шиғырында ла урын ала был саҡырыу:

Халыҡ ҡулы күтәргән

Ҡыҙыл байраҡ аумаһын.

Бысраҡ ҡулдар бысратмаһын

Инсаниәт донъяһын...

Шулай итеп, Башҡортостандың халыҡ шағиры М. Ғафури поэзияһында ил тарихындағы һынылышлы мәлдәр, йәмғиәт ҡоролошондағы революцион үҙгәрештәр үҙенсәлекле сағылыш таба. Шағир ҡыҙыл байраҡ, ҡыҙыл гөл образдары аша яңы революцион ысынбарлыҡты һынландыра. Ике ҡоролош, ҡапма-ҡаршы ҡуйылып, антитеза рәүешендә һүрәтләнә.

***Әҙәбиәт***


1. Ғафури М. Әҫәрҙәр. 4 томда, 1 т. – Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1978. – 495 б.

2. Самирханова Г.Х. Особенности сюжетного состава башкирских басен // Творческая личность в историко-культурном пространстве. Материалы Международной конференции, посвященной 100-летию послания А.Е. Кулаковского “Якутской интеллигенции”. – Якутск, 2013. – С. 349-352


© **Сәмерханова Г.Х.**, **Мырҙаҡаева М.А.**, 2018

**Р.Р. Фазылова**,

*БР Милли әҙәбиәт музейының өлкән ғилми хеҙмәткәре, Өфө ҡ.*

# БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ МИЛЛИ ӘҘӘБИӘТ МУЗЕЙЫ ФОНДЫНДА МӘЖИТ ҒАФУРИҒА ҠАҒЫЛЫШЛЫ ЯҢЫ МАТЕРИАЛДАР

БР Милли әҙәбиәт музейы фондтары йылдан-йыл бай йөкмәткеле экспонаттар менән тулыланып тора. Унда тупланған Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафури фонды 27 һаҡлау берәмеген тәшкил итә. Ғ.Ҡасимовтың ғәрәп графикаһында баҫылған “Атаҡлы халыҡ шағиры Мәжит Ғафури" (Өфө, 1923 йыл), латин графикаһында “Ғафури тураһында иҫтәлектәр” (Яңы Троицк, 1934 йыл), М. Ғафуриҙың 1935 йылда Өфөлә латин графикаһында баҫылған “Эшсе” операһының либреттоһы”, Б. Ишемғолдоң латин графикаһында баҫылған “Мәжит Ғафури. Докладсылар өсөн материал” (Өфө, 1935), Ғ. Әмири менән В. Ғәлимовтың Өфөлә 1950 йылда баҫылған “Ҡара йөҙҙәр. Халыҡ шағиры М.Ғафури повесы буйынса” китаптары, М. Ғафури тураһында замандаштары яҙған иҫтәлектәр, фотолар, Ғ. Ибраһимовтың М. Ғафуриға 1925, 1932, 1933, 1934 йылдарҙа яҙған хаттары бар.

2016 йылда шағир, яҙыусы, тәржемәсе Ғәйнан Әмириҙең ҡыҙы Нелли Әмирова атаһының архивын Әҙәбиәт музейына тапшырҙы. Ҡомартҡылар араһында әҙәбиәтебеҙгә, уның тарихына баһалап бөткөһөҙ тос өлөш индерерҙәй экспонаттар, уникаль булыуҙары менән ҙур әһәмиәткә эйә материалдар бар. М.Ғафуриға ҡағылышлы яңы материалдарҙан түбәндәгеләрҙе күрһәтергә мөмкин: Ғ.Әмири менән М. Ғафуриҙың А.П. Чехов исемендәге санаторийҙа 1933 йылда бергә төшкән һәм Ғафуриға бәйле башҡа фотолар, Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы ветераны Хажиәхмәт Шәмсетдин улы Әмировтың, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Таңсулпан Даһи ҡыҙы Бабичеваның өләсәһе Мәдхинур Хәйрулла ҡыҙы Бабичеваның М.

Ғафури тураһындағы иҫтәлектәр ҡулъяҙмалары, М. Ғафуриҙың 99 йәшен билдәләгән ваҡытта Ғ.Әмири яһаған сығыштың ҡулъяҙмаһы һ.б

Ғ. Әмириҙең архивында М. Ғафуриға ҡағылышлы әйберҙәр булыуы ғәжәпләндермәне. Сөнки әҙип М.Ғафуриҙы үҙенең остазы итеп иҫәпләгән. Шағирҙың "Ҡара йөҙҙәр" повесын сәхнә әҫәренә әйләндергән авторҙың да тап Ғ.Әмири икәнен яҡшы beләбеҙ. 1939 йылда Әмири халыҡ шағирына арнап "Теләк" шиғырын ижад итә:

Ғафуриҙы ҡат-ҡат уҡыйым да,
Ғәйрәтенә уның таң ҡалам.
Гел йәш, ҡайнар йырҙарынан уның
Йөрәгемә яңы ҡан алам.
Уны тулҡынлатҡан дәрттәр менән
Мин дә шулай ярһып янһам ине;
Кеше бәхете өсөн көрәштәрҙә
Уның кеүек алдан барһам ине.

1933 йылда Ғ.Әмириҙең "Башҡортостан"да баҫылып сыҡҡан мәҡәләһен уҡығандан һуң, М.Ғафури гәзит ситенә ҡәләм менән: "Был ауыл егетенең йөрәгендә бөткөһөҙ ынйылар бар", – тип яҙып ҡуйған була.

Ҡулъяҙмаларға әйләнеп ҡайтҡанда, Ғафури районы Яңғыҙҡайын ауылы кешеһе Хажиәхмәт Әмировтың 1974 йылда яҙылған 37 биттән торған ҡулъяҙмаһында М. Ғафуриҙың холоҡ-фиғеленә ҡағылышлы, быға тиклем бер ҡайҙа ла баҫылмаған мәғлүмәттәр осратырға була. Бында шағир йомарт, йор һүҙле, сабыр, сабыйҙарса эскерһеҙ, балалар яратҡан, уларҙы аң-белемгә өндәгән кеше итеп кәүҙәләндерелә. Заманында Белорет районы Исмаҡай ауылында уҡытҡан, Юрматы, Стәрлетамаҡ кантондарында халыҡ мәғарифы бүлеген етәкләгән, БАССР-ҙың Юғары Советында эшләгән, Йоматау техникумы директоры вазифаһын башҡарған, Мәскәүҙә Ленин, Крупская менән осрашҡан Х.Әмировтың замандашы М.Ғафури тураһында йәнле итеп яҙған ҡулъяҙмаһы БР Милли әҙәбиәт музейы өсөн бик ҙур табыш булды. Әҙиптең тормош юлын,

холоҡ-ҡылығын сағылдырыусы мемуар әҙәбиәт яҙыусы ижадын, тормошон өйрәнгәндә ярҙамсы материал ролен үтәй ала. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, Х.Әмиров 4 йыл буйы ошо арала 70 йәшлек юбилейын билдәләгән М.Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы урынлашҡан ихатала шағир менән күрше булып йәшәгән.

Х.Әмиров М.Ғафуриҙы беренсе тапҡыр 1905 йылда шағирҙың тыуған ауылы Еҙем-Ҡаранда күрә. “Миңә ул саҡта 15 йәш ине. Олатайым менән был ауылға ҡунаҡҡа килгәйнек. Барғас та, малайҙар менән өй артында “Соҡортуп” уйнай башланым. Шул саҡ баҙар яғынан бер малай: “Нимә ҡарап тораһығыҙ, тиҙерәк булығыҙ, Мәжит ағай ҡайтҡан, ул хәҙер кәнфит өләшер!” – тип ҡысҡырҙы. Беҙ ҡунаҡ булған өй хужаһының малайы: “Йүгерҙек, кәнфиттән тороп ҡалмайыҡ, ғәләмәт шәп ул беҙҙең Мәжит ағай, үҙе йомарт, үҙе һылыу, үҙе беҙҙе ярата, ҡайтҡан һайын ҡаланан тәмле кәнфиттәр алып ҡайта”, – тип мине лә эйәртте. Беҙ барып еткәндә, Мәжит ағай йәшәгән йорт янында малайҙар һәм ҡыҙҙар йыйылғайны. Кескәй генә һалам түбәле, балсыҡ менән һыланған өс тәҙрәле өйгә балалар күҙҙәрен төбәгән. Күп тә үтмәне, ҡаласа матур кейенгән, кесерәк кәүҙәле, аҡ йөҙлө, һыҙылып ҡына сыҡҡан ҡара мыйыҡлы, башына ҡара хәтфә түбәтәй кейгән бик матур кеше өйҙән сығып, беҙҙең янға килде. Сәләм биреп, күрешә башланы. Беҙ көткән Мәжит ағай ошо ине. Ике яҡ кеҫәһе лә кәнфит менән тулы. Кәнфиттәрҙе таратып сыҡҡас, балалар, барығыҙға ла еттеме, тип һораны. Беҙ, эйе, Мәжит ағай, тиештек. “Афарин, азаматтар! Йә, һеҙҙең ҡайһығыҙ һабаҡ уҡый? Кемдәр уҡый-яҙа белә? Миңә яҡыныраҡ килегеҙ әле, уларға минең айырым кәнфиттәр бар”, – тине. Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына дүрт малай Мәжит ағайға яҡыныраҡ килде. Мәжит ағай һәр береһенә икешәр кәнфит бирҙе. Уҡыу-яҙыуға ҡыҙыҡтырып матур һүҙҙәр һөйләне. Эргәһенә мине лә саҡырып алды, ғәрәп сарыфы, “Шәрхи Ғабдулла”ны уҡығанымды һөйләнем. “Һай, азамат икәнһең! Уҡырға ла, яҙырға ла шәп икәнһең! Сарыф уҡыған йоҡламаҫ, тигән һүҙ бар бит, һин күп йоҡламағанһыңдыр,” – тип, кеҫәһенән 5 кәнфит сығарып бирҙе”. Шунан:”Йәгеҙ, дуҫтар, берәр уйын уйнап алайыҡ,” –

тине. “Соҡортуп, гөргөлдәк, йүгерешәйек!” – тип ҡысҡырҙы балалар. “Афарин һуңғы уйынды әйтеүсегә, булмаһа, йүгерешеп алайыҡ”, – тип яуапланы шағир. Ярышта ҡатнашыусы малайҙарҙың исемлеген яҙғандан һуң, уйындың тәртибен аңлатты. Алдан килеүселәргә мөкәфәт өсөн 6-шар, икенсе килеүселәргә 5-әр, өсөнсөгә – 4-әр, дүртенсегә – 3-әр, бишенсегә – 2-шәр, алтынсыға 1-әр тин була. Унан да артта ҡалыусыларға бер тин дә юҡ”, – тине лә, кеҫәһенән аҡсаларын алып, һанап һалып ҡуйҙы. “Баҫыу ҡапҡаһы төбөндә бер сафҡа теҙелерһегеҙ, ишара ҡыңғырауы шылтырағас та, йүгереп китерһегеҙ”. Алдан килеүселәрҙе маҡтап, артта ҡалыусыларҙы шәп йүгерергә ҡыҙыҡһындыра торған һүҙҙәр әйтеп, мөкәфәттәрҙе өләште Мәжит ағай. “Мин ҡайтыуға уҡырға өйрәнеп, грамоталы кешеләр булып тороғоҙ, мин һеҙгә күстәнәскә кәнфиттәр, бүләккә китаптар алып ҡайтырмын, уҡыу-яҙыуға шәп булғандарығыҙҙы ҡалаларға уҡырға алып китермен”, – тине. Минең быға тиклем быңдай матур, оҫта һәм ҡыҙыҡлы һөйләүсене күргәнем юҡ ине”.

3. Шакурова М.М., Гаязов Н.И. М. Гафуриның "Ярлылар яки өйдәш хатын" әсәрендә кулланылган фигыльләрнең лексик-семантик төркемчәләре // Развитие научно-методической мысли: достижения, проблемы, перспективы:

сборник материалов I Республиканской научно-методической конференции (28 января 2013 г.) / Под ред. А.Р. Мутигуллиной. – Казань: Изд-во "Отечество", 2013. – С. 208-210.

© **Шәкүрова М.М., Гиниятуллина Л.М.**, 2018

**Р.И. Ырыҫкужина**,
*БР Милли музейы филиалы*
*Шәһит Хоҙайбирҙин йорт-музейы ғилми хеҙмәткәре,*
*Өфө к.*

## ШӘҺИТ ХОҘАЙБИРҘИН ҺӘМ МӘЖИТ ҒАФУРИ

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафури менән Шәһит Хоҙайбирҙин – бер заман кешеһе. Икеһе лә ил күргән михнәттәр аша үтеп, халыҡ күтәргән юғалтыуҙарҙы кисерә.

Февраль революцияһы башланған көндәрҙә Өфөлә был ике шәхестең юлдары киҫешә. Тәүге танышыу тип яҙыу бик үк дөрөҫлөккә тап килмәй, сөнки Шәһит Хоҙайбирҙин Ырымбурҙа “Хөсәиниә” мәҙрәсәһендә белем алғанда, Ғафуриҙың әҫәрҙәрен уҡып, яттан һөйләп йөрөй. Уңайы сыҡҡанда, мәҙрәсәлә үҙе ойоштороған “Беҙ” сатирик журналында уның сәнскеле шиғырҙарын баҫтырыуға өлгәшә. Үкенескә, уҡытыу-тәрбиә эштәренә ҡағылышлы тәнҡит яҙмалары өсөн егетте был уҡыу йортонан ҡыуалар. Ә шағир менән “тереләй” танышыуҙары ысынлап та, февраль революцияһы башында була. Был мәлдә Ғафури “Шәреҡ” типографияһында эшләп йөрөй. Хоҙайбирҙин Өфө губернаһының мосолман һалдаттары комитетында “Һалдат теләге” гәзитен сығарыуҙа әүҙем ҡатнаша. Тәүге әҫәрҙәрен, атап әйткәндә, хәрбиҙәр тормошон сағылдырған “Һалдат ҡатыны”, “Һалдат”, “Аҡ билеттар” хикәйә, очерктарын ошонда баҫтыра. Гәзит, типография эше тиҙ арала ике шәхес араһында дуҫлыҡ күпере һала.

Февраль буржуаз-демократик революцияһында Шәһит Хоҙайбирҙин үҙен революционер итеп танытһа, Мәжит Ғафури революцион-демократик шағир була. “Революцияның башынан алып, шул рух менән һуғарылған һәм, һул ҡанатҡа теҙелеп, капитал һәм милли буржуазияға ҡаршы көрәш башлаған аҙ һанлы, саф йөрәкле кешеләрҙең береһе Шәһит иптәш Хоҙайбирҙин булды. Үҙенең ғүмере буйынса пролетариат һәм ярлы халыҡҡа хыянат итмәй эшләүселәр һирәк булалар бит. Шәһит шуларҙың береһе, иң саф йөрәклеһе, ҡаһарманы ине”, – тип яҙҙы Мәжит Ғафури үҙенең иҫтәлектәрендә[4].

Октябрь революцияһын да шағир революционерҙар менән бергә ҡаршы ала. Бихисап лирик шиғырҙар тыуа, одалар ижад ителә. Ғафури Бөйөк октябрь революцияһының йырсыһына әйләнә.

Тиҙҙән граждандар һуғышы башлана. Шәһит Хоҙайбирҙин был һуғыштан да ситтә ҡалмай. Ул мосолман отрядтары менән етәкселек итә. Шағир дуҫы менән тағы ла ваҡытлы матбуғат биттәрендә осраша. “Ҡыҙыл яу”, “Ҡыҙыл юл” гәзиттәрендә Шәһит үҙенең ялҡынлы мәҡәләләрен баҫтыра, ә Мәжит Ғафури ҡыйыу шиғырҙары менән һалдаттарҙы ҡеүәтләп тора.

1919 йылда Өфөнө азат иткәндән һуң, Ғафури ошондай иҫтәлек яҙа: “Ҙур дошманды ватып, ҡасырып ингән Ҡыҙыл армия һалдаттары менән урам тулған. Башҡорт, татар һалдаттары осрап, Шәһиттең Өфөлә икәнен белдем. Ул беренсе сафта Өфөгә ингән икән. Штабҡа барып, Шәһитте таптым. Ул, ғәҙәттәгесә, мөләйем, көләс йөҙ менән күреште.  Хәҙер эш күп, уның ваҡытын әрәм итмәҫ өсөн, кискә ултырышыу вәғәҙәһе менән айырылыштым. Кис ул бер аҙ бушағайны. Фронт, һуғыш, еңеү тураһында һөйләп ултырҙы.

– Өфөнө емереп бөтөрә яҙҙығыҙ бит, – тинем.

– Әле ярай сығып өлгөрҙөләр, юғиһә, күрерҙәр ине, – ти, үҙе көлә. Уның һалмаҡ, тыныс ҡанлы һәм уйлап һөйләүе мине һоҡландыра ине.” [5] Ошо уҡ йылда шағир “Ҡыҙыл ҡаһарман ауыҙынан”[2], “Шәреҡ ялҡыны”[3] шиғырҙарын яҙа.

Эйе, шағир яңылышмай, уйлап эшләй белгәне өсөн Шәһит Хоҙайбирҙинды яуаплы вазифаларға тәғәйенләй башлайҙар. Ул буталсыҡ осорҙа яңылышлыҡһыҙ ҙа булмай, әммә үҙ хаталарын күрә белеп эш итә Шәһит Әхмәт улы. Бөрйән-Түңгәүер кантонында ауыр вазифа күтәрергә лә тура килә уға. Аслыҡ йылдарын йөрәге аша үткәреп, тыуған халҡы өсөн әллә күпме һынауҙар аша үтә. [6] Ләкин һынмай. Шағир менән революционерҙың дуҫлығы ла осор еленә бирешмәй, киреһенсә, нығына ғына. Шәһит Хоҙайбирҙиндың хәләл ефете Маруй Шәрип ҡыҙының хәтерләүҙәре: “Һирәклəп булһа ла, беҙгә Мәжит Ғафури ғаиләһе килеп йөрөнө. Шәһит ижадсы менән һөйләшеп ултырырға яратты, яңы шиғырҙарын иҫе китеп тыңлай ине. Әҙәбиәткә ҡағылышлы темалар тураһында бәхәсләштеләр. Шәһит бит үҙе лә йәшерәк сағында шиғырҙар яҙған, әҙәбиәткә ҡарашы ла ихтирамлы булды. Бынан тыш, ул йырҙар яратты, бигерәк тә һуҙып йырланған халыҡ йырҙарын. Ҡайсаҡ үтә тыныс, әммә моңло тауышы менән йырлап та ебәрә торғайны. Үкенескә күрә, бындай осрашыуҙар һирәк булды, сөнки Шәһиттең күп ваҡыты дәүләт эштәренә бүленде, ғүмере юлда үтте…”[5].

1923 йылда, Шәһит Хоҙайбирҙин инде юғары урында, дәүләт эшмәкәре булып хеҙмәт иткәнендә, республикала Мәжит Ғафури ижадына 20 йыл тулыуҙы уҙғарыуға күп өлөш индерә. Башҡортостан Үҙәк башҡарма Комитеты Ғафуриға Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен, персональ пенсия һәм бөгөн уның йорт-музейы урынлашҡан Гоголь урамындағы 28\1-се йортто бирә.

“Шәһит бөтә эшсе, крәҫтиәндәрҙең яраткан һөйөклө бер кешеһе булып танылды. – Их, яратам шул шундай кешеләрҙе, – ти торғайным мин уны күргәндә. Кесе Башҡортостан Оло Башҡортостанға әүерелгәстен, Шәһит Өфөлә эшләне. Уның менән яҡшы уҡ йыш күрешергә тура килә. Күрешкәндә күңелдә яңы бер тәьҫир ҡалдыра торғайны ул миндә”, – тип яҙҙы Мәжит Ғафури яҡын дуҫы Шәһит хаҡында иҫтәлектәрендә.

Мәжит Ғафуриҙың Әнүәр улы ла хәтирәләрен ҡалдырған: “Уның тураһында бер ҡасан да насар итеп әйтеү мөмкин түгел. Ғүмере ахырына

тиклем халҡына тоғро ҡалған ысын коммунист ул, – ти торғайны атайым Шәһит Хоҙайбирҙин тураһында.

Уртаса кәүҙәле, бөтә яҡтан килгән алсаҡ, мөләйем ине Шәһит ағай. Ҡыҙыл армия офицерының өлгөһө. Минең атайым уның менән ваҡыт йәлләмәй әңгәмәләшергә әҙер ине” [1].

1924 йылдың 21 декабрендә Шәһит Хоҙайбирҙин вафат булғас, Мәжит Ғафури ныҡ ҡайғырып “Шәһит үлгән” тигән шиғырын яҙа. Ул шиғыры “Яңы ауыл” гәзитендә Хоҙайбирҙин вафатының өсөнсө көнөндә – 23 декабрҙә донъя күрә:

Йәндәр өҙгөс был хәбәрҙе
Мин ишеттем бик ҡапыл,
Баш бөгөлдө, күҙ йомолдо,
Ергә һалынып төштө ҡул.

Ут эсендәге быялалар кеүек,
Мин сатнаным,
“Ҙур юғалтыу, ҙур юғалтыу!”–
ҙан бүтән һүҙ тапманым.

Унан һуң шағир Ш. Хоҙайбирҙин менән үҙенең дуҫлыҡ тарихын тасуирлаған иҫтәлектәрен яҙа.

1934 йылдың 28 октябрендә шағир күҙҙәрен мәңгелеккә йома. Уны Өфөләге Матросов паркында ерләйҙәр. Шәһит Хоҙайбирҙин ҡәбере янына. Әнүәр Ғафури һүҙҙәре менән әйтһәк, “шағир һәм көрәшсе тыныслығын Александр Матросов үҙе һаҡлай кеүек”.

***Әҙәбиәт***

1. Гафури А. Несколько слов о тех, с кем был знаком Мажит Гафури. Исследовательская работа. Инв.номер 162. М.Г.

2. Кызыл юл. Газета. – 1919 й., – 30 сентябрь.

3. Кызыл юл.газета. – 1919 й., – 27 август.

4. Ҡудаш А. Шәһит Хоҙайбирҙин һәм Мәжит Ғафури. Октябрь (журнал). – 1946 – № 9–10. – Б. 70–71.

5. Хоҙайбирҙин Ш. БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Секретариаты. – 2006. – 195 бит.

6. ЦГАОО РБ. Фонд личного происхождения Ш.А. Худайбердина. Ф.10296. 3-9 стр.

© **Ырысҡужина Р.И.**, 2018

**А.Р. Әхмәтшина**,

*М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның*

*башҡорт филологияһы факультетының II курс студенты*

*Ғилми етәксеһе – филол. ф. к., доцент Әлибаев З.А.,*

*Өфө ҡ.*

## М. ҒАФУРИҘЫҢ РЕВОЛЮЦИЯҒА ТИКЛЕМ ПОЭЗИЯҺЫНДА МӘҒРИФӘТСЕЛЕК ИДЕЯҺЫ

Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры М. Ғафуриҙың бай ижади мираҫы – милли һүҙ сәнғәтебеҙҙә иң күренекле өлгөләрҙең береһе. Шағирҙың ижадын филология фәндәре докторы Ғ. Рамазанов һәм башҡа ғалимдар ентекле өйрәнгән, ләкин уның әҫәрҙәрендәге М. Аҡмулланан башланған мәғрифәтселек традициялары әлегә тулыһынса тикшерелмәгән. Шуға ла был мәҡәләлә Мәжит Ғафури шиғриәтендә ярайһы уҡ ҙур урынды биләп торған мәғрифәтселек темаһына арналған шиғырҙарҙы өйрәнеү төп маҡсат итеп ҡуйылды.

XX быуат башындағы ҡатмарлы ижтимағи-сәйәси ваҡиғалар социаль тигеҙһеҙлек, һуғыш, йәтимлек, фәҡирлек проблемалары халыҡҡа, бигерәк тә балаларға белем алыу мөмкинселеге бирмәгән. Был йылдарҙа күренекле шағир, уҙған быуаттың классигы Мәжит Ғафури белем алған. Уҡырға, яҙырға өйрәнеү

бик ауыр булған. Шәкерттәр ғәрәп һүҙҙәрен аңлай алмайынса, аңлаһалар ҙа һөйләм төҙөй алмай ыҙаланғандар [2, 15].

Бөгөнгө көндә уҡыу өсөн йәштәргә иҫ киткес мөмкинселектәр – яҡты, ҙур мәктәптәр, кәмендә ике вариантта – электрон һәм ҡағыҙ форматта китаптар бар, ә белемгә, китапҡа ҡыҙыҡһыныу юҡ. Бөтәһе лә улай түгел, әлбиттә, беҙҙең быуатта ла асыштар, шағирҙар бар, әммә дөйөм алғанда, педагог буларaҡ, фекерҙәр мәғрифәтселеккә мөрәжәғәт итеүгә этәрә. Күҙәтеүҙәрҙән сығып, XXI быуат башында наҙанлыҡ проблемаһы асыҡ кеүек. Аптыраҡкыс хәлдән сығыу юлын эҙләп, Башҡортостандың беренсе халыҡ шағиры М. Ғафуриҙың шиғриәтенә мөрәжәғәт иттек. Өс томлыҡ шиғырҙар йыйынтығында әҙиптең төрлө йылдарҙа, төрлө темаларға ижад ителгән әҫәрҙәре араһынан белем алыу темаһына арналғандарына анализ эшләнде. Әйткәндәй, М. Ғафуриҙың беренсе әҫәрҙәре мәғрифәтселек темаһына арналған булған. Октябрь революцияһына тиклем, унан һуң да уҡыуға, белем арттырырға, әҙәпле булырға саҡырған шиғырҙары бик хисап. Был ваҡиғаларға бер быуат үтеп китте, ә ундағы тема, идея бөгөнгө көндә лә актуаль.

Мәғрифәтселек темаһы М. Ғафури ижадында беренселәрҙән булыуы әҙиптең ауыр йылдарҙа үткән бала сағы һәм уның йәшлек йылдарындағы тарихи ваҡиғалар менән бәйле. Ун өс йәшендә етем ҡалған. Бер мәҙрәсәнән икенсеһенә күсеп, ҡатмарлы шарттарҙа белем алыуына ҡарамаҫтан, ғилемдең кешелеккә кәрәклеген аңлаған [1, 13]. XX быуат башында мәғрифәтселек темаһы революцион идеялар менән йәнәш тора. Был темаға М. Ғафуриҙың “Себер тимер юлы” шиғырын билдәләп китә алабыҙ.

М. Ғафури үҙенең “Ғилем” шиғырында наҙан халыҡ, кеше төшөнсәһен аллегорик алым менән бирә:

Ғилемдең файҙаһын үҙең дә күр,
Файҙала милләтеңде үҙеңдәй күр,
Ғилемең менән милләтеңде иткел һин шат,
Һаҡлайҙыр зарарҙан ҡаланы сүр.

Һәр милләт араһында ҡуйы ла бар,

Ҡуйы булһа уға кәрәк һаҡлар аҙбар.

Ғалимдәр ғәүәмдең ҡураһылыр,

Ҡуранан күп сыҡма, бүре ҡабыр[1,33б]

Ҡуй образында ғилемһеҙ, наҙан халыҡ һүрәтләнә. Әҫәр дауамында лирик герой ғилемле халыҡтың наҙандарҙан нисек айырылыуын, ниндәй социаль кимәлдә булыуын күрһәтә. Беренсенән, ғилемле булыу кешенең үҙе өсөн әһәмиәтле, икенсенән, уның башҡаларға, милләткә файҙалы булыуы мөһим икәнен күҙ уңында тота.

«Уҡыусы йәш ҡыҙға», «Уҡымаһын ирҙәр генә» шиғырҙарындағы түбәндәге юлдарға иғтибар итәйек:

Йорт эсе матурлана һәм нурлана һеҙҙең менән,

Эй, татар ҡыҙы, был көндән һуң уҡы, бел, яҙыу өйрән[1, 269 б].

***

Торма бушҡа! Өйрән инде тәрбиә, ғилем, әҙәп,

Йәшәгеҙ һеҙ, беҙ йәшәрбеҙ, көн күрербеҙ бергәләп[1, 171 б]

Шағирҙың белем темаһына яҙылған шиғырҙарының күбеһе формаһы яғынан дистрофа менән яҙылған булып сыҡты. Был күренеш осраҡлымы түгелдерме, әммә, поэтик үҙенсәлек булараҡ, шунда уҡ күҙгә ташлана. Һүрәтләү саралары булмаһа ла, эмоциялар интонация аша асыҡ бирелә. Ҡатын-ҡыҙҙарға ла, ирҙәргә лә уҡыуҙың кәрәклеге асып һалына. Был фекер менән килешмәү мөмкин түгел, сөнки киләсәкте тәрбиәләү бурысы, тәү сиратта, ҡатын-ҡыҙҙар өҫтөндә.

Шиғырҙарҙа мәктәпкә, китапҡа булған мөнәсәбәт ғәжәпләндерә һәм шунда уҡ “Ошо ғәжәпләнеүҙе, мөнәсәбәтте, ынтылышты хәҙерге уҡыусыларға нисек еткерергә?” тигән һорау тыуа.  Мәктәптә уҡытыу һәм тәрбиә эштәре һәр ваҡыт йәнәш алып барылырға тейеш. Был талап төрлө сығанаҡтарҙан уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырырлыҡ, белемгә һөйөү уятырлыҡ мәғлүмәт табып, уны оҫта ҡуллана белеүҙе талап итә.

Алда һүҙ барған ике шиғыр мәктәп тураһында. Ижад ителеү йылдары ла тура килә (1910 й.), шуға күрә был шиғырҙар бер-бер артлы яҙылыуы ихтимал. Әйтәйек, “Мәктәп” шиғырында шундай үҙенсәлекле сара ҡулланылған: мәктәп һүҙе аҙаҡка тиклем рифмалашып килә. Әҙәбиәт теорияһында был стилистик фигура эпифора тип йөрөтөлә [3, 181б]. Ул юлдан-юлға фекерҙе көсәйтеп, әҫәрҙең төп идеяһын һыҙыҡ өҫтөнә алып, уҡыусыға еткерә. Шулай ҙа улар араһында айырма бар. Икенсе өҙөктә эпифораға оҡшаш бер фигура ҡулланылған. Көнсығыш әҙәбиәтендә дистрофа менән яҙылған (ике юллыҡ строфаның) рифманан һуң бер үк һүҙҙең, йәки бер үк һүҙбәйләнештең махсус рәүештә ҡабатланып килеүен рәдиф тип атайҙар [3, 184].

***

Иҙелеүҙән, бөтөрөүҙән беҙҙе ҡотҡара мәктәп,

Беҙҙе асыҡ донъяға етәкләп бара мәктәп [1, 290б]

Ысын бәхет, сәғәҙәткә ирештерәлер мәктәп,

Юғалған хаҡтарыбыҙҙы алып бирәлер мәктәп[1, 291б].

***

Йөрөп мәктәпкә йәш саҡта ғилем һәм тәрбиә алһаң,

Был донъяла тора белер ҡәҙерле тәжрибә алһаң,

Бына шунда һиңә һәр кем бағыр бик яҡшы күҙ менән,

Һине маҡтап йөрөрҙәр шаныңа лайыҡлы һүҙ менән.

“Китаптарым” шиғырында лирик герой үҙенең китапҡа булған мөнәсәбәтен белдерә.

Бәндән улар һисялыҡмай, бән үҙем ялҡмаһам;

Улар илә ултырам, улар илә күңел асам.

Былар ата, былар әсәм, былар бәнем ҙур остазым,

Башҡа ерҙә юҡ сәғәҙәт тип, быларға туҡтаным [1, 196б].

Был шиғырҙың йөкмәткеһе уҡытыусылар, ата-әсәләр өсөн бик әһәмиәтле, сөнки уның нигеҙендә балаларға китаптың күңел асырлыҡ дуҫ, ата-әсә кеүек

яҡын була алыуын аңлатыу ята. Был эш еңелдән түгел, әммә был маҡсат булырға тейеш.

Мәжит Ғафуриҙың ижадындағы мәғрифәтселек идеяһы башҡорт әҙәбиәтендәге М.Аҡмулла, М.Өмөтбаев, Р.Фәхретдинов традицияларын дауам итеү булды. Артабан был традиция һүҙ сәнғәтендә матур өлгө булып ҡала. Шулай итеп, уҡыу, белем темаһы бөгөнгө көндә лә актуаль булып ҡала.

***Әҙәбиәт***


1. Ғафури М.Н. Әҫәрҙәр дүрт томда, I том. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978. – 433 бит.
2. Рамазанов Ғ.З. Халыҡ шағиры хаҡында китап. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. – 224 бит.
3. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. – Үҙгәрешле 3-сө баҫма. – Өфө: Китап, 2003. – 392 бит.


© **Әхмәтшина А.Р.**, 2018

**Ф.Ф. Янышев**,
*Рәсәй һәм Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы,*
*М.Аҡмулла музейы директоры, Туҡһанбай а., Миәкә районы*

## ҠАҺАРМАН ЫРҒЫҘ ҠЫҘЫ

Башҡорт дәүләт университетының Бөрө филиалындағы Һәҙиә Дәүләтшина музейына инеү менән һине ниндәйҙер тулҡынланыу солғап ала. Күңелең нимәлер көтә, ашҡына, һиҙенә. Оло хәрефтәр менән стеналағы планшеттарҙа яҙылған тапҡыр һүҙҙәр күҙгә салына, экскурсия үткәреүсе нимәлер һөйләй, ә һин уларға иғтибар итмәй, яй ғына атлайһың. Аяҡтарың үҙенән-үҙе һарғая башлаған ҡағыҙҙар, туҙа башлаған папкалар ятҡан витриналар янына алып килә. Ҡулыңа машинкала баҫылған “Ырғыҙ буйҙары”

романын алаһың, һәм тәнең буйлап аңлайышһыҙ сихри йылылыҡ үтә. Әҙибәнең күҙ йәштәренә мансылған яҙмалар, һарғая башлаған ҡағыҙҙар, әммә уларҙың тылсым көсөнә эйә икәнлеген йөрәгең һиҙеп, дарҫлап тибергә тотона һәм был яҙмаларҙағы йылылыҡ күңелеңә ләззәтлек бирә...

Һәҙиә Дәүләтшинаның ҡулъяҙмаға индергән төҙәтмәләре, шунда уҡ романға бирелгән баһаламалар менән таныша башлайһың. Уҡыған һайын йөрәк туҡтап-туҡтап ала. Мөмкинме һуң быларҙы тыныс ҡабул итергә? Мәҫәлән, Ғәйнан Әмири: “диалогтары күп һүҙле”, “композиция һәм сюжет айышына зарар килтерә торған ҙур булмаған тайпылыштар, романдың аҙаҡҡы главаларында схематизмға тартым күренештәр”, „ваҡиғалар өҫтөнән ашығыс йүгереп үтеүҙәр”, “Өфө, Ырымбур губерналарындағы ваҡиғалар, унда йәшәгән башҡорттар менән Ырғыҙ буйы халыҡтарының бәйләнеше юҡ” һәм башҡалар... Ошо уҡ етешһеҙлектәрҙе тәнҡитсе әҙибә үлгәс сыҡҡан “Ырғыҙ” романының баҫмаларында ла ҡабатлай. Йәнәһе, үҙ принцибында ҡала. Бындай баһаламаны 50-60-сы йылдарҙа баҫылып сыҡҡан бик күп романдарға биреп булыр ине. Һәҙиә Дәүләтшинаның 1953 йылдың 5 сентябрендә Мостай Кәримгә яҙған хаты ла тетрәндергес.

“Хөрмәтле Мостай Сафич![*]

Һеҙ минең китапты уҡып та бөтәһегеҙҙер инде. Шуға күрә, мин дә һеҙҙең иғтибарға инер тип Агиш иптәштең рецензияһына ҡарата булған ҡайһы бер уйымды әйтеп китәйем әле.

1) Халҡ пассив, ти. Кешеләр үҫмәй, ти. Был дөрөҫ түгел һәм быға миҫал итеп килтерелгән Айбулат, ул дәүерҙә именно көтөүсе көйөнсә мораль һәм синфи үҫә. Уға ул ваҡытта бүтән юл юҡ. Ә уны, шул көтөүсе хәлендә, рус батрактары, рус пролетариат вәкилдәре һәм революционерҙәренең тәрбиәләүенә Агиштең ҡаршы килеүе миңә бөтөнләй аңлашылмай.

2) Ҡатын – ҡыҙҙар тураһында: Яланбикә ул ваҡыттың фажиғәһен күтәрә алмаған ҡорбан. Агиштең был миҫалы төбөнән хата. Ул хатта „Уйнаштан бала

[*] Хат авторының стиле, орфографияһы һаҡланды.

тапҡас, шул кәрәк” тигән үс алыу фекерен ҡуя, беҙҙә хәҙергә әле лә был эш ҙур ғәйептән һанала тимәксе була. Агиш беҙҙең Совет властында, ирекле тормошонда “уйнаш” тигән ҡәбәхәт һүҙ һәм бысраҡ ҡараштың ҡасан бөткәнен нишләп әле булһа аңламай, ғәжәп?!

3) Байбисәләр араһындағы противоречиеларҙы ҡабартып күрһәтеү минең бурысым түгел. Минең бурысым: уларҙың ярлы ҡатындарҙы (хатта ирҙәрҙе лә) нисек итеп эксплуатировать, йәғни, синфи иҙеүҙәре тураһында күрһәтеү. Ә уларҙы Ныязғол шулай тәрбиәләгән, шуны талап итә. Тыңламаһа, “Ана тора бөлдөргәле ҡамсы” – ти, Ғәзимәгә.

Йәш ҡатын Миңлекәй татар ҡыҙы. Татарҙың благородный халҡ ҡыҙы түгел, ә ваҡ буржуазияһы семьяһында, мещәнлектә тәрбиәләнгән ҡыҙы. Ул Ныязғолға килеү менән үҙенең буржуаз мораленең үҫеүенә киң юл ала. Агиштең быны татар милләтенә насар ҡарау тип уйлауы дөрөҫ түгел. Сөнки ул спекүләнт ҡыҙы, буржуй бисәһе Миңлекәйҙе яҡлаша, ә ысынлап та татар халҡ ҡыҙы – Ҡазандан килгән уҡытыусы Зәйнәпте күҙгә лә элмәй. Ә Зәйнәп Диләнең һәм башҡаларҙы грамоталы яһай. Ә Миңлекәй Зәйнәпте лә иҙергә тырыша бит.

4) „Масса бер ваҡыт Айбулат артынан, икенсе ваҡыт байҙар яғына күсә” ти. Мәҫәлән, ҡайҙа? Минең алған типтар, геройҙар баштан-аяҡ ҡаршы ҡуйылған. Агиш ҡына күрмәгән.

5) В.В.Куйбышев тураһында.

Агиш был ҙур профессионал революционер большевиктең биографиәһе менән аҙ ғына ла таныш түгел. Шулай була тороп ул мине ҡаты тәнҡитләмәксе, хатта, ҡайһы бер фактик, тарихи материалдарҙы тура „ялған”ға сығармаҡсы. Был – тәнҡит түгел, ә ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарыу була. Тарихҡа һәм тарихи справкаларға Агиш ышанмаһа, мин ышанам. 1916 йылғы подпольный большевик конференцияһының етешһеҙлектәре тураһында Агиш менән миңә обсуждать итергә бик һуң инде. Көрәш шыма бармаған, бигрәк тә подпольный көрәштәр.

Тарих уларҙы үҙ ваҡытында күргән һәм билдәләп ҡалдырған. Ул ваҡыттың ғәжәп ауыр империалистик һуғыш шарттарында, ер һелкетеп күтәрелеп килгән революцион көстөң ҡатшары күп булған. Аҙ картиналар ҙа күп мәғнә бирәләр, аңлаған һәм аңларға теләгән кешегә. В.В. Куйбышев мин яҙған өлкәнең бик оҙайлы ваҡыт алып барған етәксеһе. Уны мин, әгәр аҙ ғына материал табырға мөмкинлек булһа, Куйбышев ҡалаһына барып, кешеләр менән һөйләшеп, уның тулы образын кәүҙәләндерергә мөмкин булыр ине.

6) “Тәссөф” һүҙе тураһында. Агиш хаҡлы, ул һүҙ иҫкергән, алмаштырырға кәрәк. Ләкин шуны ла әйтергә кәрәк. И.В.Сталин күрһәткәнсә, һис бер һүҙ классовый түгел. Тәссөф әгәр ҙә беҙҙең телдә ҡулайлы икән, беҙ инде уны “мулла ла шулай тип әйткән, давай унан ҡасайыҡ, тип әйтмәйбеҙ. Агиш именно “мулла әйткән” тип ҡурҡа.

7) Агиш яңы кешеләр сығып тора, иҫкеләр онотола бара ти. Бының бер аҙ дөрөҫкә яҡынлығы бар, сөнки минең күп геройҙар романдың киләһе китабында күтәрелеп сығырға тейештәр... Аҙаҡҡы һүҙҙәрҙе яңынан ҡабатлап яҙайыҡ. „Бының бер аҙ дөрөҫкә яҡынлығы бар, сөнки минең күп геройҙар романдың киләһе китабында күтәрелеп сығырға тейештәр. 5.IX.1953 йыл”.

Хөрмәтле уҡыусыға аңлашылалыр. Һәҙиә Дәүләтшина Мостай Кәримгә яҙған ошо хатында ап-анйҡ әйтә, романымдың киләһе китабы ла буласаҡ, ти. Тимәк, әҙибә уның өҫтөндә эшләгән. “Ырғыҙ буйҙар”ын ул 1951 йылда уҡ яҙып бөткән була. Төҙәтмәләр, рецензияларҙағы иҫкәрмәләр өҫтөндә эшләгәндә, әҙибә романының дауамын да яҙа башлаған, тип әйтергә тулы хоҡуғыбыҙ бар. Әйтәйек, шау-шыу күтәргән “Мораҙым” повесы. Был әҫәр романдың бер өлөшө булыуы бик мөмкин. “Ялҡынлы йылдар” повесы “Ырғыҙ буйҙары”на инеп киткән кеүек.

Романдың етешһеҙлектәре тураһындағы материалдар менән бер рәттән ыңғай рецензиялар ҙа бар. Улар Һәҙиә Дәүләтшинаның әҫәренә бәйләнергә сәбәп эҙләп, нимә тип әйтергә белмәй, әҙибә әйтмешләй, „һыуға һабын менән яҙып” биргән баһамаларҙы юҡҡа сығара. Мәҫәлән, Ғәйнан Әмири: „Романдың

аҙаҡҡы главаларында схематизмға тартым күренештәр, ваҡиғалар өҫтөнән ашығыс йүгереп үтеүҙәр бар”, − тип күрһәтә. Ә Әхиәр Хәким: „Ырғыҙ” романының беренсе киҫәгендә эпик яй һүрәтләү өҫтөнлөк итә икән, был инде башҡорт ауылының тын-яй партриархаль тормошон кәүҙәләндереүгә, ә икенсе киҫәктең публицистик манераһы дауыллы ваҡиғалар, кешеләр яҙмышындағы киҫкен бороловштар һәм аяуһыҙ көрәш мәлен тулыраҡ асырға ярҙам итә. Бындай оперативлылыҡ, һығылмалылыҡ ысын мәғәнәһендә художник булған яҙыусыға ғына насип, әлбиттә”.

1961 йылда әҙибәнең тормош юлын, ижадын төплө өйрәнеүсе ғалим Марат Минһажетдинов: “Һәҙиә Дәүләтшинаның “Ырғыҙ” романында бөйөк татар шағиры Ғабдулла Туҡай шиғырҙарының илаһи хисе, Максим Горькийҙың “Әсә” әҫәренең романтикаһы, патриотизмы, Михаил Шолоховтың “Тымыҡ Дон”дағы эпик һүрәтләүҙәре, драматизмы менән бергә башҡорт халҡының тәрән аҡыллы, киң күңелле, ихлас мәрхәмәтле булыуы һәм дә ҡаһарманлығы сағыла”, − тип яҙа.

Музейҙағы документтарҙан күренеүенсә, Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Ильясова 1905 йылдың 21 февралендә, йәғни яңы стиль менән 5 мартында, Һамар губернаһы Николаев өйәҙе Имел волосы Хәсән ауылында донъяға килгән. Буласаҡ бөйөк яҙыусыбыҙҙың ауылы Ырғыҙ йылғаһының үрге яғында урынлашҡан. Тарихи сығанаҡтарҙа ул 1866 йылдарҙан билгеле. Ауылда бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән, суйын-ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары йәшәгән.

Был тәңгәлдә тағы шуны өҫтәп ҡуйыу урынлылыр. Имел волосына Кәрәлек һәм Ырғыҙ буйҙарында урынлашҡан һигеҙ башҡорт ауылы ингән, уларҙа 1550 ер алырға хоҡуғы булған ир-ат йәшәгән. Шул иҫәптән, Имелдә −171, Үтәкәйҙә − 141, Диңгеҙбайҙа − 215, Кинйәғолда − 233, Хәсәндә − 166, Ташбулат-Ташкүстән ауылында − 248, Моратшала − 242, Ҡасҡында 130 ир-ат теркәлгән. 1889 йылғы мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, был һигеҙ ауылда барлығы 3739 башҡорт йәшәгән. Йорттары уларҙың күбеһенсә кәҫтән йә саман кирбестән һалынған. Мәҫәлән, Үтәкәйҙә – 29, Моратшала − 27, Ҡасҡында – 22,

Имелдә – 21, Хәсәндә – 6, Кинйәғолда – 8, Диңгеҙбай һәм Ташбулат-Ташкүстәндә ике генә ағас йорт булған. 1917 йылға тиклем был ауылдарҙың береһендә лә медицина учреждениеһы булмаған. Белем биреү системаһы муллалар ҡарамағында булып, 1889 йылғы мәғлүмәттәрҙә (Книга. Самара. Отдел хозяйственной статистики. Том VI. 1889 г.) Имел волосында йәшәгән 3739 башҡорттоң өсөһө генә рус телендә һөйләшкән һәм яҙышҡан. Әле был башҡорт ауылдары Һамар өлкәһе Большечернигов һәм Большеглущицкий райондарына ҡарай.

Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы тәүге белемде ауылында әсәһе Гөлйәүһәрҙән, Ғата, Мирхәйҙәр исемле муллаларҙың абыстайҙарынан ала. Ике ҡыш Хәсәндә асылған мәктәптә уҡый. 1919 йылды атаһы Лотфулла, туберкулез ауырыуына холера өҫтәлеп, баҡый донъяға күсә. Һәҙиә бер йыл Диңгеҙбай ауылында балалар уҡыта. Революция һалдаты, Пугачев (Николаев) өйәҙенең мәғариф комиссары, Лев Толстой данлап йырлаған Кәрәлек буйындағы Ташбулат (Ташкүстән) ауылы егете Ғөбәй Дәүләтшин менән таныша. Уның хәстәрлегендә Һамар ҡалаһына килеп, педагогия техникумына уҡырға инә. Кейәүгә сығыу менән, ире Ғөбәй Дәүләтшинды Мәскәүгә эшкә алалар. Ул башҡалала бер йыл йәшәгәс, Өфөгә күсерелә. Бында Һәҙиә Дәүләтшина педагогия техникумында уҡыуын дауам итә. Ләкин ауырып китеү сәбәпле, дауаханаға эләгә. Һаулығы тотороҡло хәлгә килгәс, уҡыуын ташлап, ике йыл тирәһе йәтим балалар йортонда эшләп ала. 1930 йылда ире Ғөбәй Дәүләтшинды Мәскәүгә, партияның Ҡыҙыл профессура институтына белем алырға ебәрәләр. Һәҙиә лә Мәскәүҙә тик ятмай, Редактор–матбаға (типография) институтына уҡырға инә. Ике йылдан һуң, Коммунистар партияһының тоғро һалдаты Ғөбәй Дәүләтшинды Баймаҡ районы Йылайыр совхозына политбүлек начальнигы вазифаһына тәғәйенләйҙәр. Бында шуны өҫтәргә кәрәк: Йылайыр совхозына Һамар өлкәһендә Ырғыҙ, Кәрәлек, Кәмәлек йылғалары буйында йәшәгән, Башҡортостанға ҡайтырға теләге булған башҡорттарҙы күсерәләр. Имел волосы ауылдарындағы Һәҙиә һәм Ғөбәй Дәүләтшиндарҙың туған-тумасалары,

таныштары ла Йылайыр совхозында төпләнә. Һәҙиә Дәүләтшина тәүҙә токарь һөнәрен үҙләштереп, бер аҙ тракторҙар ремонтлау мастерскойында эшләп ала, унан һуң политбүлектең “Иген фабрикаһы” гәзите хеҙмәткәре булып эшләй. Ике йылдан улар яңынан Өфөгә ҡайтып, Һәҙиә тағы ла уҡырға инә. Был юлы К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына. Ләкин бында ла уға уҡыу йортон тамамларға насип булмай. СССР-ҙа сәйәси репрессия көсәйә. Ғөбәй Дәүләтшинды „халыҡ дошманы” мөһире һуғып, 1938 йылдың 15 июлендә аталар. Ә Һәҙиәне, „халыҡ дошманы”ның ғаилә ағзаһы булараҡ, биш йылға төрмәгә ултыралар.

Музейҙағы материалдарҙа Һәҙиә Дәүләтшинаның ижадҡа бик иртә тотоноуы күренә. Быға түбәндәге шиғырҙары ла дәлил:

Алһыу нурлы таңдар атҡан саҡта,
Ҡарап торҙом Мәскәү урамын.
Аҡ, ниндәй моңло шағирәнә...
Һандуғастар һайрап торғаны.
Шул ваҡытта һыҙҙы йәш йөрәкте
Әллә ниндәй үткән саф көндәр.
Бәғерем  Дәүлиемдән хаттар көтөп,
Айға ҡарап моңланған төндәр!
Эйе, үтте ул ауыр идеаллы көндәр,
Мин дә хәҙер бәғрем янында.
Әнә, ул ниндәй рәхәт, тыныс йоҡлай,
Мин уйҙарға талған сағында.
Ул да уяныр инде, оҙаҡ ятмаç,
Ирененән барып үбермен.
Бына ошо матур тойғомдо,
Иркәләтеп, һөйөп –һөйләрмен (12 июнь 1922 йыл).

* * *

Һандуғасһыҙ ҡалған алмағастай,

Һандуғасһыҙ ҡалдым тирбәлеп.

Йәш арҡыры уға ҡарап ҡалдым,

Ҡайғы елдәренә имгәнеп.

Йыраҡтарҙан күкрәп болот килә,

Әммә тағы боҙҙар яуырмы?

Яҙғы ташып аҡкан һыуҙар кеүек,

Ҡыҙҙар йәше мәңге ағырмы?

Ниңә алдың минең йөрәгемде,

Ниңә мине яңғыҙ ҡалдырҙың?

Йөрөгән эҙҙәренә ҡарай – ҡарай

Күҙ керпектәремде талдырҙым.

Ебәктәрем тамбур булып төшмәй

Һөйгәнемә тигән һөлгөгә.

Яна йөрәккәйем, бигрәк яна,

Шулай яныр микән мәңгегә?

Бына ошондай хисле лирик шиғырҙар авторы 1926 йылдың йәйендә хәҙерге Миәкә районы Йәнәби-Урсай ауылына ял итергә, ҡымыҙ эсергә килә. Ире Ғөбәйҙулла, Төхфәт Йәнәби, уның ҡатыны Хәҙисә Кәлимуллиналар менән бергә. Ҡунаҡтар ауылда илһамланып ижад итә. Хәҙер һүҙебеҙҙе “Һәҙиә Дәүләтшина тураһында иҫтәлектәр” китабына йүнәлтәйек. Әҙибәнең үгәй ҡыҙы Рәйсә Сафина-Мөхәмәтова бына нимәләр яҙа.

„Аксаково санаторийына дауаланырға китеп барышлай беҙҙә булғанда, үҙен онотолмаҫ йәшлеге менән осрашҡандай тойоп, Дим буйында беҙ йәшәгән Мәнәүезтамаҡҡа яҡын ғына икенсе бер ауылда − Йәнәбиҙә − „Һылыуҡай – пионерка” исемле беренсе хикәйәһен яҙыуын эске тулҡынланыу менән һөйләгәйне...” Билдәле булыуынса был хикәйә, күп тә әйтмәй, “Башҡортостан йәштәре” газетаһында баҫылып сыға, һәм ул әҙибәнең тәүге әҫәре һанала.

Ошо урында Рәйсә Сафина – Мөхәмәтова тураһында мәғлүмәт биреп үтеү кәрәк булыр. Ул 1929 йылды Һамар өлкәһе Пугачев өйәҙе Имеләй ауылында

донъяға килгән. Имеләй хәҙер Имел тип йөрөтөлә. Рәйсәнең әсәһе Миңлебикә – Һәҙиә Дәүләтшинаның яҡын ҡәрҙәше. Атаһы Зәйнулла Сафа улы Сафин 1896 йылды Имелейҙа тыуған. Шунда өйләнгән. Балалары бәләкәй саҡтарында уҡ үлеп торған. Ғаиләләре менән 1930 йылда Баймаҡ ҡалаһына күсәләр. Ғөбәй һәм Һәҙиә Дәүләтшиндар "Йылайыр" совхозында эшләгәндә уларға туҡталғандар. Зәйнулла Сафинды 1935 йылды Өфөгә, Башсоюзға күсерәләр.

Бер аҙҙан уны Мәскәүгә Центрсоюздың Юғары курстарына уҡырға ебәрәләр. Ике йылдан һуң Өфөгә ҡайта һәм 1942 йылға тиклем БашСоюзда эшләй. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. 1945 йылдың март айында, ҡаты йәрәхәттәре төҙәлеп бөтөр-бөтмәҫтән, Өфөгә ҡайта. Ике айҙан ҡатыны Миңлебикә ауырып үлә. Зәйнулла Һәҙиә Дәүләтшинаға өйләнә. Сентябрь баштарында уны Сулеяға Башсоюздың район-ара базаһына директор итеп тәғәйенләйҙәр. 1949 – 1951 йылдарҙа Үрге Ҡыйғыла йәшәйҙәр. Ә 1951 йылдың июленән − Бөрөлә. Һәҙиә үлгәс, 1955 йылды 33 йәшлек Гәүһәр исемле ҡатынға өйләнә. Уның менән Ишимбай ҡалаһында 11 йыл донъя көтәләр. 1966 йылда Салауат ҡалаһында яҡты донъя менән хушлаша Зәйнулла. Был ваҡытта Рәйсә, Әсғәт Мөхәмәтовтар Салауатта йәшәгән була.

Хәҙер яңынан 1954 йылдың август айына әйләнеп ҡайтайыҡ. Рәйсә Зәйнулла ҡыҙының хәтерләүҙәренсә, "Һәҙиә апайым менән атайым беҙгә килгән мәлдә көндәр бик матур, аяҙ торҙо. Ирем Әсғәт, Өфөнөң авиация институты тамамлаған инженер, партияның 1953 йылғы саҡырыуы буйынса ауыл хужалығын күтәрергә Миәкә районы Елдәр МТС-ына ебәрелгәйне. Был МТС Мәнәүезтамаҡ ауылы янында урынлашҡан. Әсғәт Һәҙиә апайҙы бик ихтирам итә ине. Улар килгәс, Дим буйында байрам ойошторорға булды. МТС -тың ат ҡараусыһы булып элекке фронтовик, ҡолағы һаңғырау, бер аяғы сатан, үҙе үк балыҡсы Ғилемйән исемле ағай эшләй ине. Иртән тороуыбыҙға ул, оло фурман егеп, беҙҙең ишек алдына килеп тә еткән. Фурман эсе йомшаҡ бесән менән тулған. Алдан йыйынғайныҡ, ултырҙыҡ та ҡуҙғалып киттек. Һәҙиә апай әйтә: „Балыҡ алманыҡ бит, картуф ҡына бешерәбеҙме? – ти. Атайым уға нимәлер

аңлатты, мин балалар тауышына һүҙҙәрен ишетмәй ҡалдым. Беҙҙең өйҙән Дим буйына тар ғына урам аша барырға кәрәк ине. Ошо тыҡрыҡтың (диалектта урам шулай атала) осонда ултырған бәләкәй генә йорттоң ҡапҡа төбөнә килеп туҡтаныҡ. Ғәлимйән ағай фурмандан төштө лә ҡысҡырып өндәште: “Балыҡтың ҡайһыһы кәрәк: суртан, ҡорбан йәки ҡарабалыҡ?” Һәҙиә апай: „Суртан кәрәкмәй, ул яуыз, беҙгә ҡарабалығы ла яраған. Йәйен дә һәйбәт”, − тине. Балыҡсы йылмайып: „Аңланым, һеҙгә йәйен, ҡарабалыҡ кәрәк!”. Ғилемйән ағай артынан Һәҙиә апай: „Һаңғырау, ә минең әйткәнде шундуҡ аңланы. Ә беҙҙең яҙыусыларҙың ҡолаҡтары һау-сәләмәт тә − ишетмәйҙәр. Күҙҙәре лә бер нәмә күрмәй. Аңдары ла томаланған − белергә лә теләмәйҙәр. Романым өсөн мин нисек һыҙланам, тип күҙ йәштәрен һөртөп алды. Дим буйында уха бешереп ашаныҡ. Оҙаҡ итеп һөйләшеп йөрөнөк. Шунда әйткәйне, тәүге хикәйәһе “Һылыуҡай – пионерка”ны ҡасан яҙыуын. Икенсе көндө Һәҙиә апай Әсғәт менән Йәнәбигә барып килделәр. Төхфәт Йәнәбиҙең әсәһе үлгәнен белделәр. Мәнәүезтамаҡта Һәҙиә апай ирле – ҡатынлы Әкрәм −Саима Зариповтар, Хажи − Сәғиҙә Бикбулатовтар, Миҙғәт − Каджан (грек ҡыҙы) Хәбибуллиндар, Ғилдерахман − Мәрвиә Фәритовтар, Башҡорт дәүләт педагогия институтында бер факультетта уҡыған Йәүһәриә Нағаева–Биктимеровалар менән аралашты. Аксаков санаторийына Әсғәт машинала алып киткәйне, барып етә алмағандар. Ермолкино тигән сыуаш ауылы янында машинаһы боҙолоп, ат менән һөйрәтеп алып ҡайтты. Һәҙиә апайҙы Мәнәүез – Мәскәүҙең (Бишбүләк районы) сельпо председателе, үҙ өйөндә ҡундырып, санаторийға оҙатып ҡуйған.” Был һүҙҙәр Рәйсә Зәйнулла ҡыҙы Сафина–Мөхәмәтова һөйләгәндәрҙән. Ошо юлдарҙың авторына сельпо председателенең исем-шәрифтәрен асыҡларға насип булды. Ул − Ленин ордены кавалеры Ғәйнекамал Сәләхетдин ҡыҙы Әһлетдинова (1917 – 1997).

Һәҙиә Дәүләтшина Аксаков санаторийынан байтаҡ кешеләргә хаттар яҙған: ире Зәйнуллаға, әсәһенә, Рәйсәләргә, дуҫтарына. Бына шуларҙың береһе.

20.IX – 54

Ҡәҙерле Зәйнуллам, түнәтәйем!

Һине бик һағынып-һағынып күп сәләм тип бик ныҡ һаулыҡ теләп ҡалам. Инәйемә асубы ныҡ һағынып күп-күп сәләм, шәп йөрөргә теләп ҡалам. Бөтә халыҡҡа айырып сәләмем. Үҙем иҫән-һау ғына әйбәт кенә ял итеп ятам. Өсөнсө көн һинән, инәйемдән һәм Ниғмәтулла ағайымдан хаттар алып бик ҡыуандым. Аҡса ебәреүе лә бер юлы килде. Хатты ҡурабым шатланып үҙе алып килде. Мин һиңә үткән хатымды бик бошонҡо яҙғайным. Аҡса ла һорағайным. Әле бик күп һалғанһың. Минең ул хатты асып өлгөрмәгәнһең. Ярар инде туҙҙырмам. Бурысың күп икән. Һыуығып китергә тура килмәй бит. Анау Шамилдар ишле торғандарҙыр. Унда бүтән хат яҙманым әле. Октәбрь башына Әкрәм үҙе ялдан ҡайтырға тейеш. Әгәр килгән булһа шунан һорай башлармын инде. Аҡсаны алғас яҙырмын тип был хатты һуңлаттым. Кис йәкшәмбе булыуы бүген өлкән сестра өйҙә юҡ икән, минең документтар унда була, шуға күрә ошо хатты яҙа торайым тинем. Көндәр йылы, хатта һыу инерлек була. Бүген үҙемдең айлыҡ (иркенләп?) өйҙә торам. Иптәштәрем сығып таралдылар. Улар булһа ауылдыҡылар барлығы “5” кеше. Кис булһа сәғәт 9-ҙан 11-гә тиклем “Кинг” тигән кәрт уйнайбыҙ. Картуф таҙа һалындымы? Мин һораған китап миндә торһон, кәрәк булһа ҡайтҡас һоратып алдырырмын тип кенә яҙҙым. Ул яҡтан да бер кемдән дә яуап хаттары юҡ әле.

Раечкалар (Рәйсәләр) ҙә яҙмай. Ярлыға яҡты йөҙ күрһәтһәң ямаулыҡ һорай тип мин уларҙан тағы ла әҙерәк аҡса һорап торормон тигәйнем. Яҙмайҙар. Әсғәткә төртөп тә алғайным, бына һинән был санатурҙы көтөп ике меңгә үҙем алдым. Ә һин ике һум да бирмәнең тип көлөп алдым. Ул ҡәҙәр әллә нишләп минең эшләр бер ҙә уңмай башлай. Шул бер кемде лә йәберләгәнем, ҡарғыш алғаным юҡ, ине тим. Тегендә алған ике мең ярым ине. Ә бына бер мең ярымы ғынаһы, шулай булғас үҙең бел. Комсомолдан төшөп ҡалған тиһең. Карточкаһын ебәрмәгәндәр ҙә. Шулай тороп ҡалған. Шунан тик йөрөй бошоноп

мин әйтәм: бик иртә мещанка булырға йыйынаһың, беренсе крепдешин күлдәк булғас уҡыу эше тороп торһонмо ти, тип ороштом.”

Хаттан аңлашылыуынса, Һәҙиә Дәүләтшина икенсе ире Зәйнулла менән аңлашып, бөтә мәсьәләләрҙе бергә хәл итеп йәшәгәндәре күренеп тора. Шулай уҡ бер-береһенә ышанyслы терәк булыуҙары ла. Ҡыҙы Рәйсәләрҙән аҡса алып торғанлығы ла, Әсғәттең һаранлығы ла һиҙелә, был хатта. Һәҙиә хатта уларҙы тәнҡитләп тә ала, мещанкаға әйләнәһең, тип. Бер һүҙ менән әйткәндә, Һәҙиә Дәүләтшина һәйбәт хужабикә, ир ҡатыны, ҡыҙҙары Рәйсә өсөн ҡайғыртыусан әсә итеп күҙ алдына баҫа.

Музейҙа Һәҙиә Дәүләтшинаның һуңғы йылдарҙа ҡулланған һауыт – һабалары, ҡайһы бер кейемдәре, фотолары, хаттары тупланған. Һуңғы йылдарҙа сыҡҡан китаптары ла, Һамар өлкәһе башҡорттары тураһында белешмәләр ҙә бар бында. Һәҙиә Дәүләтшинаның Рәйсә Зәйнулла ҡыҙы Сафина –Мөхәмәтоваға бүләк иткән матур күлдәге лә үҙ урынын алған.

Башҡорт дәүләт университеты Бөрө филиалы доценты, филология фәндәре кандидаты Гөлнур Нуриман ҡыҙы Ҡасҡынованың музейҙы яңы материалдар менән тулыландырып, яңы экспозициялар эшләү буйынса хеҙмәттәре оло баһаға лайыҡ.

Һәҙиә Дәүләтшинаның Бөрө ҡалаһындағы шундай бай ҡомартҡылар тупланған музейынан Ырғыҙ ҡыҙының ҡаһарманлығына һоҡланып, уйлана-уйлана сығаһың...

© **Янышев Ф.Ф.**, 2018

**А.З. Ярмуллина**,
*к. и. н., директор МБУКИ «Сибайский ИКМ»*

## ИСПОЛЬЗОВАНИЕ СОВРЕМЕННЫХ ТЕХНОЛОГИЙ В ДЕЯТЕЛЬНОСТИ СИБАЙСКОГО ИСТОРИКО-КРАЕВЕДЧЕСКОГО МУЗЕЯ

В условиях развития информационных технологий, внедрения инновационных проектов в жизнь культурных институций, в частности, в музейную среду, возникают существенные проблемы в плане повышения их востребованности. Насколько транслируемая им культурная информация актуальна? Не потеряет ли формат взаимодействия с аудиторией? Будет ли музей отвечать требованиям сегодняшнего дня, исходя из внедренных технологических инноваций? На эти и другие спорные вопросы ищут ответы музейные специалисты и представители IT-технологий, а также представители смежных отраслей.

Появляются приоритетные направления развития современного музея: управление музейной деятельностью согласно требованиям времени и эпохи; акцентирование внимания на потребностях современного потребителя музейных услуг, понимание изменения целевой аудитории, а также поиск возможностей привлечения иных социальных групп и общностей; поиск новых форм экспозиционной деятельности с привлечением нестандартных, творческих, креативных решений; использование современных информационных и коммуникационных технологий; создание сети межмузейного взаимодействия, а также сети межпрофессионального взаимодействия с другими организациями и предприятиями для решения общих задач на основе партнерских технологий; поиск дополнительного негосударственного финансирования за счет фондов, участие в конкурсах, грантах, предоставление нетрадиционных для музейной деятельности услуг [2, 49].

Считается, что современные музеи опережают любые другие культурные институты по количеству внедренных инноваций [1, 21]. Конечно, это касается деятельности зарубежных европейских музеев, а также ведущих музеев России, таких как Эрмитаж, Русский музей и др. Существующие же музеи в большинстве своем, не имеют таких возможностей, однако прилагают усилия для того, чтобы реагировать на запросы современного человека.

В этом направлении работает и наш Сибайский историко-краеведческий музей, созданный в 1959 г. как школьный музей. Сегодня он является важным центром культурно-просветительской работы в городе и одним из ведущих музеев Башкортостана.

С целью эффективного и грамотного использования человеческого капитала и музейных фондов в феврале 2013 г. на сессии Совета городского округа была принята «Научная концепция развития «МБУКИ «Сибайский историко-краеведческий музей городского округа г.Сибай»» на 2013-2017 гг. В ней отмечалось, что «роль музеев в малых городах, с угасающей экономикой чрезвычайна велика. Он должен быть готов к совместной активной общественной жизни. Музей, при определенных условиях, в состоянии «создать» имидж, подчеркнуть уникальность, повысить инвестиционную привлекательность, способствовать созданию новых рабочих мест, дать толчок экономическому возрождению города, а также содействовать социальной сплоченности населения». Поэтому стратегия деятельности Сибайского музея направлена на сотрудничество с такими партнерами, как Национальный музей РБ, научно-исследовательскими учреждениями республики: Институтом истории, языка и литературы УНЦ РАН, с ведущим вузом Башкирского Зауралья – Сибайским институтом (филиалом) БашГУ, научным учреждением ГАНУ «Институт стратегических исследований Республики Башкортостан», этнотур «Ирандык», «Исян-тур», средствами массовой информации, образовательными учреждениями города и районов Башкирского Зауралья. При музее функционирует краеведческое общество города, председателем которого

является доцент, к.и.н. Ф.М. Сулейманов. В настоящее время руководителем музея А.З. Ярмуллиной разрабатывается научная концепция музея и главным хранителем Р.Б. Ишбулатовой ведется подготовка научной концепции комплектования музейных фондов на 2018-2027 годы.

Некоторые направления музея касаются освоения новых технических средств, что позволяет значительно ускорить, облегчить или удешевить традиционные виды музейной деятельности. Другие направления работы связаны не столько с техническими новинками, сколько с новыми методами управления, способами организации взаимодействия между музеем и партнерами.

Так, фондовый отдел музея ведет работу по внесению записей, включающих информацию о музейных предметах в Федеральную государственную информационную систему «Государственный каталог Музейного фонда РФ». 16 марта 2017 года была произведена регистрация на сайте Госкаталог РФ, ведется работа по регистрации музея в Реестре музеев Государственного каталога. На сайте учреждения также представлена информация о наиболее интересных, уникальных музейных предметах, обобщенных в 12 разделах. Таким образом, инновационные тенденции информационного общества способствуют тому, что музеи становятся более открытыми для общества, предоставляя информацию о своих коллекциях.

В интернет-пространстве важным ресурсом для нас является наличие собственного сайта – www. sibay-museum.ru[3], активное использование потенциала социальных сетей – «ВКонтакте», «Фейсбук» и «Инстаграм» Так, на сайте зарегестрировано за 2017 год 1424 посещений. «ВКонтакте» в друзьях «Музея Горняков» - 2130 человек [ВКонтакте - https://vk.com/id206420991]. Полная информация о музее доступна на информационном портале «Музеи России» [http://www.museum.ru/M1174#news].

Зимой 2016 г. научным сотрудником Н.И. Ярмухаметовой проводилась работа по систематизации информации для бесплатного мобильного гида

«Maugry». У посетителей появилась возможность более полного ознакомления с экспонатами и экспозициями через данное мобильное приложение. «Maugry» сегодня – это единое мобильное приложение для музеев и персональный гид для индивидуальных посетителей. Он автоматически распознает экспонаты по QR-кодам и по GPS-координатам и выдает разнообразный мультимедийный контент на родном языке пользователя. Данное приложение бесплатно и для музея, и для посетителя. В мобильном гиде размещена информация о 47 точках осмотра музейных предметов, то есть любой желающий может совершить экскурсию по музею в offlain-режиме. В настоящее время там размещена информация о 300 музеях России, в том числе 5 музеев Башкортостана.

Не выходя из дома, в режиме off-lain позволяет побыть в музее виртуальный 3-Д тур, где имеется охват 17 точек музейного пространства, изготовленным специалистами ООО «Альянс» г.Уфа.

В современных условиях существования музея необходима разработка комплекса социальных технологий управления его деятельностью, которая позволяет выявить и максимально использовать потенциал музея.

В середине ноября 2017 г., в Государственном Эрмитаже на отчетно-перевыборном собрании Союза музеев России Сибайский музей был принят в члены Союза музеев России и получил Свидетельство № 020433. В отраслевое объединение Союз музеев России, учрежденное в ноябре 2001 года, входит более 400 музеев из 75 субъектов РФ. 16 -18 ноября 2017 г. в Санкт-Петербурге проходил VI международный культурный форум. В мероприятиях собрания Союза музеев России и масштабного форума, а также в работе секции «Музеи и выставочные проекты» принимала участие заведующая научным отделом, к.и.н. М.Ш. Шагеева.

Так, в середине февраля 2018 г. директору А.З. Ярмуллиной представилась возможность участия в семинаре «Cultural Skills Academy Russia», организованного Британским Советом в России и Благотворительным фондом им. В.Потанина в г.Екатеринбург Этот проект Академии культурных

навыков в России предоставил участникам уникальную возможность поработать в международной междисциплинарной команде и приобщиться к опыту лучших культурных институций Великобритании и России. Данные курсы позволили более шире рассматривать проблемы музейного сообщества. Потому как в настоящее время музеи ориентируются на внешнюю среду, понимая, что являются культурными центрами и обладают мощнейшим ресурсом в деле формирования личности, помогают людям понимать искусство, беречь культурное наследие, с уважением относиться к историческому прошлому.

Изучение новых форм и методов музейного маркетинга также помогают определить эффективные векторы в развитии учреждения. Проводимые при активном содействии Министерства культуры РБ музейные форумы и зональные семинары, курсы повышения квалификации и переподготовки способствуют решению подобных задач.

Таким образом, музеи приходят к необходимости оптимального сочетания традиционных и инновационных элементов в современной музейной культуре.

### *Литература*


1. Бублик Н.В. Образ музея будущего / European Journal of Arts, 2015. [Электронный ресурс] / Режим доступа: https://cyberleninka.ru/article/n/obraz-muzeya-buduschego. – С. 20-24.
2. Гиль А.Ю. Изменения в деятельности музеев с учетом тенденций развития современного общества // Вестник Томского государственного университета, 2012. [Электронный ресурс] / Режим доступа: https://cyberleninka.ru/article/v/izmeneniya-v-deyatelnosti-muzeev-s-uchetom-tendentsiy-razvitiya-sovremennogo-obschestva. – С.49-50.
3. Официальный сайт Сибайского ИКМ – http:// www.sibay-museum.ru.

4. Сайт информационного портала – «Музеи России» - http://www.museum.ru. http://www.museum.ru/M1174#news

© **Ярмуллина А.З.**, 2018

**Материалы**
**Всероссийской научно-практической конференции**
**(с международным участием)**

«Мажит Гафури – первый народный поэт Башкортостана.
Деятельность музеев в увековечивании имен знаменитых личностей»,
посвященной 70-летию со дня открытия Мемориального дома-музея
Мажита Гафури в Уфе.
Уфа – 2018

Разработка макета сборника:
ГБУКИ Национальный литературный музей Республики Башкортостан

Подписано в печать 19.03.2018
Бумага писчая. Формат 60x84/16
Компьютерный набор. Гарнитура Times New Roman
Усл. печ. л. - 13,95. Уч.-изд.л. – 14,3
Тираж 100 экз. Заказ № 023.

Отпечатано с оригинал-макета
в типографии «Самрау»,
г. Уфа, ул. К.Маркса 35а.
www.samrauprint.ru
Тел.: 266-48-43